# ПАРЛЫ ҺҮҘҘӘРҘЕҢ
# БАШҠОРТСА – РУССА ҺҮҘЛЕГЕ

# БАШКИРСКО – РУССКИЙ
# СЛОВАРЬ ПАРНЫХ СЛОВ

МИНИСТЕРСТВО НАУКИ И ВЫСШЕГО ОБРАЗОВАНИЯ РФ
РОССИЙСКАЯ АКАДЕМИЯ НАУК
УФИМСКИЙ ФЕДЕРАЛЬНЫЙ ИССЛЕДОВАТЕЛЬСКИЙ ЦЕНТР
ОРДЕНА ЗНАК ПОЧЕТА ИНСТИТУТ ИСТОРИИ,
ЯЗЫКА И ЛИТЕРАТУРЫ

# БАШКИРСКО-РУССКИЙ СЛОВАРЬ ПАРНЫХ СЛОВ

*Справочное электронное издание сетевого доступа*

УФА
ИИЯЛ УФИЦ РАН
2026

УДК 811.512.141’28:81’374.822
ББК 81,2(2Рос.Баш)
Б33

*Публикуется по решению заседания Ученого совета*
*Ордена Знак Почета Института истории, языка и литературы*
*Уфимского федерального исследовательского центра Российской академии наук*
*(Протокол № 4 от 5 мая 2025 г.)*

***Рецензенты:***
*Л. Х. Самситова*, доктор филологических наук (АН РБ, г. Уфа);
*З. А.Хабибуллина*, кандидат филологических наук (БГПУ им. М. Акмуллы, г. Уфа)

***Ответственные редакторы:***
*З. Я. Рахматуллина*, доктор философских наук, профессор (ИИЯЛ УФИЦ РАН)
*Г. Н. Ягафарова*, доктор филологических наук (ИИЯЛ УФИЦ РАН)

**Башкирско-русский словарь парных слов** / автор-составитель Э.Ф. Рахимова
Б33 [Электронный ресурс] / ИИЯЛ УФИЦ РАН. – Уфа : ИИЯЛ УФИЦ РАН, 2026. – 310 с. – URL: http://rihll.com/files/Knigi/2026/03/file_282-1.pdf – Загл. с титула экрана.
ISBN 978-5-91608-282-1

В данном словаре собраны парные слова башкирского языка, в том числе наиболее распространённые парные диалектизмы, устаревшие и новые слова. Толкование парных слов и фразеологических единиц даётся на башкирском языке с переводом на русский язык.

Словарь адресуется лингвистам, журналистам, работникам издательств и средств массовой информации, преподавателям и студентам, магистрантам, аспирантам. Он будет полезен специалистам, работающим и в других областях, и всем, кто интересуется башкирским языком.

УДК 811.512.141’28:81’374.822
ББК 81,2(2Рос.Баш)

**ISBN 978-5-91608-282-1**
**DOI 10.31833/282-1.2026.62**

© Рахимова Э.Ф, авт.-сост., 2026
© ИИЯЛ УФИЦ РАН, 2026

**РӘСӘЙ ФЕДЕРАЦИЯҺЫНЫҢ ФӘН ҺӘМ ЮҒАРЫ БЕЛЕМ БИРЕҮ МИНИСТРЛЫҒЫ**
**РӘСӘЙ ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫ**
**ӨФӨ ФЕДЕРАЛЬ ТИКШЕРЕНЕҮ ҮҘӘГЕ**
**ПОЧЕТ БИЛДӘҺЕ ОРДЕНЛЫ ТАРИХ, ТЕЛ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ ИНСТИТУТЫ**

# ПАРЛЫ ҺҮҘҘӘРҘЕҢ БАШҠОРТСА-РУССА ҺҮҘЛЕГЕ

*Интернет селтәре аша инеүҙең белешмә электрон баҫмаһы*

**ӨФӨ**
**РФА ӨФТҮ ТТӘИ**
**2026**

УДК 811.512.141’28:81’374.822
ББК 81,2(2Рос.Баш)
Б33

Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеү үҙәге
Почет Билдәһе орденлы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының
Ғилми советы ултырышы ҡарары буйынса баҫтырыла
*(2025 йылдың 5 майындағы 4 се протокол)*

**Рецензенттар:**
*Л. Х. Сәмситова*, филология фәндәре докторы (БР ФА, Өфө ҡ.)
*З. Ә. Хәбибуллина*, филология фәндәре кандидаты (М. Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.)

**Яуаплы редакторҙар:**
*З. Й. Рәхмәтуллина*, философия фәндәре докторы, профессор (РФА ӨФТҮ ТТӘИ)
*Г. Н. Йәғәфәрова*, филология фәндәре докторы (РФА ӨФТҮ ТТӘИ)

**Парлы һүҙҙәрҙең башҡортса-русса һүҙлеге** / автор-төҙөүсе Э.Ф. Рәхимова
Б33 [Электронный ресурс] / ИИЯЛ УФИЦ РАН. – Өфө: РФА ӨФТҮ ТТӘИ, 2026. – 310 б.–
URL: http://rihll.com/files/Knigi/2026/03/file_282-1.pdf – Баш. экран титулынан.
ISBN 978-5-91608-282-1

Был һүҙлектә башҡорт теленең парлы һүҙҙәре, шул иҫәптән киң таралған парлы диалектизмдар, иҫкергән һәм яңы һүҙҙәр тупланған. Парлы һүҙҙәрҙең һәм фразеологик берәмектәрҙең рус теленә тәржемәһе һәм башҡортса аңлатмаһы бирелгән.

Һүҙлек телсе-ғалимдарға, журналистарға, нәшриәт хеҙмәткәрҙәренә, уҡытыусыларға, студенттарға, магистранттарға һәм аспиранттарға тәғәйенләнә. Хеҙмәт башҡа өлкәлә эшләүсе белгестәр, башҡорт теле менән ҡыҙыҡһыныусы киң ҡатлам уҡыусылар өсөн дә файҙалы буласаҡ.

УДК 811.512.141’28:81’374.822
ББК 81,2(2Рос.Баш)

**ISBN 978-5-91608-282-1**
**DOI 10.31833/282-1.2026.62**

© Рәхимова Э.Ф., авт.-төҙ., 2026
© РФА ӨФТҮ ТТӘИ, 2026

# БАШ ҺҮҘ

Агглютинатив типологиялы төрки телдәре, шул иҫәптән башҡорт теле, парлы һүҙҙәргә ифрат бай. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, парлы һүҙҙәр – төрки телдәренә хас булған бик ҡыҙыҡлы һәм шул уҡ ваҡытта үҙенсәлекле күренеш. Рус һәм башҡа Европа телдәрендә улар һирәк осрай, уларҙың ҡулланылышы башлыса һөйләү телмәре менән сикләнә. Төрки телдәрендә иһә парлы һүҙҙәр мөһим морфологик категорияны тәшкил итә, уларҙы ҡулланыу бер ниндәй ҙә айырым стиль үҙенсәлегенә бәйле түгел [Дмитриев, 1962: 133].

Парлы һүҙҙәр VII – VIII быуаттарҙағы боронғо төрки ҡомартҡыларында уҡ осрай [Айҙаров, 1973: 380]. «XI быуаттың Мәхмүт Ҡашғари төҙөгән данлыҡлы төрки-ғәрәп һүҙлегендә 42 парлы һүҙбәйләнеш булыу осрағы билдәләнгән, был күренештең боронғо хронологияһына ишара», – тип яҙа Н.К. Дмитриев [Дмитриев, 1962: 136].

А.Н. Кононов билдәләүенсә, “парлы һүҙҙәр – ике (бер пар) һүҙҙең ҡушылыу юлы менән яһалған һәм, компоненттарҙың лексик мәғәнәһенә һәм формаһына ҡарап, йыйыу, дөйөмләштереү, экспрессивлыҡ йәки һүҙ мәғәнәләренең компоненттары стилистик үҙгәртеүгә дусар булғанда барлыҡҡа килгән ҡатмарлы һүҙҙәр ул” [Кононов, 1960: 135].

Махсус әҙәбиәтте өйрәнеү шуны күрһәтә: төрки телдәрендәге парлы һүҙҙәр ғалимдар тарафынан ярайһы яҡшы кимәлдә тикшерелгән. Н. Абдурахманов, М.С. Ализаде, Л.Н. Харитонов, Ф.Н. Дьячковский, Л.М. Маннапова, Р.М. Мирғәлиев, А. Нажимов, И.М. Тараканова М.Е. Алексеев, Е.А. Бардамова, Г.С. Биткеева, А.А. Бурыкин, Г.А. Дырхеева, Л.Б. Моргоева, М.У. Сулейбанова, С.М. Трофимова,

Н.М. Ондар, Ж. Ғ. Кейекбаев, К.Ғ. Ишбаев, Р.Ғ. Закирова һәм башҡа ғалимдарҙың хеҙмәттәрендә парлы һүҙҙәргә төплө анализ бирелгән.

Башҡорт тел ғилемендә парлы һүҙҙәр тәүләп Н.К. Дмитриев тарафынан өйрәнелә башлай. 1930 йылда уның «Башҡорт телендә парлы һүҙбәйләнештәр» исемле мәҡәләһе баҫылып сыға; һуңыраҡ башҡорт әҙәби теленең фонетикаһын һәм грамматикаһын системалы рәүештә тасуирлауға арналған фундаменталь хеҙмәте “Башҡорт теле грамматикаһы”нда (1948) автор парлы һүҙҙәргә анализ яһай. Ғалим был төр һүҙҙәрҙе семантик, фонетик, синтаксик нигеҙҙәр буйынса классификациялай һәм уларҙы түбәндәге типтарға бүлеп тикшерә:

1) ике компоненты ла реаль мәғәнәгә эйә булған һәм үҙ-ара синонимик мөнәсәбәттә торған парлы һүҙҙәр: *зыян-зарар, асыҡ-тишек, бәлә-ҡаза;*

2) парлы һүҙҙәрҙең составына ингән компоненттарҙың һәр ҡайһыһы үҙ аллы мәғәнәгә эйә булып та, бер үк дөйөм категорияға ҡараған һүҙҙәр (бер компоненттың икенсеһенә ҡарата мөнәсәбәте бөтөндөң өлөшкә йәки өлөштөң бөтөнгә нисбәте кеүек): *тау-таш, йөҙөк-беләҙек, һауыт-һаба;*

3) материаль мәғәнәгә эйә булған һүҙҙең (ғәҙәттә беренсеһенең) икенсе һүҙ менән рифмалашыуы ярҙамында яһалған парлы һүҙҙәр: *сөй-мөй, һирәк-мирәк, кеше-меше;*

4) ҡапма-ҡаршы мәғәнә белдергән һүҙҙәрҙән торғандары: *ағай-эне, ер-күк, алыш-биреш* [Дмитриев, 1948: 75; 2007: 61-62].

Башҡорт телендә беренсе төрҙәге (ике компоненты ла реаль мәғәнәгә эйә булған һәм үҙ-ара синонимик мөнәсәбәттә торған) парлы һүҙҙәр күберәк ҡулланыла.

Йәнә шуныһы иғтибарға лайыҡ: башҡа тикшеренеүселәргә ҡушылып, Н.К. Дмитриев та парлы

һүҙҙәрҙең яһалышына ҡағылышлы түбәндәге фекерҙәрҙе раҫлай: 1) ижеге аҙыраҡ булған берәмек ғәҙәттә алдан килеүсән: *хәл-әхүәл, мал-тыуар, тау-урман;* 2) ижектәр һаны тигеҙ булғанда, һуҙынҡы ижеккә башланған һүҙ беренсе килә: *алтын-көмөш, алыш-биреш, алай-былай*; 3) ике һүҙ ҙә тартынҡыға башланған осраҡта, беренсе урынға спирант ҡуйыла: *һирәк-мирәк, сәй-мәй...* [Дмитриев, 2007: 62].

Хәҙерге көндә башҡорт тел ғилемендә парлы һүҙҙәрҙе өйрәнеүгә ғалимдар тарафынан ҙур иғтибар бирелә, мәҫәлән, парлы һүҙҙәрҙең лексик-семантик үҙенсәлектәре, семантик тәбиғәте, төрҙәре, тематик төркөмдәре, этимологияһы тикшерелә, уларҙың төҙөлөшө, яһалышы анализлана, стилистик ҡулланылышы төрлө осор яҙыусыларының конкрет әҫәрҙәре ерлегендә өйрәнелә, парлы һүҙҙәр ярҙамында барлыҡҡа килгән фразеологик берәмектәр ҡарала.

«Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең грамматикаһы» (1981) академик баҫмаһында парлы һүҙҙәр М.Х. Әхтәмов менән Т.М. Ғарипов тарафынан тасуирлана, уларҙың компоненттары түбәндәгесә төркөмләнә:

1) составы буйынса: а) тамыр: *бәлә-ҡаза – горе, несчастье, ир-ат – мужчины;* б) яһалма: *таныш-белеш – знакомые, ҡарындаш-ырыу – родственники;* в) тамыр һәм яһалма: *йәш-елкенсәк – молодежь, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ – кумовство* һ.б.;

2) мәғәнәһе буйынса: а) конкрет: *ел-дауыл – буря, ураган; тау-урман – горы и леса* һ.б.; б) абстракт: *моң-зар – горесть, печаль, кручина; иҫ-аҡыл – сознание, разум* һ.б.;

3) сығышы буйынса: а) башҡорт һүҙҙәре: *агас-таш – деревья и камни, бөрө-ботаҡ – почки и ветви* һ.б.; б) үҙләштерелгән (башлыса ғәрәп йәки фарсы телдәренән алынған): *моң-зар – горесть, кәйеф-сафа – веселье и потеха, кәм-хур – унижения* һ.б. [Грамматика современного башкирского литературного языка, 1981: 111].

Башҡорт телендә, башҡа төрки телдәрҙәге кеүек, парлы һүҙҙәрҙең ҡулланылыу өлкәһе ифрат киң. Уларҙы матур әҙәбиәттә лә, публицистикала ла, фәнни, эпистоляр стилдәрҙә лә йыш осратырға була. Парлы һүҙҙәр әҙәби әҫәрҙәрҙә хис-тойғоларҙы, тәбиғәт һәм реаль ысынбарлыҡ күренештәрен киңерәк, тулыраҡ асып биреү маҡсатында ла, һүрәтләү-тасуирлау ысулы булараҡ та ҡулланыла.

Парлы һүҙҙәрҙе өйрәнеүҙәге ыңғай тәжрибәгә нигеҙләнеп төҙөлгән был һүҙлек ошо йүнәлештәге тикшеренеүҙәрҙең дауамы булараҡ тәҡдим ителә. Һүҙлектең төп бурысы – һөйләү телмәрендә, башҡорт телендәге популяр һәм нәфис әҙәбиәттә йыш осраған парлы һүҙҙәрҙе туплау, системаға һалыу, руссаға тәржемә итеү менән бер рәттән, уларға башҡортса ҡыҫҡаса аңлатма биреү, иллюстратив материал нигеҙендә ҡулланылыш үҙенсәлектәрен күрһәтеү. Һүҙлеккә автор тарафынан төрлө сығанаҡтарҙан йыйылған, башлыса “Башҡортса-русса һүҙлек” (1996), “Башҡорт теленең академик һүҙлеге: 10 томда” (2011-2018), “Русско-башкирский словарь” (Т.1. А-О. – 2005. Т. 2. П-Я. – 2005) китаптарынан алынған 1500 ашыу парлы һүҙ индерелде.

Һүҙлек белгестәргә генә түгел, ә киң ҡатлам уҡыусыларға, ғөмүмән, башҡорт теле менән ҡыҙыҡһыныусыларҙың барыһына ла тәғәйенләнә. Ул телевидение, радио, журналистика өлкәһендә эшләүселәргә һәм башҡорт теленә, мәҙәниәтенә битараф булмаған, шулай уҡ телмәрен байытырға теләгән һәр кемгә файҙалы булыр, тип ышанабыҙ.

## ҺҮҘЛЕКТЕҢ ТӨҘӨЛӨШӨ

1. Һүҙлектә һүҙҙәр алфавит тәртибендә урынлаштырыла.

2. Һүҙлектә исемдәрҙән килгән баш һүҙ төп килештә берлектә бирелә.

3. Һүҙлеккә башҡорт теленә рус теленән һәм рус теле аша башҡа телдәрҙән килеп ингән парлы һүҙҙәр алынманы, мәҫәлән: *генерал-майор, административ-территориаль, дом-музей* һ.б.

4. Һүҙлектә хәл ҡылымдарҙан яһалған парлы һүҙҙәр, "Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең грамматикаһы"нда күрһәтелгәнсә, йәғни "...парлы рәүештәр, ... яҡын булған һүҙҙәрҙе ҡушыу, мәғәнәһе буйынса синоним һүҙҙәрҙе, башлыса хәл ҡылымдарҙы ҡушыу юлы менән яһала: *ауа-түнә* 'пошатываясь', *ҡаса-боҫа* 'скрытно', *этә-төртә* 'кое-как', *әләгә-тәгәрәй* 'торопливо', *тартып-һуҙып* 'с натяжкой'" тигән билдәләмәгә ярашлы [Грамматика современного... 1981: 203], рәүеш булараҡ күрһәтелде.

5. Ҡушма ҡылымдарҙың орфографияһында морфологик яҡтан бер төрлө булмаған компоненттарҙы – айырым (*абынып һөрләгөү, абынып һөрөнөү, танып белеү*), ә бер үк морфологик төҙөлөшлө нигеҙҙәрҙе һыҙыҡса (дефис) аша яҙыу ҡабул ителгән (*абыныу-һөрләгөү, абынып-һөрөнөп*). Һүҙлектә лә шул принцип һаҡланды.

6. Башҡорт телендә *-маҙар* һәм *-фәлән* компоненттары йыш осрай, улар бөтә исемдәрҙән дә тиерлек парлы һүҙ яһай ала. Шуға күрә һүҙлектә был төр парлы исемдәргә бер нисә генә миҫал килтерелде.

7. Һүҙлеккә ҡабатлау һүҙҙәре индерелмәне.

8. Баш һүҙ ҡыҙыл юлдан һүҙлек статьяһының башында ҡалын шрифт һәм ҙур хәрефтәр менән яҙыла.

9. Йыйылма мәғәнәле исемдәр *йыйн.* тамғаһы менән күрһәтелә, мәҫәлән: АҘЫҠ-ТҮЛЕК *йыйн.*

10. Парлы һүҙҙәрҙе тәржемә итеү тасуири юл менән башҡарыла йәки һүҙмә-һүҙ тәржемә ителә, башҡорт телендә парлы һүҙҙәргә миҫалдар килтерелә.

11. Омонимдар, йәғни әйтелеше һәм яҙылышы буйынса бер төрлө, әммә мәғәнәһе буйынса төрлө булған һүҙҙәр, рим цифрҙары ярҙамында билдәләнеп һәм ҡалын шрифт менән күрһәтелеп, төрлө һүҙлек статьяларында бирелә, мәҫәлән:

**АРА-ТИРӘ I** *р.*

1) 'изредка, иногда, время от времени'. Ваҡыт-ваҡыты менән, һирәкләп. *Ара-тирә иҫкә төшөрөү. Апайым ара-тирә бабайымдың хәлен белеп йөрөнө.* ■ *Ара-тирә шул мәңге йәшеллек араһынан текә ҡая таштар тырпайып күренә.* И. Абдуллин.

2) 'кое-где, там и сям, местами'. Унда-һанда, һирәк. *Ара-тирә кешеләр йөрөй.* ■ *Ара-тирә эттәр өрә, тәүге әтәстәр һөрән һала.* Н. Алсынбаев.

**АРА-ТИРӘ II** *и. йыйн. һөйл.* 'друзья, приятели, соседи'. Ҡатнашып, аралашып йөрөгән туғандар; яҡын кешеләр, күршеләр. *Ара-тирәне сәйгә саҡырып алыу.*

12. Художестволы әҫәрҙәрҙән миҫалдар ■ билдәһенән һуң бирелә.

13. Мәҡәл, әйтемдәр ● символы менән билдәләнә.

14. Һүҙҙең бөтә мәғәнәләренән һуң ▲ билдәһе артында фразеологизмдар килтерелә.

15. Һүҙҙең күсмә мәғәнәһен билдәләү өсөн аңлатма алдынан *күсм.* тамғаһы ҡуйыла, мәҫәлән:

**ВАТА-ЕМЕРӘ** *р.*

… *күсм.* Телде насар белеү сәбәпле һүҙҙәрҙе боҙоп һөйләү. ■ *Ҡыҙ вата-емерә булһа ла үҙ телендә бер аҙ һупалай ине.* Д. Исламов.

# ПРЕДИСЛОВИЕ

Парные слова – широко распространенное в тюркских языках явление. «В русском и других европейских языках названная категория слов носит фрагментарный характер, и употребление её ограничивается чисто разговорной речью. В тюркских языках парные словосочетания являются вполне жизненной морфологической категорией и употребление их не ограничено никакими рамками стиля» [Дмитриев, 1962: 133]. Сами парные слова встречаются уже в древнетюркских памятниках VII – VIII вв. [Айдаров, 1973: 380]. Н.К. Дмитриев пишет, что «в известном турецко-арабском словаре XI в., составленном Махмудом Кашгарским, отмечено 42 случая парных словосочетаний, что свидетельствует о древней хронологии этого явления» [Дмитриев, 1962: 136].

Парные слова – это сложные слова, которые «образуются путем сложения основ двух (пары) слов и в зависимости от лексического значения и формы компонентов приобретают семантику собирательности, обобщения, экспрессивности или стилистической модификации наличных в компонентах лексических значений» [Кононов, 1960: 135]. Парные слова в тюркских языках изучены достаточно (см., например, труды Н. Абдурахманова, М.С. Ализаде, Л.Н. Харитонова, Ф.Н. Дьячковского, Л.М. Маннаповой, Р.М. Миргалеева, А. Нажимова, И.М. Таракановой, М.Е. Алексеева, Е.А. Бардамовой, Г.С. Биткеевой, А.А. Бурыкина, Г.А. Дырхеевой, Л.Б. Моргоевой, М.У. Сулейбановой, С.М. Трофимовой, Р.Г. Закировой и др.).

В башкирском языке парные слова впервые были описаны Н.К. Дмитриевым. В 1930 году вышла его статья

«Парные словосочетания в башкирском языке»[1], позже им была издана «Грамматика башкирского языка»[2], в которой автор дает описание парных слов. По его мнению, данные единицы можно классифицировать на основе их семантических, фонетических, синтаксических признаков, выделив следующие типы парных слов:

1) парные слова, имеющие компоненты с синонимическими отношениями между собой: *дуҫ-иш* 'друг-приятель' (*дуҫ* – друг, *иш* – товарищ, советник), *асыҡ-тишек* 'разодранный, весь в дырах' (*асыҡ* – открытый, *тишек* – дыра), *ҡуй-һарыҡ* 'овцы' (*ҡуй* – овца, баран, *һарыҡ* – баран, овца), *сыуал-усаҡ* 'печки всякого рода' (*сыуал* – башкирская печь всякого рода, *усаҡ* – очаг), *зыян-зарар* 'вред, ущерб, убыток' (*зыян* – вред, *зарар* – ущерб);

2) парные слова, компоненты которых различны по индивидуальному значению, но принадлежат к одной родовой категории: *тау-таш* 'камни и горы, гористо-каменистая местность' (*тау* – гора, *таш* – камень), *һау-сәләмәт* 'жив-здоров' (*һау* – живой, *сәләмәт* – здоровый), *ҡатын-ҡыҙ* 'женщины и девицы, женская часть населения' (*ҡатын* – женщина, *ҡыҙ* – девица), *һауыт-һаба* 'всякая посуда' (*һауыт* – посуда, *һаба* – сосуд для кумыса), *йөҙөк-беләҙек* 'кольца и прочие украшения' (*йөҙөк* – кольцо, *беләҙек* – браслет);

3) парные слова, в которых второй компонент представлен своеобразным фонетическим отзвуком первого, не обладающим никаким лексическим значением: *ыласын-һыласын* 'соколы и тому подобное'; в русском языке это звучало бы как *сокол-мокол* (*ыласын* – сокол + *һыласын*), *һирәк-*

---

[1] Дмитриев Н.К. О парных словосочетаниях в башкирском языке // Известия АН СССР. Отд-ние гуманит. наук. — Ленинград: Б. и., 1930. № 7.

[2] Дмитриев Н.К. Грамматика башкирского языка. М.-Л., 1948. – 276 с.

*мирәк* 'редкий' (*һирәк* – редкий + *мирәк*), *һарыҡ-марыҡ* 'овцы вообще, разные овцы' (*һарыҡ* – овца, баран + *марыҡ*), *ҡаҙ-маҙ* 'гуси' (гуси – гусь + *маҙ*);

4) парные слова, компоненты которых находятся в антонимическом отношении: *ағай-эне* 'братья' (*ағай* – старший брат, *эне* – младший брат), *аяҡ-ҡул* 'конечности' (*аяҡ* – нога, *ҡул* – рука), *алай-былай* 'так и этак' (*алай* – так, *былай* – этак), *алтын-көмөш* 'драгоценности' (*алтын* – золото, *көмөш* – серебро), *инәй-атай* 'родители' (*атай* – отец, *инәй* – мать), *ер-күк* 'небо и земля, весь мир' (*ер* – земля, *күк* – небо), *килеү-китеү* 'приход и уход' (*килеү* – приход, *китеү* – уход), *сәй-шәкәр* 'чай и сахар' (*сәй* – чай, *шәкәр* – сахар), *тау-урман* 'леса и горы' (*тау* – гора, *урман* – лес) [Дмитриев, 1948: 75; 2007: 61-62].

В башкирском языке в основном распространены парные слова первого типа, где парные слова имеют компоненты с синонимическими отношениями между собой.

Также Н.К. Дмитриев рассматривал парные слова по порядку расположения их компонентов, выделив 3 типа:

1. Слово с меньшим числом предшествует слову с большим числом слогов, например: *хәл-әхүәл* 'всякого рода дела' *(хәл* – дело, *әхүәл* – дела*)*, *йөҙөк-беләҙек* 'кольца и прочие украшения' *(йөҙөк* – кольцо, *беләҙек* – браслет).

2. При равном количестве слогов слово с начальным гласным ставится на первом месте: *алтын-көмөш* 'драгоценности' (*алтын* – золото, *көмөш* – серебро), *алыш-биреш* 'торговля' (*алыш* – взятие, *биреш* – отдача), *аяҡ-тояҡ* 'подпорки' *(аяҡ* – нога, *тояҡ* – копыто).

3. Если оба слова начинаются на согласный, на первом месте ставится такое, которое начинается на спирант или звонкий взрывной (в башкирском языке звуком-спирантом ***һ*** и звонкими смычными согласными ***б, д, г, ғ***): *бала-саға* 'детвора' *(бала* – ребенок + *саға)*, *һирәк-мирәк* 'редкий' *(һирәк* – редкий +

*мирәк), сәй-мәй* 'чай и пр.' *(сәй* – чай + *мәй)* и т. д. [Дмитриев, 2007: 62].

Как отмечают М.Х. Ахтямов и Т.М. Гарипов, компоненты парных слов, состоящих из двух самостоятельных основ, могут быть:

1) по составу: а) корневыми: *бәлә-ҡаза* – горе, несчастье, *ир-ат* – мужчины; б) производными: *таныш-белеш* – знакомые, *ҡарындаш-ырыу* – родственники; в) корневыми и производными: *йәш-елкенсәк* – молодежь, *ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ* – кумовство;

2) по смысловому значению: а) конкретными: *ел-дауыл* – буря, ураган; *тау-урман* – горы и леса и т. п.; б) абстрактными: *моң-зар* – горесть, печаль, кручина; *иҫ-аҡыл* – сознание, разум;

3) по происхождению: а) исконно башкирскими: *ағас-таш* – деревья и камни, *бөрө-ботаҡ* – почки и ветви и др.; б) заимствованными (преимущественно из арабского или персидского языков): *моң-зар* – горесть, *кәйеф-сафа* – веселье и потеха, *кәм-хур* – унижения и т. д. [Грамматика современного башкирского литературного языка, 1981: 111].

В силу многообразия семантики, форм образования и сочетаемости частей парные слова значительно расширяют коммуникативные и выразительные возможности башкирского языка, будучи одним из источников обогащения его лексического состава. Парные слова употребляются для выражения множественности, собирательности обозначаемых предметов.

Парные слова характеризуются ярко выраженной эмоционально-экспрессивной окраской, так как они вносят в высказывание различные оттенки чувств, эмоций, экспрессию, выделяя особо значительные для говорящего предметы, актуализируя их в процессе коммуникации.

Парные слова широко используются во всех жанрах художественной литературы, в языке периодической печати, устной речи, выполняя функции номинации, изобразительности и экспрессии, что говорит о принадлежности их к активной части лексики современного башкирского языка.

Предлагаемое вниманию читателей издание содержит в себе парные слова башкирского языка. Основная задача настоящего словаря – систематизировать парные слова в башкирском языке, часто встречающиеся в популярной и художественной литературе, разговорной речи, дать им краткое пояснение и перевести их на русский язык.

Словарь адресован не только филологам, но и широкому кругу читателей. Он будет полезен для сотрудников сферы телевидения, радио, журналистики, работающим в других областях, всем, кто интересуется башкирским языком и хочет обогатить свою речь.

## СТРУКТУРА СЛОВАРНЫХ СТАТЕЙ

1. Заглавные слова, открывающие словарную статью, располагаются в алфавитном порядке.

2. Имена существительные даются в форме именительного падежа единственного числа.

3. В настоящий словарь не вошли парные слова, заимствованные из русского и из других европейских языков типа *генерал-майор, административ-территориаль, дом-музей* и т.п.

4. Парные слова, образованные от деепричастий, в соответствии с правилом из «Грамматики современного башкирского литературного языка", согласно которому "…парные наречия ... образуются путем сложения близких, синонимичных по значению слов, главным образом деепричастий: *ауа-түнә* 'пошатываясь', *ҡаса-боҫа* 'скрытно', *этә-төртә* 'кое-как', *әләгә-тәгәрәй* 'торопливо', *тартып-һуҙып* 'с натяжкой'…" [Грамматика современного... 1981: 203], в словаре обозначены как наречия.

5. В орфографии сложных глаголов принято различать отдельное написание компонентов при их морфологической разнооформленности (*абынып һөрлөгөү, абынып һөрөнөү, танып белеү*) и написание через дефис при одинаковом морфологическом строении составляющих основ (*абыныу-һөрлөгөү, абынып-һөрөнөп*). В словаре соблюдается данный принцип подачи подобных слов.

6. К парным именам существительным с основами -*маҙар* и -*фәлән* в значении 'что-либо подобное тому, что названо первым компонентом' были приведены только несколько примеров, так как теоретически они могут быть образованы от всех имен существительных.

7. В словарь не включены слова-повторы.

8. Заглавное слово дается в начале словарной статьи полужирным прописным шрифтом.

9. Существительные с собирательным значением снабжаются пометой *йыйн. (собир.),* например: АҘЫҠ-ТҮЛЕК *йыйн.* (*собир.)* 'продукты'.

10. Перевод парных слов осуществляется, как правило, подбором русских эквивалентов, в случае их отсутствия – описательным путем или дословно.

11. Омонимы, т.е. слова, одинаковые по произношению и написанию, но разные по смыслу, указываются римскими цифрами полужирным шрифтом и разрабатываются в разных словарных статьях:

**АРА-ТИРӘ I** *р.*

1) 'изредка, иногда, время от времени'. Ваҡыт-ваҡыты менән, һирәкләп. *Ара-тирә иҫкә төшөрөү. Апайым ара-тирә бабайымдың хәлен белеп йөрөнө.* ■ *Ара-тирә шул мәңге йәшеллек араһынан текә ҡая таштар тырпайып күренә.* И. Абдуллин.

2) 'кое-где, там и сям, местами'. Унда-һанда, һирәк. *Ара-тирә кешеләр йөрөй.* ■ *Ара-тирә эттәр өрә, тәүге әтәстәр һөрән һала.* Н. Алсынбаев

**АРА-ТИРӘ II** *и. йыйн. һөйл.* 'друзья, приятели, соседи'. Ҡатнашып, аралашып йөрөгән туғандар; яҡын кешеләр, күршеләр. *Ара-тирәне сәйгә саҡырып алыу.*

12. Примеры из художественных произведений даются после знака ■.

13. Все пословицы, поговорки отмечаются символом ●.

14. После всех значений слова за знаком ▲ приводятся фразеологизмы.

## ШАРТЛЫ ҠЫҪҠАРТМАЛАР

а. — алмаш — местоимение
и. – исем – имя существительное
иҫк. – иҫкергән – устаревшее слово, выражение
йыйн. – йыйнау – собирательное
күсм. – күсмә мәғәнәлә – в переносном значении
ҡ. – ҡылым – глагол
ҡар. – ҡара (икенсе бер һүҙгә тоҫҡағанда) – смотри (при отсылке к другому слову)
оҡш. – оҡшатыу һүҙе – подражательное слово
р. – рәүеш – наречие
с. – сифат – имя прилагательное
тар. – тарихи һүҙ – историзм
һөйл. – һөйләү телендәге һүҙ – разговорное слово
этн. – этнография

# ҠУЛЛАНЫЛҒАН ӘҘӘБИӘТ
# ИСПОЛЬЗОВАННАЯ ЛИТЕРАТУРА


1. Айдаров Г. Язык орхонских памятников древнетюркской письменности VIII века. – Алма-Ата: Наука, 1971. – 380 с.

2. Ахтямов, М.Х. Словарь антонимов башкирского языка / М.Х. Ахтямов. – Уфа: Башк. кн. изд-во, 1987. – 254 с.

3. Башҡорт теленең академик һүҙлеге: 10 томда. Т. I: (А хәрефе) / Ф.Ғ. Хисамитдинова редакцияһында. – Өфө: Китап, 2011. – 432 б.

4. Башҡорт теленең академик һүҙлеге: 10 томда. Т. II: (Б хәрефе) / Ф.Ғ. Хисамитдинова редакцияһында. – Өфө: Китап, 2011. – 432 б.

5. Башҡорт теленең академик һүҙлеге: 10 томда. Т. III: (В –И хәрефтәре) / Ф.Ғ. Хисамитдинова редакцияһында. – Өфө: Китап, 2011. – 432 б.

6. Башҡорт теленең академик һүҙлеге: 10 томда. Т. IV: (Й – К хәрефтәре) / Ф.Ғ. Хисамитдинова редакцияһында. – Өфө: Китап, 2011. – 432 б.

7. Башҡорт теленең академик һүҙлеге: 10 томда. Т. V: (Ҡ хәрефе) / Ф.Ғ. Хисамитдинова редакцияһында. – Өфө: Китап, 2011. – 432 б.

8. Башҡорт теленең академик һүҙлеге: 10 томда. Т. VI: (Л – Ө хәрефтәре) / Ф.Ғ. Хисамитдинова редакцияһында. – Өфө: Китап, 2011. – 432 б.

9. Башҡорт теленең академик һүҙлеге: 10 томда. Т. VII: (П – С хәрефтәре) / Ф.Ғ. Хисамитдинова редакцияһында. – Өфө: Китап, 2011. – 432 б.

10. Башҡорт теленең академик һүҙлеге: 10 томда. Т. VIII: (Т хәрефе) / Ф.Ғ. Хисамитдинова редакцияһында. – Өфө: Китап, 2011. – 432 б.

11. Башҡорт теленең академик һүҙлеге: 10 томда. Т. IX: (У – Щ хәрефтәре) / Ф.Ғ. Хисамитдинова редакцияһында. – Өфө: Китап, 2011. – 432 б.

12. Башҡорт теленең академик һүҙлеге: 10 томда. Т. X: (Ы – Я хәрефтәре) / Ф.Ғ. Хисамитдинова редакцияһында. – Өфө: Китап, 2011. – 432 б.

13. Башҡорт теленең диалекттары һүҙлеге. / М.И. Дилмөхәмәтов һ.б. – Өфө: Китап, 2002. – 430 б.

14. Башҡорт теленең һүҙлеге. 2 томда / Ә.Ғ. Бейешев һ.б. I том (А-М). – М.: Русский язык, 1993. – 860 б.

15. Башҡорт теленең һүҙлеге. 2 томда / Ә.Ғ. Бейешев һ.б. II том (Н-Я). – М.: Русский язык, 1993. – 814 б.

16. Башҡортса-русса һүҙлек / З.Ғ. Ураҡсин һ.б. – М.: Дигора, Рус. яз., 1996. – 884 б.

17. Башҡортса-русса һүҙлек / Ҡ.З. Әхмәров һ.б. – М.: ГИС, 1958. – 804 б.

18. Вопросы башкирской филологии: сборник научных статей / отв.ред., составитель Г.Н. Ягафарова. – Уфа: ИИЯЛ УФИЦ РАН, 2024. – 148 с.

19. Гарипов Т.М. Башкирское именное словообразование. – Уфа, 1959. – 222 с.

20. Грамматика современного башкирского литературного языка. – М.: Наука, 1981. – 495 с.

21. Дмитриев Н.К. Строй тюркских языков. – М.: Восточная литература, 1962. – 607 с.

22. Дмитриев Н.К. Грамматика башкирского языка. – М.: Наука, Уфа: ГУП РБ “Уфимский полиграфкомбинат”, 2007. – 232 с.

23. Дмитриев Н.К. Грамматика башкирского языка. – М.-Л.: Изд-во АН СССР, 1948. – 275 с.

24. Закирова Р.Г. Структура и функции слов-повторов в башкирском языке. – Уфа: Гилем, 2004. – 102 с.

25. Ишбаев К.Г. Башкирский язык: Морфемика. Словообразование. – Уфа: Гилем, 2000. – 247 с.

26. Ишбаев К.Ғ., Ишкилдина З.К. Башҡорт теленең һүҙьяһалыш һүҙлеге. — Өфө: Ғилем, 2005. — 552 бит.

27. Кононов А.Н. Грамматика современного узбекского литературного языка. – М.; Л., 1960. – 446 с.

28. Ондар Н.М. Парные слова в тувинском языке: Дисс. … к. филол. н. – Кызыл, 2004.

29. Русско-башкирский словарь в 2-х т. / З.Г. Ураксин и др. Т.I (А-О). – Уфа: Башкирская энциклопедия, 2005. – 807 с.

30. Русско-башкирский словарь в 2-х т. / З.Г. Ураксин и др. Т.II. (П-Я). – Уфа: Башкирская энциклопедия, 2005. – 680 с.

31. Самситова Л.Х. Реалии башкирской культуры. Словарь безэквивалентной лексики башкирского языка. 2-е изд. – Уфа: Китап, 2006. – 216 с.

32. Сәмситова Л.Х., Ижбаева Г.Р. һ.б. Башҡорт фольклоры концептосфераһы. Лингвокультурологик һүҙлек. – Өфө: Китап, 2013. – 492 б.

33. Ураҡсин З.Ғ. Башҡорт теленең фразеологик һүҙлеге. – Өфө: Китап, 2006. – 344 б.

34. Хисамитдинова Ф.Г. Словарь башкирской мифологии. – Уфа: ИИЯЛ УНЦ РАН, 2011. – 164 с.

**БАШҠОРТ АЛФАВИТЫ**
**БАШКИРСКИЙ АЛФАВИТ**

| | | |
|---|---|---|
| **Аа** | **Ҡҡ** | **Фф** |
| **Бб** | **Лл** | **Хх** |
| **Вв** | **Мм** | **Һһ** |
| **Гг** | **Нн** | **Цц** |
| **Ғғ** | **ң** | **Чч** |
| **Дд** | **Оо** | **Шш** |
| **Ҙҙ** | **Өө** | **Щщ** |
| **Ее** | **Пп** | **ъ** (ҡалын айырыу билдәһе) |
| **Ёё** | **Рр** | **Ыы** |
| **Жж** | **Сс** | **ь** (нәҙек айырыу билдәһе) |
| **Зз** | **ҫ** | **Ээ** |
| **Ии** | **Тт** | **Әә** |
| **Йй** | **Уу** | **Юю** |
| **Кк** | **Үү** | **Яя** |

## А

**АБАЙ-ТОБАЙ** *и.* ʻсуть, сущностьʼ. Асылы. *Абай-тобайын аңламай саба.*

▲ Абай-тобайын белмәйенсә ʻне разобравшись в сутиʼ. *Ошо Земфир ҡарт абай-тобайын белмәйенсә эшкә тотона ла, эше килеп сыҡмай.*

**АБЫНА-ҺӨРЛӨГӘ** *р.* ʻспотыкаясьʼ. Һөрлөгөп, йығыла яҙып; эләгә-төртөлә. *Абына-һөрлөгә йүгереү. Әнисә абына-һөрлөгә күршеләренә йүгерҙе.* ■ *Тигеҙ ерҙә аяғы тайышып, абына-һөрлөгә бара-бара ла Фазыл, башын сайҡап ҡуя.* Ә. Хәкимов. *Ҡыҙ бала әлһерәгән быуындарын яҙылдырып торҙо, абына-һөрлөгә оло мейескә етте.* Р. Камалов.

**АБЫНА-ҺӨРӨНӘ** *р. ҡар.* **абына-һөрлөгә.** *Абына-һөрөнә был яҡҡа ыңғайланы.* ■ *Ҡото осҡан Мөхәммәт ағай, балтаһын ташлап, абына-һөрөнә күтәрмә эргәһенә килде.* Р. Ғабдрахманов. *Тамам хәлдән яҙҙыҡ тигәндә, абына-һөрөнә урман ситенә килеп еттеләр....* Ә. Бикчәнтәев.

**АБЫНЫП-ҺӨРӨНӨП** *р.* ʻспотыкаясьʼ. Атлағанда ҡолай яҙып, эләгеп төртөлөү. ■ *Абынып-һөрөнөп, коридор буйлап ҡолап, тикҡә генә йөрөмәгәнһең икән.* Н. Ҡәрип. *Оҙатып ҡуйғанда был юҡ-юҡта тигеҙ ерҙә абынып-һөрөнөп китә торғайны.* Д. Исламов.

**АҒАЙ-АПАЙ** *и. йыйн.* ʻмужчины и женщины старше говорящего; братья и сестрыʼ. Үҙеңдән оло ирҙәр һәм ҡатындар; ағайҙар һәм апайҙар. ■ *Тағы ла шуны иҫегеҙҙә тотоғоҙ: килгән ағай-апайҙар менән әллә ни һөйләшеп бармағыҙ.* А. Баймөхәмәтов. *Нисектер ул йылдарҙа тау шыуырға бала-саға*

*ғына түгел, ологайып барған, ҡырҡ-илле йәштәрҙәге ағай-апайҙар ихласланып китеп, ошо битләүгә килә ине.* Р. Әхмәтов.

**АҒАЙ-ЕҢГӘ** *и. йыйн.* ‘брат и невестка; братья и невестки старше говорящего, но моложе отца и матери’. Үҙеңдән оло, ата-инәңдән кесе булған ир-ат менән ҡатын-ҡыҙ. ■ *Киленде оҙатырға ағай-еңгәләр килә. Атай-әсәй вафат булғас, йорт ағай-еңгә ҡулында ҡалды.* Т. Даянова.

**АҒАЙ-ЭНЕ** *и. йыйн.*

1) ‘родственники, родня *(мужчины)*’. Бер атаның уландары *(бер ата-бабанан таралған ир туғандар),* туған-ырыу. ● *Ағай-эне талаша, атҡа менһә, яраша.* Әйтем. ■ *Айбулаттың бөгөнгө бөтә эшкә булған һүлпән ҡарашы Рәхимәнең күңеленә бер ҙә оҡшаманы. Ул башҡа ялсыларға ҡарағанда яҡынымраҡ ағай-эне тейеш был кешенең дә шул донъя, малға атылып тырышып торорҙай кеше булмауына үкенеп көрһөндө.* Һ. Дәүләтшина.

2) ‘друзья, товарищи *(обращение к мужчинам)*’. Йыйылған халыҡ, йәмәғәт, дуҫтар, иптәштәр *(ирҙәргә өндәшкәндә әйтелә). Ағай-эне, зинһар өсөн тауышты бөтөрөгөҙ әле, – тине председатель.* ■ *Улай эшемде маҡтайҙар, – тип яуапланы ул, үҙе әллә ни дәртләнмәйенсә, – һүрәтемде хөрмәтле аға-эне таҡтаһына йәбештереп ҡуйҙылар.* Д. Исламов. *Әгәр ҙә мәгәр беҙ ағай-эне булып аралашып китһәк, эште гөрләтәбеҙ, бына бит ул эш ҡайҙа бара!.* С. Агиш.

**АҒАЙ-ЭНЕЛЕ** *с.* ‘имеющий родственников’. Туған-ырыуы күп, нәҫел-нәсәпле. *Ағай-энеле кеше. Ағай-энеле кешеләргә был донъяла йәшәүе рәхәт.* ■ *Ағай-энеле бер туғандар Ҡоросйән, Булаттимер, Сынтимер Шаһибәрәковтар башлап бара.* Й. Солтанов.

**АҒАЙ-ЭНЕЛЕК** *с.*

1) ‘родственные отношения, родство’. Туғанлыҡ мөнәсәбәте, ҡәрҙәшлек.

2) *перен.* ‘семейственность, кумовство’. Әшнәлек, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ. *Ағай-энелек тойғоһо. Ағай-энелек мөнәсәбәттәре.*

**АҒАЙ-ЭНЕЛӘРСӘ** *р.* ‘по-родственному, по-братски, по-свойски, как родные’. Ағай-энеләргә, туғандарға хас. *Миңә ҡарата мөнәсәбәте ағай-энеләрсә булды.*

**АҒАЛЫ-ҠОТОҠЛО** *р. диал. ҡар.* **ағалы-энеле**. ■ *Ағалы-ҡотоҡло барып ҡайттылар ҡалаға.* Экспедиция материалдарынан.

**АҒАЛЫ-ҠУСТЫЛЫ** *р. ҡар.* **ағалы-энеле**. ■ *Ағалы-ҡустылы икәүләп инде остолар тигәндә генә, Роман-һеләүһен Етембайҙы этеп ебәрҙе, шуның менән үҙенең осоуын тотҡарланы һәм ни аралалыр йөҙ түбән боролоп ергә һылашып ятты.* Б.*Бер уйлаһаң, тормош ҡыҙыҡ та инде: Вәлиттең атаһы Алсынбай инәйемдәр яғынан миңә бабай булғас, беҙ ағалы-ҡустылы килеп сығабыҙ.* М. Ямалетдинов.

**АҒАЛЫ-ҺЕҢЛЕЛЕ** *р.* ‘старший брат с младшей сестрой’. Ағаһы менән һеңлеһе. *Ағалы-һеңлеле киттеләр. Ағалы-һеңлеле Илшат менән Гөлсөм бик татыу үҫтеләр.* ■ *Малайҙарға тартымыраҡ шаян холоҡло, бер урында ултырып тынғы тапмаған, асыҡ күңелле ҡыҙыҡай менән ағалы-һеңлеле шикелле дуҫлашып өлгөргәйне ул.* Ш. Янбаев. *Беҙ бит уның менән, ағалы-һеңлеле һымаҡ, бергә уйнап үҫтек.* Х. Тапаҡов.

**АҒАЛЫ-ЭНЕЛЕ** *р.* ‘старший брат с младшим братом’. Ағаһы менән ҡустыһы. *Ағалы-энеле бергә уҡыйҙар.*

**АҒАС-ҠЫУАҠ** *и. йыйн.* ‘всякие деревья’. Төрлө ағас. ■ *Яулыҡ алыштырып ябынырлыҡ та ағас-ҡыуаҡ юҡ.* Д. Бүләков.

**АҒАС-МАҒАС** *и. йыйн.* ‘всякие деревья’. Төрлө ваҡ-төйәк ағас. *Анау ағас-мағастарҙы быйыл киҫеп ташларға кәрәк.* ■ *Сыбыҡ-сабыҡтың, ағас-мағастың иҫәбе-һаны ла юҡ бында.* Ғ. Лоҡманов.

**АҒАС-ТАШ** *и. йыйн.* ‘дерево и камень, разный материал для строительства, строительные материалы’. Өй һ.б. нәмә төҙөү өсөн файҙаланылған һәр төрлө материал. ■ *Революцияға тиклем бөтә ауыл ағас-таш менән кәсеп итеп, йәйен тәгәрмәс туғыны, ҡышын сана табаны бөгөп ғүмер иткән.* Ш. Янбаев.

**АҒАС-ҺАҒАС** *и. диал.* ҡар. **ағас-мағас.**

**АҒАС-ҺӘЛЕП** *и. диал. ҡар.* **ағас-мағас.**

**АҘАҒЫ-БАШЫ** *и.* ‘начало и конец; все, суть’. Аҙағы-башы шул (суть такова). Бар булғаны, бөтәһе; асылы. *Аҙағы-башы шул. Баҫыуҙың аҙағы-башы күренмәй.*

**АҘАР-БИҘӘР БУЛЫУ** *ҡ. диал.* ‘испортить взаимоотношения’. Үҙ-ара мөнәсәбәтте боҙоу. *Аҙар-биҙәр булып бөттөләр.*

**АҘАРЫНА-БИҘӘРЕНӘ** *р. ҡар.* **аҙарынып-биҙәренеп**.

**АҘАРЫНЫП-БИҘӘРЕНЕП** *р. диал.*

1) ‘умоляя’. Бик ныҡ үтенеп; ялбарып, ялынып. *Ғүмәр аҙарынып-биҙәренеп аҡса һорағас, йәлләп бирҙем.*

2) ‘побледнев *(говорить, разговаривать)*’. Ағарып-буҙарып, төҫө ҡасып *(һөйләү)*. ■ *[Ғариф] сәй эскәндә атының ауырыуы хаҡында аҙарынып-биҙәренеп һөйләп ултырҙы.* Н. Мусин.

**АҘБАР-ҠУРА** *и. йыйн.* ‘скотный двор’. Мал торлаҡтары. ■ *Арыраҡ – аҙбар-ҡура.* Ғ. Хөсәйенов.

**АҘ-МАҘ** *р.* ‘немного; чуть-чуть’. Аҙ ғына, саҡ ҡына; бер ни тиклем, бер аҙ, әҙ-мәҙ. *Аҙ-маҙ эш.* ■ *Улар, шәм һүнгәс тә бик оҙаҡ һөйләшкәндән һуң, өсәүләп бер ҡарарға килделәр: ҡулдағы аҙ-маҙ аҡса туҙмаҫ борон, Гөлйөҙөмдө һоратып, тиҙерәк яусы ебәрергә булдылар.* Һ. Дәүләтшина. *Тик былай ҙа бик үк оҫта булмаған ҡойроҡсо хәҙер аҙ-маҙ ғына белеүен дә онотто.* З. Биишева. *Зиһенле малай күренә, аҙ-маҙ эшләшер.* Р. Байымов.

**АҘМЫ-КҮПМЕ** *р.* ‘мало-помалу, сколько-то, немного; некоторое количество’. Бер ни тиклем, бер аҙ. *Аҙмы-күпме ғүмер.* ■ *– Һиңә донъяны ҡараштырып, аҙмы-күпме ҡалырға тура килер.* Ф. Аҡбулатова. *Ләкин, һәр хәлдә, бер йәһәттән аҙмы-күпме оҡшаш булмайынса һис тә тура килмәй ул.* З. Ураҡсин. *Йәшенә лә, ҡартына ла аҙмы-күпме иғтибар бүлеп, ярашлы мәрәкә һүҙен табып көлдөрөүе – үҙе бер кинәнес.* Ә. Алдырханова.

**АҘЫҠ-ТҮЛЕК** *и. йыйн.* ‘продукты’. Кешегә ашарға яраған бөтә ашамлыҡ; ризыҡ. *Аҙыҡ-түлек магазины. Отряд бер аҙнаға етерлек аҙыҡ-түлек әҙерләне.* ■ *Сергей уға директорҙың «Беренсе категориялы специалисты биш көнгә аҙыҡ-түлек менән*

*тәьмин итергә» тип яҙған ҡағыҙын һуҙҙы.* И. Абдуллин. *Тылдан аҙыҡ-түлек һәм боеприпас ташылды*. Ғ. Аллаяров.

**АҘЫҠ-ӘҮҠӘТ** *и. йыйн.* ʻразные продуктыʼ. Кешегә ашарға яраған төрлө ашамлыҡ; тәмле ризыҡ. ■ *Нәҙек кенә итеп ҡырҡылған кипкән колбаса, ҡыҙарып бешкән помидор, һай тәрилкәләрҙә ҡыҙыл ыуылдырыҡ, тағы әллә ни төрлө әлүән-әлүән аҙыҡ-әүкәт килеп ултыра.* Р. Өмөтбаев.

**АҘЫП-ТУҘЫП** *ҡ.*

1) ʻбродяжничатьʼ. Бер ерҙә ныҡлап тормай, ерекмәй, күсенеп йөрөү. *Аҙып-туҙып йөрөү. Аҙып-туҙып йөрөү беҙҙең халыҡҡа хас түгел.* ■ *Шулай ҙа быуаса ауылға уның ҡараҡлыҡҡа бирелеү, аҙып-туҙып йөрөү йәки башҡа берәй насар юлға баҫыуы тураһында хәбәр килгәне юҡ.* З. Биишева. *Ә Батыры ни инде уның бабаһы кеүек кенә түгел, ун йыл буйы ҡырҙа йөрөп, аҙып-туҙып бөткәндер*. И. Ғиззәтуллин.

2) *перен.* ʻразвращаться, становиться развратнымʼ. *күсм.* Аҙғынлыҡ юлына баҫыу. ■ *Фатима йәш, матур, йыйнаҡ бисә, аҙып-туҙып йөрөгәне юҡ уның*. Б. Бикбай.

**АЖҒЫРА-ҮКЕРӘ** *р.* ʻразъяряясь, устрашающе ревя *(о животных)*ʼ. Асыуланып, ҡурҡыныс тауыш сығарып екереү (хайуандар тураһында). ■ *Ажғыра-үкерә дошманының ҡулын сәйнәп маташҡан аяу белмәҫ януар "уһ" итте лә ҡапыл-ҡара хәлһеҙләнә төштө.* И. Ноғоманов.

**АЖҒЫРТЫП-БЫЖҒЫРТЫП** *р.* ʻразъяряясь, устрашающе крича, ругаясьʼ. Зәһәр сәсеп, ярһып екереү, әрләү. ■ *Аҡландан өҫтәрәк урындағы сауҡалар араһында ҡатын-ҡыҙ, ажғыртып-быжғыртып, балаларын бесән йыйырға өйрәтә.* Я. Хамматов.

**АЖДАҺА-ЙЫЛАН** *и. миф. йыйн.* ‘драконы’. Аждаһалар һәм шуның кеүек мифик заттар. ■ *Урал тураҡлаған дейеү-пәрейҙәр, аждаһа-йыландар кәүҙәһенән ҙур бер тау өйөлөп ҡалды, ти.* Әкиәттән.

**АЖЫР-БОЖОР** *р. диал.* ‘шероховато, с комками’. ■ *Сыйҙым ажыр-божор туңһа, уңыш була.* Һынамыш.

**АЙҠАЛА-САЙҠАЛА** *р.*

1) ‘поднимая волны’. Тулҡын булдырып. *Айҡала-сайҡала йылғала кәмә йөҙә.*

2) ‘ходить качаясь, шатаясь’. Бәүелеп, аяғында ныҡ тормай. *Айҡала-сайҡала атлай.*

**АЙРАН-ҠЫМЫҘ** *и. йыйн.* ‘кисломолочные продукты’. Әсетелгән һөт аҙыҡтары. *Айран-ҡымыҙ менән ҡаршылау.*

**АЙ-ҺАЙ I** *ымл.*

1) ‘выражает удивление, восхищение’. Аптырағанда, һоҡланғанда һәм башҡа төрлө тойғо белдергәндә әйтелә. ■ *[Фатима:] Ай-һай, һиңә һуҡты ла күпте икән.* Б. Бикбай.

2) ‘выражает недоверие, сомнение: ой ли’. Берәй эш-хәлгә шик белдергәндә, икеләнгәндә әйтелә. *Ай-һай, ул эшләй алырмы икән?!*

3) ‘употребляется в песнях для усиления эмоциональности: ой да’. Йырҙарҙа хис-тойғоно көсәйтеү өсөн ҡулланыла. ■ *Ай-һай, Порт-Артур була торғайның матур.* Халыҡ йырынан.

**АЙ-ҺАЙ II** *и. диал.*

1) ‘память’. Иҫ (хәтер, зиһен). *Ул ай-һайыма кереп тә сыҡмай.*

2) ‘суета, беспокойство’. Мәшәҡәт. *Утынды бер киҫтереп алһаң, ай-һайы юҡ.*

**АЙЫ-КӨНӨ** *и.* ‘месяц, день; нужное, должное время, подходящий момент’. Үҙ ваҡыты, тейешле мәле. ■ *[Мәғфүрә:] Эй аллам, ипләп кенә йөрө инде. Айың-көнөң тулһа, оят тип әллә нишләп булмай ул.* Һ. Дәүләтшина.

▲ **айы-көнө** менән ‘своевременно’. Үҙ ваҡытында.

**АЙЫЛ-ТӨРМӘН** *и. йыйн.* ‘принадлежности седла’. Эйәрҙең әйберҙәре, йыһаздары. *Айыл-төрмән алыу.*

**АЙЫРЫМ-АСЫҠ I** *с.* ‘ясный, видимый’. Еңел айырырлыҡ; асыҡ. ■ *Бәләкәй генә булһа ла, айырым-асыҡ һүҙҙәре.*

**АЙЫРЫМ-АСЫҠ II** *р.* ‘ясно, видимо’. Еңел айырырлыҡ; асыҡ. ■ *Күк йөҙө таҙарған. Йондоҙҙар айырым-асыҡ күренә.* А. Таһиров.

**АЙЫРЫМ-ӨҘӨК** *с.* ‘неясный, нецельный, неполный, отрывочный’ Теүәл булмаған; өҙөк-мөҙөк, ярты-йорто. *Айырым-өҙөк хәбәр. Сәгит айырым-өҙөк хәбәрен һөйләне лә сығып китте.* ■ *Айырым-өҙөк тауыштарҙан ҡурҡҡандай, лампаның уты тертләп-тертләп ҡуя.* Б. Хәсән.

**АЙЫШ-ТОЙОШ** *и.* ‘суть, сущность’. Ниҙең дә булһа асылы, рәт-сираты. *Искәндәр әлегә был эштең айыш-тойошона сыға алмай.*

**АҠБАШ-ҠАРШЫН** *и. этн.* ‘название одного из родовых подразделений башкир’. Ҡаршын ырыуының бер бүлеме.

**АҠҠАН-ТАМҒАН** *с.* ‘добро, нажитое непосильным трудом’. Төрлө ерҙән әҙләп килгән *(аҡса йәки башҡа нәмәгә ҡарата әйтелә). Аҡҡан-тамған байлыҡ. Аҡҡан-тамған аҡса менән мөлкәт йыйыла.*

**АҠ-ҠАРА** *и.* ‘ничего (не видеть, о сильно возбужденном или увлекшемся человеке)’. Бер нимә лә, бер ни ҙә (тирә-йүнде абайламай бик ашығып китеп барғанды йәки онотолоп берәй нәмә эшләгәнде белдергәндә әйтелә). ■ *Малайҙар ашыҡты. Күҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәне.* Р. Камал.

**АҠЛЫ-ҠАРАЛЫ** *с.* ‘бело-чёрные тона’. Аҡ һәм ҡара төҫтәр булған. Аҡлы-ҡаралы һыйыр. ■ *Айҙар бармаҡтары менән аҡлы-ҡаралы төймәләр буйлап йүгереп үтте лә Разия өсөн ят бер көйҙө уйнап ебәрҙе.* Р. Байбулатов. *Ҡапыл күк күкрәгәнгә ҡарап ебәрһәк, баш осонда аҡлы-ҡаралы болоттар ҡайнаша.* М. Ямалетдинов.

**АҠМАН-ТОҠМАН** *и.* ‘поздний весенний буран с мокрым снегом’. Март уртаһынан һуң була торған көслө буран. *Аҡман-тоҡман ваҡыты. Аҡман-тоҡман башланғансы юлға сығыу хәйерле.* ■ *Ҡыш һуңғы тапҡыр йән тартҡылаша, ажарын күрһәтеп ҡалырға теләй, аҡман-тоҡман бурандары башланып китте.* Б. Бикбай. *Оҙаҡҡа һуҙылған аҡман-тоҡман бурандары Ергә мәңгегә килгәндәй, бөтә үҫемлек һәм тереклек донъяһын үҙ ҡеүәтенә буйһондороп, бағындырып алырҙай булып дуланы.* Т. Ғарипова.

**АҠ-САЛ** *с.* ‘белесый, седой’. Аҡ (*күберәк сәс, төк йәки йөнгә ҡарата).* ■ *Аҡ-сал ғына яурын, ала ҡанат Урал ғына тауҙың бөркөтө.* Халыҡ йырынан.

**АҠСА-МАЛ** *и. йыйн.* ‘богатство, состояние’. Байлыҡ, мөлкәт. *Аҡса-мал туплау. Ауылда күбеһе аҡса-мал тип йәшәй бирә.* ■ *Айбулатты, егет булып йөрөп тә, аҡса-мал менән еңеп, кәләш ала алмаҫ егет итеп иҫәпләгәндер инде ул, тип уйланды.* Һ. Дәүләтшина.

**АҠҺАЙ-ТУҠҺАЙ** *р.* ‘хромая, ковыляя’. Сатанлай-сатанлай. *Аҡһай-туҡһай атлау. Бер ҡарт аҡһай-туҡһай үтеп китте.* ■ *Сәлих Йәғфәров аҡһай-туҡһай өлкән юл ситенән ҡуйы булып үҫеп килгән сиҙәм буйлап тау башына менде лә тирә-яҡты күҙәтергә туҡтаны.* С. Агиш. *Атаһы ҡарттың әтәсте нисек мәҙәк ҡыландырыуын асыҡ тәҙрәнән күҙәтеп торған еренән, ҡыҙыл кикриктең тиреҫ өйөмө тирәһендә тибенә башлаған тауыҡтары араһында, иҫке сабата һөйрәп, аҡһай-туҡһай һөйрәлеүен күргәс, түҙмәне, яңғыратып көлөп ебәрҙе.* Д. Исламов.

**АҠҺАҠ-ТУҠҺАҠ** *с. йыйн.* ‘хромоногие, хромые’. Аҡһаҡтар, йыйын аҡһаҡ. *Аҡһаҡ-туҡһаҡ кеше йыйылған.* ■ *Иван Семеновичығыҙҙың ул аҡһаҡ-туҡһаҡ бейәләре менән Йүкәле тау өсөн беҙ хөкүмәткә түләгән налог хаҡын да ҡайтара алмайбыҙ.* Д. Исламов. *Котлубан лагерынан аҡһаҡ-туҡһаҡ һалдаттар килеп төштө.* С. Поварисов

**АҠҺАП-ТУҠҺАП** *ҡ.* ‘хромать’. Аҡһай-аҡһай саҡ баҫыу; һылтыҡлау. *Аҡһап-туҡһап атлау. Ир кеше аҡһап-туҡһау менән оҙон юл үтә алмаҫ.* ■ *Ҡайһыларын санитарҙар алып сыҡты, ҡайһылары госпиталдә үлде, бик һирәктәре генә тыуған ер буйлап таяҡта йәки аҡһап-туҡһап атлап йөрөй.* Т. Ғиниәтуллин.

*Аҡһап-туҡһап һыу буйына төшәм дә тағы ҡайтып ятам йәки Ғәлим ағай янына сығып ултырам.* Д. Юлтый.

**АҠЫЛ-КӘҢӘШ** *и. йыйн.* ‘совет; разные мысли, идеи’. Төрлө фекер, төрлө уй. *Аҡыл-кәңәш ҡороу.* ■ *Кәбир үҙенең уй-фекерен уртаҡлашырға, бригада хәлдәрен һөйләргә, элеккесә аҡыл-кәңәш һорарға йыйынғайны.* Я. Вәлиев. *Балалар кескәй саҡта йортта күҙ-ҡолаҡ булып, үҫә төшкәс, аҡыл-кәңәш биреүселәр шулар булды.* Ф. Чанышева.

**АҠЫРЫП-БАҠЫРЫП** *к.* ‘громко крича, шумно’. Бик яман ҡысҡырыу. *Аҡырып-баҡырып һөйләшеү. Аҡырып-баҡырып эште хәл итеп булмай. Һин бында аҡырып-баҡырып йөрөмә.*

**АЛАҠ-ЙОЛАҠ** *с.* ‘полосатый, в полоску‘. Һыҙатлы, буйлы. *Алаҡ-йолаҡ сапан.*

**АЛА-ҠОЛА** *с.* ‘пятнистый, пестрый, серо-бурый‘. Төрлө төҫ аралашҡан, сыбар. *Ала-ҡола балаҫ. Майҙан ала-ҡола кейенгән кешеләр менән тулды.* ■ *Ала-ҡола кейенгән, ҙур төргәктәр, ҡайыш менән арҡыры бәйләп арҡаларына ағас һандыҡ күтәргән кешеләр, бер-берен этеп-төртөп, ҡысҡырынып оло ҡапҡанан ағылалар.* Б. Бикбай. *Казарманың ике яҡ стенаһы буйлап киткән, сысҡан башы ярылырлыҡ ялангас һикеләре, күптән бирле әҙәм ҡулы яҡын бармаған ала-ҡола тәпәшәк мейестәре, тышҡы яҡтағы нәмәләр күренмәҫлек дәрәжәгә килгәнсе саңланып ҡатҡан тәҙрәләре «был казармала күптән бирле кеше тормай торғандыр» тип әйтерлек йәмһеҙ бер күренеште күҙ алдына килтерәләр ине.* М. Ғафури.

**АЛАҠ-ҺУЛАҠ** *с. диал.* ‘аляповатый‘. Ала-сола. ■ *Алаҡ-һулаҡ яҡтыла уның [әбейҙең] сирышып бөткән сырайы гәжәп ҡырыҫ ...һымаҡ күренде миңә.* Н. Мусин.

**АЛАҠ-ШАҠАЛАЙ** *и.* ‘чехарда – детская игра‘. Малайҙар, егеттәр уйнай торған уйын (Уйнаусылар икегә бүленә; бер төркөмө. Билдән бөгөлөп, тотоношоп, бер-бер артлы баҫа; икенсе төркөмдәгеләр уларҙың өҫтөнә һикереп ултыра; аҫтағылар йығылмаһа, һикергәндәре улар урынына баҫа); шап-шаҡыр. *Алаҡ-шаҡалай уйнау. Малайҙар кис йыйылып алаҡ-шаҡалай уйнай торғайны.*

**АЛАЛЫ-ҠОЛАЛЫ** *с. ҡар.* **ала-ҡола**. ■ *Хәҙерге алалы-ҡолалы сепрәккә уранған ер шарына ҡыҙыл күлдәк кейҙерербеҙ.* И. Насыри.

**АЛАМ-ҺАЛАМ** *и. йыйн.* ‘старые вещи, тряпье, барахло’. Иҫкергән, туҙған кейем-һалым, тотонолған сепрәк. ■ *[Закир:] Беҙҙең яҡтар ҡалаға килһә, ҡарбуз-ҡауын ашар өсөн элек йәшел баҙарға йәки алам-һалам һатып алырға тип, толчок баҙарына бара торған.* З. Биишева. *Ғүмерҙә булмағанды, бөгөн Хәлиулла йомоҡтоң бисәһе бер ҡосаҡ алам-һалам күтәреп сыҡты.* И. Ғиззәтуллин. *Землянка, ҡыуыштар эргәһендә алам-һалам кейем, сей тиреләр аунап ята.* А. Таһиров.

**АЛАМ-ҺОЛАМ** *и. йыйн. ҡар.* **алам-һалам.**

**АЛАН-БОРХАН** *р. ҡар.* **әлән-борхан.**

**АЛАН-ЙОЛАН** *р.* ‘туда-сюда, с опаской’. Бер тегеләй, бер былай; ялт-йолт. *Алан-йолан ҡараныу.* ■ *Ҡарсыҡ был юлы ла*

*алан-йолан ҡаранып алмай булдыра алманы.* К. Мәргән. Алан-йолан *тирә-яғын ҡараштырып алды.* А. Баймөхәмәтов.

**АЛАН-ҠОЛАН** *р.* 'быстро, мигом'. Унда-бында бик тиҙ, ялп-йолп, ялт та йолт. ■ *Ут өҫтөнән алан-ҡолан үтеп китә ярғанат.* С. Кулибай.

**АЛАСАҠ-БИРӘСӘК** *и.* 'долги'. Ала торған һәм бирә торған аҡса йәки бүтән нәмә. *Колхоздың аласаҡ-бирәсәген асыҡлау.*

**АЛАС-ЙОЛАС** *с.* 'разноцветный, неровный, пятнистый'. Төрлө төҫтә; ала-сола. ■ *Стеналар ялҡын һуғып, ҡарайып, алас-йолас булып бөткән.* Ж . Кейекбаев.

**АЛА-СОЛА** *с.* 'пятнистый, пестрый, серо-бурый'. Төрлө төҫ аралашҡан, сыбар. ■ *Әллә ҡайһы урындарҙан борғаланып, ҡултыҡланып, йырғаҡланып килеп сыҡҡан Таштуғай йылғаһы буйының һирәк-һаяҡ ҡына ҡыуаҡтар, ҡурғылар менән ала-сола йәшеллек эсендә ҡалған урындары ла, тап-таҡыр таулы, ялангас таштан ғына бөткән бейек ярлы урындары ла күренеп ҡалалар.* Ғ. Дәүләтшин. *Ап-аҡ ҡар өҫтөндә тәпәш, мөйөш-һәйешле, ала-сола тимер өйөмдәре, тимәк, һөжүмгә киләләр.* Т. Ғиниәтуллин.

**АЛА-СОЛОЛАНЫУ** *ҡ.* 'стать аляпистым'. Ала-солаға әйләнеү, төрлө төҫлө булыу. ■ *Тирә-яҡ ала-сололанды. Ҡарайҙы.* Я. Хамматов.

**АЛА-СЫБАР** *с.* 'пестрый, пятнистый'. Ала менән сыбар ҡатнашҡан. *Ала-сыбар ҡош. Әнисә ала-сыбар туҡыманан күлдәк текте.*

**АЛДАН-АЛА** *р.* ‘раньше времени, раньше срока, преждевременно’. Ваҡыты етмәҫ борон; көн элгәре. *Атайымдың алдан-ала эшләп ҡуя торған гәҙәте юҡ ине.*

**АЛДАП-ЙОЛДАП** *р.* ‘обманом’. Төрлөсә алдау; алдаштырыу юлы менән. *Алдап-йолдау гәҙәте. Хәмит Гөлсөмдө алдап-йолдап үҙенең эшен эшләтте.*

**АЛДАП-ҺОЛДАП** *р. диал. ҡар.* **алдап-йолдап**.

**АЛДЫ-АРТТЫ ҠАРАУ** *ҡ.* ‘взвешивать, задумываться над чем-то’. Берәй эш йәки мәсьәләне һәр яҡлап үлсәү, самалау. *Алды-артты ҡарап йөрөү.* ■ *Хәҙер алды-артты ныҡ ҡарап йөрөргә тура килә, ҙурыраҡ отряд менән ҡабат киләсәктәр бит инде улар.* Р. Байымов. *Ярға һыйышып, алды-артты ҡарай-ҡарай, портҡа барып еткәндә, күҙ бәйләнергә өлгөрҙө.* Б. Рафиҡов.

**АЛДЫ-АРТТЫ УЙЛАУ** *ҡ. ҡар.* **алды-артты ҡарау.** *Алдын-артын уйламай эш итергә ярата ул Закир.*

**АЛДЫ-АРТЫ** *и.*

1) ‘перед и зад чего-то’. Нимәнеңдер ал һәм арт яғы. *Күлдәктең арты.*

2) *перен.* ‘результат, последствие чего-то’. *күсм.* Эш-хәлдең һөҙөмтәһе. *Алды-артты уйламай эшләү.*

**АЛДЫМ-БИРҘЕМ** *и.*

1) ‘обоюдное согласие на брак (до совершения обряда бракосочетания)’. Кәләш әйттергәндә ике яҡтың да ризалығын белдергәндә, килешкәндә әйтелә торған һүҙ. *Алдым-бирҙем яһау.* ■ *Унда яңыса «алдым-бирҙем» булып, боронго*

*биш тин баҡыр ҙурлығы түңәрәк мөһөр һуғылған никах ҡағыҙы алып ҡайттылар.* М. Кәрим.

2) 'сделка (обычно коммерческая)'. Бер яҡтан бирергә, икенсе яҡтан алырға тигән ике аралағы килешеү, нимәнелер һатып алыу. *Ауыл тирәһендә аҡсаға һатып алыу түгел, күберәк алдым-бирҙем йолаһы йөрөй ине.* ■ *«Алдым-бирҙем» иттеләр.* М. Кәрим.

**АЛДЫ-ЯЛДЫ БЕЛМӘҮ** *к.* 'не зная усталости, работать без отдыха'. Һис туҡтамау, өҙмәү. ■ *Салауатсылар ике көн буйы алды-ялды белмәй күпер һала.* Ә. Вахитов.

**АЛЙЫ-БОЛЙО** *р. диал.* 'сам не свой, не в себе, легкомысленно'. Аңҡы-тиңке. Иләҫ-миләҫ. ■ *Ҡыҙ, оҙаҡ ауырып яңы ғына яҙыла башлаған кеше кеүек, алйы-болйо килеп торҙо.* А. Таһиров.

**АЛ-ҠАПЫЛДАН** *р.* 'тотчас, нежданно, вдруг, внезапно'. Көтмәгәндә; ҡапыл-ғара. *Ал-ҡапылдан әйтеү. Гөлбикә ал-ҡапылдан әйберҙәрен йыйҙы ла өйҙән сығып китте.*

**АЛЛЫ-АРТЛЫ** *р.* 'друг за другом'. Береһе артынан береһе. *Аллы-артлы барыу. Ҡорманаевтар ғаиләһендә аллы-артлы 12 бала донъяға килде.*

**АЛЛЫ-ГӨЛЛӨ** *с.* 'разноцветный, цветастый, пестрый'. Төрлө төҫтәге. ■ *Аллы-гөллө сәскә бирһәм, ҡаҙарһыңмы түшеңә.* Халыҡ йырынан. *Икеһененң дә ҡойроҡ-ялдарын аллы-гөллө таҫмалар менән биҙәйҙәр, ҡолаҡтарына ҡайыған суҡлы ҡулъяулыҡтар тағалар.* М. Кәрим.

**АЛМАҠ-ҺАЛМАҠ** *р. диал. ҡар.* **алмаш-тилмәш.**

**АЛМАШ-ТИЛМӘШ** *р.* ‘по очереди, поочередно, посменно, попеременно’. Береһен береһе алмаштырып; бер-бер артлы, алмашлап. ■ *Алмаш-тилмәш тауыш бирешә һағышланған төнгө саҡ-суҡтар.* Х. Ғәбитов.

**АЛПАН-ТИЛПӘН** *р. ҡар.* **алпан-толпан II.** *Алпан-тилпән китеп бара.*

**АЛПАН-ТОЛПАН I** *и.* ‘медведь, табуированное название медведя’. Айыуҙың табулаштырылған (тыйылған) исеме.

**АЛПАН-ТОЛПАН II** *р.* ‘вразвалку, вперевалку, переваливаясь’. Ауыр баҫып, яң-яҡҡа аушанлап (атлау); һалп-һолп. ■ *Алпан-толпан атлаған айыуы күп Урал тау.* Ҡобайыр. *Шәрифулла алпан-толпан атлап, Ниғмәтулланың артынан эйәрҙе.* Я. Хамматов.

**АЛПЫ-ТОЛПО** *р. диал. ҡар.* **алпан-толпан**. ■ *Зилский менән секретарь сананан ауа-түнә тороп, алпы-толпо баҫып советҡа килеп инделәр.* Ғ. Дәүләтшин.

**АЛПЫ-ҺАЛПЫ** *р.* ‘нерадиво, лениво’. Көс түкмәй; иренеп кенә, арлы-бирле. *Алпы-һалпы эшләү. Алпы-һалпы йөрөү. Алпы-һалпы йөрөү менән алға китеп булмаҫ.*

**АЛТЫН-КӨМӨШ** *и. йыйн.* ‘всякое золото, серебро, драгоценности’. Затлы металдар һәм унан эшләнгән әйберҙәр. ■ *Алтын-көмөш яуып торғанда ла, бүтән ерҙәр тыуған ил булмай.* Халыҡ йырынан.

**АЛҺЫҘ-ЯЛҺЫҘ** *р.* ʻбез отдыха, не переставая, беспрестанно, непрерывноʼ. Һис туҡтауһыҙ. *Алһыҙ-ялһыҙ юлда булыу. Һалдаттар алһыҙ-ялһыҙ биш саҡрым үттеләр. Алһыҙ-ялһыҙ эшләү.*

**АЛЫШ-БИРЕШ** *и.*

1) ʻобмен, сделкаʼ. Ниҙелер ике арала алмашып биреш *(үҙ-ара алыш-бирешкә инеү).*

2) ʻкупля-продажаʼ. Һатыу-алыу эше; сауҙа. ■ *Ауылға ҡайтҡан саҡта Гәрәй сауҙа, алыш-бирешкә инеү өлкәһендә тамам шымарып, ҡыл йыуғысҡа әйләнеп өлгөргән ине инде.* Б. Бикбай.

3. ʻсвязь, общениеʼ. Үҙ-ара бәйләнеш, мөнәсәбәт. ■ *Был көндәрҙә минең донъя менән алыш-бирешем, дөрөҫө, һис бер бәйләнешем ҡалмаған ине.* М. Ғафури.

**АЛ-ЯЛ** *и.* ʼотдых, передышкаʻ. Ял, туҡтап тороу. ■ *Салауатсылар ике көн буйы алды-ялды белмәй күпер һала.* Ә. Вахитов.

**АНДА-ҺАНДА** *р. һөйл.* ʻв разных местах, там-сямʼ. Унда-бында. ■ *Анда-һанда ваҡ ҡына ямғырҙарға төрөнөп, борҡой ҡар.* Ш. Бабич.

**АҢ-БЕЛЕМ** *и. йыйн.* ʻзнания, образование, просвещениеʼ. Уҡыу-яҙыу, фән-мәғрифәт буйынса дөйөм мәғлүмәт. ● *Аң-белем – мәңгелек ғилем.* Әйтем.

**АҢ-ЗИҺЕН** *и. йыйн.* ʻум, разумʼ. Кешенең аң, аҡыл һәләтлеге. *Ә кешегә аң-зиһен, тел бирелгән.* М. Бураҡаева.

**АҢҠЫ-МИҢКЕ** *р. диал.* **аңҡы-тиңке.** *Аңҡы-миңке йөрөү. Фәрит бөгөн дә көнөн аңҡы-миңке йөрөп үткәрҙе.*

**АҢҠЫ-ТИҢКЕ** *р.*

1) ‘сам не свой, не в себе’. Иҫ-аҡылды йыя алмаҫ хәлдә, аптыраған, ҡаңғыраған хәлдә. *Аңҡы тиңке йөрөү. Аңҡы-тиңке йөрөгән кешеләргә бер эш ҡушыу кәрәк ине.*

2) ‘качаясь, шатаясь’. Болғанлап, тегеләй-былай сайҡалып. *Аңҡы-тиңке ҡайтып килә.*

**АҢ-ТАҢ ҠАЛЫУ** *ҡ.* ‘удивление, удивляться, поражаться чему-либо’. Аптырау, шаҡ ҡатыу. *Аң-таң булыу.* ■ *Зилский …ҡобараһы осоп, ҡолап китте. Халыҡ аң-таң булып ҡалды.* Ғ. Дәүләтшин.

**АҢ-ТОҢ** *и.* ‘суть, сущность чего-либо’. Төрлө эш-хәлдең асылы, айышы. *Аң-тоң һиҙеү. Ҡасим донъяның аң-тоңон аңлай башланы. Аң(ды)-тоң(до) белеү.*

**АПАЛЫ-ҺЕҢЛЕЛЕ** *р.* ‘сестры; старшая сестра с младшей сестрой’. Апай менән һеңле бергәләп. *Апалы-һеңлеле ҡыҙҙар. Беҙ, апалы-һеңлеле, редакцияла оҙаҡ йылдар эшләнек.*

**АПАЛЫ-ЭНЕЛЕ** *р.* ‘сестра с младшим братом’ Апай менән эне бергәләп. *Апалы-энеле ике уҡыусы конкурста еңеп сыҡҡан.*

**АПҺЫН-ӘЖЕ** *и. йыйн.ҡар.* **апһын-әзе.**

**АПҺЫН-ӘЗЕ** *и. йыйн.* ‘женщины *(одной семьи)*’. Ғаиләләге ҡатын-ҡыҙ *(апһындар, ҡәйенһеңлеләр һ.б.).* ● *Апһын-әзе татыу булһа, аш күп булыр.* Әйтем.

**АРА-ТИРӘ I** *р.*

1) ‘изредка, иногда, время от времени’. Ваҡыт-ваҡыты менән, һирәкләп. *Ара-тирә иҫкә төшөрөү. Апайым ара-тирә бабайымдың хәлен белеп йөрөнө.* ■ *Ара-тирә шул мәңге йәшеллек араһынан текә ҡая таштар тырпайып күренә.* И. Абдуллин.

2) ‘кое-где, там и сям, местами’. Унда-һанда, һирәк. *Ара-тирә кешеләр йөрөй.* ■ *Ара-тирә эттәр өрә, тәүге әтәстәр һөрән һала.* Н. Алсынбаев

**АРА-ТИРӘ II** *и. йыйн. һөйл.* ‘друзья, приятели, соседи’. Ҡатнашып, аралашып йөрөгән туғандар; яҡын кешеләр, күршеләр. *Ара-тирәне сәйгә саҡырып алыу.*

**АРА-ТОРА** *р. диал. ҡар.* **ара-тирә I, 1.**

**АРБЫ-ТОРБО** *р. диал. ҡар.* **тарбан-торбан.**

**АРҠЫРЫ-БУЙ (арҡыры-буйлы) I** *р.*

**1)** ‘крест-накрест,вдоль и поперёк’. Киҫешеп үткән ике йүнәлештә. Утынды арҡыры-буй һалыу.

2) *перен.* ‘как попало, вкривь и вкось’. *күсм.* Бөтә йүнәлештә; иңләп-буйлап. *Бөтә ерҙе арҡыры-буй йөрөп сыҡтым.* ■ *Буш минуттарында уй-тойғоларын ошолай, иҙәнде арҡыры-буйлы үлсәй-үлсәй, тәртипкә һала ул.* Б. Рафиҡов.

**АРҠЫРЫ-БУЙ II** *с.* ‘перекрёстный’. Киҫешеп үткән ике йүнәлештә. *Арҡыры-буй юл.*

**АРҠЫРЫ-ТОРҠОРО** *р. диал.* ‘не ровный, беспорядочный’ Арҡыс-торҡос. ■ *Ҡайһы берәүҙәр уның итәгенән ҡара йөндәре һалынып күренеп торған һары тунына, карталар һала торған һары сумкаһына, түбәһендәге ҡара*

*буҫтау өҫтөнән арҡыры-торҡоро һары уҡа йүгертелгән ҡаракүл бүркенә, киң башлы һалдат итегенә, билендәге наганына ҡарап, «был хәрби кешелер», тинеләр.* И. Насыри.

**АРҠЫС-ТОРҠОС** *с.*

1) ‘беспорядочный’. Бер арҡыры, бер буй; бер-береһенә арҡырылаш. *Арҡыс-торҡос ҡына эшләнгән эш. Өҫтәлдә арҡыс-торҡос китаптар ята.*

2) ‘крест-накрест’. Киҫешеп үткән ике йүнәлештә. ■ *[Рамазан] барһа, өйҙөң тәҙрәләренә арҡыс-торҡос таҡта ҡағылған, ишеге бикле.* Ә. Хәкимов.

**АРҠЫСАҠ-ТОРҠОСАҠ** *с. ҡар.* **арҡыс-торҡос.**

**АРЛЫ-БИРЛЕ I** *с.* ‘маловажный, незначительный’. Мөһим булмаған, ваҡ-төйәк. *Арлы-бирле эш.* ■ *Ул [Зильда] утлыҡсаһы өңрәйеп күренгән сыуалға, төтөн ыҫлауға ҡарайып бөткән түбә таҡтаһына, арлы-бирле генә сутланған ялангас, ҡотһоҙ стеналарға күҙ йүгертә...* Н. Мусин. *Унда арлы-бирле эштәре бөткәс, бында тирмәләр әҙерләнгәс, тәкәләр һуйып, уларҙы ошонда ҡунаҡҡа алып килерменме-ниме тигәйне, нишләр.* Һ. Дәүләтшина.

**АРЛЫ-БИРЛЕ II.** *р.* ‘как попало, кое-как’. Ашыҡ-бошоҡ, теләһә ҡалай ғына. *Арлы-бирле ашап алыу.* Еренә еткермәй, булыр-булмаҫ итеп. *Арлы-бирле эшләү.* ■ *Дилбәр был мәхлүкте [бесәйҙе] күтәреп алды ла, арлы-бирле йыуындырып, ҡуйынына тыҡты.* Г. Ғиззәтуллина.

**АРЛЫ-БИРЛЕ БУЛЫУ** *ҡ.*

1) ‘случиться, произойти’. Әҙ генә бер төрлө хәлгә килеү, ниндәй ҙә булһа бер хәл ҡубыу. ■ *[Яланбикә] Исхаҡ ағайым уны [шымсы Ширәйҙе], арлы-бирле булғансы, бал эсереп иҫертербеҙ, ти.* Һ. Дәүләтшина.

2) ‘попасть в трудное положение’. Берәй насар хәл (үлем) булыу. *Олатайың ауырып тора, арлы-бирле булып ҡуймаһын.*

**АРЛЫ-БИРЛЕ ИТЕҮ** *ҡ.* ‘выполнять мелкую работу’. Ул-был эште эшләү, ваҡ-төйәк эште эшләү. ■ *Ул [Сәлиха] арлы-бирле иткәнсе, Сәмиғулла атын егә торҙо.* Ж. Кейекбаев.

**АРМА-ТОРМА КИЛТЕРЕҮ** *ҡ. диал.* ‘разнести в пух и прах’. Пыр туҙҙырыу. *Теге балаларҙы арма-торма килтереп сығарып ебәрҙем.*

**АРПА-КӨРПӘ** *и. миф.* ‘собственное название духа болезней глаз’. Күҙ ауырыуҙарын булдырыусының исеме. *Арпа-көрпә, мә күкеш.* Имләү йолаһы.

**АРТМАҠ-ШАРТМАҠ** *с. диал.* ‘как попало’. Арҡыс-торҡос. *Артмаҡ-шартмаҡ ятҡан әйберҙәр.*

**АРТЫҠ-БОРТОҠ** *с.* ‘ненужный, лишний’. Кәрәге булмаған, артыҡ һаналған. ■ *Зөһрә килгән саҡтарҙа ла артыҡ-бортоҡ һүҙ ыҫҡындырмай.* Н. Мусин.

**АРЫ-БИРЕ I** *р.*

1) ‘туда-сюда’. Бер тегеләй, бер былай. *Ары-бире йөрөү.* ■ *Төн уртаһы. Ғәйфи яңғыҙ ғына ары-бире йөрөй иҙәндә.* З. Биишева. *Хәмит, ҡулдарын артҡа ҡаушырып, иҙән уртаһында ары-бире йөрөй.* С. Агиш.

2) ‘как попало’. Эште еренә еткереп башҡармау. *Әсғәт дәресен ары-бире генә әҙерләне.*

**АРЫ-БИРЕ II** *с.* ‘маловажный’. Мөһим булмаған, ваҡ-төйәк, теге-был, төрлө эш. *Ары-бире эш. Ары-бире эш кенә эшләнде бөгөн.*

**АРЫ-БИРЕ III** *и.* ‘что-нибудь, кто-нибудь’. Теге-был, теләһә кем. *Ары-бире белеп ҡалмаһын.*

**АРЫҠ-ТУЛАҠ** *с. йыйн. ҡар.* **арыҡ-турыҡ.** ■ *Был ерҙәрҙе ҡалҡытыр өсөн айҙар буйы ҡуна ятҡан саҡтар бар ине бит. Ҡайҙа бараһың инде арыҡ-тулаҡ ат менән.* Ғ. Вәлиев.

**АРЫҠ-ТУРЫҠ** *с. йыйн.* ‘тощий, худой, исхудалый; истощённый’. Гел арыҡ,ябыҡ. ■ *Хужалыҡта арыҡ-турыҡ ун бер-ун ике ат, биш-алты үгеҙҙән башҡа транспорт юҡ.* “Башҡортостан ҡыҙы”.

**АРЫМАЙ-ТАЛМАЙ** *р.* ‘без устали, не уставая’. Арыу-ялҡыуҙы белмәй (эшләү). *Арымай-талмай эшләү. Йәйен ауыл кешеләре арымай-талмай бесән эшләй.* ■ *Илдең ярлы йәштәренән бер төрлөһө фабрика-заводтарҙа, киң яландарҙа арымай-талмай илде төҙөй.* Б. Ишемғол.

**АРЫП-ЙОНСОП** *р. ҡар.* **арып-талып.** *Был балалар көнө буйы яланда арып-йонсоп бөттөләр инде.*

**АРЫП-ТАЛСЫҒЫП** *р. ҡар.* **арып-талып.** ■ *[Зәмбилә менән Яңыл] Арып-талсығып бөткәндәр, көн оҙоно йүгерҙеләр шул, аш-һыу әҙерләү улар өҫтөнә төштө.* Р. Камал.

**АРЫП-ТАЛЫП** *р.* 'переутомляясь, уставая'. Бик нык арып, хәлдән тайып. *Арып-талып бөтөү. Арып-талып эшләү. Уҡыусылар экскурсиянан арып-талып ҡайттылар.* ■ *Өршәкбаш буйын ҡыҙырып, арып-талып ҡайтҡанда ла, Миңлеғәленең күңеле аңлайышһыҙ тойғоларҙан арынманы.* Я. Хамматов. *Был көтөүҙең ян-ягынан, тәртипле урынлаштырылған ғәскәри ҡарауыл кеүек, алты көтөүсе, арып-талып, алпанлап атлайҙар.* Һ. Дәүләтшина.

**АРЫУ-ТАЛЫУ** *и. йыйн.* 'переутомление, усталость'. Көс-хәлдән яҙған, хәлһеҙләнгән торош. *Арыу-талыуың бөтөр. Арыу-талыу белмәй эшләү.* ■ *Ғилман урманға йәне-тәне менән бирелгән, арыу- талыуҙы белмәç...* Н. Мусин.

**АРЫПТЫ-ТАРЫПТЫ** *с. диал.* 'беспорядочный'. Рәтсиратһыҙ, тәртипһеҙ. ■ *Баштан уҡ арыпты-тарыпты булған эштең аҙағы ла шулай бөтә инде.* Т. Морат.

**АСАЛАҠ-ЙОМАЛАҠ** *с.* 'полуприкрытый, прищуренный (о глазах)'. Асылыр-асылмаç (күҙгә ҡарата). *Йоҡоһонан торған ала асалаҡ-йомалаҡ күҙҙәрен ыуҙы.* ■ *Ҡарттың һаҡалы дерелдәне, асалаҡ-йомалаҡ күҙҙәренән йәш тәгәрәне.* А. Мағазов.

**АСЛЫ-ТУҠЛЫ** *р.* 'впроголодь'. Туя ашауһыҙ, туйыр-туймаç. *Аслы-туҡлы йәшәү. Һалдаттарҙың аслы-туҡлы йәшәгән көндәре артта ҡалды.* ■ *Йәшәгәндәр туғандар, эшсе халыҡ булғандар... көнө-төнө эшләп тә, аслы-туҡлы торғандар...* Д. Юлтый.

**АСЫҠ-ЯРЫҠ** *с.* ‘открытая душа’. Алсаҡ, көләс, эсендәге тышында. ■ *Был асыҡ-ярыҡ егет күп ҡыҙҙарҙың башын әйләндерҙе.*

**АС-ЯЛАНҒАС** *р.* ‘крайне бедно’. Ашҡа, кейемгә бик мохтаж булып. ■ *Бесән саптыҡ, иген иктек, ас-ялангас эшләп, тир түктек.* Халыҡ йырынан.

**АҪЛЫ-ӨҪЛӨ** *с.* ‘имеющий верхнюю и нижнюю часть’. Аҫты ла, өҫтө лә булған. *Аҫлы-өҫлө костюм.* ■ *Өй ҡотлап, Гөлйөҙөмдөң әсәһе бер кейеҙ, еңгәһе аҫлы-өҫлө ике сынаяҡ бүләк итте.* Һ. Дәүләтшина.

**АҪТЫ-ӨҪКӘ** *р*. ‘в беспорядке, вверх дном’. Ныҡ бола, тәртипһеҙ хәлдә. *Илдар палатканың аҫты-өҫкә килеүен күреп аптыраны.*

**АҪТЫ-ӨҪКӘ** *р*. ‘в беспорядке, вверх дном’. Ныҡ болартыу, тәртипһеҙ хәлгә килтереү. ■ *Ул [Тимербулат] аҡтарынып, өйҙөң аҫтын-өҫкә килтерҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**АТА-БАБА** *и. йыйн.* ‘предки, прародители, прадеды’. Элекке оло быуындар. ■ *Үҙ илкәйҙәрем бигерәк яҡын, ата-бабам шунда тыуганга.* Халыҡ йыры. *Борон башҡорттоң яҙылмаган шундай ҡануны йәшәгән: ирмен тигән ир-егет ата-бабаһының кәмендә ете быуынын – ырыуының шәжәрә ебен, халҡының ҡобайырын, йыр-моңон белергә тейеш булган.* Ғ. Хөсәйенов.

**АТА-ОЛАТАЙ** *и. йыйн.* ‘прадед, предки’. Элекке оло быуындар. ■ *Атай-олатайҙарын, инәй-өләсәйҙәрен, тугандарын онотҡан әҙәмдән ниндәйҙер изгелек, мәрхәмәтлек, миһырбанлыҡ көтөүе ҡыйын.* М. Нәҙерғолов.

**АТА-ИНӘ** *и. йыйн.* ‘родители’. Ата һәм әсә. ■ *Ҡыҙҙарының был дыуамаллығынан борсолған ата-инә уны бик ныҡ орошто.* Ә. Вәли.

**АТАЛЫ-ҠЫҘЛЫ** *р.* ‘отец и дочь; отец с дочерью’. Атаһы менән ҡыҙы бергә. ■ *Улар аталы-ҡыҙлы бөтә яҙ, йәй, көҙ буйына эшләне.* Һ. Дәүләтшина.

**АТАЛЫ-УЛЛЫ** *р.* ‘отец и сын; отец с сыном’. Атаһы менән улы бергә. *Аталы-уллы йорт һалып инде.* ■ *Аҙаҡ ҡалаһында ниндәй изге ҡарттың барлығы хаҡында аталы-уллы баш ваттылар, ә Тимербулат уның аманатының иң мөһимен әйтеп бөтмәгәйне әле.* Ғ. Ибраһимов. *Майҙанға аталы-уллы йәнәш киттеләр, шунда уҡ тиерлек иғтибар үҙәгенә эләктеләр.* Б. Рафиҡов.

**АТ-АРБА** *и. йыйн.* ‘лошадь, повозка и сбруя’. Ат менән арба һәм егеү ҡорамалдары. *Ат-арбаһы менән ҡайтырға сыҡты.* ■ *Эш бүлешергә шунда йыйылалар, конюх халыҡҡа шунда ат-арба бирә.* Р. Камалов.

**АТА-ӘСӘ** *и. йыйн.* ‘родители’. Ата һәм әсә. ● *Ата-әсәңә ни ҡылһаң, үҙең шуны күрерһең.* Мәҡәл. ■ *Ә Хаят ата-әсәһе, ағай-еңгәһенең ҡайтыуҙары, бүләктәре, тәмле күстәнәстәр шатлығы менән, Диләне әллә ҡасан онотоп, аҡ тирмәләр араһында иркәләнеп йүгерә, әле атаһы, әле әсәһе янына барып һырлыға, төрлө хәбәрҙәр һөйләй, күлдәктәре, яңы уйынсыҡтары менән маҡтана.* Һ. Дәүләтшина. Күп йән тотоп, һунарҙан ата-әсәһе ҡайтҡан, ти. «Урал батыр» эпосынан.

**АТ-ЗАТ** *и. ҡар.* **нәҫел-нәсәп.** ■ *Ата-бабаларын белгән нәҫел-нәсәбенең атын-затын хәтерендә йәшәткән.* Ғ. Хөсәйенов.

**АТЛЫ-ТУНЛЫ** *с. һөйл.* ‘состоятельный, зажиточный’. Донъя көтөр мал-мөлкәтле; хәлле. *Атлы-тунлы кеше.* ■ *Улар кеүек берҙе ҡырҡҡа түнкәреүсе һатыусылар ғына түгел, улдары һалдатҡа китмәгән, атлы-тунлы кешеләрҙең күбеһе хөрриәт урманынан агас ташып, келәтле, аранлы булып бөттөләр.* С. Ҡудаш.

**АТ-ТУН** *и. йыйн.* ‘снаряжение, доспехи’. Эш һәм хеҙмәт өсөн кәрәк булған ат һәм кейем-ҡорамал. ■ *Бөтә халыҡ яуга китергә тип уҡ-һаҙағын, ат-тунын әҙерләй башлаган.* Йыр тарихынан.

**АТ-УЖА** *и. йыйн.* ‘имущество, достояние’. Төрлө мөлкәт; мал-мөлкәт. *Ул кеше бер төн эсендә ат-ужаһы менән юҡ булган.*

**АТЫ-УТЫ: аты-уты менән** *и. йыйн.* ‘со всеми своими пожитками’. Бөтә булған мөлкәте менән. *Аты-уты менән күсеп йөрөү.* ■ *Асыуы ҡабарған Байым бер яҡҡа ҡырыныраҡ һөйрәп Сарманды аты-уты менән бергә ауҙара тарта.* М. Ямалетдинов.

**АТЫ-ЮЛЫ: аты-юлы юҡ** *и. йыйн.* ‘бесследно исчез, без вести пропал’. Эҙһеҙ, хәбәрһеҙ юғалған кешегә ҡарата әйтелә. *Күршебеҙҙең аты-юлы юҡ.*

**АУА-ТҮНӘ** *р.* ‘шатаясь, пошатываясь, покачиваясь; переваливаясь, вперевалку, вразвалку’. Бер ауып, бер тороп; ауып-ауып китер хәлдә. *Ауа-түнә килеү. Вәли ауа-түнә саҡ*

*ҡайтып етте.* ■ *Уҫлаптай йәш егет тәнтерәкләп, аyа-түнә ҡайтып килә.* М. Әбсәләмов.

**АУМАЛ-ТҮКМӘЛ** *р.*: **аумал-түкмәл итеү** *диал. см.* **әүеш-тәүеш итеү.**

**АУШАН-ТАУШАН** *р. ҡар.* **алпан-толпан**. Әле бер, әле икенсе яҡҡа ауып. ■ *Был ир харап һимереп китә, муйынын да бора алмай башлай, йөрөгәндә ҡаҙ кеүек аушан-таушан итеп йөрөй.* Әкиәттән.

**АУЫҘ-КҮҘ** *и. йыйн.* 'рот и глаза'. Ауыҙ менән күҙ. ■ *[Айбулаттың] Ауыҙ-күҙҙәре ихтыярһыҙ уйсан йылмаялар.* Һ. Дәүләтшина.

**АУЫҘ-МОРОН** *и. йыйн.* 'рот и нос'. Ауыҙ менән танау. ■ *Аттың йомолған күҙҙәрен, ауыҙ-морон тирәләрен себендәр һырып алған.* Б. Бикбай.

▲ **ауыҙы-мороно бал да май булыу** 'кататься как сыр в масле'. Бай, тулы тормошта йәшәү.

▲ **ауыҙ-морон ҡан булыу** 1) 'истекать кровью'. Ҡанға батыу. 2) оказаться в тяжелом положении. Ауыр хәлгә ҡалыу.

**АУЫҘ-ТЕЛ: ауыҙ-тел ижады** (шул уҡ **халыҡ ижады)** *и.* 'устное народное творчество'. Халыҡтың билдәле булмаған ижадсылары тарафынан барлыҡҡа килтерелеп, быуындан-быуынға күсеп килгән мәҙәниәт ҡомарткылары. *Ауыҙ-тел ижадын йыйыу.* ■ *Мәмерйәләге һүрәт күренештәрен асыҡтан-асыҡ күҙ алдына баҫтырған ауыҙ-тел ижады, башҡорт халҡыныҡынан тыш, бүтән ҡәүемдәрҙә юҡ.* Ғ. Хисамов.

**АУЫР-АУМАҪ** *р.*

1) ‘едва не падая, чуть не падая’. Саҡ-саҡ аумай тороу. *Бағана ауыр-аумаҫ тора.*

2) *перен.* ‘не совсем, не до конца, почти; полу-, полусознательное состояние’. *күсм.* Тулыһынса түгел, ярым. *Ул иҫе ауыр-аумаҫ ҡына тора.*

**АУЫРЫУ-СЫРХАУ** *и. йыйн.*

1) ‘разные болезни, болезни’. Һәр төрлө ауырыу. *Ауырыу-сырхау эләктереү. Балаларҙы ауырыу-сырхауҙар урап үтһен.* ■ *Булатым шул өшкөрөүҙән аҙаҡ, ин шәәъ Аллаһ, бер ауырыу-сырхау күрмәне.* Л. Яҡшыбаева.

2) ‘больные люди, больные’. Ауырыған кешеләр. *Ауырыу-сырхауҙарға ярҙам итергә кәрәк.*

**АУЫРЫУ-ҺЫҘЛАУ** *и. йыйн.* ‘разные болезни’. Һәр төрлө ауырыу; һауһыҙлыҡ. ■ *Ауырыу-һыҙлау күрмәгән, үлем барын белмәгән.* «Урал батыр» эпосынан.

**АУЫШ-ТЫУЫШ** *р.* ‘криво’. Ян-яҡҡа тарпайып; ҡыйыш. ■ *Иҫке зыярат текмәһе кеүек ауыш-тыуыш булып торған серек, һары тештәре тағы ла йәмһеҙерәк ыржайып тора башланылар.* А. Таһиров.

**АҺ-ЗАР** *и.* ‘горести и печали, всеобщее горе, всеобщая скорбь’. Ғазаплы тәрән ҡайғы; ҡайғы-хәсрәт. ■ *Яҙып алам үткәндең барын, башҡорт ҡатынының аһ-зарын.* М. Хәй.

**АША-МАША** *р.* ‘через, по’. Унда-бында бер. *Күләүектәрҙе* а*ша-маша һикереп үтеү.*

**АШАМЛЫҠ-ЭСЕМЛЕК** *и. йыйн.* ‘еда и питье, продукты, съестные припасы’. Ашай, эсә торған төрлө нәмә;

ризыҡ. ■ *Табын әҙер ине. Ашамлыҡ-эсемлек ҡуйылған өҫтәл тирәләп ултырыштылар.* Я. Вәлиев.

**АШАМ-ЭСЕМ** *и. йыйн. диал. ҡар.* **ашамлыҡ-эсемлек**. Ашай, эсә торған төрлө нәмә; ризыҡ.

**АШАП-ЭСЕП** *ҡ.* ʻесть, поесть; питаться'. Тамаҡ туйҙырыу. *Ашап-эсеп ултырығыҙ!*

**АШАУ-ЭСЕҮ** *и. йыйн.* ʻеда и питье; питание'. Тамаҡ туйҙырыу. ■ *Айыу ашау-эсеүен дә онотто, тирә-йүндә ни барлығына ла иғтибар итмәне.* Ғ. Хисамов. *Ашау-эсеү яғы бик насар түгелме?* А. Карнай.

**АШҠАҘАН-ЭСӘК** *и. йыйн.* ʻжелудок и кишечник'. Ашҡаҙан һәм эсәктәр. *Ашҡаҙан-эсәк ауырта.*

**АШ-ҺЫУ** *и. йыйн*. ʻприготовленная пища, еда'. Ашарға әҙерләнгән аҙыҡ. *Аш-һыу әҙерләү.* ■ *Ҡарттар: "Быйыл йылҡы йылы шул, йонсоу йыл. Утын да, аш-һыу ҙа, мал аҙығы ла башҡа йылдарға ҡарағанда мул кәрәк.* Һ. Дәүләтшина. *Ҡатындар аш-һыу янында булдылар. Мәрйәм йәһәт кенә табынға аш-һыу ултыртырға тотондо.* Р. Солтангәрәев.

**АШ-ҺЫУСЫ** *и. һөйл.* ʻповар'. Аш-һыу әҙерләүсе; аш бешереүсе. ■ *[Аҡназарҙың] тамағына аш үтмәй башлай, ҡаланың иң оҫта аш-һыусыларын саҡыртып, төрлө ашамлыҡтар бешереп ҡарайҙар*. Әкиәттән.

**АШЫҠ-БОШОҠ** *р.* ʻнаспех, быстро, торопливо'. Тиҙ-тиҙ, ҡабалан. ■ *[Хәсән] ашыҡ-бошоҡ ашаны ла, һеңлеһе Сәхибә янына Татырлыға китте.* С. Агиш.

**АЯҠ-ҠУЛ** *и. йыйн.* ‘ноги и руки, конечности человека’. Аяҡ менән ҡул.

▲ **аяҡ-ҡулың һыҙламаһын** ‘дай бог здоровья’. Иҫәнлек-һаулыҡ теләп әйтелә. ■ *Салауаттай ирҙәр баш эймәҫтәр, аяҡ-ҡулына бығау һалһаң да.* Халыҡ йырынан.

**АЯҠҺЫҘ-ҠУЛҺЫҘ** *с. йыйн.*

1) ‘без ног и без рук, не имеющий ни ног ни рук конечности человека’. *Һуғыштан аяҡһыҙ-ҡулһыҙҙар күп ҡайтты.*

2) *перен.* ‘беспомощный, бессильный’. Аяҡһыҙ һәм ҡулһыҙ.

▲ **аяҡһыҙ-ҡулһыҙ ҡалыу** ‘оставаться без помощи и поддержки’. Ярҙамһыҙ, терәкһеҙ ҡалыу. *Ҡарты үлгәс, аяҡһыҙ-ҡулһыҙ ҡалды инде Мәйсәрә инәй.*

**АЯТ-ХӘҘИС** *и.* ‘суры из Корана’. Ҡөрьән сүрәләре. *Үҙен мосолман тип иҫәпләгән кеше аят-хәҙистәр белергә тейештер, тип уйлайым.*

**АЯУЛЫ-АРҘАҠЛЫ** *с. диал.* ‘знаменитый’. Илгә исеме танылған; данлы. *Аяулы-арҙаҡлы яҡташыбыҙ.*

## Б

**БАЙ-БЕТСӘ** [фарс.] *и. йыйн.*

1) ‘сын бая, богача, барчук’. Бай улы. *Бай-бетсә һуғышҡа бармай ҡасып бөттө.*

2) ‘богачи, богатые люди’. Байҙар ҡатламы; байғура. ■ *Һалдат итеп алдылар, өҫкә шинель һалдылар, бай-бетсәнең малайҙары өйҙә тороп ҡалдылар.* Бәйеттән.

**БАЛ-МАЙ** *и. йыйн.* ‘благополучие’. Именлек, етеш тормош символы. *Бал-май ашап ҡына йәшәйҙәр.*

▲ **бал-май (йәки бал да май) өҫтөндә йөҙөү** (йәки **бал да май эсендә йәшәү**) бер нәмәгә лә мохтаж булмайынса етеш тормошта йәшәү // соотв. ‘как сыр в масле’. *Киленгә рәхәт инде, бал-май эсендә йәшәй.*

**бал-май ҡаптырыу** *этн.* 1. ‘ритуальное угощение невесты и жениха медом и маслом во время свадьбы, сопровождающееся благопожеланиями’. Туй ваҡытында кейәү менән кәләшкә изге теләктәр теләп бал һәм май ҡаптырыу йолаһы. 2. ‘давать, отведать мед и масло *(обычай первого кормления новорождённого)*’. Ауыҙ иттереү, ҡаптырып ҡарау. *этн.* Яңы тыуған балаға, йола буйынса, башлап ризыҡ (бал, май) ҡаптырыу. ■ *Баҙыян еңгә аҡ йүргәккә төргән йомро башлы, ҡып-ҡыҙыл кескәй генә йоморсаҡты күкрәгенә ҡыҫып, йәтеш кенә итеп күтәреп алды ла илап, ҡысҡырып торған ауыҙына бер балғалаҡ май, бер балғалаҡ бал ҡаптырҙы.* З. Биишева.

**БАЛА-САҒА** *и. йыйн.* ‘дети, ребята, детвора’. Күмәк балалар. ■ *Бала-саға тыуһа, үҙ ризығы менән тыуа.* Я. Хамматов.

**БАЛА-САҒАЛЫ** *с.* ‘многодетный’. Күмәк балаһы булған ғаилә. *Бала-сағалы ғаилә.*

**БАЛА-СУРА (бала-сүрә)** (диал.). *и. йыйн* ‘дети’. Бала-саға. ■ *[Ғәзимә:] Ҡорсаңғылар, бала-сүрәһе менән килеп, һыйып тороуҙары етмәгән, бай балаһын ҡағалар.* Һ. Дәүләтшина.

**БАРА-ТОРА** *р.* ‘постепенно, через некоторое время’. Күпмелер ваҡыттан һуң; аҡрынлап; тора-бара. ■ *Бара-тора*

*ваҡиғалар үҙ яйына ҡайтты. Бара-тора Өйрәнсектең тупаҫ көршәктәренә көн бөткән.* З. Биишева.

**БАРЛЫ-КӨРЛӨ** *с. диал.* ‘зажиточный’. Етеш, бай. *Барлы-көрлө кешегә кейәүгә сыҡты.*

**БАРЛЫ-ЮҠЛЫ** *с.* ‘незначительный’. Булыр-булмаҫ, әҙ-мәҙ. *Барлы-юҡлы аҡсаңды таратып бөтмә!* ■ *Сәлимә тәүге иренән ҡалған барлы-юҡлы малын аҙлап үрсетеп, тырышып, балаларын, тәрбиәләне.* Һ. Дәүләтшина.

**БАРЫН-ТАБЫН** *и. этн.* ‘название подразделения башкирского рода Табын’. Табындарҙың бер ырыуы. *Табындарҙың йыйынында барын-табындарҙың тирмәһендә сәй эсеп сыҡтым.*

**БАРЫШ-ЙӨРӨШ** *и. этн.* ‘передвижение’. Йөрөү, хәрәкәт. *Барыш-йөрөш ирекле.*

**БАТА-СУМА** *р.* ‘утопая, погружаясь’. Бата яҙып. ■ *Яҙғы йомшаҡ ҡарҙа бата-сума йөрөү ҙә бер ғазап бит, арығандыр шул.* Н. Мусин.

**БАШ-АЯҠ I** *и. йыйн.*

1) ‘голова и ноги, все тело’. Баш менән аяҡ; бөтә кәүҙә. *Баш-аяҡ кейемдәре. Димсе әбей баш-аяҡ сирҙәрен дә дауалай ине.*

2) ‘голова и конечности скотины, голье’. Малдың башы һәм аяғы. *Баш-аяғын өтөү.*

3) ‘всего, в целом’. Бөтә булғаны, бөтәһе, барлығы. *Баш-аяғы бер һандығы бар.* ■ *Зәйнәпте күрһәткәйнеләр, ул баш-аяғы менән ҡаршы булды.* С. Агиш. *Башҡорттар иһә үҙ биләмәләрендә*

*заводтар, ҡалғаләр төҙөүгә баш-аяғы менән ҡаршы килгән.* М. Ғиләжев.

**БАШ-АЯҠ II** *р. диал.* ‘совсем’. Бөтөнләй. *Баш-аяҡ сығып китте.*

**БАШ-БАШҠА** *р. диал.* ‘по отдельности’. Айырым. *Бесәнде баш-башҡа һалыу.*

**БАШ-БАШЫ** *и. йыйн.* ‘два конца’. Ниҙеңдер ике яҡ осо. *Килеп сыҡҡан хәлдең баш-башын табырға кәрәк.*

**БАШ-КҮҘ** *и. йыйн.* ‘вся голова’. Бөтөн баш. *Башы-күҙе лә күренмәй.* ■ *Бер аҙҙан тороп уҡ ултырҙы, баш-күҙен һыпырҙы.* Г. Ғиззәтуллина-Ғайсарова.

▲ **баш-күҙ алыу** ‘приходить в себя *(после каких-либо трудностей)*’. Ауыр хәлдән арынып, арыуланыу. ■ *[Аҡназар] бер аҙ баш-күҙ алып, ҡәҙимге крәҫтиән булып китте.* Ғ. Дәүләтшин. *Аҙаҡ, бер аҙ баш-күҙ алып әҙәм рәтлерәк тора башлағас, ошо кинйә улдары Шәрәф тыуҙы, шул ғына ғүмерле булды.* Б. Бикбай.

▲ **баш-күҙ тоноу** 1) ‘обалдеть, ошеломляться’. Аптырау, иҫәңгерәү. *Башы-күҙе тоноп йөрөй инде. 2) ‘терять голову (от ярости, гнева)’.* Ныҡ асыуланыу, ярһыу. *Асыуҙан башы-күҙе тонған ул егеттең.* ▲ **башын-күҙен әйләндереү** ‘сильно увлечь *кого-либо*, вскружить голову кому-либо’. Ғашиҡ итеү. *Ул ҡыҙҙың башын-күҙен әйләндереү менәнме ни, үҙең өйләнергә уйлайһыңмы һуң?*

**БАШ-КҮҘ БУЛЫУ** *ҡ.* ‘присматривать, глядеть’. Күҙ һалыу, иғтибар итеү, ҡараштырыу. *Мал-тыуарға баш-күҙ булып торғоҙ.*

**БАШЛЫ-КҮҘЛЕ БУЛЫУ** *ҡ.* ‘стать семейным’**.** Ғаиләле булыу. *Улдары башлы-күҙле булды.* ■ *Кеше балалары һалдаттан ҡайтып, ары-бире әҙерәк ҡунаҡ булғас та, башлы-күҙле булыу яғын ҡарайҙар.* Ә. Вәли.

**БАШЛЫ-КҮҘЛЕ ИТЕҮ** *ҡ.* ‘женить; выдавать замуж’. Ғаиләле итеү. *Улымды башлы-күҙле иттек.* ■ *Сәлимәкәйҙе ун туғыҙы тулғас башлы-күҙле иттек.* Г. Ғайсарова-Ғиззәтуллина.

**БАШМА-БАШ** *р.* ‘дашь на дашь, обмен’. Бер-беренә бәрәбәр, өҫтәүһеҙ, түләүһеҙ. *Башма-баш алмашыу. Ҡоҙалар малдарын башма-баш алмаштылар.*

**БАШТАН-АҘАҠ** *р.* ҡар. **баштан-аяҡ 3.**

**БАШТАН-АХЫР** *р.* ҡар. **баштан-аяҡ 3.**

**БАШТАН-АЯҠ** *р.*

1) ‘с ног до головы’. Баштан аяҡҡа тиклем; тотош. *Баштан-аяҡҡа бысраныу.* ■ *Баштан-аяҡ хәрби кейемгә төрөнгәс, түбәм күккә тейҙе — минең бит ошо йәшемә етеп әле әҙәм рәтле кейем кейгәнем юҡ ине, старшинанан өйгә ҡайтып килергә рөхсәт һораным.* И. Абдуллин.

2) *перен.* ‘полностью, целиком, с головой’. *күсм.* Бөтә булмышы менән; бөтөнләй. *Баштан-аяҡ эшкә сумыу.* ■ *Айбулаттың уның ғүмеренә шул сей килелеге ҡалмаҫ инде. Эште эш булһын тип, әҙәм ыңғайына киләме ул, икенсе Сәлимә. Баштан-аяҡ әсәһе!* Һ. Дәүләтшина.

3) ‘от начала до конца, целиком, полностью’. Баштан аҙаҡҡа тиклем; тотош. *Хәбәрҙе баштан-аяҡ һөйләү. Тәкдимгә баштан-аяҡ риза булыу.*

**БАШТАН-ТАБАН** *р. диал.* ҡара **баштан-аяҡ.** *Баштан-табан кейендерҙе.*

**БАШ-ТИРЕ МЕНӘН** *р. диал.* 'всесторонне'. Бөтә яҡлап. *Баш-тире менән уйлау.*

**БАШ-ТОЯҠ** *и. йыйн.*

1) 'голова и ножки (мясной туши)'. Түшкәнең башы менән тояҡтары. *Баш-тояҡ бешереү.* ■ *Ауыл советына әле һайлау ваҡыты етмәүгә ҡарамайынса, ауыл байҙары, муллалар ярлыларға ваҡ-төйәк ашарлыҡ нәмәләр, биш-ун ҡаҙаҡ он, мал һуйғанда, эсәк-ҡарын, баш-тояҡ кеүек нәмәләр биргеләй башланылар.* Ғ. Дәүләтшин.

2) 'целиком, полностью'. Тулыһынса, тотош. *Башы-тояғы менән юғалды.*

**БЕЛЕНЕР-БЕЛЕНМӘҪ** *с.* 'чуть заметный, еле заметный'. Асыҡ булмаған, күренмәгән, һиҙелер-һиҙелмәҫ, тоноҡ. *Беленер-беленмәҫ һуҡмаҡ.* ■ *Билдәләнгән пунктҡа ун саҡрымдай ара ҡалғас, беҙҙе полктан ҡыуып еттеләр һәм икенсе участкаға тәғәйенләнеүебеҙ хаҡында хәбәр иттеләр, уң яҡҡа беленер-беленмәҫ кенә төҫмөрләнеп ятҡан сауҡалыҡта төндө үткәрергә ҡуштылар.* Ш. Биҡҡол.

**БЕЛЕНЕР-БЕЛЕНМӘҪ** *р.* 'чуть заметно, еле заметно'. Асыҡ булмаған, күренмәгән, һиҙелер-һиҙелмәҫ, тоноҡ. *Беленер-беленмәҫ кенә күренә.Ҡаты ҡарҙа ялан еренең үр ҡуянын, төлкөнө тотоу еңел түгел, сөнки улар бөтөнләйгә батмайҙар, хатта тырнаҡтарының әҙе лә беленер-беленмәҫ кенә ҡала.* С. Ильясов.

**БЕЛЕР-БЕЛМӘҪ** *р.* ‘не знающий толком’. Яҡшылап белмәгән. *Белер-белмәҫ көйө эшләү.*

**БЕЛӘ-КҮРӘ** *р.* ‘зная об этом, ведая’. Белә тороп, белгән көйө. *Белә-күрә килеү. Хәүефле юл икәнен белә-күрә тороп, урман аша китте.* ■ *Тик бер саҡта ла белә-күрә яҙыҡ эшкә бармағыҙ.* С. Шәрипов.

**БЕРСӘК-ҺӘРСӘК** *с.* ‘кусочки, лоскутный’. Киҫәк-миҫәк ҡырҡылған, өҙөлгән-йолҡолған. *Берсәк-һәрсәк тимер киҫәктәре. Икмәкте берсәк-һәрсәк килеш тотоп ашанылар. Берсәк-һәрсәк тире.*

**БЕРӘМ-ҺӘРӘМ** *р.* ‘по одному’. Унда-һанда берәү; һирәк-мирәк, айырым-айырым. *Берәм-һәрәм әйбер алыу. Айҙар баҙарға барған һайын берәм-һәрәм һауыт-һаба алып ҡайтты.* ■ *Ярҙан арыраҡ, әлеге муйыл, ерек ҡыуаҡлыҡтарынан ситтәрәк, берәм-һәрәм ялбыр ҡарт ҡайындар ултыра, уларҙың күләгәһе усаҡлы, тағанлы баяғы аҡлан уртаһында ята...* Т. Ғиниәтуллин

**БЕСӘЙ-СЫСҠАН** *и.* ‘название игры *досл.* кошка и мышка, кошки-мышки’. Балалар уйыны. Балалар түңәрәк яһап тора. Һынашмаҡ әйтеп бесәй менән сысҡан һайлана. Бесәй түңәрәктең тышҡы яғында, сысҡан эс яҡта тора. Балалар хор менән: “Бер, ике, өс, бесәй сысҡанды тот”, – тип ҡысҡыра һәм ҡулдарын өҫкә күтәрә. Бесәй түңәрәк буйлап сысҡанды баҫтыра һәм уйын сысҡанды тотҡанса дауам итә. Уйын шулай ҡабатлана. *Бесәй-сысҡан уйнау. Балалар күп ваҡытын бесәй-сысҡан уйнап үткәрҙе.* ■ *Ошо урында бесәй-сысҡан уйыны тамамланды.* Ш. Янбаев.

**БЕШЕРЕНЕҮ-ТӨШӨРӨНӨҮ** *и.* ‘готовка, готовить еду, стряпать *(разные блюда)*’. Аш-һыу әҙерләү. *Өләсәйем күберәк бешеренеү-төшөрөнөү менән мәшғүл булды.*

**БИҘӘНЕП-ТӨҘӘНЕП** *ҡ.* ‘накраситься, наряжаться’. Күҙгә, биткә буяҡ, кершән яғып, матурланыу; биҙәүестәр тағып, кейенеп-яһаныу. *Биҙәнеп-төҙәнеп клубҡа китте.* ■ *Ҡыҙ-ҡырҡын биҙәнеп-төҙәнеп алырға ла өлгөрҙө.* И. Ғиззәтуллин.

**БИРАН-ТАРАН КИЛТЕРЕҮ** *ҡ. ҡар. диал.* **пыран-заран килтереү.** ■ *Һинең иçеңдәлер, Петроградты Юденичтан ҡорғаған мәлдәрҙә, башҡорт бригадаһындағы ҡыҙылгвардеецтар, буржуйҙарҙың өйҙәренә йөрөп, биран-таран килтергән ваҡыттар?* Һ. Дәүләтшина.

**БИСӘ-СӘСӘ** *и. йыйн.* ‘женщины, бабы’. Бисәләр. ■ *Бөтәһе лә һуғышта … тик ҡарт-ҡоро, бала-саға, бисә-сәсә генә ҡалған.* Д. Юлтый. *Үҙе шунда уҡ кире ҡаҡты: «Бисә-сәсә алдында көлкөгә ҡалыуым бар...»* К. Мәргән.

**БИТ-ҠУЛ** *и. йыйн.* ‘лицо и руки’. Бит һәм ҡул. *Мөйөштә бит-ҡул йыуырға ҡомған менән һыу әҙерләнеп ҡуйылған.* ■ *Баян сумкаһын үләнгә ҡуйып, йылғаға төштө, бит-ҡулын сайҙы.* З. Ҡаҙаҡбаева.

**БИТ-ТӘН** *и. йыйн.* ‘все тело’. Тотош бит һәм тән. *Бит-тәненә ит ҡунған.*

**БОЛОН-ҠЫР** *и. йыйн.* ‘луга и поля’. *Тыуған илгә оҙаҡ ҡайтмай торһам, болон-ҡырҙарымды һағынып ҡайтам.*

**БОРҒОЛАНА-ҺЫРҒАЛАНА** *р. ҡар.* **борғоланып-һырғаланып**.

**БОРҒОЛАНЫП-ҺЫРҒАЛАНЫП** *р.*

1) ‘извилисто, извиваясь’. Урап-урап, төрлөсә, бер былай, бер тегеләй боролоп. *Был йылға борғоланып-һырғаланып аға.*

2) ‘кокетливо’. Күҙҙе-башты уйнатып, ҡыланып, ҡыйшанлап. *Ҡатын борғоланып-һырғаланып бейей башланы.*

3) ‘крутясь, вертясь возле кого-чего’. Кемдеңдер эргәһенән китмәй ярарға тырышып. *Директор алдында борғоланып-һырғаланып тик йөрөй.*

**БОРОЛМАЛЫ-ҺЫҒЫЛМАЛЫ** *с.* ‘вычурный, излишне затейливый, необычный *(о речи, языке)*’. Ҡатмарлы ғәҙәти булмаған. *Буролмалы-һығылмалы телмәрен тамамланы.*

**БОТАЙ-САТАЙ** *р. диал. ҡар*. **сатай-ботай**. ■ *Ултырғыс арттарында ботай-сатай күлдәктәр, костюмдар, юбкалар, таҫтамалдар, тағы әллә нәмәләр эленеп тора.* З. Биишева.

**БОТАҠЛЫ-САТАҠЛЫ** *с.* ‘сучковатый’. Ваҡ-ваҡ ботаҡлы *(ағасҡа ҡарата)*. ■ *Ҡапҡа урынында ботаҡлы-сатаҡлы бер кәртә генә.* М. Кәрим.

**БОТАҠ-САТАҠ** *и. йыйн.* ‘ветки и прутья’. Һынған, ҡырҡылған ваҡ ағас. *Ботаҡ-сатаҡ ағас. Утынлыҡта ботаҡ-сатаҡ ҡына ҡалған.* ■ *Ниһайәт, ағасты тейәп бөттөләр, ботаҡ-сатаҡтарын тураҡлап эре әрҙәнә араһына тығып-тыҡтырып ҡуйҙылар.* Р. Солтангәрәев. *Аяҡ аҫтындағы үләндәрҙе ҡыштырлатып, ботаҡ-сатаҡты эйелтеп-бәүелтеп, айыу килеп сыҡты.* Ғ. Хисамов.

**БОТ-САТ** *и. йыйн.* ‘область ляжек и паха’. Бот менән сат тирәһе. *Бот-сатты йыйып ултырыу.* ■ *Күлмәге йыртылып бөткән, бото сыйылған, бот-саты ҡанлы.* Р. Камал.

**БОТ-САТ КИЛЕҮ** *ҡ.* ‘раскорячиться’. Аяҡ-ҡулды тарбанлатыу. *Бот-сат килеп ҡолап китеү.*

**БӨГӨЛМӘЛЕ-ҺЫҒЫЛМАЛЫ** *с.*

1) ‘гибкий‘. Бөгөлөп-Һығылып торған. *Бөгөлмәле-һығылмалы бил.*

2) ‘коленчатый’. Бөгөлөп торған. *Бөгөлмәле-һығылмалы торба.*

**БӨГӨЛӨП-ҺЫҒЫЛЫП** *р.*

1) ‘нагибаться, разгибаться‘. Бер тегеләй, бер былай бөгөлөү; эйелеп-бөгөлөү. ■ *Көләс ҡыҙҙар йылғаларҙан бөгөлөп-һығылып һыу ала.* Халыҡ йырынан.

2) *перен.* ‘заискивая перед кем-то, льстя кому’. *күсм.* Кемдеңдер алдында ярамһаҡланып эйелгеләп йөрөү. *Хужалар алдында бөгөлөп-һығылып йөрөү.* ■ *Түбәнселек менән бөгөлөп-һығылып күреште.* И. Насыри.

**БӨГӨЛӘ-ҺЫҒЫЛА** *р. ҡар.* **бөгөлөп-һығылып**. *Бөгөлә-һығыла көлөү.* ■ *Ҡарсыҡ.. биленә тиклем бөгөлә-һығыла, беҙгә изге теләктәр теләп, оҙатып ҡала.* Д. Юлтый.

**БӨГӨН-ИРТӘН** *р.* ‘на днях’. Ошо көндәрҙә, яҡын арала. *Ҡунаҡтар бөгөн-иртән килергә торалар.* ■ *Ауыл һыртында боҫо боҫорап уйпат-уйпат ҡара ерҙәр көтөп ята – колхоз бөгөн-иртән яҙғы һабанға төшәсәк.* Й. Солтанов.

**БӨГӨНЛӨ-ИРТӘЛЕ** *р. ҡар.* **бөгөн-иртән**. *Бөгөнлө-иртәле эшкә саҡырырҙар ул.*

**БӨТМӘҪ-ТӨКӘНМӘҪ** *с.* ‘чересчур, много, нескончаемый, неисчерпаемый, неистощимый’. Иге-сиге юҡ, сиктән тыш күп; иҫәпһеҙ-хисапһыҙ. *Бөтмәҫ-төкәнмәҫ дәрт. Бөтмәҫ-төкәнмәҫ байлыҡ. Аҡназар, бөтмәҫ-төкәнмәҫ эшен ташлап, район үҙәгенә китте.* ■ *Гөлкәйгә Харис бабайҙың улар янында булыуы бөтмәҫ-төкәнмәҫ көс, эштә дәрт тыуҙыра торғайны.* Ғ. Аллаяров

**БУЙ-ҺЫН** *и. йыйн.* ‘фигура, стан, телосложение, внешность’. Кешенең тышҡы рәүеше; кәүҙә. *Буй-һын күркәмлеге. Яңы килгән кеше буй-һыны менән беҙҙең яҡ кешеһенә оҡшамаған.* ■ *Шул хәтле һылыуланырҙар икән. Ул буй-һын, ул күҙ-ҡаш.* Ғ. Хөсәйенов. *Буйы-һыны зифа булғас, кейеме ултырыр.* К. Мәргән.

**БУЛЫР-БУЛМАҪ** *с.*

1) ‘малозначительный, пустячный, пустяковый’. Тейешле самаға етмәгән; әҙ-мәҙ, барлы-юҡлы. *Булыр-булмаҫ йомош (пустячное дело). Булыр-булмаҫ ямғыр үткәнен көтөргә тура килде.*

2) ‘поверхностный’. Тейешле сифат кимәленә килеп бөтмәгән; йүнһеҙ. *Булыр-булмаҫ белем.* ■ *Күктән төшкән, фәнни тәжрибәләргә таянмаған, булыр-булмаҫ тәкдимдәр ғалимға төҫ түгел.* Т. Килмөхәмәтов.

**БҮЛЕП-ЯРЫП** *ҡ.* ‘разделить на части’. Өлөш, киҫәктәргә айырыу. *Бурысыңды бүлеп-ярып бирмә, тулыһынса килтер.*

**БҮРЕ-ҺӘРЕ** *и. йыйн.* ‘зверье’. Бүре һәм башҡа йыртҡыс йәнлек. *Бүре-һәре эҙе. Беҙҙең яҡ урмандарҙа бүре-һәре йыш осрай.* ■ *Иллә-мәгәр йоҡогоҙға баш булығыҙ, бүре-һәре йәбешмәһен, ат ҡарағы урлап ҡасмаһын! – тип көтөүселәргә сыбыртҡы һелкеп ҡала Ибраһим.* Й. Мостафин.

**БЫЛАЙ-АЛАЙ I** *с. диал.* ‘не очень; очень‘. Юҡлыҡ йәки һорау формаһындағы хәбәр булып, ниҙеңдер бер сифатын белдерә. *Былай-алай хәлдәр булғылай.* ■ *Былай-алай уның теле!* Т. Ғарипова.

**БЫЛАЙ-АЛАЙ II** *р. диал.* ‘настолько; не очень‘. Шул саҡлы. *Былай-алай көслө. Тауышы былай-алай ғына. Былай-алай ғына ҡысҡырмай.* ■ *Былай-алай һәйбәт унда!* Т. Ғарипова.

**БЫЛТЫРЛЫ-БЫЙЫЛЛЫ** *р.* ‘в последние два года‘. Һуңғы ике йыл эсендә. *Былтырлы-быйыллы ҡыш һыуыҡ булды.* ■ *Былтырлы-быйыллы тынғыһыҙыраҡ, һалымы-ние, ылауы-фәләне менән йонсоталар.* Ғ. Хөсәйенов. *Ҡалала эшләгән ҡыҙҙар былтырлы-быйыллы кейеп ҡайтҡыланылар ундай күлдәк-фәләнде, улар ни килделәр ҙә киттеләр.* Г. Яҡупова.

**БЫРАН-ЗАРАН.** *р. ҡар.* **пыран-заран**. ■ *Юл өҫтөндә ылау аттары, автомашиналар, немец һалдаттары быран-заран ҡыйралып ята.* С. Кулибай.

**БЫСРАҠ-ҺАСРАҠ** *с. диал.* ‘измазанный, загрязненный‘. Бысранып бөткән. *Табындағы бөтә ашамлыҡты бысраҡ-һасраҡ ҡулдары менән тотҡолап бөттө.*

**БӘЛӘ-ҠАЗА** *и. йыйн.* ‘бедствие, несчастье, беда’. Тормош именлеген боҙған, мал-мөлкәткә, һаулыҡ-

сәләмәтлеккә зыян килтергән ауыр хәл-ваҡиға. *Был йыл бәлә-ҡаза беҙҙе урап үтһен!* ■ *Цехҡа аяҡ баҫыу менән төрлө бәлә-ҡаза артта тороп ҡалған кеүек тойолдо.* Ә. Бикчәнтәев.

**БӘЛӘ-ҠАЗАҺЫҘ** *р.* ʻблагополучноʻ. *Имен-аман. Ҡышты бәлә-ҡазаһыҙ үткәрҙек.* ■ *Урманда ҡоро-һары утын йыйып тейәү бәлә-ҡазаһыҙ үтте.* Р. Байымов.

**БӘРСӘК-ҺӘРСӘК** *р.* ʻпо одному, в одиночкуʼ. Берәм-һәрәм. *Йыйылыштан кешеләр бәрсәк-һәрсәк таралыша башланы.*

**БӘРӘ-ҺӘРӘ** *с. диал. ҡар***. аңҡы-тиңке.**

**БӘХЕТ-ЫРЫҪ** *и. йыйн.*

1) ʻсчастьеʼ. Бөтә яҡтан теүәл булып, ысын ҡәнәғәтлек, шатлыҡ биргән яҡшы тормош хәле һәм хисе; ырыҫ. *Бәхет-ырыҫың ҡайтҡан.*

2) ʻуспех, удачаʼ. Эш, тормоштағы уңыш. *Бәхет-ырыҫ теләйем.*

**БӘХЕТ-ШАТЛЫҠ** *и. йыйн.* ʻсчастье и радостьʼ. Йәнгә кинәнес, рәхәтлек, күңелгә күтәренке рух биргән тойғо; ҡыуаныс. ■ *Шул кеше тирәһендә беҙҙең барлыҡ бәхет-шатлыҡтарыбыҙ, ҡайғы-хәсрәттәребеҙ, көндәлек мәшәҡәттәребеҙ, өмөт-хыялдарыбыҙ әйләнә – донъябыҙ әйләнә.* М. Кәрим. *Урал-тау уның тыуған төйәге, халҡының ҡайғылары шунда һеңгән, хыял-өмөттәре шунан күккә ашҡан, бәхет-шатлыҡтары шунда сәскә атҡан.* А. Мағазов.

# В

**ВАЙЫМҺЫҘ-ҒӘМҺЕҘ** *с.* ‘безразличный, беззаботный, беспечный’. Уйһыҙ, борсолоуһыҙ. *Бала-саҡ – вайымһыҙ-ғәмһеҙ саҡ.*

**ВАҠЛАП-КҮМӘРТӘЛӘП ҺАТЫУ** *ҡ.* ‘продавать оптом и в розницу’. Нимәнелер берәмләп йәки күп итеп һатыу. *Гурьев баҙарында ваҡлап-күмәртәләп сәй һаталар.*

**ВАҠ-СЫБЫР** *с. йыйн.* ‘мелкий’. Ваҡ-ваҡ, бәләкәй-бәләкәй. *Ваҡ-сыбыр балыҡ Дим тулы.* ■ *Борон ни, ер-һыу иркенерәк саҡта, ваҡ-сыбыр мал аҫрап, йәйге эш ваҡытында ике-өс тәкә һуйып, ит ашап, һурпа эсеп эшләй торғайныҡ.* Һ. Дәүләтшина.

**ВАҠ-ТӨЙӘК I** *и. йыйн.*

‘1) ‘мелочь, пустяк’. Әһәмиәтһеҙ эш-хәл. *Ваҡ-төйәккә иғтибар итмә.* ■ *[Юлдыбикә әбей:] ҡартым бахыр, йомош-фәлән бирәһең, ҡунаҡ саҡырһаң, ниңә саҡыраһың, тип, кеше һымаҡ, ваҡ-төйәкте күреп тә барманы.* Т. Хәйбуллин. *Ул [Айбулат] был көндө бөтә ваҡ-төйәктәре менән бөртөкләп яңынан уйлап сыға.* Һ. Дәүләтшина.

2) ‘безделица’. Ҡиммәте булмаған нәмә. *Ваҡ-төйәккә аҡса түкмә!*

3) *диал.* ‘постельные принадлежности’. Урын-кәрәк яраҡтары. *Аш бүлмәһенә ваҡ-төйәк алырға Өфөгә барҙыҡ.*

**ВАҠ-ТӨЙӘК II** *с. йыйн.*

1) ‘мелкий, маленький *(о посуде, утвари, домашних вещах и т.д.)*’. Күләме яғынан сағыштырмаса бәләкәй бөтә кәрәк-

ераҡ (һауыт-һаба, энә-еп һ.б.). ■ *Таш өҫтөндә туҫтаҡ, сәйгүн, котелок һәм башҡа ваҡ-төйәк нәмә күренә.* Ш. Насыров.

2) ‘пустяковый, незначительный, несущественный’. *күсм.* Әһәмиәте бәләкәй булған (эш-хәл тураһында). *Килен офиста ваҡ-төйәк эштәр башҡара.* ■ *Шуға ҡарамаҫтан, Әшрәф кәстрүлдәр ямаған, электр үтектәрен төҙәткән һәм башҡа шундай ваҡ-төйәк хеҙмәт өсөн бер тин аҡса алманы.* И. Абдуллин.

**ВАҠЫТЛЫ-ВАҠЫТҺЫҘ** *р.* ‘не вовремя, некстати’. Кәрәккән-кәрәкмәгән ваҡытта. *Ваҡытлы-ваҡытһыҙ еңгәләр килеп инде.* ■ *Ваҡытлы-ваҡытһыҙ гөлдәрҙе күсереп ултыртып аҙаплана торғас, берәүһен ҡоротто.* Д. Исламов.

**ВАТА-ЕМЕРӘ** *р.*

1) ‘разрушая, разрушив’. Пыран-заран килтереү, ҡыйратыу, боҙоп, юҡҡа сығарып, емереп. ■ *Быуаһын йырып ҡотороп аҡҡан йылға кеүек, был ут юлда осраған бөтә нәмәне вата-емерә көнсығышҡа табан ынтылды.* Р. Өмөтбаев.

2) *перен.* ‘ломано, коряво (о языке, разговоре, произношении)’. *күсм.* Телде насар белеү сәбәпле һүҙҙәрҙе боҙоп һөйләү. ■ *Ҡыҙ вата-емерә булһа ла үҙ телендә бер аҙ һупалай ине.* Д. Исламов.

**ВАТЫП-ЕМЕРЕП** *р.* ҡар. **вата-емерә 1, 2.**

1) ■ *Улай ғына ла түгел, ундағы боласылар ломдар, балталар менән ишекте ҡайырып, тәҙрәләрҙе ватып-емереп, эскә үтте.* В. Исхаҡов.

2) ■ *Был хәбәрҙе Зөфәргә русса ватып-емереп һупалаған тимер юл хеҙмәткәре һөйләне.* Ә. Хәкимов.

**ВАТЫП-ҠЫРЫП** *р. ҡар.* **вата-емерә 1,2.**

1) ■ *Шул арҡала туй мәжлесендә ғауға ҡуптарып, өйҙәге һауыт-һабаны, йорт йыһаздарын ватып-ҡырып бөткән...* Х. Зарипов.

2) ■ *Ватып-ҡырып немец һүҙҙәрен ҡабатлайҙар.* Ә. Бикчәнтәев.

**ВАТА-ҠЫРА** *р.* ҡар. **вата-емерә 1,2.**

**ВАТЫП-ҺЫНДЫРЫП** *р. ҡар.* **вата-емерә 1, 2.**

1) *Клубта бөтә мебелде ватып-һындырып бөткәндәр*.

2) ■ *Сөнәғәт руссаны ватып-һындырып һыйырҙарҙы һуң алып ҡайтыуҙың сәбәбен әйтергә тырышты: «День жаркий пара караула ләжит, түлкә вешер пара трава ашайт.* Ж. Кейекбаев.

**ВАТЫҠ-ЕМЕРЕК I** *и. йыйн.* 'лом, обломки'. Ватылған, емерелгән нәмәләр, уларҙың киҫәк, ярсыҡтары. *Ватыҡ-емеректе төҙәтергә була, ә күңелде төҙәтеүе ауыр.*

**ВАТЫҠ-ЕМЕРЕК II** *с. йыйн.* 'разбитый, разрушенный'. Ватылған, емерелгән, ҡыйратылған. *Ватыҡ-емерек өйҙәр бигерәк күп.*

**ВАТЫҠ-ҺЫНЫҠ** *с. йыйн. ҡар.* **ватыҡ-емерек II.**

**ВӘҒӘЗ-НӘСИХӘТ** *и. ҡар*. **өгөт-нәсихәт.**

## Г

**ГӨЛ-БАҠСА** *и. йыйн.* 'цветочный сад'. Гөл баҡсаһы. ■ *[Һәүбән-Нәркәскә:] Алтын һарай, гөл-баҡсаң күңелем һыяр ер түгел, Уралыма тиң түгел.* «Аҡбуҙат» эпосынан. *Тирәһендә гөл-баҡса, ҡоштар һайрай, шишмәләр сылтырай...*Р. Камал.

**ГӨЛ-СӘСКӘ** *и. йыйн.* ‘разные цветы’. Төрлө гөл һәм сәскәләр. ■ *Йәйем минең гөлдәр баҡсаһы. Ал розалар, баҙыян гөл-сәскәләр.* Ғ. Амантай.

**ГӨЛ-СӘСӘК** *и. йыйн.* ‘разные цветы’. Төрлө гөл һәм сәскәләр. ■ *Кешенең һуңғы өмөтөн, һуңғы таянысын, атайҙың аҙаҡҡы гөл-сәсәген тартып алмаһағыҙ!* Р. Камал.

**ГӘЗИТ-ЖУРНАЛ** *и. йыйн.* ‘газеты и журналы’. Ваҡытлы матбуғат, гәзиттәр һәм журналдар. *Әсәйемдәр һәр саҡ гәзит-журналға яҙылды.*

**ГӘҮҺӘР-ЯҠУТ** *и. йыйн.*

1) ‘драгоценные камни’. Иң ҡаты, иң ныҡ ялтырап торған гәүһәр, яҡут һ.б. аҫыл таштар. ■ *Был ҡала халҡы күнәк-күнәк алтын-көмөш, гәүһәр-яҡут бүләк итеп, Аҡъял батырҙы ер өҫтөнә сыға торған тишек ауыҙына саҡлы оҙатып ҡуйған, ти.* Әкиәттән.

2) *перен.* ‘красивый’. *күсм.* Матур, затлы (сағыштырыу, һүрәтләү сараһы). ■ *Ҡыҙыл алма эйәгең, саф көмөштәй һөйләүең, гәүһәр-яҡут беләгең, күрер көнөм булырмы?* Халыҡ ижадынан.

## Ғ

**ҒАЛИМ-ҒӨЛӘМӘ** *и. йыйн.* ‘ученые, ученый мир’. Ғалимдар, ғилем эйәләре, фән кешеләре. ■ *[Биби ҡарсыҡ:] Сабыр иткән мораҙына еткән, ашығыу шайтан эше, … тип әйткән ғалим-ғөләмәләр.* М. Ғафури.

**ҒИШ-ҒИШРӘТ** [ғәр.] *и. йыйн.*

1) ʻпиршество, пирʼ. Һыйлы күңел асыу, уйын-көлкө, кәйеф-сафа; типтереш. ■ *Халыҡтың хәленә баҡһаң, аяныс, мәңге көлмәҫлек. Берәүҙәр типтерә, ғүмер итә ғиш-ғишрәттә.* М. Ғафури.

2) *перен.* ʻраспутная жизнь, распутные отношения, развратʼ. *күсм.* Эскеле аҙғын-мөнәсәбәт; уйнаш. ■ *[Бай малайы] бер нисә ғиш-ғишрәт менән шөғөлләнгән дә, ҡыҙҙы ҡарсыҡ ихтыярына тапшырып, күҙҙән юғалған.* С. Ҡудаш.

**ҒИШЫҠ-ҒӘШРӘТ** *и. йыйн.* ʻраспутная жизнь, развратʼ. Кәйеф-сафа ҡороу, ғишыҡ ҡатыш күңел асыу. ■ *Батша юлға сығып киткәс тә, һеңлеһе егетте төрмәнән сығарып, уның менән ғишыҡ-ғәшрәткә керешә, ти.* Әкиәттән.

**ҒИШЫҠ-МӨХӘББӘТ** *и. йыйн.* ʻ*любовь*ʼ. Ғашиҡ һәм мөхәббәт.

**ҒИШЫҠ-МӘҒШУҠ** [ғәр.] *и. йыйн.* ʻ*любовь*ʼ. Мөхәббәт. ■ *Ғашиҡтар ҡауыша алмайҙар. Юғиһә, "ғишыҡ-мәғшуҡ" тип тә әйтмәҫтәр ине.* М. Ғафури.

**ҒӨРӨФ-ҒӘҘӘТ** [ғәр.] *и. йыйн.* ʻобычаи и нравы, традицииʼ. Һәр халыҡтың үҙенә генә хас булған, ҡағиҙәгә әйләнгән тарихи ғөрөф һәм ғәҙәттәр. ■ *Башҡорт булыу өсөн уның һүҙен генә белеү етмәй, ғөрөф-ғәҙәтен, йолаһын белергә кәрәк.* С. Агиш. *Һәр яңы быуынға иҫке быуындан күнелгән ғөрөф-ғәҙәттәр, ыҙан-йолалар, әҙер йорт-ҡорамалдар, байтаҡ байлыҡтар ҡала.* Ғ. Хөсәйенов.

**ҒӨРӨФ-ЙОЛА** *и. йыйн. ҡар.* **ғөрөф-ғәҙәт**. ■ *Новалихин башҡорт түрәләренә күп ҡатнашҡан. Күп мәжлестә булған. Был*

*аймаҡтың бөтә ғәҙәт-йолаһын белә.* Т. Хәйбуллин. *“Эйелгән башты ҡылыс сапмаҫ” тигәндәр боронғолар. Ныязғол менән килешкәнең яҡшы булыр.... Ғәҙәт-йоланы, ағай-энелекте онотмай.* Һ. Дәүләтшина.

**ҒӘҘӘТ-ХОЛОҠ** *и. йыйн.* ‘нрав’. Кешенең үҙен тотошо, тәбиғәте. *Ғәҙәт-холоҡо насар.*

**ҒӘЙШӘ-ФАТИМА** *и. дин.* ‘святые женщины *(покровительницы женщин, детей, больных, жена и дочь пророка Мухаммеда)*’. Мосолман динендә Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең ҡатыны һәм ҡыҙының исеме; ауырыуҙы, баланы, ҡатын-ҡыҙҙы ҡурсалаусылар. ■ *Минең ҡулым түгел, Ғәйшә-Фатима ҡулы.* Им-томдан.

**ҒӘРИП-ҒӨРӘБӘ** [ғәр.] *и. йыйн.*

1) ‘инвалиды, калеки’. Зәғиф, ғәрип кешеләр. ■ *[Һуғышҡа] киткән ирҙәрҙең күбеһенән “похоронный” килде, ҡайтҡандары – ғәрип-ғөрәбә.* Х. Ғиләжев.

2) ‘странность, необычность, причудливость’. Сәйерлек, ғәжәплек.

**ҒУЖ-УБЫР** *и.* ‘прожорливый, обжорливый’. Үтә ныҡ убыр. ■ *[Орлов:] Йыуан әҙәм заты ғуж-убыр була.* С. Кулибай.

## Д

**ДАҒЫР-ДОҒОР** *оҡш.* ‘подражание повторяющемуся громыханию’. Ҡабат-ҡабат дағыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ҡапҡа шулай дағыр-доғор килә ул.* ■ *Радионы икенсе тулҡынға күсереп, ул Өфө тапшырыуын эҙләне, ләкин төрлө*

*дағыр-доғор тауыштарҙан, һыҙғырыуҙан башҡаға юлыҡманы.* Р. Өмөтбаев.

**ДАҒЫР-ДОҒОР ИТЕҮ (КИЛЕҮ)** *ҡ.* ʻгромыхать, тарахтетьʼ. Ҡаты нәмәләрҙең тауыш сығарыуы. *Дағыр-доғор иткән тауыш.* ■ *Айсыуаҡ, дағыр-доғор килеп, күтәрмәнән түбән төштө.* Т. Килмөхәмәтов.

**ДАМБЫР-ДОМБОР** *оҡш.* ʻподражание повторяющимся звукам при ударах о полый, твердый предмет: бом-бомʼ. Ҡаты нәмәләрҙең тауыш сығарыуы. ■ *Иртәнге тынлыҡты боҙоп дамбыр-домбор ҡағылған барабан тауышына ла, һалдаттарҙы ашығыс теҙеп честь биреүсе офицерға ла иғтибар итмәйенсә, кенәз Григорий Семенович юлын дауам итте.* Я. Хамматов.

**ДАМБЫР-ДОМБОР КИЛЕҮ** *ҡ.* ʻгромыхать, греметь, барабанитьʼ. Ҡаты нәмәләрҙең тауыш сығарыуы. *Барабандар дамбыр-домбор килә.*

**ДАН-ХӨРМӘТ** *и. йыйн.* ʻслава и уважениеʼ. Дан һәм хөрмәт. ■ *Күпселегендә Яйыҡ, Һаҡмар буйы казачийҙарынан торған һәм Иштуған, Әхәт, Айһылыу кеүек башҡа милләт вәкилдәре лә күп булған был отряд быйаса Орск, Ырымбур далаларында аҡ казактарға, дутовсыларға ҡаршы һуғышта сынығып, аңғармаҫтан оҫта, ҡыйыу һөжүмдәр менән күп уңыштарға өлгәшеп, халыҡ алдында күптән инде дан-хөрмәт ҡаҙанғайны, Иҫәнбәттә Илсеғол дружинасыларын төнгө ҡараҡ кеүек килеп баҫҡан Һатыбал бандаһын да, волость үҙәгендә ҡоторонған Федька Рябой бандаһын да ул шулай көтмәгәндә килеп тар-мар итте.* З. Биишева.

**ДАН-ШӨҺРӘТ** *и. йыйн.* ‘слава и известность’. Дан һәм шөһрәт. ■ *Дан-шөһрәт ул шундай бейек ҡая-болоттарға йәйгән ҡоласын: йылан уға тик шыуып менә, бел талпынып менә ыласын!* Р. Ғарипов.

**ДАҢҒЫР-ДОҢҒОР ИТЕҮ (КИЛЕҮ)** *ҡ.* ‘грохотать’. Даңғыр-доңғор тауыш сығарыу. *Даңғыр-доңғор тауыштар сығарыу.* ■ *Күк ярылды, даңғыр-доңғор итте, Юҡ, асылып күктең күк күмәсе, Изге заттар шунан уҡытырға булды Аждаһаның, тим, арт һабағын.* Эпостан.

**ДАҢ-ДОҢ** *оҡш.* ‘подражание глухому звону, издаваемому при ударе по металлу’. Ҡабат-ҡабат даң иткән тауышты белдергән һүҙ. ■ *Ҡанлы ҡулдар ярыҡ барабанға, ал-ял белмәй, даң-доң ҡағалар.* Ш. Биҡҡол.

**ДАҢҠ-ДОҢҠ** *оҡш.* ‘подражание сильному звуку, возникающему при ударах чем-либо твердым о металлический предмет’. Ҡабат-ҡабат даңҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Йыраҡтан даңҡ-доңҡ тауыш сығаралар.*

**ДАҢҠ-ДОҢҠ ИТЕҮ** *ҡ.* ‘вызывать гулкий звон’. Даңҡ-доңҡ иткән тауыштар сығарыу, даңҡылдатыу. *Ишек алдында балалар даңҡ-доңҡ килеп уйнайҙар.*

**ДАҢҠ-ДОҢҠ КИЛЕҮ** *ҡ.* ‘издавать гулкий звон’. Даңҡ-доңҡ иткән тауыштар сығарыу. *Ҡапҡа елгә даңҡ-доңҡ килә.*

**ДАРҪ-ДОРҪ** *оҡш.*

1) ‘подражание повторяющимся отрывистым звукам: бах, трах’. Ҡабат-ҡабат дарҫ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Дарҫ-дорҫ тауыштар ишетелә.* ■ *Әрһеҙлеккә һалышҡан Азамат*

*дарç-дорç баçып кире килеп ингәс кенә, ҡатыны ҡосағынан көскә айырылып, Ҡаһым артына боролоп ҡараны.* Я. Хамматов.

2) ʻозначает сильное сердцебиениеʼ. Йөрәктең көслө, ҡаты һуғыуын белдергән һүҙ. *Ҡурҡышымдан йөрәгем дарç-дорç тибә башланы.* ■ *Беҙ тын да алмай баçып торабыҙ, йөрәктәр дарç-дорç тибә.* Р. Ханнанов.

**ДАРÇ-ДОРÇ БУЛЫУ** *ҡ.* ʻсильно трещатьʼ. Ҡабат-ҡабат дарç иткән тауыш сығыу. *Дарç-дорç булалар.*

**ДАРÇ-ДОРÇ ИТЕҮ** *ҡ.* ʻиздавать сильный трескʼ. Ҡабат-ҡабат дарçлаған тауыш сығарыу. *Дарç-дорç иткән тауыштар сыға.*

**ДАУА-ДАРМАН** *и. йыйн.* ʻлекарства, разные целебные средстваʼ. Төрлө дауалау саралары. *Күрше ауылдан әбейем әсәйемде төрлөсә дауалап ҡараны, бер нисндәй ҙә дауа-дарман ярамады.* ■ *Кешеләр кәңәшен тотоп, уларҙы ат ҡылы менән дә быуып ҡарай, тик бер ниндәй дауа-дарман ярҙам итмәй.* М. Ямалетдинов.

**ДАУА-ДАРМАН ИТЕҮ** *ҡ.* ʻлечитьʼ. Төрлө дауалау саралары менән дауалау, дауа биреү. ■ *[Табип:] минең бер хәжәтем бар, әнә ошоно эшләһәгеҙ генә ҡыҙығыҙҙы дауа-дарман итәм, сәләмәтләндерәм.* Әкиәттән.

**ДАҺЫР-ДОҺОР** *оҡш.* ʻподражание звуку повторяющегося грохотаʼ. Ҡабат-ҡабат даһыр иткән тауыш. ■ *Ырғаҡ ысҡындымы, бүрәнәләр даһыр-доһор төшәләр.* Ж. Кейекбаев. *Даһыр-доһор, шатыр-шотор, Шау-шыу көсәйә бара.* Эпостан.

**ДАҺЫР-ДОҺОР ИТЕҮ** *окш.* ‘грохотать’. Ҡабат-ҡабат даһыр иткән тауыш сығарыу. *Шул тракторы менән көнө-төнө даһыр-доһор йөрөй.*

**ДАҺЫР-ДОҺОР КИЛЕҮ** *окш.* ‘грохотать’. Ҡабат-ҡабат даһыр иткән тауыш сығарыу. *Күрше йоҡламай даһыр-доһор килде.*

**ДИН-ШӘРИҒӘТ** *и. йыйн.* ‘религия и шариат’. Дин һәм шәриғәт закондары, йолалары. ■ *Совет власына, коммунистарға, колхозға ҡаршы аяҡланып, был донъяла эшләгән ялғандарыңды, бысраҡтарыңды дин-шәриғәт алдында йыумаҡ булаһыңмы?* М. Тажи.

**ДИН-ХӨРӘФӘТ** *и. йыйн.* ‘религия и суеверие’. Дин һәм төрлө ышаныу күренеше. ■ *Хәйер, был илдең дин-хөрәфәттән башы әйләнеп бөткән, мосолман халҡы дәрүиштәрҙе изге һанай, барынса тигенгә лә ашатып-эсереп ебәрә.* Ә. Хәкимов.

**ДӨБӨР-ДАБЫР** *окш.* ‘шумно’. Төрлөсә дөбөр иткән тауышты белдергән һүҙ. ■ *Аҡъял батыр дөбөр-дабыр ер аҫтына төшөп китеп, шунда тороп ҡалған.* Әкиәттән.

**ДӨБӨР-ШАТЫР** *окш.*

1) ‘подражание беспорядочному грохоту, громыханию; грохотать, громыхать’. Көслө дөбөрләгән, шатырлаған төрлө тауыштарҙы белдергән һүҙ. ■ *Был кеҫәртке ҡош шулай ер өҫтөнә атылып сығыуға, ер тишеге яңынан ябылды ла, дөбөр-шатыр килгән тауыш ишетелеп ҡалды.* Эпостан. *Был төндө лә шулай: сатыр-сотор йәшен йәшнәне, дөбөр-шатыр күк күкрәне һәм таң атҡансы ҡойоп ямғыр яуҙы, ә иртән… йәнә йылмайып ҡояш сыҡты.* И. Абдуллин.

2) *перен.* ‘с шумом, с грохотом’. Тауышланып йөрөү. *Дөбөр-шатыр йөрөү. Дөбөр-шатыр килеү.* ■ *Бүлмәләге малайҙар иртәнге зарядкаға дөбөр-шатыр әҙерләнеп маташалар ине.* Р. Байбулатов.

3) *перен.* ‘быстро, ловко что-то сделать’. *күсм.* Ҡыҙыу, етеҙ эш-хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Дөбөр-шатыр эшләү.* ■ *Ирен өлтөрләп ҡаршы алды Фатима, дөбөр-шатыр мунса яғып ташланы.* Б. Бикбай. *Бүлмәләге малайҙар иртәнге зарядкаға дөбөр-шатыр әҙерләнеп маташалар ине.* Р. Байбулатов.

**ДӨҺӨР-ДАҺЫР** *оҡш.* ‘подражание многократному продолжительному грохоту или громовым раскатам’. Дөһөр һәм даһыр иткән төрлө тауыштарҙы белдергән һүҙ. *Дөһөр-даһыр тауыштар сығарып, ямғыр килә.* ■ *Шәкерттәр уның килеүен мәҙрәсәнең тәҙрәһенән күреп ҡалғас, шәк-шәкәр уйнауҙарын ташлап, дөһөр-даһыр урындарына ултырҙылар.* Ж. Кейекбаев.

**ДӨҺӨР-ШАТЫР** *оҡш.* *ҡар.* **дөбөр-шатыр.** ■ *Үс иткәндәй, тап шул Мораҙым үренә етер саҡта ғына, әллә ҡайҙан болото сурайып килеп сыға ла дөһөр-шатыр йәшенен уйнатып, яуа ла башлай.* Ш. Янбаев. *Аласыҡта ҡаҙан аҫтына ут яғып йөрөгән Разыя инәй, ҡапҡаны дөһөр-шатыр асып, быҙауҙар инеп киләме, тип уйлағайны.* Ш. Янбаев.

**ДУҪ-ДОШМАН** *и. йыйн.* ‘товарищ и враг; разные люди’. Дуҫ һәм дуҫ булмаған кешеләр; төрлө халыҡ. ■ *[Әсәһе – Ғәзизәгә:] Тыңла атаңдың һүҙен, дуҫ-дошманы араһында ҡыҙартма инде йөҙөн!* Бәйеттән.

**ДУҪ-ИШ** *и. йыйн* ‘друзья и товарищи; друзья и приятели’. Дуҫтар, иптәштәр, яҡын тиңдәштәр. ■ *Айҙар был*

*еңгәһе Сәлимәне үҙенә нисек алыуы тураһында дуҫ-иштәре араһында һәрвакыт маһайып, купырайып, ошондай әңгәмә һөйләй торғайны: “Мин Сәлимә еңгәмде кыйғас кара каштары өсөн генә, тол булыуына карамай, мәһәренә кырк һум биреп, түйына тана һуйып, ҙурлап алдым”.* Һ. Дәүләтшина. *Дуҫ-иш кәрәк түгел ғәйбәткә, кәрәк ауыр йә шат сәғәткә.* С. Кулибай.

**ДЫУ-ҒӘЛӘМӘТ** *и.* ‘разные громкие голоса; шум, гвалт’. Төрлө шау-шыу, шау-гөр, күмәк шаулаған тауыштар; дыу-әкәмәт. *Төнө буйы йәштәр дыу-ғәләмәт уйнанылар.*

**ДЫУ-ҒӘЛӘМӘТ БУЛЫУ** *к.* ‘шуметь’. Төрлө шау-шыу, шау-гөр, күмәк тауыштар сығарыу, күмәкләшеп шаулашыу. *Эй, бынау күршеләр, туй үткәрәм тип, дыу-ғәләмәт булдылар.*

**ДЫУ-ҒӘЛӘМӘТ КИЛЕҮ** *к. кар.* **дыу-ғәләмәт булыу.** ■ *Хосе, ни эшләргә, кайҙа барып һуғылырға белмәй, лагерь буйлап дыу-ғәләмәт килеп йөрөнө.* Ә. Бикчәнтәев.

**ДЫУ-ӘКӘМӘТ** *и. йыйн. кар.* **дыу-ғәләмәт**. ■ *Алексей шаян, шат егет ине, … гитара уйнап, бейетеп, йырлатып, дыу-әкәмәт итеп бөтә торғайны.* З. Биишева. *Күреп бөгөн шундай хәлде хайран калдым: Егет-елән – дыу-әкәмәт, яһай байрам.* Р. Назаров.

**ДӘРТ-ДАРМАН** *и. йыйн.* ‘пыл, душевный подъем’. ■ *Картайған кеше йәшлектән, сәләмәтлектән, дәрт-дармандан яҙа бара.* Ғ. Хөсәйенов.

**ДӘРТ-ТЕЛӘК** *и. йыйн.* ‘желание, охота, пыл, душевный подъем’. Эшкә, тормошка ашкыныу тойғоһо, рухи

күтәренкелек, ҙур теләк, илһам. ■ *Барса халыҡ дәрт-теләк эсендә…* М. Өмөтбаев.

## Е

**ЕБӘК-ҠАМҠА** *и. йыйн.* ‘шелк и камка, драгоценная вещь’. Төрлө затлы тауар. ■ *Батшаның кейгәне ебәк-ҡамҡа, ашағаны бал да май, ти.* Әкиәттән.

**ЕГЕТ-ЕЛКЕНСӘК** *и. йыйн. ҡар.* **егет-елән**. ■ *Шәмбе көн ауылға ҡайтҡан егет-елкенсәк байтаҡ ине.* Р. Байбулатов. *Егет-елкенсәк уларҙың артынан ташланды.* Б. Рафиҡов.

**ЕГЕТ-ЕЛӘН** *и. йыйн.* ‘парни, юноши, молодые люди’. Егеттәр. ■ *Егет-елән үҙенсә ыҫпайлана, өҫ-баш яңырта, берәй һөнәр-йүн хәстәрләй: ҡыҙҙар күҙенә эләгер, күңелдәрен арбар өсөн.* Ғ. Хөсәйенов. *Бәхет яулап сыҡҡан егет-елән, елкендергән ярлы-япандар. Сыҙамаған улар хурлыҡтарға, баяр, фабриканттар таныуға.* С. Кулибай.

**ЕГЕТ-ЕҢГӘ** *и. этн. йыйн.* ‘парни и снохи – участники башкирского обряда сватания невесты’. Ҡыҙ биреү йолаһында ҡыҙҙы йәшереүсе еңгәләр һәм егеттәр. *Егет-еңгә дыу килеп ҡыҙҙы тартҡылаша.*

**ЕГЕТ-УЛАҠ** *и. йыйн.* ‘парни, юноши, молодые люди’. Егеттәр, үҫмер малайҙар. ■ *Урамдан егет-улаҡ өҙөр хәл юҡ, күҙең-ҡашың аҡшанлап һүҙ ҡуша башлайһың.* Һ. Дәүләтшина. *Үҙе оло ла булғас, егет-улаҡ барыһы ла еңгә тип һүҙ ҡуша, улар араһында үҙебеҙҙең ғәҙәт бит, уйнатып, әңгәмәләгәндәре лә була.* Т. Хәйбуллин.

**ЕГЕТ-УЛАН** *и. йыйн.* ‘парни, юноши, молодые люди’. Егеттәр, үҫмер малайҙар. ■ *Егет-улан барыһы ат менеп, бүре һуғырға сыҡҡан, ти.* Әкиәттән.

**ЕКЕРЕНЕҮ-БАҠЫРЫНЫУ** *р. һөйл.* ‘кричать со злобой, орать’. Көслө итеп ҡысҡырыныу, асыуланып ныҡ әрләп ҡысҡырыныу. *Екеренеп-баҡырынып һөйләшеү.*

**ЕЛ-БУРАН** *и. йыйн.* ‘ветер и метель, буря, пурга’. Ел менән буран бергә. *Февраль – ел-буран ваҡыты.* ■ *Ут өйөрмәһе ел-буран туҙҙыра.* И. Ғиззәтуллин. *Һәр береһенән бысранмай ҡоро сыҡҡандар, әгәр тегеләй-былай эш сыҡһа, Хәйбрахман бай – улар өсөн ел-буран ебәрмәй торған таш стена: ул таш стена артында бөтә ялаҡ ауыҙҙарҙың тарихтары һаҡлана…*Д. Юлтый.

▲ *ел-буран уйнатыу* ‘бушевать’. Ҡотороу, енләнеү, нимәгәлер асыуланып әрләшеү. *Еңгә килеп, ел-буран уйнатып китте.*

**ЕЛ-ДАУЫЛ** *и. йыйн.*

1) ‘ветер и ураган’. Бик көслө ел. ■ *Төн урталары еткәс, ҡапыл ел-дауыл ҡуҙғалып, ағас шаулай башлаған, ҡая таштары гөрһөлдәп ауған, күк йөҙөн ҡап-ҡара болот ҡаплаған, ти.* Әкиәттән.

2) *перен.* ‘скандал, ссора’. *күсм.* Оло талаш, ғауға. ■ *Өйҙә уларҙы [кешеләрҙе] ел-дауыл, күҙ йәштәре көтә ине.* Х. Ғиләжев.

**ЕЛ-КҮҘ** *и. йыйн.* ‘разные заболевания, различные болезни’. Төрлө ауырыу, сир-зәхмәт. *Балаңа ел-күҙ эләккән.*

**ЕЛӘК-ЕМЕШ** *и. йыйн.* 'ягоды и плоды, фрукты'. Һәр төрлө еләк һәм емештәр. *Быйыл еләк-емеш күп булды.* ■ *Еләк-емешенең иҫәбе-хисабы юҡ.* Ғ. Хөсәйенов.

**ЕЛӘ-САБА** *р.* 'спешно мчась'. Бик етеҙ, шәп сабып. ■ *Елә-саба бара күк юрға.* Халыҡ йырынан.

**ЕЛӘ-СҮГӘ** *р. ҡар.* **елә-сүкә.**

**ЕЛӘ-СҮКӘ** *р.* 'меняя темп в движении, убыстряя шаг'. Бер шәбәйеп, бер яйлап. ■ *Янбайҙың аты …тауҙы елә-сүкә саҡ барып сыҡҡан.* «Ҡуңыр буға».

**ЕЛ-ЯМҒЫР** *и. йыйн.* 'ветер и дождь; ненастье'. Ел һәм ямғыр. ■ *Көҙгө бысраҡ көндәр, ел-ямғыр, ҡырҙар иңләп һибә һалҡын тамсылар.* Д. Юлтый.

▲ **ел-ямғырға эләгеү** (йәки **ел-ямғыр тейеү)** 'оказаться в трудном, тяжелом положении'. Ауыр хәлгә ҡалыу, ауырлыҡ тейеү. *Был быуынға ел-ямғыр эләкте.*

**ЕМЕРӘ-ВАТА** *р. ҡар.* **вата-емерә.**

**ЕМЕШ-ЕЛӘК** *и. йыйн.* 'фрукты и ягоды'. Һәр төрлө еләк һәм емештәр. ■ *Йәйен бабай балыҡ тотҡан, әбей емеш-еләк йыйған.* Әкиәттән.

**ЕМЕШ-ЙӘШЕЛСӘ** *и. йыйн.* 'фрукты и овощи'. Һәр төрлө емеш һәм йәшелсәләр. *Баҙар емеш-йәшелсә менән тулған.* ■ *Емеш-йәшелсә, ашай торған үләндәрҙең еҫтәре килеп бәрелеп, танауҙы ҡытыҡлай.* И. Абдуллин.

**ЕН-БӘРЕЙ** *и. миф. йыйн.* ‘бесы, черти; нечистая сила’. Ен һәм пәрей кеүек төрлө мифик заттар. ■ *..Нәгрә орҙо, сур кеүек, бер торбанан ен-бәрейҙәр сыҡты һикереп мөрйәнән.* Ш. Бабич. Ен-бәрей урлап алып китте тип яр һалып сабышырға, эҙләргә керешкәндәр. Й. Солтанов.

**ЕН-ПӘРЕЙ** *и. миф. йыйн. ҡар.* **ен-бәрей.** ■ *– Хәҙер ен-пәрей, албаҫты-шүрәле заттары юҡ бит ул, һуғыштан ҡурҡып, ерҙең арт яғына ҡасып бөткәндәр, ти, улар.* З. Ураҡсин. *Ен-пәрей башымды бутанымы әллә?* Ф. Әсәнов.

**ЕҢЕЛ-ЕЛБӘГӘЙ** *с. һөйл.* ‘лёгкая, тонкая *(об одежде)*’. Йоҡа, еңел *(кейемгә ҡарата).* ■ *[Ҡарт:] Ай-һай, йонсоноң. Өҫ-башың да еңел-елбәгәй шул.* М. Тажи.

**ЕҢЕЛ-ЕЛПЕ** *с. һөйл.*

1) ‘всякий, мелкий’. Күп көс талап итмәгән, башҡарыуға анһат. ■ *Шашты хәҙер Шаһит. Етенсене бөткәне бирле гел еңел-елпе эштә.* Н. Мусин.

2) ‘неглубокий, несерьезный, легкомысленный’. Тәрән мәғәнәһеҙ, етди түгел. ■ *Вәғәҙәләр бирмә. Үттек инде еңел-елпе йәшәр осорҙо.* М. Кәрим.

3) легкий, беспечный, ветреный’. Етди түгел, елбәҙәк, еңел. *Еңел-елпе холоҡло егеттәрҙе хөрмәт итмәйем.* ■ *Ул егет тормошҡа еңел ҡарай, күрәһең, еңел-елпе кешелер…* Р. Камалов.

**ЕҢ-ЯҒА** *и. йыйн.* ‘рукава и воротник’. Кейемдең еҢ һәм яғаһы.

▲ **еҢ-яға килешеү** (йәки килеү) елкәнән алып, нығ һуғышыу *(хватать друг друга за шиворот).*

**ЕП-ЙЫШЫУ** *и. йыйн.* ‘разные веревки, бечевки’. Ишелгән төрлө бау. ■ *[Бөрйән халҡы] еп-йышыу ишеп, көрәк сабып, туғын бөгөп, дегет ҡайнатып ала ла … игенле яҡтарға сәфәр сыға ине.* С. Ғәбиҙуллин.

**ЕР-ҺЫУ I** *и. йыйн.*

1) ‘земли и воды, угодья’. Ил, халыҡ биләп, йәшәгән урын. *Ер-һыуыбыҙҙы һаҡлау – һәр беребеҙҙең изге бурысы.* ■ *Ерем-һыуым, Ил-көнөм, зат тупрағым тип хәләл ҡанын түккән, ҡаны тамған урында ҡурай үҫкән батырҙарҙы маҡтай ҡобайыр.* Р. Солтангәрәева. *Бер көндө, яҙ етеп, ер-һыу кипкәс, күршеһе Ғизелбанат та әйләнеп ҡайтты.* Ғ. Ибраһимов. *Был ҡарт менән был ҡарсыҡ ҡайҙан бында килеүен, ата-әсә, ер-һыуы ҡайҙа тороп ҡалыуын үҙҙәре лә онотҡан, ти. «Урал батыр» эпосынан.*

2) ‘обожествленная живая природа’. Кеше изгеләштереп ҡараған, үҙен йәшәткән, һыйындырған һәм туйындырған ер. ■ [Урал:] *Мин бер кеше, һеҙ – күп кеше, мин түгел, ә ер-һыу үлемһеҙ булһын.* «Урал батыр» эпосынан.

**ЕР-ҺЫУ II** *с. һөйл.* ‘многочисленный’. Ниҙеңдер хисапһыҙ күп булыуын белдерә. ■ *Был ерҙәрҙән Белорет яҡлап килеп, Блюхер тигән командирҙың ер-һыу ғәскәре үтеп киткән.* Ә. Вәхитов.

**ЕР-КҮК** *и. йыйн.* ‘небо и земля, весь мир’. Бөтә уратып алған ер. ■ *Бөтә ер-күк нурға сырмалған.* Ш. Бабич.

**ЕҪ-ҠОҪ** *и. йыйн.* ‘разные неприятные запахи’. Төрлө насар еҫтәр. ■ *Һи-и, балаҡайым, – тине түҙмәйенсә Хәтмулла ҡарт. Бөгөн генә өлгөргән, бөгөн генә һуғылған ашлыҡта ниндәй еҫ-ҡоҫ булһын инде.* З. Ғәлимов.

▲ **еçе-ҡоçо ҡалманы** (йәки **юҡ**) ‘его и след простыл’. Эҙе лә юҡ. *Уның был ерҙә еçе-ҡоçо ла юҡ.*

**ЕТЕМ-ЕҺЕР** *и. йыйн.* ‘сироты’. Етем бала-сағa, етем кешеләр. ■ *[Әҙһәм ҡарт:] Батшалар һуғышалар-һуғышалар ҙа бер-береһенә ер бирешеп яраша торғандар, тик бына әҙәм ҡырылыр инде, етем-еһер күбәйер.* Ж. Кейекбаев.

**ЕТЕМ-ЕÇЕР** *и. йыйн. диал. ҡар.* **етем-еһер.** ■ *Бәләкәй генә өйөңә, ярлы ғына ашыңа күпме етем-еçер һыйҙы.* Ғ. Хисамов. *Бөтә етем-еçер уға һыйынды, уның ҡанаты аçтында үтте.* Л. Яҡшыбаева.

**ЕТЕР-ЕТМӘÇ** *р.*

1) ‘еле-еле, скудно *(о пище)*’. Етерлек түгел, әҙ; таҡы-тоҡо *(күбеһенсә аҙыҡҡа һ.б. ҡарата).* ■ *Табаҡтағы бишбармаҡ етер-етмәç кенә булып ҡалды.* Т. Йәнәби.

2) ‘неполный, не доверху, не до краев, небольшой, в малом количестве’. Кәрәгенсә түгел, күләме әҙ, ҡыçҡа һ.б. ■ *Мейес эргәһенә етер-етмәç тушәлгән кейеҙҙең сите тәңгәлендә Хәмдиәнең йәш балаһының сәңгелдәге элеүле тора.* Һ. Дәүләтшина.

**ЕТЕР-ЕТМӘÇТӘН** *р.*

1) ‘не успев дойти’. Кәрәк еренә, урынына барып етмәгән хәлдә, етмәç элек, етеп өлгөрмәç элек. *Ҡайтып етер-етмәçтән шылтыратты.* ■ *Хәйрулла килеп етер-етмәçтән гәйрәтләнеп ҡысҡырып ебәрҙе лә юл ыңғай уҡ ҡатындарҙың береһенең ҡулындағы һыулы биҙрәне эләктереп алып утҡа һипте.* Д. Бүләков.

2) ‘не достигший состояния готовности, полного развития, незрелый, неспелый’. Өлгөрмәгән, кәрәк кимәленә етмәгән хәлдә. *Алмаларҙы үҫеп етер-етмәҫтән өҙөп бөтөрәләр.*

# З

**ЗАҢ-ЙОЛА** *и. йыйн.* ‘правила, обычаи, нравы’. Ҡабул ителгән дөйөм ҡағиҙәләр. ■ *Әлимә ундай урынға барырға яратмаһа ла, халыҡтың заң-йолаһы буйынса барырға мәжбүр ине.* Д. Юлтый.

**ЗАР-ИНТИЗАР** *р.* ‘нужда, нуждаемость’. Нимәгәлер бик ныҡ мохтажлыҡ; **зар-интизар булыу** ‘томиться в ожидании’. Бик ныҡ көтөү; тилмереү. **зар-интизар итеү** ‘заставить томиться в ожидании’. Бик ныҡ көттөрөү; тилмертеү. ■ *Көнө буйы бер-береңде күрә алмай, әкиәттәге саҡ-суҡ һымаҡ, зар-интизар булып йөрөп ятаһың шунда.* М. Тажи.

**ЗАР-МОҢ** *и. йыйн.* ‘печали, горести’. Күңелдәге ауыр кисереш; зарлы моң; ҡайғы-хәсрәт. ■ *Бүтәне түгел, быныһын да, уйын-көлкөнө лә, зар-моң йырлап ултырыуҙы ла һуңғы замандарҙа, дин ныҡлап тамыр йәйә башлағас, урғыттар өсөн бөтөнләй харамға сығарғайнылар.* Ғ. Ибраһимов.

**ЗАР-ҺАҒЫШ** *и. йыйн.* ‘печали, горести’. Хәсрәт, һағыш хисе; зар-моң. ■ *Салауат та батыр илдән киткәс, йөрәктәрҙе баҫты зар-һағыш.* Халыҡ йырынан.

**ЗАТ-БОТ** *и. йыйн. диал.* ‘родня, родственники’. Нәҫел-нәсәп, туған-тыумаса. *Хәҙер зат-бот аралашмай.*

**ЗАТ-ЗАМИР** *и. йыйн. диал.* ‘родня, родственники’. Нәҫел-нәсәп, туған-тыумаса. *Зат-замир йыйылған ерҙә йәнгә рәхәт.*

**ЗАТ-ЗӨРИЙӘТ** *и. йыйн. диал.* ‘родня, родственники ’. Нәҫел-нәсәп. *Бөтә зат-зөрийәтте йыйып алырға кәрәк.*

**ЗАТ-ЗӘҮЕР** *и. йыйн. диал.* ‘родня’. Нәҫел-нәсәп. ■ *Беҙҙең зат-зәүер – ярлы крәҫтиән.* К. Кинйәбулатова.

**ЗАТ-ЫРЫУ** *и. йыйн.* ‘родня, родственники’. Нәҫел-нәсәп, туған-тыумаса. *Зат-ырыуыңды белергә кәрәк.* ■ *Халыҡ борон-борондан зат-ырыу, ата-бабаның холоҡ-ҡылығын тотоп ала белгән.* З. Ураҡсин. *Хәл-әхүәл һорашып, бер-береһенең ил-йорто, зат-ырыуы, туған-тыумасалары хаҡында һәммәһен белешкәс, өҙөлөп торған әңгәмә дауам итте.* М. Ямалетдинов.

**ЗАТ-ЫРЫУҺЫҘ** *с.* ‘безродный’. Нәҫел-нәсәпһеҙ, туған-тыумасаһыҙ. *Зат-ырыуһыҙ кеше.*

**ЗИЛ-ЗИБӘР** *с. ҡар.* **зир-зәбәр**. ■ *Аяҙ, ҡояшлы көндө ҡапыл ел-дауыл ҡубып, зил-зибәр күтәргән саң-туҙан өйөрмәһе аҫтында ҡалған төҫлө тойҙо үҙен Аҡсәсәк.* Ш. Янбаев.

**ЗИР-ЗӘБӘР** *с.*

1) ‘беспорядочный’. Аҫты-өҫтө әйләнгән, пыран-заран. ■ *Зир-зәбәр ҡыйралған элекке тормоштоң кире ҡайтасағына күптәре ышанмай инде.* Ә. Хәкимов.

2. *перен.* ‘сумбурный’. *күсм.* Тәртипһеҙ, бола. ■ *Зир-зәбәр уйҙар, ғазаптар менән тик һыҙлай был баш.* Ш. Бабич.

**ЗОЛОМ-ЙӘБЕР** *и. йыйн.* ‘притеснения, гнет, насилие’. Золом һәм йәбер. *Өләсәйем золом-йәбер күреп үҫкән инде.* ■ *Әҙәм балаларының золом-йәберҙәре хаҡыбыҙға тәжәүез ҡылыуҙары, хәҡиҡәтән, беҙҙең ошо рәүешле йыйылып, шикәйәт ҡылдырыу дәрәжәһенә етте.* М. Ғафури.

**ЗЫУ-ҒӘЛӘМӘТ** *и.* ‘шум’. Ашығып, өтәләнеп зыҡ ҡубыу; **зыу-ғәләмәт килеү** *(поднимать суматоху, шуметь, галдеть).* ■ *Мозафар, йылмайып, әсәһенең зыу-ғәләмәт килгәненә ҡарап тора ине.* Н. Мусин.

**ЗЫЯН-ЗӘҮРӘТ** *и. йыйн. иҫк.* ‘убытки, горести, бедствие’. Мал-мөлкәт, тормош-көнкүреш һәм башҡа нәмәгә насар тәьҫире тейгән йәки материаль юғалтыуға килтергән төрлө хәл, бәлә-ҡаза. ■ *Һарыбай төнгө постың тыныс үткәнен, зыян-зәүрәт юҡлығын хужаһына белдерергә теләгәндәй, әле бер, әле икенсе яғына сығып иркәләнде.* С. Ҡудаш. *Зыян-зәүрәт булмаҫына тамам ышанғас ҡына, Мөхәммәт ағай уның бер үҙен йөрөтә башланы.* Р. Ғабдрахманов.

# И

**ИБЕ-ЕБЕ БУЛМАУ** *ҡ. ҡар.* **ибе-ебе күренмәү.**

**ИБЕ-ЕБЕ КҮРЕНМӘҮ** *ҡ.* ‘не ладиться, не клеиться’. Нимәнеңдер алға бармауын, килеп сыҡмауын белдергәндә әйтелә. *Был эштең ибе-ебе күренмәй.*

**ИГЕН-АШЛЫҠ** *и. йыйн.* ‘хлеб, хлеба’. Үҫеп ултырған һәм һуғылған бөртөклө ашлыҡтар. *Быйыл иген-ашлыҡ бик уңды.*

**ИГЕН-БЕСӘН** *и. йыйн.* ‘хлеба и сено’. Иген һәм бесән; төрлө файҙалы үҫемлектәр. *Был ямғыр иген-бесән өсөн бик файҙалы булды.*

**ИГЕН-ИКМӘК** *и. йыйн.* ‘жито; хлеба, урожай’. Үҫеп ултырған һәм һуғылған бөртөклө ашлыҡ, уңыш.

**ИГЕ-СИГЕ** *и.* ‘конец и край; без конца и края’. Ниҙеңдер сик-күләме. ■ *Алыҫ тауҙарҙы күгелйем монар уратып алған, әйләнә-тирәңдә иһә иге-сиге күренмәгән йәшеллек диңгеҙе.* Н. Мусин.

**ИЖАП-ҠАБУЛ** *и.* ‘молитва *(при помолвке)*’. Никахҡа тиклем үк ҡыҙ менән егетте ҡушыр өсөн аталарынан алдым-бирҙем тигән ризалыҡ алып уҡыған доға.

**ИГЕ-ҺАҒА БУЛЫУ** *ҡ.* ‘достичь совершеннолетия’. Буй етеү, үҫтереү.

**ИГӘТ-МӨЛКӘТ** *и. йыйн.* ‘приданое невесты’. Атаһы тарафынан ҡыҙға бирелгән мал, байлыҡ. ■ *[Таңһылыу – апайына:] Һин минең игәт-мөлкәтемде үҙеңә ҡалдырырға тырышып, күңелем ятырҙай кейәүҙәрҙе һанға һуҡмай, мине бәхетһеҙ иттең, итәгемдән игелек күрмә.* «Алдар менән Зөһрә» эпосынан.

**ИКЕЛЕ-МИКЕЛЕ** *с.* ‘неопределенный, уклончивый, сомнительный’. Аныҡ түгел, төрлө, бер тегеләй, бер былай. ■ *[Йәмилә] тик йәшенә ҡарағанда өлкәнерәк күренгән, сикә сәстәренә сал йүгергән Садиҡтың етди йөҙөнә ҡарай ҙа икеле-микеле уйҙары өсөн йәнә уңайһыҙлана.* Г. Ғиззәтуллина.

**ИКЕНДЕ-АҠШАМ АРАҺЫ** *и. йыйн.* ‘время заката солнца’. Ҡояш байыған ваҡыт. ■ *Стәрле ярына арҡа терәп ултырған ауылға улар [Әлибай менән Кинйә] икенде-аҡшам араһында ғына барып етте.* Ғ. Ибраһимов.

**ИКМӘК-ТОҘ** *и. йыйн.* ‘хлеб и соль’. Иң кәрәк аҙыҡ. ■ *Сәлихтең атаһының эшләп тапҡаны икмәк-тоҙға ғына етә, ә ит, һөттө аҙнаға бер-ике тапҡыр ғына алалар.* Х. Мөхтәр.

▲ **икмәк-тоҙ менән ҡаршы алыу**

1) ‘встречать хлебом-солью’. Рустарҙың ғөрөф-ғәҙәте буйынса, ситтән килгән кешегә ҡәҙер күрһәтеү өсөн ҡаршыһына икмәк-тоҙ тотоп сығыу. ■ – *Рәхим итегеҙ, егеттәр, -тип командирға икмәк-тоҙ һуҙҙы.* И. Ғиззәтуллин;

2) ‘встречать приветливо’. Ихлас күңел, яҡты йөҙ менән ҡаршы алыу. ■ *Ауылдың байҙары [аҡтарҙы] яҡты йөҙ, икмәк-тоҙ менән ҡаршы алды.* С. Ханов.

**ИКМӘК-ТОҘЛОҠ I** *с. һөйл.* ‘в меру, достаточный для пропитания’. Бик әҙ, самалы. ■ *Тиҙерәк уны ашатып, һауып, һөтөн баҙарға алып барып һатып,* икмәк-тоҙлоҡ *аҡса эшләргә кәрәк*. Р. Ырыҫҡужина.

**ИКМӘК-ТОҘЛОҠ II** *р.* ‘немного, чуть-чуть’. Әҙ генә, саҡ ҡына. ■ *Ул [Усман] иҫәп-хисапҡа бак ноҡот, ә рус телен икмәк-тоҙлоҡ ҡына ла белмәй.* Ғ. Ғүмәр. *Икмәк-тоҙлоҡ уҡырға, яҙырға, һанарға өйрәткәс, Камила түтәйе уға мәктәпкә барыуҙы тыйҙы.* Т. Ғарипова.

**ИКМӘК-ТӨЙӨР I** *и. диал.* ‘сухомятка’. Ҡоро аҙыҡ. *Икмәк-төйөр менән тамаҡ ялғап алдыҡ.*

**ИКМӘК-ҺЫУ МЕНӘН ЙӘШӘҮ** *ҡ.* ‘жить впроголодь’. Ашау яғы насар булыу.

**ИКҺЕҘ-СИКҺЕҘ** *с.*

1) ‘бесконечный, безграничный, без конца, без края‘. Осо-ҡырыйы күренмәҫ, иге-сиге билдәһеҙ; иркен, киң. *Икһеҙ-сикһеҙ киң далалар.* ■ *Икһеҙ-сикһеҙ далаларҙы ҡаплаған ҡояш башлы көнбағыштарҙы сәсеп үҫтереүсе булһаң, йәки, өйөр-өйөр йылҡы көтөп, ҡышын-йәйен ҡырҙа, тәбиғәт ҡуйынында йәшәһәң?* З. Биишева. *Әсәлек тойғоһо иһә икенсе бер нәфислек – изге, сабыр, икһеҙ-сикһеҙ эске матурлыҡ бүләк итте.* Д. Бүләков.

2) ‘несметный’. Иҫәпһеҙ-һанһыҙ булған. *Икһеҙ-сикһеҙ халыҡ. Икһеҙ-сикһеҙ күләмдә.* ■ *Ҡаҙаҡтар бик тарҡау, ҡасандыр икһеҙ-сикһеҙ көслө ил бер-береһенә ҡаршы торған төрлө урҙаларға, губерна ярсыҡтарына, ханлыҡ киҫәктәренә телгеләнеп бөткән.* Р. Байымов.

**ИЛАП-ҺЫҠТАП** *р.* ‘со слезами, горько плача’. Күҙ йәше менән әсенеп, зарланып. ■ *Үтә йыуаш, баҫалҡы күренһә лә, Зөһрә был юлы илап-һыҡтап торманы.* Ә. Хәкимов.

**ИЛАУ-ҺЫҠРАУ** *и. йыйн. ҡар.* **илау-һыҡтау**.

**ИЛАУ-ҺЫҠТАУ** *и. йыйн.* ‘плачь, скорбь, горести’. Илаған, һыҡтаған зар. ■ *Аһ-зар иңрәү һәм илау-һыҡтау менән тулды урам.* Д. Юлтый.

**ИЛАМАЙ-НИТМӘЙ** *ҡ.* ‘не плача, не скорбя’. Иламайынса. ■ *Иң тәүҙә Хәмдиә барып ҡәйнәһенең ҡолағына шыбырланы: Ҡәйнәм, мин аш алып барғанда ғына Гөлйөҙөм иламай-нитмәй һөйләшеп ултыра ине, әле туҫтаҡ алайым тип барһам, Яланбикә генә ултыра.* Һ. Дәүләтшина.

**ИЛАШЫУ-ШЫҢШЫУ** *и. йыйн.* ‘скулить’. Илаған һымаҡ сыйылдау. *Бүре балалары илашып-шыңшып яталар, ти.* Әкиәттән.

**ИЛДЕМ-ЯЛДЫМ** *с. диал.* ‘приветливый’. Асыҡ сырайлы, илгәҙәк, көләс. *Илдем-ялдым ҡыҙыҡай ул.*

**ИЛ-ЙОРТ** *и. йыйн.*

1) ʻродина’. Тыуған ил һәм шунда йәшәгән халыҡ. ■ *Ирекһеҙҙән ил-йортонан биҙгән … Зөлҡәрнәй менән Зөлхизә Ирәндектә … иректә йәшәй биргән.* Н. Иҙелбай. *Азов походынан оло дан менән ҡайтҡас, Алдар батырҙың яуҙағы гәйрәтлектәре һәм Петр батшаның үҙ ҡулынан алған грамота ҡағыҙы ил-йорт ҡаршыһында уның абруйын тағы күтәреп ебәрҙе.* Ғ. Хөсәйенов.

2) ʻмир, народ’. Донъя, халыҡ. *Ил-йорт менән сығып китте.* ■ *Ил-йорт тынысланһа, килеүҙәре тураһында сапҡын ебәрһендәр.* С. Ильясов.

**ИЛКЕ-ҺАЛҠЫ** *р.* ‘безответственно, кое-как’. Әһәмиәт тә, иғтибар ҙа бирмәй; арлы-бирле. ■ *Юҡ, вазифаһын илке-һалҡы башҡарманы Сәйф, ихлас эшләне.* Ә. Хәкимов.

**ИЛ-КӨН** *и. йыйн.*

1) ‘мир’. ■ Донъя, халыҡ. *Халыҡтың хәле йылдан-йыл ауырлаша, ил-көн ҡыҫылғандан-ҡыҫыла.* Ғ. Ибраһимов. *Ил-көн ҡурҡыныс аҫтында!* Ғ. Лоҡманов. Шулай ер төшөнсәһе, тыуған төйәк, йорт-ер, ил-көн мәғәнәләрен алып, киңәйә, тәрәнәйә барған. Ғ. Хөсәйенов.

2) ‘хозяйство’. Хужалыҡ. *Ил-көндө тәртипкә килтереү.*

**ИЛ-КҮЛ-МЕҢ** *и. этн.* 'название башкирского рода'. МеҢ ҡәбиләһенә ҡараған бер башҡорт ырыуының исеме. *Ил-күл-меңдәр Миәкә районында йәшәй.*

**ИЛЛА-АЛЛА МЕНӘН** *р.* 'кое-как, с трудом, еле-еле'. Көс-хәл менән, көскә. *Илла-алла менән малайҙы өйләндерҙек.*

**ИЛЛӘ-МӘГӘР I** *ымл.* 'ну и ну, удивление, недовольство'. Нимәгәлер ғәжәпләнгәндә, һоҡланғанда, ризаһыҙлыҡ белдергәндә. *Илләә-мәгәр йонсоттоң бит.* ■ *Илләә-мәгәр ярһыуы һис кенә лә баҫылманы.* Ә. Байрамов.

**ИЛЛӘ-МӘГӘР II** *терк.* 'но, однако же, только'. Ҡаршы мәғәнәле һөйләмдәрҙе теркәй. *Уҡыуҙар ауыр, иллә-мәгәр күңелле.* ■ *Иллә-мәгәр һәр кешенең бер ҡарауҙан күрелмәгән сифаттары ла була бит әле.* Ә. Бикчәнтәев.

**ИЛ-ҺҮЛ** *и. йыйн. ҡар.* **ил-һыу**. ■ *[Йылҡыбай – Аллабирҙегә:] Ил-һүлде ҡурсыуһыҙ ҡалдырыуың бар.* «Алдар менән Зөһрә» эпосынан.

**ИЛ-ҺЫУ** *и. йыйн.* 'родина, родная земля'. Тыуған ил, тыуып үҫкән ер. *Тарауыл ҡарт Һәүбәндән... ил-һыу именлеген һорашҡан.* "Аҡбуҙат" эпосынан.

**ИЛ-ӘСӘ** *и. йыйн.* 'родина, родная земля'. Тыуған ил, Ватан. *Ил-әсә алдында бурысты үтәүсе егеттәргә мәңгелек дан!* ■ *Еңәсәгебеҙгә ныҡ ышаныу, Тыуған ил-әсәгә сикһеҙ мөхәббәт беҙҙең көстөң һәм ҡаҡшамаҫлыҡтың мәңгелек йәншишмәһе ул...».* М. Ғиләжев.

**ИЛӘҪ-МИЛӘҪ** *с.*

1) ʻпеременчивый (о характере, о расположении духа)ʼ. Тиҙ генә үҙгәреүсән *(уй-тойғоға ҡарата).* ■ *Күңеле иләҫ-миләҫ булып уянды ла Мәҙинә, күҙенә төйөлгән йәште һыпырып, карауат эргәһендәге тәпәш өҫтәлдән һыулы стаканды үрелеп алды.* Ә. Хәкимов.

2) ʻлегкомысленный, ветреныйʼ. Еңел-елпе. ■ *Атаһының ризалығын алып, Ғарифулла йортона килен булып төшөргә йөрөгән иләҫ-миләҫ ваҡыты ине [Мәстүрәнең].* Ә. Хәкимов.

3) *перен.* ʻслегка помешанный, тронутыйʼ. *күсм.* Инәлесығалы, килделе-киттеле *(иҫ-аңға ҡарата). Был ир иләҫ-миләҫ йөрөй инде хәҙер.*

4) ʻедва заметный, еле видныйʼ. Күренер-күренмәҫ. ■ *Иләҫ-миләҫ иткән бер ҡараҫҡы күренде.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосынан.

**ИЛӘҪ-ЯЛАҪ** *с. һөйл.* ʻневидимый, едва заметныйʼ. Күренер-күренмәҫ, ялп-йолп. *Иләҫ-ялаҫ ҡына күренеп ҡалды.*

**ИМЕН-АМАН** [ғәр.] *р.* ʻжив-здоров, цел и невредимʼ. Бәлә-ҡазаһыҙ, зыян-зарарһыҙ; һау-сәләмәт; имен-һау. ■ *Зилбәрҙең отряды сауҙагәр менән, Иҙел кисеп, имен-аман ғына Аҡтауға килеп инде.* З. Ураҡсин.

**ИМЕН-ҺАУ** *р. ҡар.* **имен-аман.** *Киленебеҙ имен-һау ун икенсе балаһын тапҡан.* ■ *Ошо илаһи ерҙе төйәк иткән ҡәүем юҡлыҡты, етешһеҙлекте белмәй иге-сиге күренмәгән далала иркен һулап, иркен уйлап, көнитмешен байман итеп, имен-аман, имен-һау донъя көтәлер.* С. Бәҙретдинов.

**ИМЕШ-МИМЕШ** *и. йыйн.* ʻслухи, сплетниʼ. Кешенән ишетелеп ҡалған төрлө ысынлы-бушлы һүҙ. ■ *Ауылда*

*[Фатима:] тураһында имеш-мимештәр бик күп булһа ла, ысын хәлде бер кем дә белмәгән.* С. Ҡудаш.

**ИМ-ЖОМ** *и. диал. ҡар.* **им-том.**

**ИМ-ТАП** *и. йыйн.* ‘заговор, заклинание болезни’. Ырым-нәфрәт буйынса дауалау әмәлдәре.

**ИМ-ТОМ** *и. йыйн.* ‘заговор, заклинание болезни’. Ырым-хөрәфәт буйынса дауалау әмәлдәре. ■ *Был им-томдарҙан һуң Емеш кисен генә түгел, көндөҙ ҙә һаташып, тағы бер аҙ ауырыны.* З. Биишева. *Ырымға, им-томға һәүәҫ кешеләр Шаҡмаңдың үҙендә лә етерлек.* К. Мәргән.

**ИМ-ТОМСО (ИМ-ТОМ ИТЕҮСЕ)** *и.* ‘исцелитель, знахарь’. Ырым-хөрәфәт буйынса дауалаусы; имләүсе, им итеүсе. *Ҡайһы бер им-томсоларҙың өшкөрөүе балаға килешә.* ■ *Көнө тағы им-томсоға, йәшерен-батырын дауалаусы табиптарға ҡалды.* Ә. Хәкимов.

**ИНАН-ҠАНАН** *р.* ‘спокойно, не торопясь’. Ашығыс эштәр, ығы-зығылар бөтөп, иркенгә ҡалғас. *Эште рәхәтләнеп, инан-ҡанан башҡарҙы.*

**ИНӘЛЕ-ҠЫҘЛЫ** *р.* ‘мать и дочь, мать с дочерью’. Инәһе менән ҡыҙы бергә. ■ [*Ҡарсыҡ менән ҡыҙы] кем ҙурыраҡ тип йәнәшә баҫып үлсәшкәндәр ҙә инәле-ҡыҙлы ыҙғышып киткәндәр*. Д. Бүләков.

**ИНӘЛЕ-СЫҒАЛЫ** *р.*

1) ‘слегка помешан, тронутый’. Ваҡыт-ваҡыт иҫе юғалып, аҡыл һәләте, иҫе үҙгәреп торған. *Инәле-сығалы булыу.*

■ *Байгилде ағай Усман байҙың күп эсеү һәм ниндәйҙер ғаилә ҡайғыһы арҡаһында аҡылы инәле-сығалы булып китеүе тураһында Иштуғандың хаты аша күптән белһә лә был хәтле итеп күҙ алдына килтермәй ине әле.* З. Биишева.

2) *перен.* ‘переменчив, неустойчив *(о человеке и его характере)*’. *күсм.* Ҡапыл төрлөсә үҙгәреп торған, тотороҡло түгел *(холоҡҡа ҡарата). Холҡо уның инәле-сығалы бит ул.*

**ИҢЕ-БУЙЫ** *и.*

1) ‘длина, вдоль и поперек’. Бер нәмәнең арҡыры-буй үлсәме. *Иңе-буйын үлсәргә кәрәк***.**

2) *перен.* ‘вдоль и поперек’. *күсм.* Берәр нәмәнең бөтә булған киңлеге, бөтә майҙаны. ■ *Ил гиҙеп, шәреҡ мәмләкәттәрен иңенә-буйына йөрөп сыҡҡан дәрүиштәр теләһә ниндәй телдә иркен һөйләшә.* Ә. Хәкимов.

**ИҢКЕ-МИҢКЕ** *р. диал.*

*1) ҡар.* **аңҡы-тиңке**. *Иңке-миңке йөрөү.*

*2) ҡар.* **илке-һалҡы**. *Иңке-миңке башҡарыу.*

**ИҢЛӘП-БУЙЛАП** *р.* ‘вдоль и поперёк’. Бөтә булған киңлеген, иңен буйын айҡау. *Бөтә илде иңләп-буйлап йөрөнө.* ■ *Осһоҙ-ҡырыйһыҙ даланы иңләп-буйлап саптым, баш бирмәҫ халайыҡтарҙың ҡалаларын ҡыйраттым, ауылдарын үртәнем.* Ә. Хәкимов.

**ИП-ЙӘП** *и. йыйн.* ‘толк, суть, смысл’. Нимәнеңдер ыңғайы, көйө, уңайы, яйы. *Эштең бер ҙә ибе-йәбе юҡ.*

**ИПКӘ-ҺАПҠА: ипкә-һапҡа килеү** ‘становиться податливым, сговорчивым, поддаваться уговорам’. Килешеп, өгөтләүгә бирелеү. *Был егет ипкә-һапҡа килә ул.*

**ИПЛӘП-ҺИПЛӘП** *р.* ‘потихоньку, тихонько’. Әкрен генә, яйлап ҡына. ■ *Кем әйтмешләй, донъя ҡатмарлы шул: берәү ғүмерен өйҙәш үткәрә, икенселәр ата-баба йортон ипләп-һипләп кенә күтәрә.* Ғ. Байбурин.

**ИПТӘШ-АЛҒЫШ** *и. йыйн.* ‘друзья’. Яҡын дуҫ-иш, иптәштәр. ■ *Көнһылыу .. иптәш-алғыш ҡыҙҙарын бер-бер артлы уҙғара ла, тәрән уйға тала.* М. Буранғолов.

**ИПТӘШ-АРҠАҘАШ** *и. йыйн. ҡар.* **иптәш-алғыш.**

**ИПКӘ-ҺАПҠА ҺАЛЫНЫУ** *ҡ. диал.* ‘поправиться’. Рәтләнеү, йүнәлеү. *Ипкә-һапҡа һалынып ҡына тормош көйләнгәйне – һуғыш сыҡты.*

**ИР-АРЫҪЛАН** *и. йыйн.* ‘сильные, смелые мужчины, богатыри’. Ғәйрәтле, ҡыйыу, батыр ирҙәр. ■ *Ир-арыҫлан булһаң, иш күрәләр, ҡайһы ғына ергә барһаң да.* Халыҡ йырынан.

**ИР-АТ** *и. йыйн.* ‘мужчины’. Ирҙәр. ■ *[Әсә-ҡыҙына:] Йөрөйһөң дә тағы шунда!. Ир-ат араһына барып йөрөргә ир бала булдыңмы? Килешмәгәнде.* Һ. Дәүләтшина.

**ИР-БАТЫР** *и.* ‘богатырь’. Ғәйрәте, батырлығы менән танылған ир; ир-арыҫлан. ■ *Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып, шул теләкте яулайыҡ.* Салауат Юлаев.

**ИР-ЕГЕТ** *и. йыйн.* ‘мужчины, молодцы’. Батыр, булдыҡлы, ауыр эштәргә һәләтле, көслө, ғәйрәтле ирҙәр. ● *Ир-егеттең асылы ил эшендә танылыр.* Әйтем. ■ *Бынамын ир-егеттәрҙең ҡаны ҡойолор инде. Беҙҙең ауылдан Ғәббәс, Шәйхи,*

*Ғәзелгәрәй, Ҡотлояр.* Һ. Дәүләтшина. *Васыятым шул һиңә. Хәҙер үк иң ышаныслы ир- егеттәрҙән ғәскәр тупла…*К. Дияров.

**ИР-ЕГЕТЛЕК** *и.* 'молодечество, удаль, отвага'. Ысын ирҙәргә хас батырлыҡ, намыҫлыҡ һ.б. сифаттар. ■ *Юйылһа ла ир-егеттең исеме, ир-егетлек ҡалмай билдәһеҙ.* Р. Бикбаев.

**ИРЕКЛЕ-ИРЕКҺЕҘҘӘН** *р.* 'вынужденно, добровольно-принудительно'. Теләк булмаған көйгә, ирекһеҙ көндән. ■ *[Эт] ирекле-ирекһеҙҙән ... ҡапҡа төбөндәге ояһына инеп китте.* Һ. Дәүләтшина.

**ИРЕШЕП-ТАЛАШЫП** *р.* 'ругаясь'. Ыреш-талаш менән, әрләшеп. *Ирешеп-талашып йәшәү.* ■ *Көн һайын ирешеп-талашып ултырып булмай", - тине лә Сажидәне етәкләп алып ҡайтып китте.* Н. Мусин. *Унда һеҙгә ирешеп-талашып тороу түгел, һөйләшергә лә ваҡыт булмаҫ.* М. Тажи.

**ИРЛЕ-БИСӘЛЕ** *р. ҡар.* **ирле-ҡатынлы II.** ■ *Ялсы тотмай, йәғни кеше көсөнән файҙаланмай, бөтә эште үлә-ҡала ирле-бисәле үҙҙәре ипләй.* Ә. Хәкимов

**ИРЛЕ-ҠАТЫНЛЫ I** *с.* 'супружеский'. Ир менән ҡатын булған, өйләнешкән. ■ *Уға [Сарайға] яҡшы йыһазлы, иркен йорт биреләде, өйөн ҡарарға, аш-һыу хәстәрләргә ирле-ҡатынлы хеҙмәтселәр ҡуйылды.* Ә. Хәкимов.

**ИРЛЕ-ҠАТЫНЛЫ II** *р. мәғ.* 'муж с женой, супруги'. Ир менән ҡатын бергә. *Ирле-ҡатынлы эшләйҙәр.* ■ *Ирле-ҡатынлы улар ана шулай йәшәп алып киттеләр: һөйөштөләр, һөйләштеләр, һүҙләштеләр, әрләштеләр, серләштеләр...* Т. Сәғитов.

**ИР-ҠАТЫН** *и. йыйн.* 'муж и жена'. Ирҙәр һәм ҡатындар. *Ир-ҡатындар йыйылған бында.*

**ИРТӘ-КИС** *и. йыйн.* 'утро и вечер'. Иртәнсәк һәм кис; төрлө ваҡыт. *Изгелектең иртә-кисе юҡ.* ■ *Сөмбөл иртә-кис ауырыуҙары янына инеп йөрөгәнгә күрә, уға Фәриҙә менән йыш осрашырға тура килде.* З. Ҡадирова.

**ИРТӘ-КИСЕН** *р.* 'утром и вечером, в разное время'. Иртәнсәк тә, кис тә; һәр ваҡыт, төрлө ваҡыт. ■ *Ул [Һыуһылыу] көн дә иртәле-кисле [Заятүләккә] ит, ҡорот, һалма килтереп ашата, ҡымыҙ эсерә.* «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосынан.

**ИРТӘЛЕ-КИСЛЕ** *р.* 'утром и вечером, по утрам и вечерам'. Иртәнсәк тә, кис тә. ■ *Иртәле-кисле һалҡын булһа ла, көндөҙ, ҡояш һауаға күтәрелгәс, көн бик тиҙ йылына.* Я. Хамматов.

**ИРТӘМЕ-ҺУҢМЫ** *р.* 'рано или поздно'. Киләсәктә, берәр ваҡыт, ҡасан да булһа. *Иртәме-һуңмы был эште тамамлап ҡуйырға кәрәк.*

**ИР-УҘАМАН** *и. йыйн.* 'авторитетные, уважаемые мужчины'. Илдә яҡшы эштәре менән танылған ирҙәр. ■ *Ил намыҫын һаҡлаған ир-уҙаман булалыр.* «Ҡуңыр буға» эпосынан. *Халҡыбыҙҙың исемдәре ташҡа баҫылып мәңгеләштерелгән күренекле шәхестәре, арҙаҡлы ир-уҙамандары, шөкөр, бихисап.* Л. Яҡшыбаева.

**ИР-ЫЛАСЫН** *и. йыйн. ҡар.* **ир-шаһбаз.**

**ИР-ШАҺБАЗ** *и. йыйн.* ʻсильные мужчиныʼ. Батыр ир; ир-ыласын. ■ *Рабиғаның матур тауышы моңло, наҙлы, наҙы менән аулап ала ир-шаһбазды.* Ш. Бабич.

**ИСЕМ-АТ** *и. йыйн.*

1) ʻимя, фамилия, именаʼ. Кешегә тыуғас та бирелә торған шәхси атама. *Исем-атың кем була?*

2) ʻдурная славаʼ. Насар дан, яманат. *Исем-атың сығып ҡуймаһын.*

**ИСЕМ-АТАҠ: исем-атаҡ сығыу** *ҡ.* ʻприобрести дурную славуʼ. Насар дан, яманат таралыу. ■ *[Үмәр:] Ҡыҙыңдың шул йыртҡыс көтөүсе менән исем-атағы сыҡһа, бел уны, муйыныңды өҙөрмөн!* Һ. Дәүләтшина.

**ИСЕМ-ШӘРИФ** *и. йыйн.*

1) ʻинициалыʼ. Кешенең исеме, фамилияһы, атаһының исеме. *Исем-шәрифең нисек?*

2) ʻавторитет, статусʼ. Кешенең абруйы һәм дәрәжәһе. *Исем-шәрифе ни тора!*

**ИҪ-АҠЫЛ** *и.* ʻразумʼ. Аңлау, фекер итеү һәләтлеге. *Иҫ-аҡылы юҡ.*

▲ **иҫ-аҡылға һыймау** *ʻбыть (стать) поразительным, удивительнымʼ*. Ғәжәп итерлек, хайран ҡалырлыҡ булыу *Иҫ-аҡылға һыймаҫлыҡ эш.*

▲ **иҫ-аҡыл ҡороу** 1) бик ныҡ аптырау *ʻозадачиться, оказавшись в безвыходном положенииʼ*. *Ҡылығына иҫ-аҡыл ҡороно.* 2) ныҡ ыҙа сигеү, яфаланыу. *Алыҫтан бесән ташый-ташый иҫ-аҡылым ҡороно.*

▲ **иҫ-аҡыл китеү** ʻудивляться, поражаться, изумляться; диву даватьсяʼ. Бик ныҡ аптырау, шаҡ ҡатыу.

■ *Шул саҡ әбей … бик һылыу бер йәш ҡыҙға әүерелгән. Егеттең быны күреп иҫ-аҡылы киткән.* Әкиәттән.

**ИҪКЕ-БОҪҠО** *и. диал. ҡар.* **иҫке-моҫҡо.**

**ИҪКЕ-МОҪҠО** *и. йыйн.* ‘старые вещи, старье, обноски, ветошь; лохмотья’. Иҫкереп, туҙып бөткән кейем-һалым. ■ *Әсәйем бәләкәй шәмен яндырып, иҫке-моҫҡоларын ямарға ултыра.* Д. Юлтый.

**ИҪКЕ-МОҪҠО ЙЫЙЫУСЫ.** *и.* ‘сборщик старых вещей, обносок’. Иҫкереп, туҙып бөткән әйберҙәрҙе йыйып йөрөүсе, ҡырлайсы. *Беҙ бәләкәй саҡта өләсәйемдәргә гел иҫке-моҫҡо йыйыусы килә торғайны.*

**ИҪКЕ-ҠОНҠАСЫ** *и. диал.* ‘память’. Онотмай башта һаҡлау һәләте, хәтер, зиһен. *Иҫке-ҡонҡасы шәп бит уның.*

**ИҪ-ҠОҪ** *и. йыйн.* ‘запахи’. Еҫ-маҙар. *Иҫ-ҡоҫ юҡ.*

**ИҪЛЕ-ИҪӘҮӘН** *с. диал.* ‘глупый, неумный’. Аҡылы камил түгел, ахмаҡ.

**ИҪҺЕҘ-ОСҺОҘ** *р. һөйл.* ‘без чувств, без сознания’. Бөтөнләй иҫһеҙ. Урамда *иҫһеҙ-осһоҙ ятҡан.* ■ *Өс хеҙмәтсе Алмасыбарҙың теҙгененән көскә тотоп торалар ине, сатан Ибраһим иҫһеҙ-оҫһоҙ Азаматтың сәсенән аймап, ат яғына йөҙөн борҙо.* Й. Мостафин.

**ИҪ-ҺУШ** *и. йыйн.* ‘чувство, сознание’. Иҫ һәм һуш. ■ *[Һалдат] аңын юғалтып, иҫ-һуш аралаш һаташа башлай.* Ғ. Хөсәйенов.

▲ **иҫ-һуш ҡороу** шул уҡ **иҫ-аҡыл ҡороу** – аптырау. ■ *[Мозафар:] "Әсәй, ошонан башлап, Сәкинә ҡыҙың түгел, килenең була", – тигәс, әбейҙең иҫе-һушы ҡороно.* Н. Мусин.

**ИҪӘН-АМАН** *р.*

1) 'жив-здоров'. Донъяла бар, тере; иҫән-һау. ■ *Шул арала Зилбәр үҙенең ярҙамсылары менән дошмандар яғынан иҫән-аман ҡайтып инде.* З. Ураҡсин.

2) 'целый, невредим, неповрежден'. Бәлә-ҡазаһыҙ, зыян-зарарһыҙ; теүәл. *Әйберҙәргә тейеүсе булмаған, бөтәһе лә иҫән-аман үҙ урынында.*

**ИҪӘН-ИМЕН** *р. ҡар.* **иҫән-аман.** ■ *Тәҙрәгә бағып ултырған Ҡәнзәфәр, ҡарҙан асыла барған ерҙе лә күрмәй, ҡәртә эргәһендә бысылмай ҡалған ҡайын ботағында тыуған төйәгенә иҫән-имен ҡайтыуына бөтә йөрәгенән ҡыуанып һайраған сыйырсыҡтың тауышын хатта ишетмәй ине.* М. Ғиләжев.

**ИҪӘНЛЕК-ИМЕНЛЕК** *и. йыйн. ҡар.* **иҫәнлек-һаулыҡ.** *Белгәнен уҡый башлай:* ■ *«Ярабби, бир, хоҙайым, Нур улыма иҫәнлек-именлек бир...* И. Абдуллин.

**ИҪӘНЛЕК-ҺАУЛЫҠ** *и. йыйн.* 'здоровье и благополучие'. Һаулыҡ, сәләмәтлек. ■ *Хаттар менән мәғлүм итәм иҫәнлек-һаулығымды.* Халыҡ йырынан.

▲ **иҫәнлек-һаулыҡҡа** ашағанда, эскәндә яҡшы теләк теләп әйтелә. *Иҫәнлек-һаулыҡҡа булһын!*

**ИҪӘНЛЕК-ҺАУЛЫҠ ҺОРАШЫУ** *ҡ.* 'здороваться'. Осрашҡанда иҫәнлек-һаулыҡ һорашыу, сәләм бирешеү. ■ *Ҡамыр батыр иҫәнлек-һаулыҡ һорашып, өйгә ингән.* Әкиәттән.

**ИҪӘН-ҺАУ I** *р.* ‘жив, здоров, цел, невредим’. Һау-сәләмәт; тере. *Иҫән-һау сакта барып күрге килә.*

**ИҪӘН-ҺАУ II** *р.* ‘благополучно’. Бәлә-казаһыҙ , зыян-зарарһыҙ, имен-аман. *Иҫән-һау барып етеү.* ■ *Арыһалар, сәскәләргә кунып, ял иттеләр, тағы остолар һәм Балкортостанға иҫән-һау әйләнеп кайттылар.* Ф. Иҫәнғолов.

**ИҪӘН-ЯРАН** *с. кар.* **иҫән-аман.**

**ИҪӘП-ХИСАП** *и. йыйн.*

1) ‘учет, взаимные расчеты, счетный’. Иҫәпләү, һанау эше; иҫәп һәм хисап. *Иҫәп-хисап үткәреү.*

2) ‘расчет’. Төрлө хәлде һәр яклап уйлап, самалап сығарылған ниәт. ■ *Кеше менән кәңәшләшмәй, иҫәп-хисапһыҙ ғына эш бармай бит ул.* Ф. Мөхәмәтйәнов.

▲ **иҫәбе-хисабы юк** ‘несметное количество’. Бик күп. *Байлыктың иҫәбе-хисабы юк.*

**ИҪӘП-ҺАН** *и.* ‘счет и количество’. Берәмекләп иҫәпләнгән миҡдар; иҫәп һәм һан. ■ *Әсәй, мәрхүм, кайһы сакта беҙҙең иҫәп-һанды ла онота торғайны.* М. Тажи.

▲ **иҫәбе-һаны юк** ‘очень много’. Һанап бөтөрөрлөк түгел; бик күп. *Был фермерҙың аттарының иҫәбе-һаны юк.*

**ИҪӘПҺЕҘ-ХИСАПҺЫҘ** *с. йыйн. кар.* **иҫәпһеҙ-һанһыҙ.** ■ *Бесәнлеккә йоктарға сыккас та, башка вакыттарҙағы кеүек, бейек күктәге иҫәпһеҙ-хисапһыҙ йондоҙҙарға һокланып, хыялдарға сумып ятманы.* Х. Зарипов.

**ИҪӘПҺЕҘ-ҺАНҺЫҘ** *с. йыйн.* ‘очень много, бесчисленный, бессчетный’. Иҫәбе булмаған, күп. ■ *Күк йөҙөн*

*сыбарлаған иҫәпһеҙ-һанһыҙ йондоҙҙар юйылып бөтөр-бөтмәҫтән, ауыл халҡы йоҡонан уянды.* Я. Хамматов.

**ИТ-АШЛЫ** *с. һөйл.* ‘полный, здоровый, в теле’. Тулы кәүҙәле. *Ит-ашлы кеше.*

**ИТ-АШҺЫҘ** *с. диал.* ‘худой, худосочный’. Ябыҡ, ҡаҡса. *Кәүҙәгә ит-ашһыҙ.* ■ *Хатта уның һөлдәләй ит-ашһыҙ, оҙон буйлы, сығынҡы бите өсөн үтә бәләкәй уйылған ауыҙлы, йоҡа иренле, сомтор танаулы ҡатынын да мөрһәтһенмәй Мәҙинә.* Т. Ғарипова.

**ИТЕК-СИТЕК** *и. йыйн.* ‘сапоги’. Оҙон ҡуныслы күн аяҡ кейеме. ■ *Закир иҫке итек-ситек, төпһөҙ салбар, һыңар еңе өҙөлгән тире тун … тотҡан.* З. Биишева.

**ИТӘК-ЕҢ** *и. йыйн.* ‘подол и рукава’. Кейемдең итәк һәм еңдәре. ● *Эт этлеген итә: итәк-еңде йырта.* Мәҡәл.

▲ **итәк-еңде йыйыу.** 1) бөхтә, ыҫпай булыу *‘быть аккуратным, собранным’. Итәк-еңеңды йыйып йөрө*; **2)** *күсм.* Абайлы булыу, һаҡ булыу *‘быть осторожным, предусмотрительным’.* ■ *Ауыҙы бешкән халыҡ алдын-артын ҡарай, итәк-еңен йыйыу хәстәрен күрә.* Ф. Иҫәнғолов.

**ИТӘК-САБЫУ** *и. йыйн.* ‘подол’. Өҫ кейеменең билдән түбәнге өлөштәре. ■ *Итәк-сабыуын тартҡылап, битен-күҙен һыпырғылағас, ыҫпайланып ҡалды.* И. Ғиззәтуллин

▲ **итәк-сабыуҙы йыйып йөрөү** *‘проявлять осторожность, быть осторожным’. Һин ҡалала, ҡыҙым, итәк-сабыуыңды йыйып йөрө инде.* ■ *Егеттәр бөтмәҫ ул, итәк-сабыуыңды йыйып йөрө, киләһе йылға уҡырға инергә әҙерлән.* З. Ҡадирова.

**ИТӘК-САЛҒЫЙ** *и. йыйн.* ‘подол’. Оҙон итәкле өҫ кейеменең билдән түбәнге өлөштәре. ■ *[Сапҡын:] Буләкән ағайым әйтеп ебәрҙе: Шаҡман уҙамanға еткерегеҙ, тине, итәк-салғыйын йыя торһон, тине.* К. Мәргән.

**ИХАХАЙ-МИХАХАЙ** *р. һөйл.* ‘хохоча, громкий смех без причины’. Юҡҡа-барға ҡысҡырып көлөү. ■ *Киреһенсә, сиратһыҙ билет алған ҡыҙҙың иң алдағы урында, асыҡ балтырҙарын ялтыратып, үҙе төҫлө бер егет менән ихахай-михахай килеп, ауыҙын йырып ултырғанын күргәс, Ғәтифә апайҙың күңеленә һарылған асыулы хистәре ташып түгелә яҙҙы.* Ф. Әсәнов.

**ИШЕКЛЕ-ТҮРЛЕ ЙӨРӨҮ** *ҡ.* ‘расхаживать взад и вперед по комнате’. Бер ишек төбөнә, бер түргә йөрөү. ■ *Егор Николаевич эстән генә ниндәйҙер көйҙө мөңрәй-мөңрәй ишекле-түрле йөрөй башланы.* З. Ураҡсин.

**ИШ-ҠУШ I** *р.* ‘вместе’. Бергә. *Иш-ҡуш уйнайҙар.*

**ИШ-ҠУШ II** *и. диал. ҡар.* **туған-тыумаса**.

**ИШ-ҠУШ ЙОЛАҺЫ I** *и. миф.* ‘магический обряд’. Ике сығанаҡтан ҡушылған һыу ярҙамында ауырыу, сирҙе имләү. ■ *Һағышты, ҡан ҡоҫоуҙы имләү өсөн иш-ҡуш йолаһын үткәргәндәр.* Башҡорттарҙың им-том китабынан.

**ИШ-ҠУШ ЙОЛАҺЫ II** *и. диал. этн.* ‘вид обряда; способ заговаривания тоскующей невесты по родной стороне’. Киленде тыуған яғын һағыныуҙан арындырыу йолаһы. *Иш-ҡуш йолаһын үткәреү.*

## Й

**ЙОҠЛАР-ЙОҠЛАМАҪ** *р.* ‘в полудреме’. Уяулы-йоҡоло, йоҡо аралаш, ярым йоҡоло. ■ *Ҡарт мейескә терәлеберәк, оҙон һикелә йоҡлар-йоҡламаҫ ята ине.* М. Хужин.

**ЙОҠОЛО-УЯУЛЫ** I *с.* ‘полусонный’. Ярым йоҡоло. ■ *Йоҡоло-уяулы һалдаттың һүҙгә һаран булмауынан файҙаланып, һөйләшә торғас, ул беҙҙе урынлаштырырға булды.* А. Таһиров.

**ЙОҠОЛО-УЯУЛЫ** II *р. ҡар.* **йоҡлар-йоҡламаҫ**. *Йоҡоло-уяулы йөрөү.*

**ЙОЛА-ЫРЫМ** *и. йыйн.* ‘обычаи и поверья’. Йола һәм ырым. *Байрамдарҙы йола-ырымдар буйынса үткәрергә ине.*

**ЙОМОШ-ЙҮН** *и. йыйн.* ‘разные поручения, задания’. Һәр төрлө йомош, эш. *Малай хәҙер йомош-йүнгә ярай.*

■ *–Нихәл, һаулыҡмы, бала-саға именме? – Арыу әле хәҙергә. – Берәй йомош-йүнең бармы?* Һ. Дәүләтшина.

**ЙОМОШ-ЮЛ** *и. йыйн.* ‘разные поручения, задания’. Кемгәлер ҡушылған төрлө йомош, ваҡ-төйәк эш. ■ *Сөнәгәт бәләкәйҙән үк йомош-юлға етеҙ, егәрле, эшкә ҡатҡыл булды.* Ж. Кейекбаев.

**ЙОРТ-БИЛӘМӘ** *и. ҡар.* **йорт-ер.** *Ҡунаҡтар килеүенә йорт-биләмәңде йыйыштырып ҡуй.*

**ЙОРТ-ЕР** *и. йыйн.*

1) ‘хозяйство, имущество’. Кешенең бөтә хужалығы: өйө, милке, биләгән ере. *Ялбыр йөнлө* ■ *Алабай йорт-ерҙәрҙе һағалай.* Ғ. Амантай.

2) ‘родная сторона, родные края, народ’. Тирә-яҡ халыҡ, ил. *Йорт-ереңде ташлап китеүе бик ауыр.*

3) ‘народ, люди’. Күмәк кеше, халыҡ. ■ *Йорт-ер алдында ҡәйнешенең хаҡын төшөрмә. Ят ағаһын еҫкәгәнсе, үҙ кешең булыр, ят итмәҫ.* Һ. Дәүләтшина.

4) *миф.* ‘сакральная земля’. Изгеләштерелгән ер. *Йорт-ерең һиңә йәшәүгә көс бирә.*

**ЙОРТ-ИЛ** *и. йыйн.*

1) ‘родина, государство, страна’. Ил, дәүләт, йәшәгән ер. ■ *Яҡшы азамат ил көтһә, йорто имен булыр; кире азамат йорт көтһә, йортон-илен йүнкетер*. Ҡобайырҙан.

2) ‘народ, род’. Халыҡ, ырыу. *Йорт-ил менән ханға ҡаршы сығыу.*

3) *миф.* ‘сакральная земля’. Изгеләштерелгән, сакраль тыуған ил, ер төшөнсәһе. *Йорт-ил менән Хоҙайҙан һорау.* ■ *Күгәреп ятҡан күк тауҙар, киң далалар күҙ алдына баҫты, халыҡты, йорт-илде, ер-һыуҙарҙы һаҡлап, ғәҙеллекте һәм азатлыҡты яулап, яуҙарға күтәрелгән батырҙарҙың йөрәк тибеше, оран тауыштары ишетелгәндәй булды.* Р. Шәкүр.

**ЙОРТ-ЙЫҺАЗ** *и. йыйн.* ‘домашнее имущество’. Йорт һәм бөтә булған йыһаз. ■ *Байҙың бөтә нәмәһе етеш, кәртә-ҡураһы бөтөн; йорт-йыһазы шәп, мал-тыуары күп, ти.* Әкиәттән. *Ҡул оҫталары йорттар һалған, ташпулаттар ҡорған, йорт-йыһазын биҙәгән*. Ғ. Хөсәйенов.

**ЙОРТ-ҠАРАЛТЫ** *и. йыйн.* ‘дом и надворные постройки, домашнее хозяйство’. Йорт һәм бөтә кәртә ҡура.

*Йорт-ҡаралты тирәһе.* ■ *Урман буйында ғына йәшәгәс, был ауыл кешеләре йорт-ҡаралтыларҙы, ысын хужаларса, ныҡлап, матурлап төҙөгәндәр.* Р. Сабитов.

**ЙОРТ-ҠУРА** *и. йыйн.* 'дом и надворные постройки'. Йорт һәм бөтә кәртә-ҡура. ■ *Күберәк үҙ йорт-ҡураһы тирәһендә соҡсонған кешеләр ҙә бар.* З. Вәлиди.

**ЙОРТ-МИЛЕК** *и. йыйн.* 'домашнее имущество'. Йорт һәм бөтә булған милек. *Йорт-милегеңде страховкаларға кәрәк.* ■ *Тик уларҙың илде бутап, халыҡты ҡотортоп йөрөүенә, шул арҡала аңламаҫтан илгә сығып йорт-милеккә ут һалып тәләф итмәһен тип һеркелдәймен.* Т. Хәйбуллин.

**ЙОРТ-МӨЛКӘТ** *и. ҡар.* **йорт-милек.** *Афарин, улым, йортһоҙ-мөлкәтһеҙ ҡалманың.* ■ *Йорт-мөлкәтенең, ишле мал-тыуарының именлегенә ҡул һелтәп, ул [Шәрғиә] өйҙә бикләнеп ятты.* Ә. Хәкимов.

**ЙОРТҺОҘ-ЕРҺЕҘ** *с.* 'бездомный, безземельный'. Йорт-ере, хужалығы булмаған. *Йорт-ерһеҙ кеше, минеңсә, бәхетһеҙ кеше.*

**ЙӨҘ-ҠИӘФӘТ** *и.* 'внешний вид'. Кешенең тышҡы күренеше *(йөҙө, өҫ-башы, кейемдәре).* ■ *[Еңгәмдең] йөҙ-ҡиәфәтендә – һөйләп бөтөргөһөҙ нәфислек, мутлыҡ, һөйкөмлөлөк.* Д. Бүләков.

**ЙӨН-ЙОРҠА** *и. йыйн.* 'всякая шерсть, руно, волосы *(на теле)*; пух'. Төрлө йөн. *Йөн-йорҡанан кофта бәйләп бирҙем.*

**ЙӨНӨ-ТИРЕҺЕ** *и. йыйн.* ‘кожа и мех зверя’. Йәнлектең йөнө һәм тиреһе. *Йәнлектең йөнө-тиреһен эшкәртеү.*

**ЙӨРӨШ-ТОРОШ** *и. йыйн.* ‘поведение, походка человека, поступки’. Кешенең үҙен тотоу рәүеше, йөрөшө, ҡылығы. ■ *Ул [Гөлниса] яуаплы хеҙмәткәр булып алғас, йөрөш-торошон бөтөнләй ирҙәргә оҡшатып ебәрҙе.* З. Биишева.

**ЙӨРӘК-БАУЫР** *и. йыйн.*

1) ‘печень и сердце *(у животного)*’. Малдың йөрәк һәм бауыр ите. *Ҡыҙым бигерәк йөрәк-бауыр яратып ашай.*

2) *перен.* ‘внутренний психологический мир человека’. *күсм.* Кешенең эске донъяһы; күңел, йән, рух. ■ *Һөйгән генә йәрең ҡуштан булһа, инеп бара йөрәк-бауырға.* Халыҡ йырынан.

**ЙӨРӘК-ҠАН** *с. йыйн.* ‘сердечно-сосудистый’. Йөрәктәге һәм ҡан тамырҙарында булған. *Йөрәк-ҡан тамырҙарындағы ауырыу һуңғы йылда күбәйҙе.*

**ЙӨРӘКТАУ-ҠАҢНЫ** *и. этн.* ‘название одного из родовых подразделений башкир’. Ҡаңны ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. *Йөрәктау-ҡаңнылар бик күп түгел.*

**ЙҮГЕРӘ-АТЛАЙ** *р.* ‘вприпрыжку, то бегом, то шагом, торопливо’. Бер йүгереп, бер атлап; бик ашығып; йүгерә-атлап. ■ *Мәрфуға апай йүгерә-атлай беҙҙең ҡапҡанан инеп китте.* С. Агиш.

**ЙҮГЕРӘ-АТЛАП** *р. ҡар.* **йүгерә-атлай.** ■ *Ул [Фәрзәнә], моғайын, хәҙер, һыйырҙарын кискелеккә һауыу өсөн, йүгерә-атлап фермаға китеп баралыр.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЙҮГЕРӘ-САБА** *р.* ‘бегом, спешно’ Бер йүгереп, бер сабып; бик ашығып. ■ *Эт … йүгерә-саба ауыл яғына китте.* С. Кулибай.

**ЙҮНЛЕ-БАШЛЫ** *с.* ‘нормальный, путный’. Иҫәпкә алырлыҡ, иғтибар итерлек яҡшы, рәтле. *Йүнле-башлы эш күрһәтмәү.* ■ *Йүнле-башлы ҡорал юҡ.* М. Ғиләжев. *Өйөндә йүнле-башлы йыһаз юҡ…* Р. Камалов.

**ЙҮНЛЕ-РӘТЛЕ** *с. ҡар.* **йүнле-башлы.** ■ *Ҡаҙаҡтар йүнле-рәтле ризыҡ бирмәне, асыраҡ булһа, алыҫҡа ҡаса алмаҫ, тип уйланылар, ахыры.* З. Ураҡсин.

**ЙЫЛАН-САЯН** *и. йыйн.* ‘ядовитые змеи, скорпионы, пауки’. Саға торған төрлө ағыулы йән эйәләре. ■ *Урал күлде һура, ти, йылан-саян тула, ти. Берәм-берәм Уралдан йөрәк-бауырын телә, ти.* «Урал батыр» эпосынан.

**ЙЫЛҒА-КҮЛ** *и. йыйн.* ‘реки и озера’. Йылға һәм күлдәрҙең йыйылма атамаһы. ■ *Болоттар һирәгәйгән урындарҙа ҙур ғына йылға-күлдәр күренеп ҡала.* Р. Бикбаев.

**ЙЫЛТЫРАҠ-ЙЫШЫРАҠ** *и. йыйн. ҡар.* **йылтыр-йышыр.**

**ЙЫЛТЫР-ЙЫШЫР** *и. йыйн.* ‘дорогие вещи’. Күҙгә күренерҙәй арыуыраҡ нәмәләр *(өй эсендәге).* ■ *Өй эсе йылтыр-йышыр менән шыплап тултырылған.* Б. Бикбай.

**ЙЫРАУ-СӘСӘН** *и. йыйн.* ‘певцы и сказители’. Йырауҙар һәм сәсәндәр. ■ *Йырау-сәсән атты маҡтап йыр сығара, уны ир-егеттең ҡанаты тип алҡышлай.* Ә. Хәкимов.

**ЙЫРЛЫ-МОҢЛО** *с.* ‘с песнями и музыкой’. Йыр һәм моңо булған. ■ *Йырлы-моңло ауыл янында ҡош тауыштары ла, тәбиғәттә төҫтәр ҙә күркәмерәк.* М. Бураҡаева.

**ЙЫР-МОҢ** *и. йыйн.* ‘песни, мелодии’. Йыр һәм моңло көй. *Халыҡ йыр-моңдо бик ярата.* ■ *Беҙ милләтебеҙ яҙмышы, уның киләсәге тураһында борсолоп, хаҡлы рәүештә һүҙҙе былай тип башлайбыҙ: “Телебеҙҙе, йыр-моңобоҙҙо, изге йолаларыбыҙҙы, айыҡ аҡылыбыҙҙы һаҡлайыҡ.”* М. Кәрим.

**ЙЫРЛАЙ-МӨҢГӨРӘЙ** *ҡ.* ‘петь вполголоса, напевая’. Йырҙы үҙең белгәнсә, көйөн генә көйләп тә үҙеңсә йырлау. ■ *Эйәрле ат өҫтөндә йырлай-мөңгөрәй йылҡы өйөрө артынан тауҙар, далалар гиҙһәң!* З. Биишева.

**ЙЫШ-ЙЫЛТЫРАҠ** *и. йыйн. ҡар.* **йылтыр-йышыр.**

**ЙӘБЕР-ЗОЛМӘТ** *и. йыйн. ҡар.* **йәбер-золом.**

**ЙӘБЕР-ЗОЛОМ** *и. йыйн.* ‘притеснение, гнет; насилие’. Төрлө йәбер һәм золом. ■ *Түрәнең тамағы туймаһы, йәбер-золомон ҡуймаһы, меңәрләп малды ҡыуҙылар, йөҙәрләп йәнде ҡыйҙылар.* Салауат Юлаев.

**ЙӘБЕР-ЙОБОР** *и. йыйн. ҡар.* **йәбер-золом.** ■ *“Яҙығына күрә язаһы”, тип ул [Әсғәт] телен дә тыймаһы, йәбер-йоборға ла иҫе китмәне.* М. Кәрим.

**ЙӘБЕР-ЯФА** *и. йыйн.* ‘обиды и притеснения’. Кәмһетеү, ситкә этеү, төрлө йәбер һәм яфа. *Йәбер-яфа күреү.* ■ *Йәбер-яфа күргән ҡатын-ҡыҙҙар Айһылыуға тура киләләр; сиселмәгән һәр бер мәсьәлә Айһылыуға килеп терәлә.* Д. Юлтый.

**ЙЫРТЫҠ-БОРТОҠ** *и. йыйн.* ‘рванье’. Алама әйберҙәр, алам-һалам, сепрәк-сапраҡ. *Шкафтарҙы йыйыштырып, бөтә йыртыҡ-бортоҡто ташланыҡ.*

**ЙӘЙЕН-ҠЫШЫН** *р.* ‘зимой и летом’. Йәй көнө лә, ҡыш көнө лә; йыл әйләнәһенә. ■ *[Азамат] йәйен-ҡышын йылҡы көтөп, атаһын уйлап, ауыр тормошто ҡәһәрләп йөрөгән.* Ә. Чаныш.

**ЙӘЙӘҮЛЕ-ЯЛПЫЛЫ** *р.* ‘пешком, пеший’. Йәйәүләп килгән. ■ *[Татлыбикә:] Ҡоҙағый, көнө-төнө ятмай тигәндәй, йәйәүле-ялпылы килеп, хәлем дә, аяғым да ҡалмағас, ҡайҙа барайым инде, килеп йығылдым инде.* М. Буранғолов.

**ЙӘЛБЕР-ЙӨЛБӨР** *оҡш.* ‘подражание легкому колебанию предмета’. Еңел генә бәүелгәнде белдергән һүҙ *(йоҡа нәмәгә ҡарата). Йәлбер-йөлбөр итеү.*

**ЙӘЛП-ЙӨЛП** *оҡш.* ‘подражание быстрому и легкому движению; быстро’. Ҡабат-ҡабат йәлп иткән хәрәкәтте белдергән һүҙ. ■ *Ни эшләптер ул [Ирназар] үтә яй атлай, ә Фәйрүзә ашыға, – уға ҡул болғаны ла, йәлп-йөлп итеп, алға йүгерҙе.* Ә. Хәкимов.

**ЙӘЛПӘН-ЙӨЛПӘН** *оҡш.* ‘подражание легкому подпрыгивающему движению: прыг-прыг’. Йәлп-йөлптән оҙайлыраҡ хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Йәлпән-йөлпән килеү.*

**ЙӘМ-ҠОТ** *и. диал.* ‘внешняя красота’. Тышҡы матурлыҡ. *Олатайымдың йорто йәм-ҡот биреп тора.* ■ *Әйтерһең дә, тирә-йүндә йәм-ҡот ҡалманы, йәшәүҙең ҡыҙығы бөттө.* Х. Зарипов.

**ЙӘМ-ТӘМ** *и. йыйн.* ‘вкус к жизни, удовольствие, прелесть’. Ниҙеңдер бөтә матурлығы, ҡәҙере, йәм һәм тәм. ■ *Дуҫлы кеше йәм-тәм белеп йәшәй, дуҫһыҙ кеше тоҙһоҙ аш төҫлө.* А. Игебаев.

**ЙӘН-БИШУЛ** *и. этн.* ‘название одного из родовых подразделений башкир рода Табын’. Табын башҡорттары аймағының исеме.

**ЙӘНКӘЙ-ЙӘНӘШ** *и. ирк.* ‘любимый человек’. Яратҡан, һөйгән кеше; йәр. ■ *Йәнкәй-йәнәш китте ай һунарға, Ашҡаҙарҡай буйына шәшкегә.* Халыҡ йырынан.

**ЙӘНЛЕ-ЙӘНҺЕҘ** *с.* ‘одушевленный и неодушевленный’. Донъялағы бөтә тере һәм тере булмаған *(нәмәләр). Йәнле-йәнһеҙ предметтар.*

**ЙӘН-ТӘН** *и. йыйн.* ‘душа и тело’. Кешенең барлыҡ булмышы, йәне һәм тәне. *Йән-тән менән бирелеп һөйөү.* ■ *Мин кешене һөйҙөм кескәй саҡтан, мин кешегә сикһеҙ ышандым. Шуға ла мин йәнем-тәнем менән күрә алмайым төрлө мещанды.* Р. Ғарипов.

**ЙӘН-ФАРМАН** *р.* ‘изо всех сил, во весь дух, со всех ног’. Бөтә көс менән, йән көскә, бик шәп *(хәрәкәт итеп).*

■ *[Айҙар:] Ниңә шул тиклем йән-фарман сабаһың, аяҡтарыңды ҡыҙғаныр инең саҡ ҡына.* М. Кәрим.

**ЙӘН-ФАРМАН ЭШЛӘҮ** *ҡ.* ‘работать что есть силы’. Бөтә көстө һалып эшләү. ■ *[Сергей:] Үҙе лә [Ғибадулла] йән-фарман эшләй, бисәһен дә егә белә.* Н. Мусин.

**ЙӘРӘМБӘТ-БӘҘРӘК** *и. этн.* ‘название одного из родовых подразделений башкир рода Табын’. Табын ырыуының аймағы.

**ЙӘТИМ-ЕЛПЕ** *и. диал. йыйн. ҡар.* **йәтим-еһер**. *Йәтим-елпенең күҙ йәше төшә.*

**ЙӘТИМ-ЕҺЕР** *и. йыйн.* ‘сироты’. Йәтим балалар, йәтимдәр. *Йәтим-еһер йыйылған.* ■ *Кешеләр әүәлдән гәрип-гөрәбәне яратмай, йәтим-еһерҙән арыраҡ булырға тырыша.* Р. Камалов.

**ЙӘТМӘ-ЙЫЛЫМ** *и. йыйн.* ‘сачки и сети’. Йәтмә һәм йылымдар. ■ *Өй беренсә – ау, йәтмә-йылым, йәй буйы һыу буйынан кеше өҙөлмәй.* М. Ямалетдинов.

**ЙӘШ-ЕЛБӘҘӘК** *с.* ‘молодой, беззаботный, беспечный’. Йәш, шат, вайымһыҙ. ■ *Йәш-елбәҙәк сағыңда болан кеүек елеп ҡал.* Халыҡ йырынан.

**ЙӘШЕЛ-ЗӘҢГӘР I** *и.* ‘медный купорос’. Көкөрт баҡыр тоҙо, тәбиғәттә кристалдар йәки иретмә хәлендә икенсел матдә булараҡ осрай; баҡыр купорос. *Йәшел-зәңгәрҙе ҡулланыу.*

**ЙӘШЕЛ-ЗӘҢГӘР II** *и.* 'бирюзовый'. Фирүзә төҫлө, йәшел менән зәңгәр араһындағы төҫ. *Йәшел-зәңгәр көмбәҙ.*

**ЙӘШ-ЕЛКЕНСӘК** *и. йыйн.* 'молодежь'. Йәш кешеләр, йәштәр. ■ *Һыу ташыу ауыл халҡы өсөн үҙе бер байрам. Малай-шалай сураҡа һуға, йәш-елкенсәк өҙгөс, таҡта яргыс, сәпәмә туп уйнай.* Р. Солтангәрәев. *Йәш-елкенсәк тураһында инде әйтеп тә тораһы юҡ.* К. Мәргән.

**ЙӘШЕЛЛЕ-КҮКЛЕ** *с.*

1) 'зеленовато-синий'. Йәшел менән күк төҫ аралаш. *Йәшелле-күкле яулыҡ.* ■ *Кәсеп уңышы кисереп ҡомарланған ҡортҡа йәшелле-күкле һумдарын төрнәп тәрән ыштан бөрмәһенә тыҡты ла ашығып китеп барҙы.* Й. Солтанов.

2) *перен.* 'легкомысленно'. *күсм.* Елбәҙәк булыу. *Йәшелле-күкле булып йөрөмә!*

3) *перен.* 'визгливо-писклявый *(о голосе)*'. *күсм.* Йәмһеҙ, әсе (*тауыш тураһында*). ■ *Түрәнең был йәшелле-күкле тауышын ерәү ҙә ишетмәне.* Р. Камал.

**ЙӘШЕЛСӘ-ЕМЕШ** *и. йыйн.* 'овощи и фрукты'. Ашамлыҡ өсөн үҫтерелгән төрлө йәшелсә һәм емештәр, баҡса емеше. ■ *[Байморат] баҡсалағы йәшелсә-емештәргә һыу һибергә уйлап өлгөрмәне, өй яғынан ягымлы тауыш ишетелде.* Ф. Янышев.

**ЙӘШЕЛ-ҺӘҢГӘР** *и.*

1) 'зелень бриллиантовая'. Тәндәге сабыртыу кеүек ауырыуҙарҙы дезинфекциялау, зарарһыҙландырыу өсөн ҡулланыла торған антисептик дарыу. *Малдың ҡортлаған еренә йәшел-һәңгәр һөртәләр.*

2) 'медный купорос'. Баҡыр купоросы.

**ЙӘШЕНЕП-БОҪОП** *р.* ‘втайне, тайно, скрытно’. Кеше күҙенә күренмәҫкә, һиҙҙермәҫкә тырышып; ҡасып-боҫоп. *Йәшенеп-боҫоноп ҡына өйгә инде.*

**ЙӘШЕРЕН-БАТЫРЫН I** *р.* ‘тайно, исподтишка, скрытно’. Кемдән дә булһа йәшереләә торған, йәшереп эш итеәлә торған; йәшерен. ■ *[Искәндәр:] Кеше яҙмышын йәшерен-батырын хәл итергә ярамай.* Ә. Хәкимов.

**ЙӘШЕРЕН-БАТЫРЫН II** *и.* ‘секретное, тайное, секрет’. Йәшереп эш итеәлә торған нәмә. ■ *Һинең алда йәшерене-батырыны юҡ инде. Һөйләшегеҙ, килешегеҙ ҙә, үҙең киткәнсе, туйлап ҡуяйыҡ.* Ғ. Ибраһимов.

**ЙӘШЕРЕН-БОШОРОН** *р.* ‘тайно, скрытно’. Кешеләргә белдермәй, һиҙҙермәй эш итеәлә торған; йәшерен; йәшерен-батырын. ■ *[Ҡыраубикә – Ҡарағолға:] Ундай ваҡытта ил ҡарттары кәңәш итә торғайнылар, һеҙ йәшерен-бошорон ғына эш итергә уйлайһығыҙ.* Д. Юлтый.

**ЙӘШЕРТЕН-БОШОРТОН** *р. диал. ҡар.* **йәшерен-бошорон.** *Йәшертен-бошортон эшләү.* ■ *Кинйәгә лә, бөтә уҫал күҙҙәрҙән ҡасып, бөтөнләй дошман булған йәйләүҙә, үҙен сәйнәп ырғытырға әҙер торған Йомағужа һәм Көҫәпҡолдар, Бикбулат һәм Көҫәпәйҙәр араһында, йәшертен-бошортон осрашып, Айым менән һөйләшеүе еңел түгел ине, әлбиттә.* Ғ. Ибраһимов.

**ЙӘШКЕЛТ-ЗӘҢГӘР** *с.* ‘сине-зеленый’. Йәшел менән зәңгәр төҫтәре булған, йәшел һәм зәңгәр төҫтәр ҡушылған. *Минең күҙҙәрем тыуғанда йәшкелт-зәңгәр булған.*

**ЙӘШКЕЛТ-ҺАРЫ** *с.* ‘зеленовато-желтый’. Йәшеле булған һары. ■ *Иртәләгән йәйге ҡояш Сусаҡтау башындағы иң бейек ҡарағайҙарҙың осон ғына йәшкелт-һары төҫкә буяған саҡта уятты мине әсәйем.* Д. Шәрәфетдинов.

**ЙӘШ-ҮҪТЕРМӘ** *и. диал. ҡар.* **йәш-елкенсәк.** *Йәш-үҫтермәне йыйып әңгәмәләштек.*

**ЙӘЬЖҮЖ-МӘЬЖҮЖ** *и. дини. иҫк. кит.* ‘Гог и Магог’. Ерҙе ябып, донъяны ҡырып килгән бик яман, ҡырағай ике халыҡ. Два очень злых, диких народа, пришедших, чтобы закрыть Землю и уничтожить мир. ■ *[Бибисара абыстай - Таибә әбейгә:] Ҡоҙағый, шуны әйтәм әле, ахырзаман еткәс, ҡиәмәт ҡупҡас, ергә йәьжүж-мәьжүждәр сығыр, ти.* З. Биишева.

# К

**КАРУАН-ҺАРАЙ** *и.* ‘Караван-сарай’. Каруан һәм каруансылар туҡтай торған йорт. ■ *Сәлимйән түҙмәне, йәшеренгән төйәгенән ҡубынып, ҡаса-боҫа, тигәндәй, Каруан-һарайға йүнәлде.* Й. Солтанов.

**КАХЫР-БОХОР** *с. диал. ҡар*.

1) ‘рваный, дырявый, изношенный’. Иҫкереп туҙған, тишек-тошоҡ, йыртыҡ. *Кахыр-бохор халатыңды кейеп йөрөмә әле.*

2) ‘плохой, скверный, дурной’. Насар, яман. *Кахыр-бохор көн.*

**КЕЙЕК-ЙӘНЛЕК** *и. йыйн.* ‘дичь, дикие животные’. Ниндәй ҙә булһа ҡырағай йәнлек. ■ *Тәбиғәттең һоҡланғыс бер*

*мәле бар: таң алды. Бөтә йән эйәһе — ҡош-ҡорт, кейек-йәнлек, мал-тыуар, хатта бөжәктәр ҙә ошо мәлдә тынып ҡалалар һәм, гәжәйеп бер рәхәтлеккә юлыҡҡандай, ойоп китәләр.* К. Мәргән.

**КЕЙЕК-ЯНУАР** *и. йыйн. ҡар.* **кейек-йәнлек.** ■ *Яралы егет һаман да шул кейек-януарҙар менән мәшғүл икән, – тип шаяртты Ҡолансәс.* Ғ. Хөсәйенов.

**КЕЙЕМ-ҠАРА** *и. йыйн.* ‘одежда’. Өҫ-башҡа кейә торған төрлө кейем; кейем-һалым. *Кеше араһына сығырға кейем-ҡарам да юҡ.*

**КЕЙЕМ-ҺАЛЫМ** *и. йыйн.* ‘одежда, одеяние’. Һәр төрлө өҫ кейеме; кейем-ҡара. ■ *Хәҙер инде минең кейем-һалым да ауылдағыса түгел, киндер күлдәк урынына – ҡаласа тегелгән ситса күлдәк, бумажный булһа ла – салбар.* Т. Йәнәби. *Булдыра алған һәр кем, түйгә һылтанып, кейем-һалымын да бөтәйтеп ҡалырға тырышты.* К. Мәргән.

**КЕЙЕНЕП-ЯҺАНЫУ** *ҡ* ‘наряжаться’. Ҡупшы итеп кейенеү; ыҫпайланыу. *Кейенеп-яһаныу өсөн ваҡыт кәрәк бит.*

**КЕРЕМ-СЫҒЫМ** *и. йыйн.* ‘приход и расход’. Ингән һәм тотонолған аҡса йәки матди байлыҡ. *Йыллыҡ керем-сығымды иҫәпләү.* ■ *Әңгәмә алыш-биреш, баҙар хаҡы, һәр төрлө керем-сығым кеүек хужалыҡ хәстәрҙәренән башлап, илдәге бола-болғаныштарҙы, сит мәмләкәттәр менән элемтә мәсьәләләрен айҡап ала.* Ә. Хәкимов.

**КЕТЕ-МЕТЕ** *и. ҡар.* **ҡыты-мыты.** ■ *[Дәүләтбай:] Бик яңғыратырға тырышмағанда ла, баҡсағыҙ, ишек алдығыҙ ҡойоп*

*ҡуйған кеүек (өҫтәлгә ҡарап), тик өҫтәлегеҙҙә кете-мете аҙыраҡ түгелме һуң?* Н. Нәжми.

**КЕШЕ-КӨН** *и.* ‘трудодень’. Бер кешенең тулы эш көнөнә нигеҙләп алынған хеҙмәт үлсәү берәмеге. *Яҙғы ашлыҡты тамамлар өсөн бер-ике кеше-көн кәрәк.*

**КЕШЕ-ҠАРА** *и. йыйн.* ‘кто-нибудь, кто-либо’. Ниндәй ҙә булһа кеше, кеше-фәлән. ■ *Дала, осо ҡырыйы юҡ, тип-тигеҙ дала… Һис бер ауыл, кеше-ҡара күренмәй.* И. Көҫәпҡол.

**КЕШЕ-МАҘАР** *и. ҡар*. **кеше-ҡара.** ■ *Кеше-маҙар булһа ла – күрерлекме ни, дөм ҡараңғы.* Ғ. Ибраһимов.

**КЕШЕ-ФӘЛӘН** *и. йыйн.* **кеше-ҡара**. Ниндәй ҙә булһа кеше. *Ҡарап тор әле, кеше-фәлән килеп кермәһен.*

**КИЗЕ-МАМЫҠ** *и.*

1) ‘шерстяные нити, хлопчатобумажная пряжа’. Мамыҡ еп. ■ *Ойоҡ һәм ойоҡбаштың һалҡын миҙгелендә йөндән, ә йылы ваҡытта кизе-мамыҡтан бәйләнгәне яҡшы.* В. Ғүмәров.

2) ‘хлопчатобумажная ткань’. Кизе-мамыҡтан туҡыма. *Кизе-мамыҡ күлдәк һатып алған.* ■ *Кейемдәренә тиклем бер рәүештәрәк: кизе-мамыҡ туҡыманан тегелгән лапшыҡ халаттар.* Ш. Шәкүрова.

**КИЛГӘН-КИТКӘН** *с.* ‘приходящие и уходящие *(о посетителях)*’. Килеп китеп йөрөгән *(кешегә ҡарата).* ■ *Килгән-киткән һәр әҙәмдең кем икәнен белергә тейешмен.* Р. Байбулатов. *Заятүләк менән Һыуһылыу … көн килгәнгә һөт биреп, төн ҡунғанға ут биреп, килгән-киткәнгә төйәк булып, оҙон, рәхәт*

*гүмер кисерә.* «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосынан. *Беҙ ауыл кешеһе, килгән-киткән кеше аҙ.* Ғ. Дәүләтшин.

**КИЛДЕ-КИТТЕ I** *с.*

1) ʻненормальныйʼ. Аҡылға бер төрлө, аҡылға еңелерәк булған; килделе-киттеле. *Килде-китте кеше.*

2) ʻне заслуживающий внимания, нестоящий, плохойʼ.

Етди булмаған, еңел, теләһә ниндәй; килделе-киттеле. *Килде-китте хәбәр.* ■ *Заманаһы шулай килделе-киттеле ине шул.* З. Ураҡсин.

**КИЛДЕ-КИТТЕ II р**. ʻненормальноʼ. Етди булмаған, еңелсә, сәйер. *Килде-китте эшләп өйрәнгән инде ул малай.*

**КИЛДЕЛЕ-КИТТЕЛЕ** *с. ҡар.* **килде-китте.**

**КИЛЕМ-КИТЕМ** *и. йыйн.* ʻгости и расходы, связанные с их приемомʼ. Килгән-киткән кеше; ҡунаҡ-төшөм. ■ *Бөтә килем-китем туй сығымын үҙем күтәрермен, – ти Күсәрбай.* Ҡ. Даян.

**КИЛЕМ-ТӨШӨМ** *и. йыйн.* ʻдоход, прибыльʼ. Хеҙмәттән йәки йыйымдан төшкән файҙа. ■ *[Фәйзулла ҡарт:] Килем-төшөмдө лә, сығымды ла рәйес менән бер рәттән тракторсы ла, һауынсы ла белеп торорға тейеш.* Ә. Әминев.

**КИЛЕН-КИЛТӘН** *и. йыйн. һөйл.* ʻмолодицы, молодухи, снохиʼ. Килендәр, йәш ҡатындар. ■ *[Сәлимәләр янына] тағы бер төркөм килен-килтән, ҡыҙ-ҡырҡын килеп ҡушылды.* С. Кулибай.

**КИЛЕН-КИРКЕН** *и. диал. ҡар.* **килем-китем.**

**КИЛЕП-КИТЕП** *ҡ.* ‘навестить’. Бер килеп, бер китеү, килгеләү. *Ул килеп-китеп йөрөй.*

**КИЛЕШ-КИЛБӘТ** *и. йыйн.* ‘облик, внешний вид’. Тышҡы ҡиәфәт, төҫ баш. ■ *Тэрәпә яғынан яҡшы ерән ат еккән, килеш-килбәтенә ҡарағанда бик күп ҡарт булмаһа ла, йөрәктәй һаҡал үҫтергән сыуаш килеп етте.* Ф. Иҫәнғолов.

**КИЛӘ-КИЛЕП** *р.* ‘вдруг, резко, сразу’. Ҡапыл. *Килә-килеп һуғып ебәрҙе.* ■ *Әле яңы ғына ҡайтыуым, ә ул, килә-килеп, хәҙер үк, тип йәнгә тейә, – тине Ғиниәтулла ағай.* Й. Солтанов.

**КИМТЕК-ҺҮТЕК** *и. йыйн.* ‘дырка, прорехи’. Йыртылған-һүтелгән урын. *Кимтек-һүтеген тегеү.*

**КИРЕЛЕ-МИРЕЛЕ** *р. һөйл. ҡар.* **кирле-мирле.** ■ *[Ҡыраубикә – Гөлбикәгә:] Йә, килен, ирең юлға сыҡҡанда киреле-миреле һөйләп торма инде.* Д. Юлтый.

**КИРЕЛЕП-ҺУҘЫЛЫП** *ҡ.* ‘потягиваясь’. Бер кирелеп, бер яҙылып, ҡабат-ҡабат кирелеп. ■ *Уғаса булмай, теге егеттәр ҙә кирелеп-һуҙылып урындарынан торҙолар.* С. Кулибай.

**КИРЛЕ-МИРЛЕ** *р.* ‘противоречиво, то так, то сяк’. Бер тегеләй, бер былай, ҡырҫ-мырҫ. ■ *Һин инде, атаһы, кирле-мирле һөйләнмә***.** А. Таһиров.

**КИСӘЛЕ-БӨГӨНГӨ** *р.* ‘вчера и сегодня, последние два дня’. Һуңғы ике көн эсендә. *Кисәле-бөгөнлө аяҡтарым һыҙлап тора.*

**КИТЕК-ҠОТОҠ I** *и. йыйн.* ʻостатки, клочкиʼ. Бесәнлектәге бүленеп ҡалған урын. *Атайым бөгөн китек-ҡотоҡто сабып ҡайтты.*

**КИТЕК-ҠОТОҠ II** *с.*

1) ʻвесь щербатый, с зазубринами, с щербинами разбитыйʼ. Кителеп, ярсылып бөткән. ■ *[Энйебикә] китек-ҡотоҡ өс шәшке ултыртып, ҡалай менән моронланған сәйнүктән сәй яһай башланы.* Һ. Дәүләтшина.

2) ʻне целый, остаточный, разбросанный *(о земельных участках)*ʼ. Урыны-урыны менән бүленеп-кителеп ҡалған. *Китек-ҡотоҡ сабынлыҡ.*

**КИТИ-МИТИ ИТЕҮ** *ҡ. диал.* ʻхитрить, изворачиватьсяʼ. Мутлыҡ эшләү. *Кити-мити итеп мутлашып тик йөрөй.*

**КӨЛ-КҮМЕР** *и. йыйн.* ʻпепелище, руиныʼ. Янған, үртәлгән нәмәнең ҡалдығы. ■ *Немецтар аяҡ баҫҡан урында көл-күмер генә ҡала.* Х. Мөхтәр. *Үҙем кеүек, көл-күмергә буяп, аунатҡан бит ауыл мейесе...* Р. Ғарипов.

▲ **көл-күмер итеү** ʻиспепелить, превратить в пепелищеʼ. Көлгә әйләндереү, ут менән юҡ итеү.

▲ **көл-күмергә ҡалыу** ʻсгореть дотла, превратиться в пепелʼ. Бөтөнләй яныр бөтөү, көлгә ҡалыу.

**КӨЙЛӘП-СӨЙЛӘП** *р.* ʻуговаривая, применяя лестьʼ. Төрлөсә әүрәтеп; алдаштырып. *Ҡыҙымды көйләп-сөйләп кенә йоҡлатам.*

**КӨЙӘНТӘ-СИЛӘК** *и. йыйн.* ʻкоромысло и ведраʼ. Көйәнтә һәм силәктәр. ■ *Гөлйөҙөм, унан тартынып башын*

*баҫкан көйө көйәнтә-силәктәрен ҡупшы бәүелтеп,ситтәрәк бара, һүҙгә ҡатнашмай.* Һ. Дәүләтшина.

**КӨЛ-ТАЛҠАН** *и. йыйн.* 'пепелище, руины'. Янып, емерелеп, туҙанға әйләнгән нәмә. ■ *Яуҙар килһә Рәсәйгә, башҡорт менде толпарын. Ул белде хас дошмандарын көл-талҡандай онтарын.* Ҡ. Даян.

**КӨН-БАЙМАН** *и. йыйн.* 'спокойная жизнь'. Тыныс тормош. ■ *Яуыз рус түрәләренән, башҡорт страшиналарынан ярлы-ябағаға көн-байман юҡ.* Ғ. Хөсәйенов.

**КӨНӨН-ТӨНӨН** *р.* Тәүлек әйләнәһенә; көнө-төнө. *Быйыл көҙ көнөн-төнөн ямғыр яуҙы.*

**КӨНӨ-ТӨНӨ** *р.* 'днем и ночью, круглосуточно, постоянно'. Тәүлек әйләнәһенә; һис туҡтауһыҙ, һәр ваҡыт; көнөн-төнөн. ■ *Көнө-төнө эшләйһең, эшеңде яратмайҙар.* Һ. Дәүләтшина.

**КӨН-ТӨН** *р.* 'днём и ночью'. Бер туҡтауһыҙ, һәр ваҡыт; көнө-төнө.

**КӨН-ФӘЙӘКҮН** *кит. иҫк.* 'будь, и оно будет (*фраза из Корана*)'. «Бул» тип әйтеү менән үк була (*бер һүҙҙе дөрөҫләгәндә әйтелә*). ■ *[Аҡһаҡал:] Йомартлыҡтан мөлкәт кәмемәй ул. Көн-фәйәкүн!* М. Кәрим.

**КӨНЬЯҠ-КӨНБАЙЫШ** *и.* 'юго-запад'. Көньяҡ менән көнбайыш араһындағы тараф.

**КӨНЬЯҠ-КӨНСЫҒЫШ** *и.* ‘юго-восток’. Көньяҡ менән көнсығыш араһындағы тараф. *Көньяҡ-көнсығыштан һыбайлылар күренде.*

**КӨҢГӨР-ҠАҢҒЫР** *р.* ‘тихо, спокойно, медленно’. Тыныс ҡына, бер көй менән, әкренләп. ■ *[Әбей менән бабай] татыу ғына, көңгөр-ҡаңғыр донъя көткән.* Б. Вәлит.

**КӨПӘ-КӨНДӨҘ** *р.* ‘средь бела дня’. Яп-яҡтыла, көндөҙөн. *Көпә-көндөҙ оялмайынса ҡосаҡлашып торалар.*

**КӨС-ҠЕҮӘТ** *и. йыйн.* ‘сила, мощь; мощность, могущество’. Көс һәм ҡеүәт. ■ *Көс-ҡеүәттең бөтәһе ерҙән инде, ҡеүәтте, тим, йәлләмәй биргән инде.* М. Кәрим.

**КӨС-ХӘЛ** *и. йыйн.* ‘сила и мощь’. Физик мөмкинлек; ҡеүәт. ■ *[Егет] һыуҙы эскән икән, бөтөнләй сәләмәтләнеп, көс-хәл инеп, аяғына баҫҡан да … киткән, ти.* Әкиәттән.

▲ **көс-хәл менән** ‘с трудом, насилу’. Ҡыйынлыҡ, ауырлыҡ менән. *Бөгөн көс-хәл менән торҙом.*

**КӨШТӨР-ҠАШТЫР** *оҡш.* Әкрен генә ҡыштырлаған тауышты белдергән һүҙ. *Мейес артында көштөр-ҡаштыр иткән тауыш сыға.*

**КҮҘ-БАШ** *и. йыйн.* ‘глаза, голова, лицо, внешность’. Бөтә йөҙ, төҫ-баш. *Күҙе-башы күгәреп бөткән.*

▲ **күҙе-башы тонған** ‘он ничего не видит, не соображает’. Кешенең бер нимә күрмәүе, аңламауы.

▲ **күҙе-башы уйнаҡлау** ‘играть глазами, бросать кокетливые взгляды’. Күҙҙе ялт-йолт йөрөтөп, мут итеп ҡарау.

▲ **күҙ-баш алыу** ‘прийти в себя (освободившись от забот, дел)’. Мәшәҡәттәрҙән бушаныу, иркенәйеп ҡалыу, үҙ яйыңараҡ йәшәй башлау.

**КҮҘ-ҠАШ** *и. йыйн.* ‘глаза и брови, лицо’. Кешенең күҙе, ҡашы, бөтә йөҙө. ■ *Ауыҙың-башың остаңлап, һүҙсән булма, киленсәк; күҙең-ҡашың йылмаңлап, күҙсән булма, киленсәк.* Туй йырынан.

▲ **күҙ-ҡаш араһында** ‘*быстро*’. Бик тиҙ,.

▲ **күҙ-ҡаш көтөү** ‘*ждать с нетерпением*’. Түҙемһеҙлек менән көтөү.

**КҮҘ-ҠОЛАҠ** *и. йыйн.* ‘присмотр’. Ҡараштырып, күҙәтеп тороусы; ҡараусы, күҙәтеүсе. *Балаларға күҙ-ҡолаҡ кәрәк.*

▲ **күҙ-ҡолаҡ булыу** ‘присматривать, глядеть’. Күҙ һалыу, иғтибар итеү, ҡараштырыу. *Балаға күҙ-ҡолаҡ бул инде, әсәй!* Ф. Әсәнов.

**КҮҘЛЕ-БАШЛЫ** *с. ҡар.* **башлы-күҙле.**

**КҮК-АЛА** *с.* ‘пятнистый, с серыми, сизыми пятнами; пегий’. Күк һәм ала төҫтәге. *Беҙҙең аттар күк-ала.*

**КҮК-КҮМГӘК** *с.* ‘пепельный’. Төҫһеҙ, көлһыу күк *(төҫө боҙолған, буҙарған нәмәгә ҡарата).*

**КҮКЛЕ-ЙӘШЕЛЛЕ** *с.*

1) ‘сине-зеленый’. Күк менән йәшел ҡатнаш. *Күкле-йәшелле күлдәк.*

2) ‘очень бледный, синий, сине-зеленый *(о цвете лица)*’. Үҙ төҫөн юғалтҡан, төҫө ҡасҡан, күгәреп-буҙарып киткән. *Асыуҙан күкле-йәшелле булып китте.*

*3) перен.* ‘визгливо-пискливый *(о голосе)*’. *күсм.* Йән өшөткөс йәмһеҙ, сыйылдаҡ *(тауышҡа ҡарата). Күкле-йәшелле тауыш. Ҡуй, йәшелле-күкле тауышың менән йырлама.*

**КҮЛДӘК-ЫШТАН** *и. йыйн.* ‘белье’. Йоҡа кейемдең дөйөм исеме; күлдәк менән ыштан. *Күлдәк-ыштаныңды бысратҡанһың бит, балаҡайым.*

**КҮНӘК-САНАҠ** *и. йыйн.* ‘ведра, деревянная посуда’. Күнәк кеүек ағас һауыт-һаба. ■ *Ҡыш улар [Баҡай ауылдары] туғын сапҡан, күнәк-санаҡ эшләгән.* Ж. Кейекбаев.

**КҮРГӘН-БЕЛГӘН** *с.*

1) ‘знакомый’. Күреп йөрөгән, белгән кеше. *Күргән-белгән кешеләрҙән һорашыу.*

2) ‘виданный, испытанный’. Үҙең күргән, һынаған. *Күргән-белгән хәлдәрҙе һөйләү.*

**КҮР-ЕР** *с. диал.* ‘мелкий, пустяковый’. Ваҡ-төйәк, юҡ-бар. *Күр-ер нәмә.*

▲ **күр-ер итеү** ‘*кое-как*’. Улай-былай итеп, нисек тә әмәлен табыу. *Күр-ер итеп малды ҡыш сығарыу.*

**КҮРШЕ-КҮЛӘН** *и. йыйн.* ‘соседи’. Тирә-яҡ күршеләге кешеләр. ■ *Олоно-кесене айырмай, сәләм әйткән күрше-күләнгә.* Ғ. Ғүмәр. *Йылдан-йыл нәҫел-ырыуға, күрше-күләнгә килен төшөргәндә, кейәү менән кәләш кырандасына Сәмиғулла еҙнәмдең тимер күк бейәһе менән Аҡсалды парлап егәләр.* М. Кәрим.

**КҮРШЕ-ТИРӘ** *и. йыйн.*

1) ‘окружающая среда (люди, соседи по местожительству’ яҡындағы урата; яҡын-тирә, тирә-яҡ. *Күрше-тирәләге ауылдар ҙа шул Ишәленән таралып ултырған, ти. Әкиәттән.*

2*) ҡар.* **күрше-күлән.** *Күрше-тирәне ҡунаҡҡа саҡырыу йолаһы һаҡлана әле ул.*

**КҮРШЕ-КӨЙӘН** *и. йыйн. диал. ҡар.* **күрше-күлән.**

**КҮРШЕ-КҮЛӘНКЕ** *и. йыйн. диал. ҡар.* **күрше-күлән**.

**КҮРШЕ-ЯБА** *и. йыйн. диал. ҡар.* **күрше-тирә.**

**КҮРӘ-БАҒА** *р.* ‘заведомо зная, нарочно’. Күрә, белә тороп; күрәләтә. *Күрә-бага бысранаһың.*

**КҮРӘ-БЕЛӘ** *р. ҡар.* **күрә-баға.**

**КҮТӘРЕЛЕП-БӘРЕЛЕП** *ҡ.* ‘беситься, разражаться гневом, бранью’. Ныҡ көйөп, борсолоп, өҙгөләнеү; туҙыныу. *Күтәрелеп-бәрелеп сыгып китте.*

**КӘБӘК-ҺӘБӘК** *и. йыйн.* ‘отходы зерновых культур’. Игендең төрлө сүп-сары. ■ *Бураһында бөткән бар игендәр, ҡалган кәбәк-һәбәк, ваҡ-төйәк.* М. Ғафури.

**КӘЗӘ-ҺАРЫҠ** *и. йыйн.* ‘мелкий скот’. Кәзә һәм һарыҡтар; ваҡ мал.

*Ауылда хәҙер кәзә-һарыҡ ҡына тоталар.*

**КӘЙЕФ-САФА** *и. йыйн.* ‘веселье, развлеченье’. Уйын-көлкө, рәхәтлек. ■ *Өйрәнсек ҡалған ғүмерен батша һарайында йәшәп, ҡәҙер-хөрмәттә, кәйеф-сафала уҙғарған.* З. Биишева.

**КӘЙЕФ-ХОЗУР** *и.* ‘веселье’. ■ *Ултырҙылар кәйеф-хозур ҡороп, ҡара-ҡаршы түңәрәк өҫтәлдә.* М. Тажи.

**КӘЙЕФ-ХӘТЕР** *и. йыйн.* ‘настроение и состояние’. Кешенең кәйефе һәм хәл-әхүәле. ■ *– Туташ, кәйеф-хәтерегеҙ хушмы? – тигән булам. – Арыу әле, – ти Зөләйхә.* Т. Йәнәби.

**КӘЙЕФ-ШӘРИФ** *и. йыйн. ҡар.* **кәйеф-хәтер.**

**КӘКРЕ-БӨКРӨ** *с.* ‘корявый, кривой, весь искривленный’. Тегеләй ҙә былай ҙа кәкре, төрлө яҡҡа кәкрәйгән. *Кәкре-бөкрө ағас. Кәкре-бөкрө тимер.*

**КӘКСӘН-БӨКСӘН** *оҡш.* ‘сгорбившись, ссутулившись’. Билдән яҙыла алмай саҡ-саҡ ҡуҙғалғанды белдергән һүҙ. *Кәксән-бөксән килеп йөрөү.*

**КӘЛЙӘН-КӨЛЙӘН** *оҡш.* ‘шатаясь, неровно’. Ян-яҡҡа аушан-таушан килгән хәрәкәтте белдергән һүҙ. ■ *[Амантаевтың] тубыҡ быуындары хәлһеҙләнгәндән-хәлһеҙләнә бара. Аяҡтарын кәлйән-көлйән килтереп атлай.* Ф. Иҫәнғолов.

**КӘЛТЕР-КӨЛТӨР** *оҡш.*

1) ‘подражанию звуку колеблющейся жести, железки’. Тимер, ҡалай һымаҡ нәмәләр һелкенгәндә келтерләп сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. ■ *Эшелондар кәлтер-көлтөр килеп, көнбайышҡа ашыға.* Ғ. Шәрипов.

2) *перен.* ‘еле-еле’. *күсм.* Көс-хәл менән саҡ ҡыбырлағанды белдергән һүҙ (оло йәштәге, хәлһеҙ кешеләргә ҡарата). *Күрше әбей ҡартайған, кәлтер-көлтөр генә йөрөй.*

**КӘМА-ЙӘНБӘҒИ** *р. иҫк. кит.* ‘как полагается’. Нисек кәрәк, шулай; тейешенсә.

**КӘМӘ-ҺҮӘ** *р. иҫк. кит.* ‘как полагается.’ Нисек кәрәк – шулай; булғанынса. *Бөтә хәлде кәма-һүә һөйләп бирҙем.*

**КӘМ-ХУР БУЛЫУ** *ҡ.* *‘испытывать унижение’.* Башҡаларға ҡарағанда насарыраҡ хәлдә булыу, кәмселек кисереү. *Кеше араһында кәм-хур булғыһы килмәне. М. Хужин.*

**КӘМ-ХУР ИТЕҮ** *‘унижать.’* Кеше алдында түбәнлеккә төшөрөү, кәмһетеү. ...*Кеше араһында кәм-хур итмәнең.* К. Мәргән.

**КӘҢГЕР-КӨҢГӨР** *охш.* ‘хило, слабо, еле-еле’. Быуынһыҙ, хәлһеҙ кешенең, малдың хәрәкәтен белдергән һүҙ. *Кәңгер-көңгөр атлап йөрөй.*

**КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ** *и. йыйн.*

1) ‘совет, наставление’. Нисек итергә өйрәтеп әйткән һүҙ. *Йәш саҡта уҡы, балам, тип өләсәй кәңәш-төңәшен әйтте.*

2) ‘совет, совещание, обмен мнениями’. Нисек итергә үҙ-ара фекер алышыу рәүешендә әңгәмә. *Ошо һорау буйынса кәңәш-төңәш итеп алырға ине.*

**КӘҢӘШ-ТӨЙӨШ** *и. йыйн. ҡар.* **кәңәш-төңәш.**

**КӘРРӘТ-БИКӘРРӘТ** *р. иçк. кит.* ‘много раз’. Күп тапҡыр; ҡабат-ҡабат.

**КӘРТӘ-ҠУРА** *и. йыйн.* ‘скотный двор, домашнее хозяйство’. Ихата һәм мал торлаҡтары. ■ *[Байҙың] кәртә-ҡураһы бөтөн, йорт-йыһазы шәп, мал-тыуары күп, ти.* Әкиәттән.

**КӘРӘК-ЯРАҠ** *и. йыйн.* ‘необходимые вещи, принадлежности’. Төрлө кәрәк нәмә. ■ *Атайым … рус ауылының баҙарында дегетен һатты. Он һәм башҡа кәрәк-яраҡтар алды.* С. Кулибай.

## Ҡ

**ҠАБАЛАН-ҠАРҺАЛАН** *р.* ‘торопливо, спешно; второпях, впопыхах, наспех’. Тиҙ генә, ашыҡ-бошоҡ. ■ *Айытбай ҡабалан-ҡарһалан атын екте лә, тамағына ла ашап тормай юлға сыҡты.* М. Хәйҙәров.

**ҠАБАРЫНҠЫ-БАТЫНҠЫ** *с.* ‘выпукло-вогнутый’. Бер яғы ҡабарып, икенсе яғы батып торған. *Ҡабарынҡы-батынҡы сумса.*

**ҠАҒЫҘ-ҠАРА** *и.* ‘бумага и письменные принадлежности’. Ҡағыҙ һәм яҙыу кәрәк-яраҡтары.

**ҠАҒЫЛЫП-ҺУҒЫЛЫП** *р.*

1) ‘задевая’. Бәрелеп, тейеп китеп. *Ҡағылып-һуғылып тышҡа сығып йүгерҙе.*

2) *перен.* 'бесцельно мотаясь'. *күсм.* Күп тапҡыр тегендә бында инеп, нимә эшләргә белмәй маҡсатһыҙ йөрөү. *Ҡағылып-һуғылып йөрөү.*

**ҠАҒЫЛЫР-ҠАҒЫЛМАҪ** *р.* 'едва дотрагиваясь, притрагиваясь'. Кемгәлер, нимәгәлер еңелсә тейеп. *Ҡағылыр-ҡағылмаҫ ҡына үтеп китте.*

**ҠАҒЫНЫП-ҺӨРТӨНӨП** *ҡ. йыйн.* 'умываться, привести себя в порядок'. Йыуыныу, таҙартыныу. ● *Ҡағынып-һөртөнөп тағы эшкә тотон.* Әйтем.

**ҠАҒЫНЫП-ҺУҒЫНЫП** *р.*

1) 'взмахивая крыльями'. Ҡанаттарын елпеп. ■ *Бик оҙаҡ барғас, бабайҙың алдына йәнә бер ҡош осоп килеп төшкән. Ҡағынып-һуғынып, Нөрхөтдингә әйләнгән.* Әкиәттән.

2) *перен.* 'воодушевленно, вдохновенно'. *күсм.* Йөрәкһеп, талпынып, елкенеп. ■ *Ҡыҙырас, ҡағынып-һуғынып, һабан турғайы булып сырылдарға тотондо.* З. Биишева.

**ҠАҒЫП-ҺУҒЫП** *ҡ.*

1) 'выбивать, отбивать, колотить, встряхивать, очищать (от пыли, снега и т.д.)'. Һуҡҡылап, ҡаҡҡылап, саңдан һ.б. таҙартыу. *Кейемдәрҙе ҡағып-һуғып таҙарттым.*

2) 'трясти, хлопать, взбить что'. Ҡабартыу, күпертеү. *Ҡунаҡтар килеүгә өләсәйем мендәрҙе ҡағып-һуғып күпертеп ҡуйҙы.*

3) 'кидать, бросать'. Төрлө яҡҡа алып һуғыу. ■ *Нескә билкәй, һине ҡағып-һуға тулҡындар.* А. Игебаев.

4) *перен.* 'обижать, притеснять'. *күсм.* Тынғы бирмәй гел һуҡҡылау; туҡмау. *Шул малдарға тынғы юҡ: ҡығып-һуғып ҡына тораһың.*

**ҠАЖ-ҒОЖ** *окш.* 'подражание звуку сильного кашля'. Ҡаты йүткергән тауышты белдергән һүҙ. *Ҡарт ҡаж-ғож килеп йүткерә.*

**ҠАҘЫ-ЯЛ** *и. йыйн.* 'щетинное сало конской гривы'. Йылҡы итенең иң тәмле һаналған ҡаҙыһы менән ялы. ■ *Ҡаҙы-ял еймәҫ наҙ инем, ҡаты-ҡото ейеп йөрөйөм.* «Ҡара юрға» .

**ҠАЙҒЫ-ЗАР** *и. йыйн. ҡар.* **ҡайғы-хәсрәт**. ■ *Алда балҡый яҡты йондоҙ, унда юҡ һис ҡайғы-зар.* Д. Юлтый.

**ҠАЙҒЫ-МИХНӘТ** *и. йыйн. ҡар.* **ҡайғы-хәсрәт**.

**ҠАЙҒЫ-ХӘСРӘТ** *и. йыйн.* 'горести и печали'. Күп хәсрәт; ҡайғы. ■ *Эскенәйем тулы ҡайғы-хәсрәт, ҡурай моңо менән ҡойолһон.* Халыҡ йырынан.

**ҠАЙНАР-ҠАЙНАМАҪ** *с.* 'не доведенный до кипения'. Ҡайнап сығып өлгөрмәгән. *Ҡайнар-ҡайнамаҫ сәй эсеп ҡайттыҡ.*

**ҠАЙНЫ-ҠАЙНАҒА** *и. йыйн.*

1) 'тесть и его старшие братья'. Иренең атаһы, ағай тейеш кешеләре (ҡатынына ҡарата). ■ *– Дөрөҫ, хәҙер килендәргә ҡайны-ҡайнағалар менән һөйләшмәҫкә тигән закон бөткән.* Һ. Дәүләтшина.

2) 'свекор и старшие братья'. Ҡатынының атаһы, ағай тейеш кешеләре (иренә ҡарата). *Ҡайны-ҡайнағалар юбилейға килделәр.*

**ҠАЙНЫ-ҠӘЙНӘ** *и. йыйн.* ‘тесть, свекор; теща, свекровь’. Иренең ата-әсәһе (ҡатынға ҡарата) һәм ҡатынының ата-әсәһе (иренә ҡарата). ■ *Уның [Ҡобараның] иренән туҡмалып, ҡайны-ҡәйнәһенән ҡағылып, кеше күҙенә күренә алмай ятҡан көндәре аҙ булманы*. Б. Бикбай.

**ҠАЙНЫҺЫ-ҠАЙҘА** *р.* ‘где угодно’. Теләһә ҡайҙа. *Ҡайныһы-ҡайҙа ятыу.*

**ҠАЙНЫҺЫ-ҠАЛАЙ** *р.* ‘по разному’. Төрлөһө төрлөсә. *Ҡайныһы-ҡалай ятыу.*

**ҠАЙҺЫ-ҠАЙҘА** *р. ҡар.* **ҡайныһы-ҡайҙа**

**ҠАЙҺЫ-ҠАЛАЙ** *р. ҡар.* **ҡайныһы-ҡалай.**

**ҠАҠҠЫЛАП-ҺУҠҠЫЛАУ** *ҡ.*

1) ‘отряхивать, очищать (от пыли, снега и т.д.)’. Һуҡҡылап, ҡаҡҡылап, саңдан һ.б. таҙартыу. *Балаҫты ҡаҡҡылап-һуҡҡылау.*

2) *перен.* ‘обижать, притеснять’. *көсм.* Ҡыйырһытыу, ситләтеү, рәнйетеп һуғып алыу. ■ *[Яҡупты] йыш ҡына ситкә тибәрҙеләр, хатта ҡаҡҡылап-һуҡҡылап та алғыланылар.* М. Кәрим.

**ҠАҠЛЫҒА-ҺУҠЛЫҒА** *ҡ.* ‘натыкаясь, ударяясь’. Бер ары, бер бире бәрелеп. *Ҡаҡлыға-һуҡлыға сығыу.*

**ҠАҠЛЫҒЫП-ҺУҠЛЫҒЫУ** *ҡ.* ‘натыкаться на что’. Бер ары, бер бире бәрелеү. *Ҡаҡлығып-һуҡлығып сығып йүгерҙе.*

**ҠАҠЫР-ШАҠЫР** *и. диал.* 'мусор'. Теләһә нәмә, сүп-сар. *Урамда ҡаҡыр-шаҡыр тулып ята.*

**ҠАҠЫРЫҠ-ТӨКӨРӨК** *и. йыйн.* 'мокрота'. Тамаҡтан сыҡҡан лайлалы эрен һәм төкөрөк. *Сирләгәс, ҡаҡырыҡ-төкөрөк йыйыла.*

**ҠАҠЫРЫНЫП-ТӨКӨРӨНӨҮ** *ҡ.* 'отхаркиваться и плеваться'. Бер ҡаҡырып, бер төкөрөү; төкөргөләү. *Урамда ҡаҡырынып-төкөрөнөп йөрөү бигерәк йәмһеҙ күренеш.*

**ҠАЛА-ТИРӘ** *с.* 'пригородный'. Ҡаланың яҡын-тирәһенә йөрөгән (*транспортҡа ҡарата*). *Ҡала-тирә поезд.*

**ҠАЛБЫР-ҠОЛБОР** *оҡш.* 'о колебании, дрожи, трясении'. Ҡалтырауҙы белдергән һүҙ. *Ҡалбыр-ҡолбор итеү.*

**ҠАЛДЫҠ-БОҪТОҠ** *и. йыйн.* 'остатки'. *Ҡалдыҡ-боҫтоҡто йыйнау.* Әҙ-мәҙ ҡалған нәмә; ҡалған-боҫҡан. ■ *Зариф менән беҙ ҡалдыҡ-боҫтоҡ икмәк һыныҡтарын ғына ҡапҡылағайныҡ. Билбау аҫты бик бушаны.* С. Кулибай.

**ҠАЛҒАН-ҠОТҠАН** *с. йыйн. диал. ҡар.* **ҡалған-боҫҡан.** *Ҡалған-ҡотҡан ҡағыҙ.*

**ҠАЛҒАН-БОҪҠАН** *с. йыйн.* Әҙ-мәҙ ҡалған; ҡалдыҡ-боҫтоҡ. ■ *Кешегә тынлыҡ бирмәгән ҡалған-боҫҡан дейеүҙән, яу булыусы Шүлгәндән бар халыҡты ҡотолтам.* «Урал батыр» эпосынан.

**ҠАЛТЫР-ҠОЛТОР I** *оҡш.* 'подражание звуку громыхания, перестука'. Ҡаты нәмә бәрелеп-һуғылып

әйләнгәндә, тәгәрләгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. ■ *Елгәргестәр ҡалтыр-ҡолтор әйләнергә тотондо.* Я. Вәлиев.

**ҠАЛТЫР-ҠОЛТОР II** с. ʻнеровныйʼ. Тигеҙһеҙ, тигеҙ булмаған. *Ҡалтыр-ҡолтор юлдар, ерҙәр.*

**ҠАЛТЫР-ҠОЛТОР III** *и.* ʻдрожащийʼ. Һыуыҡҡа тиҙ бирешеүсән, тышҡа сыҡҡас та өшөүсән кешегә әйтелә. *Эй, ошо ҡалтыр-ҡолторҙо, сығып та етмәй, ҡата ла ҡуя.*

**ҠАЛТЫР-ҠОЛТОР ИТЕҮ** *ҡ.* ʻгромыхать, перестукиватьсяʼ. Ҡалтыр-ҡолтор иткән тауыш сығарыу. *Арба ҡалтор-ҡолтор итә.*

**ҠАЛТЫР-ҠОЛТОР КИЛЕҮ** *ҡ. ҡар.* **ҡалтыр-ҡолтор итеү.**

**ҠАМЫТ-ДУҒА** *и. йыйн.* ʻсбруяʼ. Атты егеү өсөн кәрәк булған нәмәләр. ■ *Ул [Айбулат] … ҡамыт-дуғаны тәртә араһынан ситкә алып ырғытты.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠАМЫТ-ҠОРАНТЫ** *и. йыйн. диал. ҡар.* **ҡамыт-дуға.** *Ҡамыт-ҡорантыңды онотма.*

**ҠАМЫТ-ҠУЛАН** *и. йыйн. диал. ҡар.* **ҡамыт-дуға.** ■ *Бер ҡамыт-ҡуланын һелкетеп, бышҡырып алды.* Й. Мостафин.

**ҠАМЫТ-ҠУРАМТА** *и. йыйн. диал. ҡар.* **ҡамыт-дуға.**

**ҠАМЫТ-ЫҢҒЫРСАҠ** *и. йыйн. ҡар.* **ҡамыт-дуға.**

**ҠАН-ЙӘШ** *и. йыйн.* ‘горькие слезы’. Әсе, хәсрәтле күҙ йәше. *Был һуғышта күпме әсә ҡан-йәш түкте.*

**ҠАН-ТИР** *и. йыйн.* ‘пот и кровь, большой труд’. Ауыр эшкә һалынған ҙур көс. *Ҡан-тир түгеп эшләү.*

**ҠАН-ЯУ** *и. йыйн.* ‘войны, драка, скандал’. Һуғыш, янъял. Ҡан-яу сығарыу. ■ *[Ҡыҙ – егеткә:] Егет, һүҙең һүҙ булһын, һиңә антым бирәйем,... ҡан-яу асмай арала һоҡланғанын бирәйем.* «Аҡбуҙат» эпосынан.

**ҠАНҒЫР-КӨНГӨР** *р. ҡар.* **көнгөр-ҡаңғыр**. *Ҡаңғыр-көнгөр донъя көтөү.*

**ҠАРЫНДАШ-ЫРЫУ** *и. йыйн.* ‘родственники, родичи’. Бер нәҫелдән сыҡҡан кешеләр. ● *Ата-әсәһен һөймәгән ҡыҙ яман, ҡәрҙәш-ырыуын һөймәгән ул яман.* Әйтем.

**ҠАП-ҠАМТЫ** *и. йыйн. диал.* ‘старики и старухи’. Ҡарттар һәм ҡарсыҡтар, оло кешеләр, ҡарт-ҡамҡы.

**ҠАПМА-ҠАРШЫ I** *с.*

1) ‘прямо противоположный, противоречивый, несовместимый’. Бер-береһенә бөтөнләй тура килмәгән, оҡшамаған, бер-береһен кире ҡаҡҡан. *Ҡапма-ҡаршы фекер.*

2) ‘напротив’. Ниҙеңдер тапҡырында. *Атым иһә Нажар бабай артынан түгел, бөтөнләй икенсе яры атланы. Теҙгенемде һулға тартҡайным, ул киҫкен рәүештә шулай боролдо ла ҡапма-ҡаршы яҡҡа ыңғайланы.* Н. Мусин.

**ҠАПМА-ҠАРШЫ II** *р.*

1) ʻпротивʼ. Кире фекерҙә, ҡаршы мәғәнәлә. ■ *Сырайына сыҡҡан ҡыуаныс билдәһе Ғатаның болоҡһоу кәйефенә ҡапма-ҡаршы ине.* Ә. Хәкимов.

2) ʻлицом к лицу, против друг другаʼ. Ҡара-ҡаршы, йөҙгә-йөҙ килеп. Ҡапма-ҡаршы ултырыу. *Ҡоҙалар менән ҡапма-ҡаршы ултырып һөйләшергә кәрәк.*

**ҠАПМА-ҠАРШЫЛЫҠ** *и.* ʻрезкая противоположность, контраст, противоречиеʼ. Ҡапма-ҡаршы булған хәл, күренеш. ■ *Тормош ҡапма-ҡаршылыҡтарҙың көрәшенән ғибәрәт.* К. Әхмәтйәнов.

**ҠАПМА-ҠАРШЫЛЫҠЛЫ** *с.* ʻпротиворечивыйʼ. Бер-береһенә ҡапма-ҡаршы булған, кире ҡаҡҡан. ■ *Башына ҡапыл килеп тығылған ҡатмарлы, ҡапма-ҡаршылыҡлы фекерҙәрҙе тәртипкә килтереп, төҙөп һөйләр хәлдә түгел ине ул [Шәһүрә].* Н. Мусин.

**ҠАПМА-ҠАРШЫЛЫҠ** *и.* ʻпротиворечивостьʼ. Бер-береһенә ҡапма-ҡаршы булыу, кире ҡағыу. *Фекерҙәрҙең ҡапма-ҡаршылыҡлығы.*

**ҠАПТЫР-ҠОПТОР I**. *оҡш.* ʻподражание звуку неравномерного шуршанияʼ. Ауыр аяҡ кейемен һөйрәп атлағанда, ҡоро үләнде шауҙырлатып йырып барғанда һ.б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. ■ *Тәндәрен баҫыр тәңкә ҡаплаған зифа буйлы ҡарағайҙар, ағастарға бәрелә-һуғыла-йығылған саҡта, ҡаршылағы тау битләүендәге солоҡ башында ылыҫ сүпләүсе һуйырҙар, ҡурҡышып, ҡаптыр-ҡоптор осоп китәләр.* Н. Мусин.

**ҠАПТЫР-ҠОПТОР II**. *с.* *ҡар.* ʻшуршащийʼ. Ҡаптырлап торған, ҡаптыр. *Ҡаптыр-ҡоптор тиреләр.*

**ҠАПТЫР-ҠОПТОР ИТЕҮ** *ҡ.* ‘шуршать’. Ҡаптыр-ҡоптор килгән тауыш сығарыу. *Туны ҡаптыр-ҡоптор итеп тора.*

**ҠАПТЫР-ҠОПТОР КИЛЕҮ** *ҡ. ҡар.* **ҡаптыр-ҡоптор итеү.** *Кейеме ҡаптор-ҡоптор килеп тора.*

**ҠАРА-ҠАРШЫ I**. *с.* ‘противостоящий’. Береһенә икенсеһе ҡаршылаш, бер-береһенә ҡаршы. *Ике ҡара-ҡаршы ғәскәр.*

**ҠАРА-ҠАРШЫ II**. *р.* ‘друг против друга, лицом к лицу’. Бер-береһенә ҡарап, бер-береһенең тапҡырында. ■ *Пароходтың арт яғында бер нисә ҡатын-ҡыҙ ҡара-ҡаршы ултырғандар, үҙҙәре көнбағыш яралар, бер-береһенә ымлашып килешәләр.* М. Тажи. *Ирҙәр ҡара-ҡаршы баҫып бик оҙаҡ һүҙһеҙ торҙо.* З. Биишева.

**ҠАРА-ҠАРШЫ ЙЫРЛАУ** *ҡ.* ‘состязаться в пении’. Бер-береңә яуап итешеп йырлау. *Сәсәндәр йыл да ҡара-ҡаршы йырлайҙар.*

**ҠАРА-ҠАРШЫ ӨЙ** *и.* ‘два дома, соединенные сенями’. Соланы уртала булған ике яҡлы өй. *Борон байҙарҙа ҡара-ҡаршы өйҙәр булған.*

**ҠАРАҠАС-ҠУҢЫҘҘАР** *и. зоол.* ‘карапузики’. Тиҙәктә, емтектә, ағас ҡабығы аҫтында йәшәй торған ваҡ ҡуңыҙҙар. *Ҡараҡас-ҡуңыҙҙар ағаҫҡа һырыған.*

**ҠАРАЛТЫ-ҠУРА** *и. йыйн.* ‘надворные постройки и имущество’. Йорт ҡаралтыһы. ■ *[Малайҙар] яңы өй бураған, ҡаралты-ҡура яңыртҡан йорттарға инеп йөрөнөләр.* Ф. Әсәнов.

**ҠАРАҢҒЫЛЫ-ЯҠТЫЛЫ** *с.* ‘ни свет ни заря, спозаранок’. Ни ҡараңғы, ни яҡты булмаған, яртылаш ҡараңғы. ■ *Иртән Тайфә инәй, гәҙәтенсә, ҡараңғылы-яҡтылы уянды.* Р. Ғабдрахманов.

**ҠАРАСА-ЙЫЛҒА** *и. этн.* ‘название подразделения башкир рода Канглы’. Ҡаңны ҡәбиләһенә ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. *Ҡараса-йылға аймағына ҡарау.*

**ҠАРБУЗ-ҠАУЫН** *и. йыйн.* ‘арбуз, дыня; овощи, бахчевые’. Ҡарбуз һәм ҡауындар. ■ *[Закир:] Беҙҙең яҡтар ҡалаға килһә, ҡарбуз-ҡауын ашар өсөн иң элек йәшел баҙарға … бара торған.* З. Биишева.

**ҠАРҒА-ҠАРШЫН** *и. этн.* ‘название подразделения башкир рода Каршын’. Ҡаршын ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. *Ҡарға-ҡаршындар йыйыны.*

**ҠАРҒА-ҠОҘҒОН** *и. зоол. йыйн.* ‘врановые’. Ҡоҙғондо, ҡара ҡарғаны, ала ҡарғаны үҙ эсенә индергән, Төньяҡ ярымшарҙа һәм Австралияла йәшәй торған ҡоштар төркөмө. ■ *Аҡ башлы йәшел таяҡҡа таянған, йәшел сапан кейгән бабай күренде: «Балам, тор! Быйыл һиңә ҡаза килер. Икмәккә май яғып, юғары ерге ҡуй! Эт ашамаһын, ҡарға-ҡоҙғон ашаһын, улар ризығына яҙһын», – тине.* Ф. Ғайсина.

**ҠАРҒАП-СӨРГӘП** *ҡ. диал.* ʻпроклинатьʼ. Яман теләк, әрләү һүҙе (һүҙҙәре). *Ошо әбей гел һөйләнеп, ҡарғап-сөргәп тик йөрөй. Ҡарғап-сөргәп тороу.*

**ҠАРЛЫ-БУРАНЛЫ** *с.* ʻсо снегом и метелямиʼ. Ҡары һәм бураны булған. Ҡарлы-буранлы көн. *Көҙ үтеп, аслыҡ-ҡытлыҡтан миктәгән илде артабан ҡаҡшатасаҡ ҡарлы-буранлы һыуыҡ ҡыш та килеп етте.* Ә. Хәкимов.

**ҠАРЛЫ-ЯМҒЫРЛЫ** с. ʻс дождями и снегомʼ. Ҡар ҡатыш ямғырлы. ■ *Яҙ ҡарлы-ямғырлы булып, сәсеү һуңлаһа, йәй артыҡ эҫе килеп, тамсы һыу төшмәгән төбәктәр булды.* «Башҡортостан» гәзитенән.

**ҠАРП-ҠОРП** *оҡш.* ʻподражание звуку ходьбы в большой обуви или удару по высохшей шкуреʼ. Ҙур аяҡ кейемен һөйрәп атлағанда, ҡаты ҡыптыр тирегә һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдерә. *Ҡарп-ҡорп атлау, һуғыуҙан ҡарп-ҡорп килеү.* ■ *Киленем, ҡатаһын ҡарп-ҡорп һөйрәп, туҙған сәсен төҙәтә-төҙәтә, ихатанан сығып барған Сафураны ҡыуып етеп, әрләшергә кереште.* «Ағиҙел» журналынан.

**ҠАРСЫҠ-ҠОРСОҠ** *и. йыйн.* ʻстарухиʼ. Оло йәштәге күмәк ҡатын-ҡыҙ; әбей-һәбей. *Урамда ҡарсыҡ-ҡорсоҡ йыйылған.* ■ *Ҡарсыҡ-ҡорсоҡ ҡына, үҙлегенән килеп сыҡҡан йыйылыш бөтөү менән, ҡайтып ҡаҙан аҫырға, мейес яғырға ашыҡты.* Ә. Хәкимов.

**ҠАРТ-ҠАМҠЫ** *и. йыйн. диал.* ʻстарики и старухи, старые, пожилыеʼ. Йәшкә оло ҡарт кешеләр, бабай һәм әбейҙәр. *Халыҡ шау-гөр килде.* ■ *Ҡарт-ҡамҡы, бала-саға – бөтәһе лә ҡалмай аяҡҡа баҫты.* Ш. Шәһәр.

**ҠАРТ-ҠАНҠЫ** *и. йыйн. диал. ҡар.* **ҡарт-ҡамҡы.**

**ҠАРТ-ҠАРЫЙ** *и. йыйн. диал.* ‘старики и старухи, старые, пожилые’. Йәшкә оло ҡарт күренгән кешеләр. *Ҡарт-ҡарый йыйыны.*

**ҠАРТ-ҠУРА** *с. диал. ҡар.* **ҡарт-ҡарый**. *Ҡарт-ҡура ғына ҡарсыҡ. Ҡарт-ҡура булыу.*

**ҠАРТ-ҠОРО** *и. йыйн.* ‘старики и старухи, старые, пожилые’. Йәшкә оло ҡарт күренгән кешеләр. Бабай һәм әбейҙәр. ■ *Ауылда ҡарт-ҡоро ла … йәтим-еһер генә күренеп ҡала.* З. Биишева. *Йәйләүҙә тик ҡарт-ҡоро, ҡатын-ҡыҙ ғына тороп ҡалған.* К. Мәргән.

**ҠАРТЫ-ЙӘШЕ** *и. йыйн.* ‘старики и молодые, все люди’. Ҡарт һәм йәштәр, бөтә кеше. ■ *Мөхәббәт – ул, әйтерһең дә утлы йәшен, һанап-һорап тормай һис бер кемдең йәшен, һүнмәҫ ялҡын менән ялмай ҡартын-йәшен…* Р. Назаров.

**ҠАРЫНДАШ-ЫРЫУ** *и. йыйн. ҡар.* **туған-ырыу**. *Ҡарындаш-ырыу йыйыны.*

**ҠАРЫУ-ЯРАҠ** *и. йыйн.* ‘военные оружия, снаряжение’. Төрлө һуғыш ҡоралы. ■ *Таңдан-таңдан йөҙ һикһән батыр алған, ҡарыу-яраҡ, сайман һайлап алған, ил-йорт менән хушлашып, аманлашып, Тимерғотло Мәсем ханға китеп ҡалған.* «Бабсаҡ менән Күҫәк» эпосынан.

**ҠАС-ҠАСАН** *р. диал.* ‘когда-нибудь’. Ҡасандыр бер ваҡыт, ҡасан да. *Ҡас-ҡасан урманды киҫеп, иген сәсерҙәр.*

**ҠАСА-БОҪА** *к.* ‘скрытно, украдкой, прячась’. Күренмәҫкә тырышыу; йәшенеп-йәшеренеп кенә; һиҙҙермәй, йәшенеү. *Ҡаса-боҫа йүгереү.* ■ *Ғәжәп итмә, сәсән. Арттан ҡаса-боҫа барғансы, бергә-бергә хәүефһеҙ ҙә, күңеллерәк тә йөрөләр, тип уйланым, – тине Ҡарасәс ҡәтғи төҫтә.* Ә. Хәкимов.

**ҠАСЫП-БОҪОП, ҠАСЫУ-БОҪОУ** *к. ҡар.* **ҡаса-боҫа**. *Ҡасып-боҫоп ҡына сығып китеү. Ҡасыу-боҫоу уйында ла юҡ.*

**ҠАТЫ-ҠОТО I** *и. йыйн.* ‘объедки, засохшие куски хлеба, корки’. Ҡатҡан һыныҡ-мыныҡ икмәк, тешләмдәр. ● *Икмәк юғы ямандыр: ҡаты-ҡото кимертә.* Әйтем.

**ҠАТЫ-ҠОТО II** с. ‘засохший’. Кибеп, ҡороп ҡатҡан, ҡатыға әйләнгән. ■ *Яландарҙы ҡарағай үҫентеләре, ҡаты-ҡото үләндәр баҫып бара.* «Башҡортостан» гәзите.

**ҠАТЫ-ҠОТО III** *р.* ‘грубо, неучтиво’. Тупаҫ, ихтирамһыҙ. *Ҡаты-ҡото һөйләшеү.*

**ҠАТЫН-ҠЫҘ** *и. йыйн.* ‘девушки и женщины’. Ҡатындар һәм ҡыҙҙар. ■ *Зөлхизә был ерҙә ҡатын-ҡыҙҙарҙан тәүгеләрҙең-тәүгеһе булып, мәңгелек тип иҫәпләнгән шомло йоланы емереп үтте.* З. Биишева.

**ҠАУЫН-ҠАРБУЗ** *и. йыйн.* ‘дыня и арбуз, бахчевые’. ■ *Күҙ етһә, Шәңгәрәйҙең ауыҙы ҡауын-ҡарбуз, алма, грушаға туйына.* Т. Ғарипова.

**ҠАШ-ҠАШЛАҠ** *и. йыйн. диал.* ‘возвышенность, косогор’. Тирә-йүндән бейегерәк булып торған ер, ҡалҡыулыҡ, тау битләүе. *Текә ҡаш-ҡашлаҡ.*

**ҠАШЫҠ-АЯҠ** *и. диал. йыйн.* ‘посуда’. Аш-һыу әҙерләү һәм ашау-эсеү өсөн ҡулланылған һауыт-һаба. ■ *Донъя-маҙар йыймаған, ҡашыҡ-аяҡ тотмаған, ҡаҙан аҫып, ҡамыр баҫып, улар [ҡарт менән ҡарсыҡ] донъя көтмәгән.* «Урал батыр» эпосынан.

**ҠАШЫҠ-ТАБАҠ** *и. йыйн.* ‘посуда’. Аш-һыу әҙерләү һәм ашау-эсеү өсөн ҡулланылған һауыт-һаба. *Ҡашыҡ-табаҡты шкафҡа алып ҡуй.* ■ *Хәким бабайҙың тәпәш түбәле өйөндә бер пар сынаяҡ, кескәй генә ҡаҙан, ваҡ-төйәк ҡашыҡ-табаҡтан башҡа бер генә нәмәһе лә юҡ.* И. Насыри.

**ҠОҘА-ҠОҘАҒЫЙ** *и. йыйн.* ‘сваты и сватьи’. Ҡоҙалар һәм ҡоҙағыйҙар, ҡоҙағый туғандар. ■ *[Сабира:] билде биштән быуып, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарҙы һыйларбыҙ.* Һ. Дәүләтшина. *Ҡоҙа-ҡоҙағый, егет-елән, туған-тыумаса тейәлгән биш-алты ҡырандас һәм арба теҙелешеп, ауыл буйлап елдерә.* М. Кәрим.

**ҠОҘА-ҠОҘАҒЫЙ БУЛЫШЫУ** *ҡ. этн.* ‘стать свойственниками, породниться через брачные отношения’. Ҡоҙалар һәм ҡоҙағыйҙар, ҡоҙағый туғандар. *Ҡоҙа-ҡоҙағый булышып, йәше-ҡарты йоплашып, ҡанлы яуҙан тынышып, байман табып, тын алып, рәхәтләнеп ҡалған, ти.* «Урал батыр» эпосынан.

**ҠОҘА-ҠОҘАҒЫЙЛЫҠ** *и. йыйн.*

1) ‘отношение родства между сватами’. Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар араһында туғанлыҡ мөнәсәбәте.

2) *перен.* ‘кумовство, семейственность’. *күсм.* Танышлыҡ-туғанлыҡҡа ҡоролған мөнәсәбәт. *Ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ аша эшкә урынлашыу.*

**ҠОҘҒОН-ҠОШ** *и. зоол.* ‘ворон’. Аулаҡ урындарға оялай торған ялтыр ҡара йөнлө эре ҡош. *Һауала ҡоҙғон-ҡош оса.*

**ҠОЙОН-ДАУЫЛ** *и. йыйн.* ‘вихрь, смерч’. Дауыллы көслө ҡойон. ■ *Йәйендәй тулап, һыу ярып, ҡойон-дауыл ҡуптарып, тау-таштарҙы тетрәтеп, Шүлгән күле төбөнән Һәүбән донъяға сыҡҡан.* «Аҡбуҙат» эпосынан.

**ҠОЙРОҠ-ЯЛ** *и. йыйн.* ‘хвост и грива *(коня)*’. Аттың ҡойроғо һәм ялы. ■ *Икеһенең дә ҡойроҡ-ялдарын аллы-гөллө таҫмалар менән биҙәйҙәр, ҡолаҡтарына ҡайыған суҡлы ҡулъяулыҡтар тағалар.* М. Кәрим.

**ҠОЛ-КӘНИЗӘК** *и. йыйн.* ‘рабы и рабыни, невольники’. Ҡол һәм кәнизәктәр. ■ *[Иҙеүкәй менән Мораҙым] һандуғастай ирекле, хур ҡыҙындай күрекле хан ҡыҙҙарын … үҙҙәренә ҡол-кәнизәк яһай.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосынан.

**ҠОҢҒОР-ҠАҢҒЫР** *окш. ҡар.* **көңгөр-көңгөр**. ■ *Иген келәттәре эргәһендә бәләкәй генә өйҙән ҡоңғор-ҡаңғыр һөйләшкән тауыштар ишетелде.* Картотека фонды.

**ҠОРАЛ-ҠОРАМАЛ** *и. йыйн.* ‘снаряжение, орудия’. Хеҙмәттә ҡулланылған төрлө ҡорал, инструмент һ. б. ■ *Иген бешеп килгән мәл түгел, ҡорал-ҡорамалды ҡарап, йәтешләп ҡуйыу ҙа кәрәк, ырҙындар ҙа таҙартылмай, сүп-сар баҫҡан көйө ята.* З. Ураҡсин. *Зилский иген эшләү өсөн кәрәкле булған бөтә ҡорал-ҡорамалдарҙы алдан уҡ әҙерләтеп ҡуйған. Ҡамыт, сбруйҙар, тәзе ағастары, уларҙы бәйләй торған бөлдөргәләрҙе яңы ҡайыштан яһатып, уларҙы дегетләп ҡуйған.* Һ. Дәүләтшин.

**ҠОРО-БУШҠА** *р.*

1) ‘зря, впустую, понапрасно, попусту’. Һис бер файҙаһыҙға, кәрәкһеҙгә, юҡҡа. *Ҡоро-бушҡа йөрөү. Ҡоро-бушҡа аҡса түгеү. Ҡоро-бушҡа һөйләү. Ҡоро-бушҡа сарыф итеү.* ■ *Ҡоро-бушҡа әрәм ятҡырғансы [байлыҡты], тоторға ла тракторға задатка итеп бирергә кәрәк.* Һ. Дәүләтшина.

2) ‘беспричинно, беспочвенно’. Һис бер сәбәпһеҙ, нигеҙһеҙ. *Ҡоро-бушҡа ҡайғырыу. Ҡоро-бушҡа туҙыу.*

3) ‘бесплатно, даром, безвозмездно’. Һис бер түләүһеҙ, бушлай. *Ҡоро-бушҡа эшләтеү. Ҡоро-бушҡа һатып ебәреү. Ҡоро-бушҡа алыу. Ҡоро-бушҡа таратып бөтөү.*

**ҠОРОМ-КӨЛ** *и. йыйн.* ‘сажа и пепел’. Ҡором һәм көл. *Ҡором-көлдө таҙартыу.* ■ *Ҡара яуҙың ҡара ҡором-көлөн битебеҙгә үтте ел бәреп.* Р. Бикбаев.

**ҠОРО-ҺАРЫ** *и. йыйн.*

1) ‘сухие сучья и ветки’. Кипкән сыбыҡ-сабыҡ; сытыр. *Ҡоро-һары яғыу.* ■ *Сергей Лоҡман менән йылға буйындағы туғайҙан ҡоро-һары эҙләргә китте.* А. Абдуллин.

2) ‘сухомятка, сухая еда’. Шыйыҡ булмаған ҡоро аҙыҡ. *Ҡоро-һары ашау.* ■ *Сырым батыр .. ҡаҙан аҫмаҫҡа, ҡоро-һары менән хушһынып ятырға ла иртәнге эңерҙә үк юлға атланырға әмер бирҙе.* Ә. Хәкимов.

**ҠОРТ-ҠУҢЫҘ** *и. йыйн.* ‘насекомые’. Төрлө ҡорт һәм ҡуңыҙ. ■ *Арҙаҡлап көткән аҡ тәнең ҡорт-ҡуңғыҙға ем булыр.* Ҡобайырҙан.

**ҠОТ-БӘРӘКӘТ** *и. йыйн.* ‘счастье, удача’. Ҡот һәм бәрәкәт. *Ҡот- бәрәкәт килһен илгә! Ҡот-бәрәкәт юлдаш булды.* ■ *Яуа ҡарҙар – ҡот-бәрәкәт өҫкә ауа. Йыл башлана!* Х. Назар.

**ҠОТ-ҠОН** *и. йыйн.*

1) ‘уют, благоустроенность’. Ҡот, йәм биргән төҫ; йәм-тәм. ■ *[Ирназаров:] Кейергә йүнле-рәтле кейем юҡ, ашаған аштың ҡото-ҡоно юҡ.* А. Карнай.

2) ‘вид, лик’. Төҫ, сырай. *Ҡот-ҡоно килешле.*

**ҠОШ-ҠОҘҒОН** *й. йыйн. ҡар.* **ҡош-ҡорт**. *Ҡош-ҡоҙғон тауышы. Ҡош-ҡоҙғонға һунар.*

**ҠОШ-ҠОРТ** *и. йыйн.*

1) ‘разные птицы’. Бөтә булған ҡоштар, һәр төрлө ҡош. ■ *Мең төрлө ҡош-ҡорттоң мең төрлө тел, мең төрлө тауыш менән һайрауына … ҡорос машиналар тауышы ҡушылып китте.* Һ. Дәүләтшина.

2) ‘домашние птицы’. Йорт ҡоштары. *Ҡош-ҡорт үрсетеү.* ■ *Иртәнсәк ҡош-ҡортона ем һибеп, мал-тыуарына ашарға һалып ингәс, Иркәбикә инәй мендәренә башын терәп ятып торҙо.* Ф. Рәхимғолова. *Хужаны тышта эш-көшө көтә: мал-тыуарын, ҡош-ҡортон ҡарайһы, барын барлайһы бар.* Ғ. Хөсәйенов.

3) ‘хищники’. Төрлө ҡырағай йыртҡыс йәнлек. *Ҡарағөлөмбәт был балаларҙы эҙләп тә таба алмағас, ҡош-ҡортҡа тап булып, һәләк булғандарҙыр, тип ҡуйҙы.* «Бабсаҡ менән Күсәк» эпосынан. *Ҡаяла сыр-сыр килешеп, өркөп осҡан ҡош-ҡорттоң тотоп, башын сәйнәгән.* “Урал батыр” эпосынан.

**ҠУЙ-ҺАРЫҠ** *и. йыйн.* ‘овцы, скотина’. Ҡуй һәм һарыҡ малы. ■ *Ай, тыуған ер, тыуған ер, олатайҙар торған ер;*

*йылҡылары сыңрап, һыйырҙары мөңөрәп, ҡуй-һарығы ҡуҙрап көтөү-көтөү йөрөгән ер.* «Урал батыр» эпосынан. *[Туйға] һуйырға тип әллә нисәмә йылҡы ҡороҡланды, тана-торполар, ҡуй-һарыҡтар бәйләнде, көн-төн ағытмай, бейәләр һауылды; ҡымыҙ бешеп һабалар тултырылды.* Ғ. Ибраһимов.

**ҠУЛ-АЯҠ** *и. йыйн.* 'конечности'. Ҡулдар һәм аяҡтар. ■ *Ҡул-аяғы ярылған; тамыр ашап, ер ҡаҙып, ауыҙ-бите ҡарайған, ҡырау һуҡҡан үләндәй, йөҙө-төҫө һарғайған … Бер ҡарсыҡҡа һырышҡа бер һылыу ҡыҙыҡайға Урал барып тап булған.* «Урал батыр» эпосынан.

▲ **ҡул-аяғы менән ҡаршы булыу** *'решительно отказываться от чего-либо, отбиваться руками и ногами; решительно противиться чему-либо'*. Нимәгәлер ҡаршы тороу, риза булмау. ■ *Өйҙө ҡыйыҡлап кеше рәтенә индерәм тиһәң, һин һәр ваҡыт ҡул-аяғың менән ҡаршы тораһың.* Т. Йәнәби.

▲ **ҡул-аяғын бәйләү** *'связать руки и ноги кому-либо, связать кого-либо по рукам и ногам; парализовать чью-либо деятельность'*. Эштә, хәрәкәттә иректе сикләү; кемдеңдер эшмәкәрлеген туҡтатыу. ■ *Айырмаҫтан йәш-ҡартты, ҡул-аяғын бәйләтеп, арыуҙарын һайлатып, йыл да бер ҡат йыйҙыра, һарайына алдыра [Ҡатил батша].* «Урал батыр» эпосынан.

**ҠУЛ-ҒЫУАТ** *и. диал.* 'дремучий лес'. Ҡалын урман. *Арыраҡ баргас, ҡул-ғыуатҡа килеп ингәндәр. Ҡул-ғыуаттан сыға алмаған.*

**ҠУЛ-ҠАМЫТ ИТЕҮ** *ҡ. диал.* 'заниматься шорничеством'. Ҡамытсы эше менән шөғөлләнеү. *Атайым ҡул-ҡамыт итте.*

**ҠУЛ-ҠАМЫТЛЫҠ БУЛЫУ** *ҡ. һөйл.* ʻбыть помощникомʼ. Ҡул араһына инеү, ярҙамсы булыу. ■ *[Мәғфүрә:] Башлы-күҙле итһәк, үҙегеҙгә бер ҡул-ҡамытлыҡ булырмы тип, ағаһы менән дә уйлағайныҡ әле.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠУЛ-ҠАМЫТЛЫҠ ИТЕҮ** *ҡ. һөйл.* ʻбыть помощникомʼ. Ярҙам итеү, ярҙамлашыу. ■ *Шул уҡ ир бала [Сынтимер] ҡартайған көнөмдә ҡул-ҡамытлыҡ итер ине.* Һ. Дәүләтшина. *[Ғәндәлиптең улдары] урман ҡырҡып, һал ағыҙа, кейек аулай. Иң кесеһе лә ағаларына ҡул-ҡамытлыҡ итә.* Т. Килмөхәмәтов.

**ҠУЛ-ҠУЛАТ** *и. диал.*

1) ʻложбинаʼ. Уйһыулыҡ, уйпат ер. *Ҡул-ҡулатҡа томан төшкән.*

2) ʻовражистая местностьʼ. Үҙәк, йырғанаҡлы ер. *Ҡул-ҡулатҡа һыу йыйылған.*

**ҠУЛ-ҠЫЛАП** *и. диал. ҡар.* **ҡул-ҡулат**. *Ҡайҙа ҡул-ҡылап, шунда халыҡ ултырған.*

**ҠУЛҺЫҘ-АЯҠҺЫҘ** *р.*

1) ʻбез рук и без ногʼ. Аяғы ла, ҡулы ла булмаған килеш. ■ *Белһен дошман: ҡулһыҙ-аяҡһыҙ ҙа теҙ сүгәсәк кеше түгелбеҙ.* Картотека фонды.

2) *перен.* ʻбез помощи и поддержкиʼ. *ҡүсм.* Бөтөнләй ярҙамһыҙ, ярҙамсыһыҙ. *Ҡулһыҙ-аяҡһыҙ ҡалыу.*

**ҠУНАҠ-КИЛЕМ** *и. йыйн.* ʻгости, пришедшие и ушедшие людиʼ. Килгән-киткән кеше. ■ *[Ҡатыны-иренә:] Ҡунаҡ-килем булырын белеп тораһың, һыйҙы ҡайғыртмайһың.* Й. Солтанов.

**ҠУНАҠ-ҠАРА** *и. һөйл. ҡар.* **кунаҡ-килем.** *Ҡунаҡ-ҡара килеүе бар.*

**ҠУНАҠ-ТӨШӨМ** *и. йыйн.* ‘гости’. Килгән-киткән ҡунаҡ. ■ *[Әҡлимә:] Ҡунаҡ-төшөм булһа тип, һаҡлап ҡуйған бер йәшник шешәле һыра бар.* Н. Иҙелбай.

**ҠУНА-ТӨНӘ** *р.* ‘с ночёвками, оставаясь на ночь’. Ҡуныу, ҡуна ҡалыу, ҡуныр өсөн туҡтай-туҡтай. *Яҙ көнө йәйләүҙә ҡуна-төнә йөрөү. Юлда ҡуна-төнә йөрөү.*

**ҠУНА-ТӨШӘ** *р.* ‘с ночёвками, ночуя’. Туҡтай-туҡтай, ҡуныу. ■ *Йыраҡ булһа ла, ҡуна-төшә барып ҡайтырбыҙ әле.* Экспедиция материалдарынан.

**ҠУРАЙ-КӘРТӘ** *и. диал.* ‘скотный двор, хлев’. Кәртә-ҡура, мал-тыуар торған урын. *Малдар ҡурай-кәртәлә тора. Ҡурай-кәртә төҙөү.*

**ҠУРҠА-ӨРКӘ** *р.* ‘с опаской, дрожа от страха’. Ҙур ҡурҡыу хисе менән; ҡурҡып ҡына. *Ҡурҡа-өркә ҡарау. Ҡурҡа-өркә һөйләү.* ■ *Мин ҡурҡа-өркә генә ҡабат күҙ һалғанда, тупһа төбөндә бер кем дә юҡ ине.* Д. Исламов.

**ҠУРА-ТИРӘ** *и. ‘скотный двор’.* Кәртә-ҡура, мал-тыуар торған урын. ■ *Ныяҙғолдоң бөтә өй эсе көтөү-көтөү мал менән йәйләүҙә ятып, бер-ике йома элек кенә ҡышлауға күсеп ҡайтҡанға күрә, ҡура-тирәләрҙе әйләндереп баҫып үҫкән эре алабуталар тапалмайынса, көҙгө ҡарлы һыуыҡҡа ҡатып ултыралар.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠУТЫР-САТЫР** *и. йыйн. диал.* 'кожные болезни'. Тире ауырыуҙары. *Ҡутыр-сатыр сығып йөҙәтте.*

**ҠУШТАН-ЯРАН** *и. йыйн.* 'угодники, льстецы и подхалимы'. Ярарға тырышып йөрөгән кешеләр; ярамһаҡтар. ■ *Тупаҫ һәм холоҡһоҙ был кантонға Әпкәләй кеүек ҡуштан-яраңдар таяу.* Ғ. Хөсәйенов.

**ҠЫҘ-ҠАТЫН** *и. йыйн. ҡар.* **ҡатын-ҡыҙ.** ■ *Ҡыҙ-ҡатындар араһында сыр-сыу, ҡысҡырыш, ер һелкетеп саң ҡуптарып, тас та тос һуғыш сыҡты ла китте.* Т. Хәйбуллин.

**ҠЫҘ-ҠОРАТ** *и. йыйн. диал. ҡар.* **ҡыҙ-ҡырҡын.**

**ҠЫҘ-ҠЫРҠЫН** *и. йыйн.* 'девушки'. Ҡыҙҙар. ■ *Һеҙҙе маҡтап йырлар, ҡаҙ өмәһе яраҡ ҡыҙ-ҡырҡын.* Ш. Бабич. *Ул арала булмай, Әхмәдиҙең аш өйө «һөт машинаһы» күрә килеүсе бисә-сәсә, ҡыҙ-ҡырҡын, бала-саға менән тулып китте.* Ж. Кейекбаев.

**ҠЫҘ-ҠЫРҠЫН УҘЫУЫ** *и. этн.* 'обряд посвящения девочки в девушку'. Ҡыҙ баланың йәше күремгә етеү менән уҙғарыла торған йола. ■ *Элек башҡорттар ҡыҙ баланың йәше куремгә етһә, ҡыҙ-ҡырҡын уҙыуы үткәргәндәр.* Башҡорт мифологияһынан.

**ҠЫҘМА-ҠЫҘМЫЙ** *с. диал.* 'очень вспыльчивый'. Тиҙ тоҡанып, тиҙ асыуланып, ярһып китеүсән; ҡыҙма. *Ҡыҙма-ҡыҙмый әҙәм.*

**ҠЫҘ-ХАТЫН** *и. диал. ҡар.* **ҡатын-ҡыҙ.** ■ *Ҡыҙ-хатындар өмәгә күптән килде.* Экспедиция материалдарынан.

**ҠЫҘЫЛЛЫ-ЙӘШЕЛЛЕ** *с.* 'красно-зелёный'. Ҡыҙыл менән йәшел ҡатнашҡан. *Ҡыҙыллы-йәшелле келәм.*

**ҠЫҘЫЛЛЫ-КҮКЛЕ** *с.* 'красно-синий'. Ҡыҙыл менән күк ҡатнашҡан. *Ҡыҙыллы-күкле байраҡ.*

**ҠЫҘЫЛЛЫ-ҠАРАЛЫ** *с.* 'тёмно-красный'. Ҡуйы ҡыҙыл, ҡан төҫтә. *Ҡыҙыллы-ҡаралы салбар.*

**ҠЫҘЫЛЛЫ-ҺАРЫЛЫ** *с.* 'красно-жёлтый'. Ҡыҙыл менән һары ҡатнашҡан. *Ҡыҙыллы-һарылы гөлләмә.*

**ҠЫҘЫП-ТУҘЫУ** *ҡ.* Асыуланып ярһыу, ярһып әрләшеү.

**ҠЫЙ-ҠЫЙҠЫУ** *и. диал. ҡар.* **ҡыран-ҡыйҡыу**. *Ҡый-ҡыйҡыу килеү.*

**ҠЫЙ-ҠЫЛАМТА** *йыйн. диал. ҡар.* **ҡый-ҡыпыр**. *Ҡый-ҡыламта йыйыу. Ишек алдын ҡый-ҡыламтанан таҙартыу.*

**ҠЫЙ-ҠЫЛҠЫ** *и. йыйн. ҡар.* **ҡый-ҡыпыр.** *Баҡсаны ҡый-ҡылҡы баҫҡан.*

**ҠЫЙ-ҠЫМ** *и. йыйн.*

1) 'крошки'. Ваҡ ҡый, ыуалсыҡ. *Икмәк ҡый-ҡымы.*

2) *перен.* 'недостатки (в характере человека)'. *күсм.* Кешеләге ваҡ-төйәк етешһеҙлек; кер, сүп. *Кешенән ҡый-ҡым эҙләү.*

**ҠЫЙ-ҠЫМЫР** *и. диал. ҡар.* **ҡыран-ҡыйҡыу**. *Ҡый-ҡымыр ҡуптарыу.*

**ҠЫЙ-ҠЫПЫР** *и. йыйн.*

1) ʻвсякий мусор, отбросы, старьеʼ. Төрлө ваҡ-төйәк ҡалдыҡ, ташландыҡ нәмә, сүп-сар. ■ *Бала-саға, оя ҡороп ятҡан сәүкәләр кеүек, сыр-сыу килә, ҡый-ҡыпыр, тиреҫ яндыра, һыуға ут ебәрә.* З. Ураҡсин. *Бына улар [ауыл кешеләре] кәртәләрҙе һүтә башланы, Мәҙинә улар янына килеп баҫты: янғандан ҡалған көл-күмер баҙға төшөрөлгән, өҫтөндә хәҙер әрем-ҡарағура үҫә, баҙға төшөрөлгән ҡый-ҡыпыр шиңгән – баҙ урыны айырым-асыҡ өңрәйеп тора.* Т. Ғарипова.

2) *диал.* ʻвсякийʼ. Теләһә кем. *Ҡый-ҡыпыр кермәһен, ишекте бикләп йөрө.*

**ҠЫЙ-ҠЫУ** *и.* ʻгик, гиканье, крикʼ. Һөрәнләгән, һайт-һойт иткән сыр-сыу тауыш. *Ҡый-ҡыу һалып ҡыуыу.* ■ *Йыйылған халыҡ, ҡый-ҡыу көлөшөп, уларға көс-ҡеүәт бирә, ҡунаҡтарҙы һарандар тип яманлай.* Ғ. Ибраһимов.

**ҠЫЙ-ҠЫУАТ** *и. йыйн. ҡар.* **ҡый-ҡыпыр.** *Урамды ҡый-ҡыуаттан таҙартыу.*

**ҠЫЙ-ҺАЙ I** *и. йыйн.* ʻвсякий мусор, отбросы; старьеʼ. Йыйын юҡ-бар ташландыҡ нәмә; сүп-сар. ■ *Яралылар һарай буйында теҙелеп ятабыҙ. Аяҡтарында йөрөй алғандар ҡый-һай йыйып ут яғалар.* А. Таһиров. *Йылғаны ҡый-һай менән тултырыуға, бысратыуға … юл ҡуймаҫҡа кәрәк.* «Совет Башҡортостаны».

**ҠЫЙ-ҺАЙ II** *с. һөйл.* ʻникчёмный (*о человеке*)ʼ. Ҡулынан йүнле эш килмәгән, булдыҡһыҙ (кешегә ҡарата). *Ҡый-һай түрә. Ҡый-һай әҙәм.* ■ *Ҡый-һай түрәләр инде өйҙә генә ултырып ҡалырға ҡәнәғәтләнмәнеләр.* Т. Хәйбуллин.

**ҠЫЙҠЫУ-ҺӨРӘН** *и. йыйн.* ‘громкие голоса’. Ығы-зығылы сыр-сыу тауыш. ■ *Халыҡ әллә нимәнән ҡыҙыҡ табып, ҡыйҡыу-һөрән һалып, мыж килеп һыу инә.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҠЫЙ-ШАҠЫР** *и. йыйн. диал.* **ҡый-һыпыр, шаҡы-шоҡо** ‘ненужные вещи; ничего путного’. Кәрәкмәгән әйберҙәр. *Өйөндә һис йүнле нәмә юҡ, гел ҡый-шаҡыр.*

**ҠЫЙШАН-МЫЙШАН** *оҡш.*

1) ‘шатаясь.’ Төрлө яҡҡа аушайып, ҡыйыш-мыйыш килгән хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Ҡыйшан-мыйшан итеү.*

2) ‘кривляться, ломаться, кокетничать’. *күсм.* Күҙҙе, башты уйнатып, борғоланған ҡылыҡты белдергән һүҙ. *Ҡыйшан-мыйшан килеү.*

**ҠЫЙЫН-ҠЫҪТАУ** *и. йыйн. һөйл.* ‘стесненность, затруднение’. Ҡыйын һәм ҡыҫтау хәл; ауырлыҡ. ■ *Ошо арала кеше баҫып, ҡыйын-ҡыҫтау булып китте.* Экспедиция материадарынан.

**ҠЫЙЫҠ-ҠЫМТЫҠ** *и. йыйн.* ‘торчащие вещи’. Ниҙеңдер сығып, һалынып торған урындары. ■ *Биҡкужа йылы ҡулы менән битен һыйпап, ҡолағын ышҡыны, бүреген батырыбыраҡ кейҙе. Ҡыйыҡ-ҡымтыҡтарын ҡыҫтырҙы.* Т. Килмөхәмәтов.

**ҠЫЙЫҠ-МЫЙЫҠ** *с. ҡар.* **ҡыйыш-мыйыш.**

**ҠЫЙЫШ-МЫЙЫШ I** *с.* ‘очень кривой, весь искривленный’. Төрлө яҡҡа, төрлөсә ҡыйыш; кәкре-бөкрө. ҡыйыш-мыйыш. *Ҡыйыш-мыйыш ултырғыс.*

**ҠЫЙЫШ-МЫЙЫШ** II. *р.* ʻвкривь и вкосьʼ. Төрлө яҡҡа, төрлөсә ҡыйшайып; кәкре-бөкрөләнеп. *Ҡыйыш-мыйыш атлау.* ■ *Уның [Миңлекәйҙең] янына, ҡыйыш-мыйыш атлап, Камали барып етте.* Ғ. Хәйри. *Гел генә дорөҫ эшләп донъя көтөп булмай, ҡыйыш-мыйыш төшөп китергә лә тура килә.* Р. Солтангәрәев.

**ҠЫЛ-ҒЫЛ** *и. диал.* ʻслово-обращение к ребёнку, впервые начавшему ходитьʼ. Тәү башлап тәпәй баҫҡанда балаға өндәшеү һүҙе. *Баланы ҡыл-ғыл әйтеп саҡырыу.*

**ҠЫЛДЫЙ-БЫЛДЫЙ** *оҡш.* ʻподражание обмяклому состоянию телаʼ. Быуынһыҙ һымаҡ тегеләй-былай хәрәкәтте белдергән һүҙ. ■ *Ҡул-аяҡтар ҡылдый-былдый һелкенә.* Ш. Бабич.

**ҠЫЛТ-МЫЛТ I** *оҡш.* ʻподражание много кратному щёлканью, например, ключа, зам ка или тиканью часовʼ. Ҡабат-ҡабат ҡылт иткән тауышты белдергән һүҙ. ■ *[Остап:] Был бандюкты ҡасыра күрмә. Әҙ генә ҡылт-мылт иттеме – ат һин ул ҡәбәхәткә!* Х. Мохтар.

**ҠЫЛТ-МЫЛТ II** *с.* ʻобидчивыйʼ. Тиҙ генә үсегеп барыусан; кирле-мирле. *Ҡылт-мылт әҙәм.*

**ҠЫЛТАН-МЫЛТАН** *с.* ʻобидчивыйʼ. Тиҙ генә үсегеп барған булып, тырт-мырт итеүсән. *Ҡылтан-мылтан ҡатын.*

**ҠЫЛТЫЙ-БЫЛТЫЙ** *с. диал.* ʻобидчивыйʼ. Ҡапыл үсегеп, үпкәләп, ҡылтайып барыусан; ҡылтымбый. ■ *Минең бисәкәй улай ҡыҙып китә торған ҡылтый-былтый кеше түгел.* С. Агиш.

**ҠЫЛТЫМ-МЫЛТЫМ I** *с.* 'обидчивый'. Үсеккән булып, тырт-мырт итеүсән. *Ҡылтым-мылтым кеше.*

**ҠЫЛТЫМ-МЫЛТЫМ II** *р.* 'обидчиво'. Үсеккән булып, тырт-мырт. *Ҡылтым-мылтым һөйләшеү.*

**ҠЫЛЫҠ-ТОРОҠ** *и. йыйн.* 'нрав, привычки, поступки'. Ҡылыҡ һәм ғәҙәт. ■ *Ул [Мусаҡай ағай] малдың ҡылыҡ-торогон белеп үҫкән кеше түгел.* Б. Бикбай.

**ҠЫЛЫҠ-ФИҒЕЛ** *и. йыйн.* 'поступки, проделки, характер'. Кешенең холҡона, тәбиғәтенә хас үҙенсәлеген күрһәткәндә әйтелә. ■ *[Уйылданов] эскәмйәгә ултырып, мал-тыуарын, ағас-ташын, отчет, дебет, кредиттарын күңеленән кисерә, үҙе буйһонған түрәләрҙең ҡылыҡ-фиғелен байҡай.* «Ағиҙел» журналынан.

**ҠЫРАН-ҒӘЛӘМӘТ** *и. йыйн.* 'суматоха, шум, гам'. Ҙур ығы-зығы; бола, шау-шыу. ■ *Әле бер нисә көн элек кенә кеше сират теҙелеп, ҡыран-ғәләмәт килә ине, ә хәҙер магазинға ин дә, йәнеңә кәрәген ал да сыҡ.* М. Тажи.

**ҠЫРАН-ҠЫЙҠЫУ** *и. йыйн.* 'переполох, суматоха, шум'. Шау-шыу килгән ҙур ығы-зығы; бола, буталыш. *Ҡыран-ҡайҡа ҡуптарыу.*

**ҠЫРАН-ҠЫЙҠЫУ КИЛЕҮ (БУЛЫУ)** *ҡ.* 'переполошиться, шуметь, галдеть' ығы-зығы килеү'. ■ *Өй эсендә ҡыран-ҡыйҡыу килделәр, күрәһең. Ишек төбө бала-саға, бисә-сәсәләр менән тулды.* Һ. Дәүләтшина. *Ҡарын алғанда килендәр етешә алмай ҡыран-ҡыйҡыу булды.* Һ. Дәүләтшина.

**ҠЫРАН-ҺӨРӘН** *и. йыйн. диал.* ʻшум, гам; суматоха; истребление; уничтожениеʼ. Пыран-заран. *Ҡыран-һөрән килтереү.*

**ҠЫРАН-ҺӘЛӘКӘТ** *и. йыйн. һөйл.* ʻгибель, катастрофаʼ. Үлем-ҡырылыш, афәт. *Ҡыран-һәләкәткә этәреү.*

**ҠЫРАН-ЯРАН БУЛЫУ** *ҡ.* ʻбыть уничтоженным, погибнутьʼ. Юҡҡа сығыу. *Дошман ҡыран-яран булған.*

**ҠЫРАН-ЯРАН ИТЕҮ** *ҡ. иҫк.* ʻуничтожить, истребитьʼ. Пыран-заран итеү, ҡырыу, юҡ итеү. ■ «*Нисек булһа ла юл табып, ... барыһын һыуҙан баҫтырып, ҡыран-яран итергә, Аҡбуҙатҡа менергә, Һомайҙы ла алырға, Әҙрәкәгә китергә», тиеп Шулгән уйлаған.* «Урал батыр» эпосынан.

**ҠЫРАН-ЯРАН ҠЫЛЫУ** *ҡ. иҫк.* ҡар. **ҡыран-яран итеү**. ■ *Булат ҡылысын һелтәп, Иҙеүкәй килеп уҡталһа, данлап ҡорған Урҙаңды ҡыран-яран ҡылыр ул.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосынан.

**ҠЫРҠА-ЯРАН** *р. иҫк.* ʻрезкоʼ. Ҡәтғи рәүештә. ■ *Йәнбирҙе ҡарт улдарына йола өйрәтеп ҡуйған, ти, ҡан эсеүҙән балаларын ҡырҡа-яран тыйған, ти.* «Урал батыр» эпосынан.

**ҠЫР-ҒӘЛӘМӘТ** *и. диал.* ʻбольшая суматоха, шумʼ. Дыу-ғәләмәт. Ҙур ығы-зығы; бола, шау-шыу. *Ҡыр-ғәләмәт ҡупты.*

**ҠЫРЛЫ-МЫРЛЫ I** *с. һөйл.*

1) ‘неровный, ребристый’. Тигеҙһеҙ, ҡыр, һырҙары ҡалҡып сығып торған. *Ҡырлы-мырлы таш. Ҡырлы-мырлы юл.*

2) *перен.* ‘резкий, неуравновешенный’. *күсм.* Тупаҫ, тотороҡһоҙ тәбиғәтле. *Ҡырлы-мырлы характер.* ■ *[Ғәлиәхмәт] ҡырлы-мырлы һүҙҙәр менән әллә нәмәләр бутап бөтөрҙө.* И. Насыри.

**ҠЫРЛЫ-МЫРЛЫ II** *р. диал.*

1) ‘резковато’. Кирле-мирле. *Ҡырлы-мырлы тороу.*

2) ‘резко’. Тупаҫ. *Ҡырлы-мырлы әйтеү. Ҡырлы-мырлы яуап биреү.* ■ *Мин дә уның [ҡыҙ] кеүек ҡырлы-мырлы һөйләнергә тотондом.* Ә. Бикчәнтәев.

**ҠЫРТ-МЫРТ I** *оҡш.* ‘хруп-хруп *(подражание многократному хрусту, треску)*’. Ҡабат-ҡабат ҡырт иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ҡырт-мырт сәйнәү.*

**ҠЫРТ-МЫРТ II** *р.* ‘неприветливо; нехотя’. Кирле-мирле; бер тегеләй, бер былай. *Ҡырт-мырт килеү.* ■ *Сәлмән Вәлимәнең тел төбөнә бик үк төшөнөп етмәне, шуға яңынан уға ғәжәпләнеп баҡты. Тегеһе ҡырт-мырт килеберәк үҙе һүҙ башланы.* С. Шәрипов.

**ҠЫРЫН-ЗАРАН ИТЕҮ** *ҡ. диал.* ‘разнести в пух и прах’. Пыран-заран килтереү. *Дошман өйҙәрҙе ҡырын-заран итте.*

**ҠЫРЫН-МЫРЫН I** *с.* ‘плохой’. Тейешле тәртиптә булмаған, насар. ■ *[Яппаров] ҡырын-мырын эш тураһында белеп ҡалһа, бөттө инде, кем алдында, ҡайҙалығына ҡарамай, хәбәрҙе яра ла һала.* Д. Бүләков.

**ҠЫРЫН-МЫРЫН II** *р.*

1) ‘вкривь и вкось.’ Тегеләй-былай, ҡыйыш. ■ *Унан [ҡыҙҙар] кем уҙарҙан ҡыр кәзәләре шикелле ҡырын-мырын һикерешеп, тауға менеп тә киттеләр*. З. Биишева.

2) ‘резко, грубо, дерзко, неодобрительно’. *күсм.* Боҙоҡ төҫ менән; кирле-мирле. *Ҡырын-мырын һөйләшеү.*

**ҠЫРЫН-ЯРЫН** *р.*

1) ‘вкривь и вкось’. Тегеләй-былай ҡырынайып, ҡырын-мырын итеп. *Ҡырын-ярын баҫып килеү.*

2) ‘искоса’. күсм. Тейешле тәртип, йүнәлешкә яраҡһыҙ рәүештә; яҙа.

▲ **ҡырын-ярын ҡарау** ‘*глядеть искоса*’. ■ *Өлкәнерәк ҡатындар Кинйәгә һүҙ тейҙергәне өсөн [Маһитапҡа] ҡырын-мырын ҡарап алдылар.* Ғ. Ибраһимов. *Ике яҡтың береһе ҡырын-мырын килеп, танау сөйөп маташманы.* М. Кәрим.

▲ **ҡырын күҙ менән ҡарау** *ҡар.* **ҡырын-ярын ҡарау**.

**ҠЫРЫП-ВАТЫП** *р. ҡар.* **ҡырып-емереп.**

**ҠЫРЫП-ЕМЕРЕП** *р.* ‘сокрушая, сметая всё на своём пути’. Тотош рәттән ҡыйратып. ■ *Бөтөн нәмәне ҡырып-емереп һалған терминаторҙар рухында, аяуһыҙ, бәғерһеҙ сит ил йәнһүрәттәре геройҙары өлгөһөндә тәрбиәләнгән бөгөнгө йәштәргә кәрәкме тарих?* З. Ҡотлогилдина.

**ҠЫРЫП-СЫРЫП** *р. ҡар.* **ҡырып-һепереп.** Бөтә булғанынса, тотош. ■ *[Наҡышев:] Барлы-юҡлы аҡсамды ҡырып-сырып урыҫҡа түләнем.* Я. Хамматов. *[Сәйҙеямал:] Күнәк төбөндәге ондоҡ аҡтығын, киләһе ризыҡты быуып ятмаһын тип, ҡырып-сырып баҫтым да ҡуйҙым инде.* Я. Хамматов.

**ҠЫРЫП-ҺЕПЕРЕП** *р.* ‘целиком’. Бер нәмә ҡалдырмайынса, барыһын да. ■ *Айыу ағас башына менеп, умартаның балын ҡырып-һепереп ашап китә.* Ж. Кейекбаев. *Үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш ҡарт ҡаҙандағы итте һоғалана-һоғалана ҡырып-һепереп ашап бөтөргән дә сығып та һыҙған.* Әкиәттән.

**ҠЫРЫҪ-МЫРЫҪ I** *с.* ‘неприветливый’. Кеше менән мөғәләмәһе ыңғай булмаған, ҡырыҫ тәбиғәтле, киҫкен холоҡло; кирле-мирле. *Ҡырыҫ-мырыҫ ҡатын.*

**ҠЫРЫҪ-МЫРЫҪ II** *р.* ‘неприветливо, нехотя’. Кирле-мирле; бер тегеләй, бер былай. *Ҡырыҫ-мырыҫ һөйләшеү.* ■ *Рәзилә менән Йомағол урам юлына төшкәнсе, ул [Фәнилә] ҡырыҫ-мырыҫ атлап үтеп тә китте.* Н. Мусин. *Төпсөнә-соҡсона башлағас, башта бик өлтөрәп йөрөгән баш приказчиктың һөмһөрө ҡойолдо, ҡырыҫ-мырыҫ ҡылана башланы.* Ғ. Хөсәйенов. *[Ғөбәйҙуллин:] Бына кеше! Мин, алйот, ни өсөн уға [взвод командирына] ҡырыҫ-мырыҫ ҡарауымды аңламайым. Ул миңә ҡарағанда өҫтөн, белемлерәк бит.* Я. Хамматов.

**ҠЫСМА-КҮС** *и. диал.* ‘божья коровка’. Ҡанат өҫтө ҡыҙыл йәки һары төҫтәге, ҡара төрткөлө ваҡ ҡына йомро ҡуңыҙ. Ҡамҡа. *Ҡысма-күс осоп китте.*

**ҠЫҪЫП-ҠЫМТЫП** ‘поджав’. Нығ итеп йомоп, ҡыҫа тотоп. *Иренен ҡыҫып-ҡымтып, өндәшмәй тора.*

**ҠЫТЫ-МЫТЫ** *и. йыйн.* ‘мелочь’. Ваҡ-төйәк нәмә. ■ *[Ғәлим:] Район үҙәгенән ҡайтып киләм әле,.. ҡыты-мыты алдым.* З. Хисмәтуллин.

**ҠЫТЫЙ-МЫТЫЙ** *и. диал.*

1) ‘мелочь.’ Ваҡ-төйәк (әйбер). *Ҡытый-мытый йыйыу. Ҡытый-мытый кейем.*

2) ‘мелюзга.’ Ыбыр-сыбыр. *Ҡытый-мытый балыҡ тотоу.*

**ҠЫШТЫР-МЫШТЫР** *оҡш. ҡар.* **ҡыштыр-ҡыштыр.** Ҡыштыр-мыштыр килеү. ■ *Яҡында ғына ҡыштыр-мыштыр атлап килгән кеше аяғы тауышын ишетеп, Буранбай һиҫкәнде.* Я. Хамматов.

**ҠӘҘЕР-ҒИЗЗӘТ** *и. йыйн. ҡар.* **ҡәҙер-хөрмәт.** *Ҡәҙер-ғиззәт күрһәтеү.*

**ҠӘҘЕР-ХӨРМӘТ** *и. йыйн.* ‘почет и уважение, почести’. Кемгәлер күрһәтелгән яҡшы мөнәсәбәт, иғтибарлы тәрбиә. ■ *Өйрәнсекте … бығаса күрелмәгән ҡәҙер-хөрмәт менән ололап күмгәндәр.* З. Биишева.

**ҠӘРҘӘШ-ҠӘҮЕМ** *и. йыйн. диал.* ‘родственники, родня’. Туған-ырыу. ● *Ата-инәһен һөймәгән ҡыҙ яман, ҡәрҙәш-ҡәүемен һөймәгән ул яман.* Әйтем.

**ҠӘРҘӘШ-ЫРЫУ** *и. йыйн.* ‘родственники, родня’. Бер нәҫелдән сыҡҡан кешеләр; туған-ырыу. ■ *Уны [Ҡаныҡайҙы] Дим буйында тирмәләрҙә ҡәрҙәш-ырыуҙары шатланып ҡаршы алған.* Легенданан.

**ҠӘҮЕМ-ҠӘРЕНДӘШ** *и. йыйн.* ‘родня, родственники’. Нәҫел-нәсәп, туған-ырыу. ■ *Алыҫ ҡалды ҡәүем-ҡәрендәшем, һәр береһе минең өсөн илар имде.* Бәйет.

# *Л*

**ЛАБЫР-ЛОБОР** *оҡш.* 'подражание беспрестанному невнятному разговору'. Туҡтауһыҙ һөйләшкәндәге тоноҡ тауышты белдергән һүҙ. ■ *Түбән яҡтан лабыр-лобор һөйләшеп, тағы ике-өс кеше килә.* Ф. Исәнғолов.

**ЛАБЫР-ЛОБОР КИЛЕҮ** *ҡ. ҡар.* 'тараторить'. Бер туҡтауһыҙ хәбәр һөйләү. *Лабыр-лобор киләләр, йоҡламайҙар.*

**ЛАҒЫР-ЛОҒОР I** *оҡш.*

1) 'подражание звуку, возникающему при бурном кипении жидкости'. Ҙур һауыттағы һыу ҡайнағанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Лағыр-лоғор итеү.*

2) 'подражание беспрестанному невнятному разговору'. Һөйләгәндә сыҡҡан тоноҡ тауышты белдергән һүҙ; лабыр-лобор. *Лағыр-лоғор килеү.*

**ЛАҒЫР-ЛОҒОР II** *и. этн. диал.* 'название детской игры'. Балалар уйыны (тубыҡ сәнсеп түңәрәкләп ултыралар; араларынан берәү уртала ултыра, уның арҡаһына берәү ишелгән таҫтамал менән һуға ла таҫтамалды тубыҡ аҫтынан оҙаталар. Урталағыһы һуғыусыны табырға тейеш). Название детской игры (дети садятся вокруг одного ребёнка, кто-то из них хлопает его полотенцем по спине, а он должен угадать, кто это сделал). *Ҡыҙҙар лағыр-лоғор уйыны уйнаны.*

**ЛАҢ-ЛОҢ** *оҡш.* 'подражание шуму множества голосов'. Күмәк кеше геүләп һөйләшкән тауышты белдергән һүҙ. *Лаң-лоң килеү.*

**ЛАП-ЛОП, ЛАП ТА ЛОП** *оҡш.*

1) ‘подражание грузному топоту ног: топ-топ’. Ҡабат-ҡабат лап итеп төшөп, һуғылғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. ■ *[Булат:] Тишеккә башымды тығып ҡына өлгөрҙөм, лап-лоп аяҡ тауышы ишетелде.* К. Кинйәбулатова.

2) ‘подражание шлёпанью: шлёп-шлёп’. Берәй әйбер ергә төшкәндә һ. б. осраҡтарҙа барлыҡҡа килгән тауышты белдерә. *Лап-лоп итеп барып төшөү.*

**ЛАПТЫР-ЛОПТОР** *оҡш.* ‘подражание шлёпанью: шлеп-шлеп’. Ҙур аяҡ кейемен һөйрәп атлағанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. ■ *Рифҡәт, лаптыр-лоптор дүрт аяҡлап ярға үрмәләне.* Ф. Исәнғолов.

**ЛАПШЫР-ЛОПШОР** *оҡш.* ‘подражание шлёпанью мокрой одеждой при ходьбе’. Лыс һыу кейем кейгән килеш атлағанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Лапшыр-лопшор атлау.*

**ЛАПШЫР-ЛОПШОР ИТЕҮ** *ҡ.* ‘шлепать’. Лапшыр-лопшор итеп һыуҙан килеп сығыу.

**ЛАР-ЛОР** *оҡш.*

1) ‘подражание протяжному и громкому мычанию или блеянию’. Яр һалып баҡырған һыйыр, һарыҡ тауышын белдергән һүҙ. *Лар-лор баҡырыу.* ■ *Ҡойма буйлап сынйырҙарын сылтыратып ике эт лар-лор өрә.* З. Ураҡсин.

2) *перен.* ‘подражание громкому голосу’. *күсм.* Ҡысҡырып һөйләп, ғауғалап йөрөгән кеше тауышын белдергән һүҙ. *Лар-лор һөйләшеү.* ■ *Хәйҙәровка фашистарҙың тамаҡ төбө менән лар-лор ҡысҡырыуҙары ... ишетелеп тора.* Ә. Ихсан.

**ЛАРÇ-ЛОРÇ** *окш.* ‘подражание продолжительному лаю собаки: гав-гав’. Оҙайлы итеп эт өргән тауышты белдергән һүҙ. ■ *Төндә йөрөгән ниндәй һәптән был тип муйнаҡтар ларç-лорç өрөп тороп ҡалдылар.* Б. Вәлит. *Эт, ларç-лорç абалап, алғы аяҡтары менән малайҙың күкрәгенә баçты ла уның беләген тешләп алды.* М. Кәрим.

**ЛАСҠ-ЛОСҠ** *окш.* ‘подражание неоднократным звукам чавканья, при еде хлюпанья воды, грязи’. Ҡабат-ҡабат ласҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Ласк-лоск атлау.*

**ЛАСТ-ЛОСТ** *окш.* ‘подражание звукам шлепанья, хлюпанья воды, грязи’. Оҙаҡ ваҡыт ласт иткән тауышты белдергән һүҙ. ■ *Аяҡ аçты ласт-лост итеп тора. Өçтән ҡар ҡатыш ямғыр яуа.* Х. Ғиләжев.

**ЛАСТЫР-ЛОСТОР** *окш.* ‘подражание звукам шлепанья, хлюпанья по грязи’. Һыуҙы, батҡаҡты кискәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. ■ *Урамдарҙан киләм ластыр-лостор.* К. Кинйәбулатова.

**ЛАШПЫР-ЛОШПОР** *окш.* ‘подражание звукам хлюпанья: хлюп-хлюп’. Кейем менән һыу кискәндә йәки лыс һыу кейем менән барғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Лашпыр-лошпор атлау.*

**ЛАШТЫР-ЛОШТОР** *окш.* ‘подражание звукам хлюпанья, шуршания, щороха: хлюп-хлюп’. Лыс һыу кейем менән барғанда йәки ҙур иркен аяҡ кейемен һөйрәп атлағанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Лаштыр-лоштор атлау.* ■ *Сомғол ергә тап килеүҙән файҙаланып, бер-ике тапҡыр*

*сумып алды ла ул [Биктимер], шунан лаштыр-лоштор баҫып, икенсе яҡ ярға сыҡты ла япраҡтарын һыуға эйгән тал төбөнә килеп ултырҙы.* К. Мәргән.

**ЛӘМ-МИМ** [*ғәр.] и.* ʻни словаʼ. Бер нәмә *лә*, бер һүҙ ҙә әйтмәгәнде белдереү өсөн ҡулланыла. ■ *Рәшиҙә ул турала ләм-мим һүҙ әйтмәне.* М. Тажи.

**ЛӘҮХ ӘЛ-МӘХФҮЗ** *и. кит. [ғәр].* ʻкнига судебʼ. Кешенең күрәсәге яҙылған таҡта; яҙмыш таҡтаһы. ■ *Әҙәмдең үҙәк һүҙе бары бикәр, яҙылған ләүх әл-мәхфүз үҙгәртелмәҫ.* М. Аҡмулла.

# М

**МАҘАМ-БОЛАН** *и. ʻвиргинский оленьʼ.* Төньяҡ Америкала йәшәүсе аҡ ҡойроҡло болан. *Маҙам-болан балаһы.*

**МАЙ-ҠОРОТ** *и. йыйн. диал.* ʻмолочные продуктыʼ. Һөттән эшләнгән барлыҡ ашамлыҡтар. *Май-ҡорот һатҡан магазин бүлеге. Күстәнәскә май-ҡорот ебәрҙем.*

**МАЙЛАП-БАЛЛАП** *р. һөйл.*

1) ʻс маслом, мёдом.ʼ Май, бал ҡушып. *Майлап-баллап сәй эсеү. Аштан һуң ҡунаҡтарҙың ҡулдарын тағы эҫе һыу менән йыуҙырҙылар.* ■ *Унан майлап-баллап бик оҙаҡ итеп сәй эстеләр.* З. Биишева. *Мунсанан ҡайтҡас, беҙ [Оло инәй менән Кендек] йәнә түр башына менеп ҡунаҡлайбыҙ. Тирләп-бешеп, майлап-баллап сәй эсәбеҙ.* М. Кәрим.

2) *перен.* ʻлестью и уговорами.ʼ *күсм.* Кешене юхалап, үҙ яғыңа ыңғайлатыу. *Майлап-баллап эшләтеү.* ■ *[Нуриханов:]*

*Ҡартлас риза булыр, әҙерәк баллап-майлап та ебәрһәң.* Д. Бүләков.

**МАЙЛАП-КӨЙЛӘП** *р. ҡар.* **майлап-баллап 2.** ■ *Әгәр атаһына кәңәш итһә, бөтә тормошон майлап-көйләп, хәйләләп алып барыуға ҡорған, осраған һәр ауырлыҡты бәлә-ҡазаһыҙ ситләтеп, улай мөмкин булмағанда, бәреп-һуғып үтергә өйрәнгән Ҡотлоғужа бер әмәлен табыр ине табыуын.* Н. Мусин.

**МАЙЛАП-ҠОРОТЛАП** *р. йыйн. һөйл.* ‘с маслом и курутом’. Май һәм ҡорот ҡушып. ■ *Сарыбайҙың улдары менән дуҫының юлдаштары үҙҙәре аулап алған йәнлек, ҡош иттәренән майлап-ҡоротлап аш бешерергә тотоналар, ә ике батыр Сарыбайҙың аҡ тирмәһенә инә.* К. Мәргән.

**МАЙЛАП-ЯЙЛАП** *р. ҡар.* **майлап-баллап 2.**

**МАЛАЙ-ҺАЛАЙ** *и. йыйн.* ‘мальчишки’. Егет йәшенә тиклемге ир балалар. *Урам тулы малай-һалай.* ■ *Ҡуштирәк егеттәре, уларға эйәреп, саяраҡ малай-һалай, ҡулдарына оҙон таяҡтар, багорҙар тотоп, ҙур ғына боҙға баҫып ҙа китер ине бәрелә-һуғыла тирмән быуаһына табан.* Ә. Хәкимов.

**МАЛАЙ-ШАЛАЙ** *и. йыйн.* ‘мальчишки’. Егет йәшенә тиклемге ир балалар. ■ *Бала-саға, малай-шалай, ҡарт-ҡоро үҙенән-үҙе ҡупҡан яуҙы зыярат баҫыуы ҡапҡаһына тиклем оҙата барҙы.* Г. Яҡупова. *Әммә ауыл инде күптән уянған, урамдар ығы-зығы менән тулған: әле ярһыу аттарын саҡ тыйып тотҡан егеттәр сабып үтә, әле машиналар елдерә, әле малай-шалай йүгерешә.* Ф. Рәхимғолова.

**МАЛ-ЙӘН** *и. йыйн.* ‘домашний скот, птицы’. Хужалыҡта аҫыралған бөтә тереклек. ■ *Ауылдың, мал-йәндең, бала-сағаның хәлдәре оҙаҡлап бер нисәшәр ҡабат һорашылды.* Ғ. Дәүләтшин.

**МАЛ-ҠАРА** *и. йыйн.* ‘домашний скот, птицы’. Хужалыҡта аҫралған бөтә тереклек. ■ *Миҙхәт тороп, тышҡа сыҡты, мал-ҡараға бесән һалды.* Н. Мусин.

**МАЛ-МИЛЕК** *и. йыйн. ҡар.* **мал-мөлкәт.** *Мал-милек туплау***.**

**МАЛ-МОНАЯТ** *и. йыйн. ҡар.* **мал-мөлкәт.** *Мал-монаят йыйыу***.**

**МАЛ-МӨЛКӘТ** *и. йыйн.* ‘состояние, имущество *(движимое и недвижимое);* богатство’. Йорт-хужалыҡтағы бөтә булған нәмә; матди байлыҡ. ■ *[Кулактар] мал-мөлкәтен һаҡлап ҡалыр өсөн беҙҙең иптәштәрҙе үлтерҙе.* Б. Хәсән. *Сафагәрәйҙең данлы ғәскәре эсендә йышылып, шымаҡайланып, уҫалланып, йыртҡысланып бөткән унбашы һәм йөҙбашы кеүек дәрәжәлерәктәре барасаҡ илде талап, мал-мөлкәт алып ҡайтып, тағы бер тына (алдағы барымтаға тиклем) кәйеф-сафа ҡылып алыу тураһында хыял итә.* К. Мәргән.

**МАЛ-МӨЛКӘТЛЕ** *с. ҡар.* ‘состоятельный, богатый’. Донъяһы етеш, малы күп булған, тормошо мул, аҡсалы; бай. *Мал-мөлкәтле ғаилә. Мал-мөлкәтле ир. Мал-мөлкәтле булыу.* ■ *Был хәбәрҙе ишеткәс, Шаҡман түрә муллаһын ҡабатлап киҫәтеп ҡуйыуҙы кәрәк тапты: – Юҡ, юҡ! – тине ул, мал-мөлкәтле түрәләрҙә генә була торған һауалыҡ менән.* К. Мәргән.

**МАЛ-МӨЛКӘТҺЕҘ I** *с.* ‘несостоятельный, бедный’ Мал-мөлкәте, байлығы булмаған; ярлы, фәҡир. ● *Мал-мөлкәтһеҙ кеше мәшәҡәтһеҙ.* Әйтем.

**МАЛ-МӨЛКӘТҺЕҘ II** *р.* ‘бедно’. Мал-мөлкәте, байлығы булмаған; ярлы, фәҡир. *Мал-мөлкәтһеҙ тороп ҡалыу. Мал-мөлкәтһеҙ ғүмер итеү. Мал-мөлкәтһеҙ йәшәү.*

**МАЛ-ТЫУАР** *и. йыйн.* ‘домашний скот, птицы, домашняя живность’. Хужалыҡта аҫралған бөтә тереклек. ■ *Яңғыҙ ҡарсыҡ бик мул йәшәй, еләк-емеш баҡсаһы ла бар, аҙбары тулы мал-тыуар.* Т. Арыҫлан. *Өҫтәүенә, һауала яман ҡуйы ылыҫ еҫе генә ҡалғанлыҡтан, мал-тыуар ҡырыла, кешеләр ҡырыла башлай.* Н. Мусин.

**МАЛ-ТЫУАРЛЫ** *с.* ‘имеющий домашнюю живность’. Барлыҡ йорт хайуандары, ҡоштары булған. *Мал-тыуарлы урам. Мал-тыуарлы ҡура.* ■ *[Талип – Оло инәйгә:] Минең бик шәп самокат тәгәрмәсе бар, мал-тыуарлы йортҡа, бәлки, берәй ғәмәлгә ярап ҡуйыр.* М. Кәрим.

**МАМЫҠ-ЕП** *и. ҡар.* **кизе-мамыҡ.** Мамыҡ-еptән туҡылған туҡыма. *Мамыҡ-еп етештереү. Мамыҡ-еptән һуғылған тауар.*

**МАМЫҠ-ЙӨН** *и. йыйн.* ‘пух, пушинка’. *Мамыҡ һәм йөндәрҙең дөйөм атамаһы. Мамыҡ-йөн йыйыу. Мамыҡ-йөн тапшырыу.*

**МЕРКЕТ-МЕҢ** *и. этн.* ‘название башкирского рода племени Мин’. Мең ҡәбиләһе составына ингән башҡорт ырыуы атамаһы. ■ *Өршәк буйы башҡорттары ҡеүәтле мең*

*ҡәбиләһенең меркет-мең, өршәк-мең ырыуҙарына ҡарай.* Интернет селтәренән.

**МИН-МИНЛЕК** *и.*

1) ‘зазнайство, спесь, себялюбие, высокомерие’. Кешенең үҙ-үҙең ҙурға, шәпкә ҡуйыуы; маһайыусанлыҡ, тәкәбберлек, һауалылыҡ. ■ *Кәрим ағай үҙенең тиҫкәрелеген, мин-минлеген еңә алмай, выжданы менән һуғышып йөрөй.* И. Ғиззәтуллин.

2) ‘эгоизм’. Үҙен башҡаларҙан өҫтөн күреү, үҙ файҙаһын, мәнфәғәтен генә ҡайғыртыу хәле. *Мин-минлекте ҡуҙғытыу. Мин-минлекте аҡлау.* ■ *Турайған һынды ла мин-минлек йыш ике йөҙләндерә.* «Ағиҙел» журналынан.

**МИН-МИНЛЕКЛЕ** *с.* ‘спесивый; высокомерный’. Үҙ-үҙең ҙурға, шәпкә ҡуйыусан; үҙен генә уйлаусан; маһайыусан. ■ *Донъяла .. мин-минлекле кеше менән бергә тороп, тереклек итеү ҡәҙәр ауыр эш бик әҙ була.* М. Ғафури.

**МИН-МИНЛӘНЕҮ** *ҡ.* ‘проявлять зазнайство, высокомерие’. Үҙеңде ҙурға, шәпкә ҡуйыу; үҙеңде башҡаларҙан өҫтөн һанау; маһайыу, тәкәбберләнеү. *Мин-минләнеп йөрөргә ярата инде.*

**МИСЕК-ҒӘМБӘР** *и. йыйн.* ‘благоухающие, душистые вещества’. Хуш еҫле матдәләр. ■ *Мисек-ғәмбәр менән мисәтләнгән шешәләр, шуларҙағы төрлө шараптарҙы ожмах әһелдәре эсәләр.* М. Ғафури.

**МОҢ-ЗАР** *и. йыйн.* ‘кручина, печаль, горесть’. Ауыр кисереш, ҡайғы-хәсрәт, аһ-зар. ■ *Тыңланым мин юҡһыл ил халҡымдың, ас халҡымдың ҡайғы, моң-зарын.* Б. Ишемғол.

**МОҢЛО-ЗАРЛЫ** *с. йыйн.* ‘печальный, грустный’. Ҡайғы-хәсрәтле, аһ-зарлы. *Моң-зарлы көйҙәр.*

**МОҢ-КӨЙ** *и. йыйн.* ‘мелодия, мотив, напев’. Күңелде елкендергән, күңелдә нескә хистәр уятҡан аһәңле тауыш, көй. ■ *Сыйырсыҡ, сыйырсыҡ, ояңдан осоп сыҡ, оҡшаһа был өйөң, түгелһен моң-көйөң*. Р. Ғарипов.

**МОҢ-ҺАҒЫШ** *и. йыйн.* ‘печаль-тоска, грусть-тоска, уныние кручина’. Күңелдәге төрлө ауыр тойғо; аһ-зар. *Шаулама, ҡамыш, сығарма тауыш, унһыҙ ҙа миндә моң-һағыш!* Ғ. Мәсғүт.

**МӨЙӨШ-ҺӘЙЕШ** *и. йыйн.* ‘углы’. Берәй нәмәнең мөйөштәре. ■ *Инде йорттоң ҡыйығы ла янып бөттө, мөйөш-һәйештәре ҡыйшая башланы.* З. Биишева.

**МӨКӨ-ТАҠЫ** *р. диал.*

1) ‘очень мало, совсем немного’. Таҡы-тоҡо. *Аҙыҡ мөкө-таҡы ғына ҡалды.*

2) кое-как’. Көс-хәл менән, көскә-көскә; ҡыйынлыҡ менән, саҡ-саҡ, саҡ ҡына. *Эште мөкө-таҡы эшләп бөттөрҙөк.*

**МУҠШЫ-ҠАСҠЫН** *и. этн.* ‘название одного из родовых подразделений башкир-табынцев’. Табын ҡәбиләһенә ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. *Муҡшы-ҡасҡындар араһы. Муҡшы-ҡасҡындар төбәге.*

**МУҠШЫ-ҒӘЙНӘ** *и. этн.* ‘название одного из родовых подразделений башкир племени гайна’. Ғәйнә ҡәбиләһенә

ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. *Мукшы-гәйнәләр тарихы.*

**МУЛЛА-МОНТАҒАЙ** *и. йыйн.* ‘служители культа’. Дин әһелдәре. ■ *Мулла-монтағайҙарҙың ҡара эше ныҡыраҡ фашлана барған һайын, Ғәли шәкерттең мәҙрәсәнән, диндән һыуына барыуы – ана шул һыҙыҡтарҙың береһе.* К. Әхмәтйәнов. *Мулла-монтағайҙар аҡыл һатҡан: “Һеҙгә ожмах теге донъяла!”* С. Кулибай.

**МЫШТЫР-ҺАШТЫР** *р.* ‘не спеша, медленно’. Ҡабаланмай ғына, яйлап ҡына. ■ *Ул [Тимер] ашыҡмай ғына мыштыр-һаштыр кейенә башланы.* Б. Бикбай.

# Н

**НАМАҘ-НИЯЗ** *и. йыйн.* ‘молебен, молитвы’. Аллаға ҡылынған ғибәҙәт; доға, үтенес. ■ *Ҡолаҡ асма, башҡорт, ҡурҡытыуға, намаҙ-ниязыңды ҡыла тор.* Ш. Бабич. *[Хәҙрәт:] Намаҙ-ниязды ҡалдырмаҫҡа, саҙаҡаларҙы бирергә кәрәк.* И. Насыри.

**НАМ-НӘШАН (НӘМ-НӘШАН)** *и. йыйн.* ‘чьи-то имена, след; знак’. Низеңдер исеме, билдәһе, эҙе; тамға. ■ *[Һәүбән] күл ситенә барып ҡараған, унда ла нам-нәшан юҡ, тып-тын, ти.* «Аҡбуҙат» эпосынан. *Байгөбәк күренмәгән, килмәгән. Һис бер нәм-нәшан булмағас, [Көнһылыу] ҡаратал төбөнә бармаған.* М. Буранғолов.

**НЫҠЫ-МЫҠЫ** *и. диал.* 'кокетка'. Ҡыйшанларға яратыусан; ҡылансыҡ. *Ныҡы-мыҡыларга ышанма. Ныҡы-мыҡылар күп булыр, һайлаганың йүнле булһын.*

**НӘМӘ-ҠАРА** *и.* 'всякие вещи, всякая мелочь, предметы обихода'. Донъя ҡаралдыһы, ваҡ-төйәк нәмә; кәрәк-яраҡ.

**НӘҪЕЛ-НӘСӘП** *и. йыйн.*

1) 'род, предки'. Бер ата-бабанан сыҡҡан быуын-быуын кешеләр. ■ *Тауҙар ҡуйынына һыйынып ултырған ауылдарҙың кешеләре нәҫел-нәсәбе менән урмансы булған.* Н. Мусин.

2) 'родня, родственники'. Ағай-эне, туған-тыумасалар. *Нәҫел-нәсәбен дә белмәй бит ул.* ■ *[Нуғай әмире:] Үҙеңде бөйөк ханыбыҙҙың тогро сураһы итеп таныттың, Богара бей, афарин! Беҙгә хәҙер туганлашып, сук-сук нәҫел-нәсәп яңыртып, бергә-бергә йәшәү лазим.* Ә. Хәкимов.

**НӘҪЕЛ-НӘСӘПЛЕ** *с.*

1) 'имеющий много родственников'. Ағай-энеһе, туғандары күп булған, нәсәпле. *Нәҫел-нәсәпле кешеләргә йәшәүе күпкә еңелерәк.*

2) 'родовитый, именитый, знатный'. Билдәле, атаҡлы туған-тумасалы булыу. *Уның ырыуында нәҫел-нәсәпле кешеләре күп кенә.*

**НӘҪЕЛ-ТОҠОМ** *и. йыйн. һөйл. ҡар.* **нәҫел-нәсәп.** *Нәҫел-тоҡомо бармы уның?* ■ *Һораша торгас, әллә ҡайһы нәҫел-тоҡомдарҙан уратып килеп, Ғәзимәнең атаһы менән был егеттең әсәһенең ҡартатаһы тугандан туган булып, егет уның яҡын гына ҡустыһы тейешле лә булып сыҡты.* Һ. Дәүләтшина.

**НӘҪЕЛ-ЫРЫУ** *и. йыйн.*

1) ‘род, предки’. Бер ата-бабанан сыҡҡан быуын-быуын кешеләр.

2) ‘родня, родственники’. Ағай-эне, туған-тумасалар. ■ *Йылдан-йыл нәҫел-ырыуға, күрше-күләнгә килен төшөргәндә, кейәү менән кәләш ҡырандасына Сәмиғулла еҙнәмдең тимер күк бейәһе менән Аҡсалды парлап егәләр*. М. Кәрим.

**НӘФЕС-ШАЙТАН** *и. йыйн. иҫк.* ‘внутреннее чувство, порождающее жадность, корысть; чувство вожделения’. Тынғы бирмәгән, нәфсене үҫтергән эске тойғо. ■ *Нәфес-шайтан кергәс, инсан донъяһы аҙҙы-туҙҙы, сыҡты сиктән һәммәһе.* Ш. Бабич.

## О

**ОҘОН-ОҘАҠ** I *с.* ‘долгий-предолгий, длинный-предлинный’. Бик оҙаҡ. *Оҙон-оҙаҡ көн. Оҙон-оҙаҡ йылдар.* ■ Бәхетле *булһа ла, бәхетһеҙ булһа ла, беҙҙең бала сағыбыҙ оҙон-оҙаҡ йылдар буйынса артыбыҙҙан эйәреп килә.* М. Кәрим.

**ОҘОН-ОҘАҠ II** *р.* ‘очень долго, очень длинно’. Бик оҙаҡ. *Оҙон-оҙаҡ һөйләү. Оҙон-оҙаҡҡа һуҙыу.* ■ *Рифат оҙон-оҙаҡ уйлап торманы, ҡағыҙ алды ла Гөлнур булып хат яҙа башланы.* Р. Байбулатов.

**ОҘОН-ОҘАМА** *с. ҡар.* **оҙон-оҙаҡ 1**. ■ *Көҙгө ҡыҫҡаҡ көндәр, оҙон-оҙама быҫҡаҡ ямғырҙар; ҡуйы томандар менән алмашынып уҙып торалар.* Ғ. Дәүләтшин.

**ОҘОН-ҺЫҘА** *р.* ‘широко, длинно.’ Оҙон итеп, һуҙып. ■ *Мөлөк ағай әйләнеп бер ҡараны ла, оҙон-һыҙа баҫып атлауын дауам итте.* Т. Хәйбуллин.

**ОЙҠО-ТОЙҠО** *р.* ‘от души, увлеченно’. Көс-дәрт менән гөрләтеп эшләү; ойоҡһотоп эшләү. *Ялан яңғыратып уйнап-көлөп, эштең ойҡо-тойҡоһон сығарып эшләп йөрөгән йәштәрҙән Садиҡ, Вахит, Саималарға ололарса хөкөм йөрөтөү төҫө керҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**ОЙОҠ-БЕЙӘЛӘЙ** *и. йыйн.* ‘чулки и варежки’. Ойоҡ һәм бейәләйҙәр. ■ *[Балалар] дәрес әҙерләгәндә [Сәғиҙә апай] йә ойоҡ-бәйәләйен бәйләп, йә икенсе бер эш табып, шым ғына ултыра.* Я. Вәлиев.

**ОМАР-ЙОМАР ИТЕҮ** *ҡ. диал.* ‘делать что-л. наспех, торопливо’. Ашыҡ-бошоҡ эшләү. *Урақты омар-йомар итеп ҡуйыу.*

**ОН-ТАЛҠАН** *и. йыйн.* ‘толокно, толчёное, молотое зерно’. Төйөлгән, тартылған ашлыҡ; он һәм талҡан. *Он-талҡан яһау.* ■ *Ҡаф тауына типһәм мин, он-талҡандай ыуалыр.* Әкиәттән.

**ОН-ТАЛҠАН БУЛЫУ** *ҡ.*

1) ‘измельчиться, размолотиться’. Бик ныҡ ваҡланыу. *Бесән он-талҡан булған.*

2) *перен.* ‘раскрошиться, разбиться, уничтожаться’. *күсм.* Ныҡ ҡыйралыу, емерелеү. ■ *Сәйгүнем төшөп китеп он-талҡан булды. Бына-бына ул мина шартлап ярыласаҡ та Наташа он-талҡан булып ыуаласаҡ.* И. Абдуллин.

**ОН-ТАЛҠАН ИТЕҮ** *ҡ.* ‘превратить, стереть в порошок’. Ныҡ ҡыйратыу, емереү; бик ҡаты туҡмау, йәнсеп ташлау. ■ *Аҡ-күк атын батыр йүгәнләй, яуға китер мәле еткәндә. Дошмандары уны күрә алмай он-талҡан да ғына иткәнгә.* Халыҡ йырынан.

**ОҢҒОЛ-СОҢҒОЛ** *с.ҡар.* **оңғор-соңғор**. *Был донъяның ние бар? … Оңғол-соңғол булһа ла, йәйләй торған ере бар.* М. Буранғолов.

**ОҢҒОР-СОҢҒОР** *с.* ‘неровный, ухабистый’. Бер ере соҡор, икенсе ере ҡалҡыу; соҡорло-саҡырлы; оңғорло-соңғорло. ■ *[Урал:] Тигеҙ ятҡан ер йөҙөн оңғор-соңғор иттерҙең.* «Урал батыр» эпосынан.

**ОҢҒОРЛО-СОҢҒОРЛО** *с.* ‘неровный, изрытый ямами; в колдобинах’. Бер ере соҡор, икенсе ере ҡалҡыу. *Оңғорло-соңғорло юл.* ■ *Оңғорло-соңғорло юл таҫмаһынан башҡа [Ғәмбәровтың] күҙенә бер ни сағылманы.* Ш. Янбаев.

**ОРҘО-БӘРҘЕ** I *с.*

1) ‘торопливо, суматошно; как попало, кое-как’. Ашығып, ҡабаланып, арлы-бирле, теләһә нисек. *Орҙо-бәрҙе эшләү. Орҙо-бәрҙе уҡыу.*

2) *перен.* ‘грубо, развязно, нетактично, неприлично’. *күсм.* Әҙәпһеҙ, тупаҫ рәүештә. ■ *Ҡатын-ҡыҙ менән орҙо-бәрҙе һөйләшмәйҙәр. Улай орҙо-бәрҙе ҡыланырға ярамай. Беҙгә иң мөһиме – әҙәп.* А. Карнай.

**ОРҘО-БӘРҘЕ II** *с.* ‘торопливый, поспешный’. Ҡапыл уйлап, шарт та шорт эшләүсән, ашығыусан. *Орҙо-бәрҙе кеше. Ул шундай орҙо-бәрҙе кеше инде ул.*

**ОРОЛА-БӘРЕЛӘ** *р.* ‘толкая, расталкивая (окружающих)’. Кемгәлер йәки нимәгәлер бәрелеп, һуғылып; бәреләһуғыла. *Орола-бәреләйырып үтеү.*

**ОРОЛА-ҺУҒЫЛА** *р.* ‘толкая, расталкивая (окружающих)’. Кемгәлер йәки нимәгәлер бәрелеп, һуғылып. *Орола-һуғыла майҙандың уртаһына үтте.*

**ОРОЛОП-ҺУҒЫЛЫП** *р.*

1) ‘ударяться то туда, то сюда, толкая, расталкивая (окружающих)’. Тегендә ҡағылып, бында бәрелеү. *Оролоп-һуғылып йөрөү.*

2) *перен.* ‘терпеть трудности, терпя унижения’. *күсм.* Йәбер, яфа сигеү; ҡағылып-һуғылыу. *Бахыр бала оролоп-һуғылып үҫеп етте инде.*

**ОРОМ-ОРПАҠ** *и. йыйн.* ‘потомки; потомство от одного отца’. Бер атанан таралған быуын-быуын кешеләр; нәҫел-нәсәп. ■ *[Ҡарамырҙа] Ҡара ергә тығам, кисерешем юҡ, ором-орпағыңды ҡалдырмай.* Х. Ғәбитов.

**ОРОП-БӘРЕП** *р. һөйл. ҡар.* **ороп-һуғып 2**. *Ороп-бәреп сығып китте.*

**ОРОП-ҺУҒЫП** *р. һөйл.*

1) ‘всячески обижая’. Төрлөсә рәнйетеү, туҡмау. ■ *… Ул заманда тыныслыҡ һис булмаған. Көслөләре насарҙарын ороп-һуғып, үлтергән берен-бере хурлыҡ менән.* «Бабсаҡ менән Күсәк» эпосынан.

2) ‘ни о чем не думая, безрассудно’. Уйлап тормай, дыуамал рәүештә. *Ороп-һуғып ҡайтып китеү.*

**ОРОЛОШ-ҠЫРЫЛЫШ** *и. йыйн. иҫк.* ‘война, сражение, битва’. Ҡаты ҡан ҡойғос һуғыш. *Тап ошо ерҙә оролош-ҡырылыш булған да инде.*

**ОРОШ-ТАЛАШ** *и. йыйн.* ‘ссоры и раздоры, перебранка’. Күмәк тартыш; ыҙғыш. ■ *Дөйөм ятаҡҡа ҡайтып кереү менән, кемдәрҙеңдер орош-талашы ишетелә. Көнө-төнө эшләйһең дә эшләйһең, уның өҫтөнә орош-талаш.* М. Ғафури.

**ОСА-ЕЛӘ** *р.* ‘стремглав, мчась’. Бик ҙур тиҙлек менән, елдереп. ■ *Ошолай оса-елә сабып барғанда, ҡапыл йәнә шул һул беләгем яман зырҡырап ауыртып китмәһенме!* Ә. Хәкимов.

**ОСА-ҠАЛҠА** *р. ҡар.* **оса-ҡуна 2**. ■ *[Шәрғиә – Бикмырҙаға:] Нишләп һине ҡартҡа иҫәпләйем, ти! Улайға китһә, минең үҙемдең дә оса-ҡалҡа йөрөр ваҡыттарым ана ҡайҙа ҡалды.* Ә. Хәкимов.

**ОСА-ҠУНА** *р.*

1) ‘стремглав, порываясь’. Ярһып, оса-оса ташланып. *Оса-ҡуна сукыша.* ■ *Әле генә йылмайып ултырған ҡатындың йөҙө был мәлдә ҡорбанын өҙгөсләргә әҙерләнгән ҡарсығаны хәтерләтә ине. Ул оса-ҡуна шоферға ташланды.* В. Исхаҡов.

2) *перен.* ‘стремясь, с порывом, как на крыльях’. *күсм.* Йөрәкһеп, елкенеп. *Ҡыуаныcынан оса-ҡуна йөрөй.*

**ОСА-ТАЛПЫНА** *р.* ‘стремглав’. ■ Ҙур теләк менән, йөрәкһеп, елкенеп. ■ *Оса-талпына Бәҙеголъямал килеп керҙе.* Х. Ғиләжев.

**ОСО-БАШЫ** *и. йыйн.* Ниҙеңдер аҙағы һәм сиге. *Осо-башы юҡ.*

**ОСО-ҠЫРЫЙЫ** *и. йыйн.* ʻконец и крайʼ. Ниҙеңдер аҙағы, сиге; осо-башы.

▲ **осо-ҡырыйы булмау** (йәки ***күренмәү, юҡ***)

1) ʻбесконечный (о делах, работе)ʻ**.** Бик оҙаҡҡа һуҙылыу, бөтмәү (эш-хәл тураһында). *Эшләнәсәк эштең осо-ҡырыйы күренмәй*. Я. Хамматов.

2) *ʻбесконечный, ни конца ни краяʻ*. Бик оҙон, сиге булмаҫтай күренгән. *Ауылдың осо-ҡырыйы юҡ.*

**ОСОНОП-ТАЛПЫНЫП** *р. ҡар.* **осоп-талпынып**. *Бөгөн Ҡәҙриә осоноп-талпынып бейене.*

**ОСОП-ТАЛПЫНЫП** *р. ҡар.* **оса-талпына**. *Осоп-талпынып бер бала бейей.*

**ОСОП-ТӨШӨП** *р.* ʻс радостью, воодушевленноʼ. *Шатлыҡ, теләк менән елкенеп; дәртле Емештең дә хәҙер осоп-төшөп улар араһына барып ингеһе, уйнап-көлгөһө килә, әлбиттә.* З. Биишева.

**ОСОП-ҺИКЕРЕП** *р. ҡар.* **оса-талпына**. ■ *Күбәләк кеүек осоп-һикереп торҙо Зөлхизә.* З. Биишева.

**ОСОП-ҠУНЫП** р. *ҡар.* **оса-ҡуна 1, 2.**

**ОСО-СИГЕ** *и. йыйн. ҡар.* **осо-ҡырыйы.** ■ *Кешеләрҙе һөйөндөрөп һуҙылған ҡулыммы ул? Осо-сите күренмәгән бормалы юлыммы ул?* Р. Шаммас.

**ОСТО-КӨЙҘӨ** *р. һөйл.* ‘без вести’. Хәбәрһеҙ, хәбәрһеҙ-хәтерһеҙ. ■ *Ошо китеүҙән Ғөбәйҙулла осто-көйҙө гәйеп булды.* Р. Солтангәрәев.

**ОСТОҠ-МОСТОҠ** *и. йыйн.* ‘лоскутья, лоскутки’. Низең дә булһа эшкә ашмаған киҫәк-миҫәк ҡалдығы. *Остоҡ-мостоҡтан әйбер яһау.*

**ОСҺОҘ-ҠЫРЫЙҺЫҘ** *с.* ‘безграничный, бескрайний’. Осо *ла*, сиге *лә* юҡ йәки күренмәҫ; икһеҙ-сикһеҙ. *Осһоҙ-ҡырыйһыҙ дала буйлап барҙыҡ та барҙыҡ.*

## Ө

**ӨГӨТ-НӘСИХӘТ** *и. йыйн.* ‘наставление’. Аҡыл, кәңәш биреп һөйләнгән һүҙ. *Өгөт-нәсихәт биреү.* ■ *Иҫәкәй тархан, өгөт-нәсихәтен әйткәндән һуң, яҡын арала низәр эшләргә кәрәклеге тураһында күрһәтмәләрен бирәсәк.* Н. Мусин. *Мостафа … ата-әсәһенән тормоштоң тәртип-низамдарына төшөнә бара, өгөт-нәсихәттәрен үҙләштерә.* Ғ. Хөсәйенов.

**ӨГӨТ-НӘСИХӘТ УҠЫУ** *ҡ.* ‘читать наставления’. Кәрәккән-кәрәкмәгәнгә кешегә аҡыл өйрәтеү. *Өгөт-нәсихәт уҡырға керешеү. Ошо апайым һәр берећенә өгөт-нәсихәт уҡырға тора.*

**ӨҘМӘЙ-ҠУЙМАЙ** *р.* ‘непрерывно, непрестанно, почти вынудив, почти силком’. Бер туҡтауһыҙ, өҙлөкһөҙ. *Өҙмәй-ҡуймай игәү.*

▲ **өҙмәй-ҡуймай** ‘непрерывно талдыча, почти вынудив, почти силком’. Бер туҡтауһыҙ, өҙлөкһөҙ бер нәмәне

туҡыу, тылҡыу. *Еҙнәм өҙмәй-ҡуймай өйгә индерҙе.* ■ *Бикморат ҡартты бергөн үк өҙмәй-ҡуймай Юлдашбаев Имәнҡулға алып ҡайтып киткәйне, һаман шунда ята әле.* Н. Мусин.

**ӨҘӨК-ЙЫРТЫҠ I** *с.*

1) ‘оборванный’. Төрлө ерҙән теләһә нисек өҙгөләнгән, йыртылған; өҙөлөп-йыртылып бөткән. *Өҙөк-йыртыҡ кейем.* ■ *Емтектең ҡабырға һөйәктәре генә ҡалған, тегендә-бында башы-тояғы, өҙөк-йыртыҡ тире боҫҡаҡтары ята.* Ж. Кейекбаев.

2) *перен.* ‘отрывистый, несвязанный, урывчатый’. *күсм.* Ҡыҫҡа-ҡыҫҡа итеп, төрлө ерҙән алынған, бер-береһенә бәйләнешһеҙ. ■ *Юл буйында һөйләгән һүҙҙәр ... өҙөк-йыртыҡ ҡына булды.* Ж. Кейекбаев.

**ӨҘӨК-ЙЫРТЫҠ II** *р.* ‘прерывисто, неясно’. Ҡыҫҡа-ҡыҫҡа, бер-береһенә бәйләнешһеҙ. ■ *Сал сәсле ҡатындың күгелйем ирендәре менән әйтелгән һүҙҙәр уға өҙөк-йыртыҡ ҡына ишетелде.* М. Садыҡова.

**ӨҘӨК-ТӨРТӨК I** *с.* ‘прерывистый’. Бер ыңғай бармаған, йыш өҙөлгән, өҙөк-өҙөк (эш-хәлгә ҡарата). ■ *Өҙөк-төртөк йоҡонан насар кәйеф менән торҙом.* С. Ҡудаш.

**ӨҘӨК-ТӨРТӨК II** *с.* ‘прерывисто’. Йыш өҙөлгән, өҙөк-өҙөк рәүештә. *Өҙөк-төртөк кенә аңлатыу.* ■ *Ул [Айым], бер-ике ауыҙ һүҙ алмашып алғас та, күҙ йәштәрен тыя алмайынса, үҙ һүҙҙәренә үҙе быуыла-быуыла, өҙөк-төртөк кенә һөйләп бирҙе.* Ғ. Ибраһимов.

**ӨҘӨК-ҺУРЫҠ I** *р. диал.* ‘урывками, неясно’. Әҙ-әҙләп, әллә ниҙә бер; урыҡ-һурыҡ. *Өҙөк-һурыҡ ашау.* ■ *Өҙөк-һурыҡ*

*һөйләнгән моңһоу ҙа, ғибрәтле лә хикәйәттәр, иҫтәлектәр шунда өҙөлдө.* С. Шәрипов.

**ӨҘӨК-ҺУРЫҠ II** *с. диал.* ʻобрывистый, неполныйʼ. Тулы булмаған, осраҡлы; урыҡ-һурыҡ. *Өрөк-һурыҡ хәбәрҙәр ишетелә.*

**ӨҘӨМ-ЙЫРТЫҠ** *с. диал.* **өҙөк-йыртыҡ.** *Өҙөм-йыртым мәғлүмәт килеп етте.*

**ӨҘӨП-ЙОЛҠОП** *р.*

1) ʻразрываяʼ. Төрлө ерҙән тартҡылап, йолҡҡолап. ■ *Бына тағы һыу өҫтөн өҙөп-йолҡоп, көслө ел иҫте.* Д. Бүләков.

2) *перен.* ʻотрывочно, бессистемно, делая урывкамиʼ. *күсм. һөйл.* Төрлө ерҙән, теләһә ҡайһылай алыу. ■ *Улар менән ныҡлы элемтә булдырылды. Өҙөп-йолҡоп булһа ла, припас тулыландырылды.* Д. Исламов.

**ӨҘӨП-ЙОЛОП** *р. диал. ҡар.* **өҙөп-йолҡоп.**

**ӨҘӨП-ЙЫРТЫП** *р.*

1) ʻразрываяʼ. Төрлөсә өҙгөләп, йыртҡыслап. *Өҙөп-йыртып ташлау.*

2) ʻделая урывками, отрывочноʼ. *күсм. һөйл.* Тегенән дә бынан алыу; өҙөп-йолҡоу. *Өҙөп-йыртып аңлатыу.*

**ӨҘӘ-ЙОЛҠА** *р.*

1) ʻобрывая, разрывая, отрываяʼ. Теләһә нисек тартҡылап, өҙгөләп. *Сәсте өҙә-йолҡа тарау.*

2) ʻбессистемно, беспорядочноʼ. *күсм. һөйл.* Төрлө ерҙән, теләһә ҡайһылай өҙөп-алып. ■ *Ашап ултырғанда Кәбир өҙә-йолҡа ғына урманда булған хәлдәрҙе һөйләне.* Н. Мусин.

**ӨЙ-ТӨҘ** *и. йыйн.* ‘окрестность’. Әйләнә-тирә, бөтә тирә-яҡ. ■ *Был аңдан бар халыҡтың ҡото осҡан, өй-төҙҙә хайуандар ҡурҡып ҡасҡан.* “Бабсаҡ менән Күсәк” эпосынан.

**ӨЙӘК-ТӨЙӘК** *и. йыйн. ҡар.* **ваҡ-төйәк.**

**ӨЙРӨЛӨП-СӨЙРӨЛӨП** *р.* ‘крутясь, вертясь, бегая вокруг’. Йәһәтләп, йүгергеләп, бер нәмә тирәһендә уралыу.

**ӨНДӘШМӘЙ-НИТМӘЙ** *с.*

1) ‘тихо, бесшумно’. Һис бер тауыш сығармаған; шым ғына. ■ *Буранбай һис өндәшмәй-нитмәй генә оҙон аҙымдар менән бер уңайға атлап бара.* Д. Юлтый.

2) ‘втихомолку’. Өндәшмәй генә; һиҙҙермәйсә. *Ул һәр саҡ өндәшмәй-нитмәй эшен эшләп ҡуя.*

**ӨН-ТЫН** *и.*

1) ‘звук’. Берәй төрлө тауыш, тын алыш һ.б. *Урамда өн-тын юҡ.*

2) ‘весть, известие’. Берәй төрлө хәбәр. ■ *Байғүбәктән өн-тын булмаған.* М. Буранғолов.

3) ‘намерение’. *күсм.* Кешенең уйы, ниәте; тын алышы. *Өнөн-тынын белмәйенсә кешегә әллә ни һөйләп булмай.*

**ӨНҺӨҘ-ТЫНҺЫҘ I** *с.*

1) ‘беззвучный’. Тауыш-тынһыҙ. Һис бер тауыш сығармаған; тын. *Өнһөҙ-тынһыҙ урман.*

2) ‘безмолвный, молчаливый’. Өнө-тыны сыҡмаған; өнһөҙ-һүҙһеҙ. *Өнһөҙ-тынһыҙ йөрөгән малай ниндәй ҡыйыу булып сыҡты!*

**ӨНҺӨҘ-ТЫНҺЫҘ II** *р.* ‘беззвучно, тихо’. Өнө-тыны сыҡмаған; өнһөҙ-һүҙһеҙ булыу, тороу. *Был бала өнһөҙ-һүҙһеҙ баянан бирле тик тора.*

**ӨНҺӨҘ-ҺҮҘҺЕҘ I** *с.* ‘безмолвный, молчаливый’. Тауыш-тынһыҙ, әкрен генә, тауышы сыҡмаған; шым, өндәшмәҫ. ■ *[Емеш] ҡасан ғына һуң әле өнһөҙ-һүҙһеҙ бала ине.* З. Биишева.

**ӨНҺӨҘ-ҺҮҘҺЕҘ II** *р.* ‘беззвучно’. Тауыш-тынһыҙ, әкрен генә. *Өнһөҙ-һүҙһеҙ тыңлау.*

**ӨҢГӨР-СӨҢГӨР** *с. диал. ҡар.* **оңғор-соңғор**. ■ *Әхмәҙинең ҡашҡа туры аты ябағаһын әле ҡоймаған. Ҡойор ине, тәне өңгөр-сөңгөр, арҡалары иткә туймаған.* С. Ҡудаш.

**ӨР-ЯҢЫ** *с.* ‘совершенно новый’. Яп-яңы. *Өр-яңы күлдәк. Өр-яңы ҡараш.* ■ *Көҙ, уҡыу башланыр көн еткәс, әсәһе үҙе иләп, үҙе һуҡҡан киндерҙән теккән өр-яңы ыштан-күлдәктең өҫтөнән камзул, аяғына тула ҡуныслы ҡата, башына үҙе теккән ҡолаҡсын бүректе кейҙерҙе лә, ете йәше тулыр-тулмаҫ улын [Мифтахетдинды] етәкләп уҡырға алып китте.* Я. Хамматов.

**ӨР-ЯҢЫНАН** *р.* ‘снова, вновь, заново, сначала’. *Яңынан, ҡабаттан.* ■ *[Юлдыбайҙың күңелендә] элекке яҡыныңды өр-яңынан асҡанда, унда элек күрмәгән, иғтибар бирмәгән әске матурлыҡты кинәт төшөнөүҙә була торған шатлыҡ та, үкенеү ҙә ҡатыш тойғо, һуңлап, ғазапланып тыуған һөйөү хисе.* Һ. Дәүләтшина. ■ *Йоҡоһоҙлоҡтан йонсоп, ул [Сәмиғ] уйы менән ауылдағы йәшлегенә, Санияға булған мөхәббәтенә әйләнеп ҡайта һәм хыялында тормошон өр-яңынан башлап ҡарай.* Т. Ғиниәтуллин.

**ӨҪ-БАШ** *и. йыйн.* ‘одежда’. Өҫкә кейгән кейем. *Өҫ-башыңды ҡарап йөрө.* ■ *Сафа, өҫ-башын да сисенмәй, асыуланған кеше һымаҡ ҡаштарын төксәйтеп, ике ҡулын кеҫәһенә тыҡҡан көйө иҙән уртаһында баҫып тора ине.* Һ. Дәүләтшина. *Кейеҙбай, аттың ҡорһаҡ аҫтынан үтеп, һул яҡтан уң яҡҡа сыҡһа, ни күҙе менән күрһен – үҙен кеше танырлыҡ та түгел: өҫ-башына шул тиклем аҫыл кейемдәр кейгән егеткә әйләнгән, ти.* Әкиәт.

**ӨҪ-БАШЛЫҠ** *с. һөйл.* ‘достаточный для покупки одежды (о деньгах)’. Кейем-һалым һатып алырға етерлек (эш хаҡына, аҡсаға ҡарата). *Өҫ-башлыҡ аҡса.* ■ *Хөсәйен менән Әхсән хәлдәренән килгәнсә кәсеп иттеләр: һалабаш һалдылар, ҡайыр һыҙырҙылар, әҙ булһа ла өҫ-башлыҡ аҡсаһы – аҡсалата, тауары тауарлата килеп торҙо.* Ж. Кейекбаев.

**ӨҪТӨ-ӨҘӨНӨК** *и.* ‘осложнение (при заболевании)’. Ауырыуҙың аҙып китеүе, төп ауырыуға икенселәре ҡушылып өҫтәлеүе. *Өҫтө-өҙөнөк булыу. Өҫтө-өҙөнөк булып ятыу. Баланан һуң өҫтө-өҙөнөк булыу.*

**ӨҪТӘЛ-ҠАРА** *и. йыйн.* ‘столы и т.п.’ Өҫтәл һәм шуның һымаҡ башҡа нәмәләр. *Өҫтәл-ҡараны тышҡа сығарыу. Өй эсендә өҫтәл-ҡара һымаҡ әйбер күренмәй. Өҫтәл-ҡара менән йорт эсе тулған*

**ӨҪТӘН-МӨҪТӘН** *р.* ‘поверхностно, кое-как, мельком, бегло’. Эсенә инмәй генә, асылына, төбөнә төшмәй генә; арлы-бирле. *Өҫтән-мөҫтән ҡарау.* ■ *Элекке Өфө губернаһының Маҡар волосындағы крәҫтиәндәр болаһы тураһында тарих биттәрендә лә өҫтән-мөҫтән генә әйтеп үтелә.* И. Ғиззәтуллин.

**ӨТӨЛӘ-ҒЫРА** *р. диал.* ‘торопливо’. Ашыҡ-бошоҡ. *Өтөлә-ғыра сығып китте. Өтөлә-ғыра йөрөй.*

**ӨТӨНӨП-ТӨРТӨНӨП** *р. диал.* ‘второпях’. Ашыҡ-бошоҡ, элә-һала. *Өтөнөп-төртөнөп килеп тә еттем. Өтөнөп-төртөнөп йөрөп ята. Өтөнөп-төртөнөп китеп бара.*

**ӨТӨЛӨП-ҠЫРЫЛЫП** *р.* ‘суетясь, сильно торопясь, второпях’. Ныҡ ашығыу. Һуңлайым тип, өтөлөп ҡырылыу. *Өтөлөп-ҡырылып ҡайтып инеү.* ■ *[Зөләйха] иртәнсәк, әсәһенә аш-һыу әҙерләшергә, мал ҡарашырға тип, өтөлөп-ҡырылып иртүк ҡайтып етә торғайны.* Н. Мусин.

**ӨТӨНӨП-ТӨРТӨНӨП** *р.* ‘второпях’. Ашыҡ-бошоҡ. *Анау егет өтөнөп-төртөнөп китеп бара.*

**ӨТӨП-ҠЫРЫП** *р.* ‘сильно торопить кого-либо’. Ныҡ ашыҡтырыу. *Өтөп ҡырмай тор әле. Өтөп-ҡырып алып бара.* ■ *[Тимерғәле:] Ашығыу – ул шайтан эше. Улай өтөп-ҡырып, һөрләктөрөп йығайым тигән уй менән килмәнем.* Һ. Дәүләтшина.

**ӨШКӨРӨМ-ТӨКӨРӨМ** *и. йыйн.* ‘заговоры, заклинания’. Һәр төрлө им. *Өшкөрөм-төкөрөм менән дауалау. Өшкөрөм-төкөрөм менән булыу.* ■ *Өләсәйем өшкөрөм-төкөрөмдө яҡшы белә торғайны.* Экспедиция материалдарынан. *Муллалар өшкөрөм-төшкөрөм менән дауалағеан булып, Ирмоҡандың һарыҡ-кәзәһен берәм-берәм алып китә башланы.* И. Ҡоҫапҡол.

**ӨШКӨРӨП-ТӨКӨРӨП** *р.* ‘заговаривая нашёптыванием, оплёвыванием, сдуванием’. Төрлөсә им-том

итеү. *Өшкөрөп-төкөрөп дауалау.* ■ *[Шәйсолтан] өшкөрөп-төкөрөп кенә йүнгә кертерлек түгел – бик ҡаты һалҡын алдырған.* Ә. Мирзаһитов.

# П

**ПЫРАН-ЗАРАН КИЛЕҮ** *ҡ.*

1) ʻприходить в беспорядочное состояниеʼ. Аҫты-өҫкә килеп туҙыу; боларыу. ■ *Бөтә нәмә пыран-заран килгән.* С. Кулибай.

2) ʻв пух и прахʼ. Аҫты өҫкә килеп юҡҡа сығыу. *Уй-хыялдарыбыҙ пыран-заран килде.*

**ПЫРАН-ЗАРАН КИЛТЕРЕҮ** *ҡ.*

1) ʻразбросать, раскидатьʼ. Аҫтын өҫкә килтереп туҙҙырыу; болартыу. ■ *Айыу инеп, умарталыҡты пыран-заран килтергән.* Әкиәттән.

2) ʻразгромить, разбитьʼ. Туҙҙырып юҡҡа сығарыу; тар-мар итеү. *Атаһы ҡайтып, был гаражды пыран-заран килтергән.*

# Р

**РАҪ-ТУРА** *с.* ʻверный, правильныйʼ. Ысынбарлыҡты теүәл күрһәткән, факттарға, хәҡиҡәткә тура килгән; ысын, хаҡ; дөрөҫ. *Раҫ-тура яуап. Раҫ-тура ҡарар.*

**РИЗЫҠ-НӘФӘҠӘ** *и. йыйн. иҫк.* ʻпродукты, пищаʻ. Ашар аҙыҡ, аҙыҡ-түлек. *Ризыҡ-нәфәҡәһен тейәп килгән.* ■ *Сәмиғулла үҙҙәренә эҫенеп алған ҡунаҡтарын, мөмкин тиклем өҫ-аяҡтарын бөтәйтеп, аҙна-ун көнгә етерлек ризыҡ-нәфәҡәләрен*

*төйнәшеп, изге йәндәргә хәйерле юл теләп, ҡара урмандар аша байтаҡ ара оҙатыша ҡалды.* Ғ. Хөсәйенов.

**РУХ-ЙӘН** *и. йыйн.* 'дух'. Рух һәм йән. ■ *Ни өсөн унан шағир илһамлана, шиғырына мәңгелек рух-йән ала?* Ш. Бабич.

**РӘТ-ЙҮНЕ** *и. йыйн.* 'порядок, лад'. Тейешле тәртип, тәртиплелек. *Эшенең рәте-йүне юҡ инде.*

**РӘТЕ-ЙҮНЕ КИТЕҮ** *ҡ.*

1) 'разладиться.' Билдәле тәртип боҙолоу, юғалыу. *Телефон бәйләнешенең рәте-йүне киткән.*

2) 'ухудшаться (о жизни).' Тормош хәле ауырайыу. *Ашауҙың рәте-йүне китте.*

3) 'подорваться (о здоровье).' Һаулыҡ ҡаҡшау, бирешеү. *Сәләмәтлектең рәте-йүне китте.*

**РӘТ-СИРАТ** *и.* 'порядок, лад'. Тейешле тәртип (юҡлыҡ мәғәнәһендә, бола йәки мәғәнәһеҙ эш-хәлгә ҡарата әйтелә). *Эшенең рәте-сираты юҡ.* Кешенең һүҙе лә ҡылыҡ билдәһе. ■ *Нисек һөйләй, һүҙенең рәте-сираты бармы? Әңгәмәһе ни хаҡында? – Шунда ла кемдең кем икәне тиҙ беленә.* Ғ. Хөсәйенов.

**РӘТ-ӘМӘЛ** *и. йыйн.* 'возможность'. Ниҙер эшләрлек көс-хәл; мөмкинлек. ■ *Бахыр килендең ҡунаҡҡа барырлыҡ та рәт-әмәле булмаған.* Әкиәттән.

**РӘХИМ-ШӘФҠӘТ** *и. йыйн.* 'милосердие, милость'. Яҡшылыҡ, мәрхәмәтлек. *Рәхим-шәфҡәт күрһәтеү.* ■ *Революция булып, тәхетенән ҡолатылмаһа, Чудиновҡа әле лә батшанан рәхим-шәфҡәт көтәһе түгел ине.* В. Исхаҡов

# С

**САБА-ЕЛӘ** *р.* ‘спешно’. Шәп итеп, ҡабаланып. ■ *Башҡорт яугирҙары дошманды тиҙерәк ҡыуып етеп, өҫтәренә ырғыу теләге менән саба-елә килә.* Н. Мусин. *Иң ышаныслы һигеҙ һыбайлыны эйәртеп, төндә лә ал-ял белмәй саба-елә, Мөхтәбәр ауылға ҡайтып төштө.* Ғ. Лоҡманов.

**САЖ-СОЖ** *оҡш.* ‘подражание шипению масла на сковороде, свистящему звуку, визгу, например, при взмахивании кнутом, прутом или при косьбе сена’. Ҡабат-ҡабат саж иткән тауышты белдергән һүҙ. *Саж-сож утын бысыу. Саж да сож бесән сабыу.* ■ *Алһыу сәскәле күлдәгенең еңдәрен терһәгенән дә юғары итеп һыҙғанып ебәргән Зөлфиә саж-сож килтереп мейес алдында белен бешерә.* Ф. Әсәнов.

**САҠЛЫ-СОҠЛО** *р.* ‘немного’. Бик әҙ генә. *Күҙе саҡлы-соҡло ғына күрә.* ■ *Әйтеүҙәре буйынса, ғүмерендә мал-тыуар аҫрамай, иген икмәй, бесән сапмай, йәйен-ҡышын балыҡ тотоп, кейек аулап, Кершәнник баҙарында шуларын һатып, улъя төшмәгән саҡтарында туған йәнле ағай-энеләре хәйеренә таянып, саҡлы-соҡло көн күрә ул һантый Хәлил, тигәйнеләр ҙәһә, ә ниңә һуң көпә-көндөҙ сыраҡ яндыра?* Й. Солтанов.

**САҠ-СОҠ** *р. диал.* ‘еле-еле, чуть-чуть, едва, насилу, с грехом пополам, кое-как’. Көс-хәл менән, көскә; ауырлыҡтар менән. *Өйгә саҡ-соҡ ҡайтып еттек. Саҡ-соҡ эшемде бөттөм. Буранда саҡ-соҡ атлап барҙым.*

**САҠ-СУҠ** *и. миф.* ‘Сак и Сук (мифические образы двух братьев, проклятых матерью или мачехой и принявших

обличье птиц)'. Ике мифик ҡош (әсә ҡарғышынан ҡошҡа әйләнеп, бер-береһен күрергә зар интеккән ике бер туған ир бала). ■ *Урман эсендә ҡоштар һайрайҙыр, ҡош араһында Саҡ-Суҡ илайҙыр.* Бәйеттән. *Бынан Емештең хәтеренә ҡауыша алмай илап ғүмер иткән ике туған хаҡындағы Саҡ-Суҡ әкиәте килеп төшә лә, күҙҙәренә йәш эркелә.* З. Биишева.

**САЛАҒОШ-БАЙЛАР** *и. этн.* 'название родового подразделения башкир-байларцев'. Байлар ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. *Салағош-байлар аймағынан булыу.*

**САЛАҒОШ-ЙӘНӘЙ** *и. этн.* 'название родового подразделения башкир'. *Салағош-йәнәй аймағы вәкиле.*

**САЛА-САЛПЫ** *р. диал. ҡар.* **сала-сарпы II**. *Сала-салпы ғына ишетеп ҡалдым. Сала-салпы ҡолағыма салынып ҡалды.*

**САЛА-САРПЫ I** *с.* 'половинчатый'. Тейешенсә түгел; ярты-йорто, яҙа-йоҙа. *Сала-сарпы мәғлүмәт. Сала-сарпы һүҙ. Сала-сарпы яуап.* ■ *Муйылбикә Гөлйөҙөм менән Айбулаттың яратышыуы тураһында сала-сарпы ишетелгән хәбәрҙәргә бик ныҡ ҡолаҡ һалһа ла, анығын белә алманы.* Һ. Дәүләтшина. *Кеше һүҙе кеше үлтерә, тип, мин сала-сарпы хәбәргә ышанманым.* Ғ. Вәлиев.

**САЛА-САРПЫ II** *р.* 'немного, еле-еле, чуть-чуть'. Тейешенсә түгел; ярты-йорто, яҙа-йоҙа. *Сала-сарпы ғына ишетеү. Сала-сарпы һөйләү.* ■ *Врач заводта булған хәл тураһында судьяға сала-сарпы һөйләп алды.* Ж. Кейекбаев. *Немец телен сала-сарпы аңлай башлағаны бирле, яйы сыҡҡан һайын, Ирназар асыҡ*

*тәҙрәнән яңғыраған радио тауышына ҡолағын ҡарпайта.* Ә. Хәкимов.

**САЛТ-СОЛТ** *оҡш.* ‘подражание звуку резкого удара каким-либо предметом или встряхиванию металлического предмета: хлоп-хлоп, шлёп-шлёп, бац-бац’. Тимер сынйырҙы һ. б. шундай нәмәне һелкетеп ҡаҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Салт-солт бәрелеү. Салт-солт килеү. Салт-солт итеү.* ■ *Мортаза йылғыр хәрәкәттәр менән, хәйләкәр генә йылмайып, ишекте салт-солт иттереп эстән бикләп ҡуйҙы, үрелеп утты һүндерҙе.* Х. Зарипов.

**САЛТЫР-СОЛТОР** *оҡш.* ‘подражание многократным звукам бьющейся посуды или стекла’. Ҡабат-ҡабат салтыр иткән тауышты белдергән һүҙ; сылтыр-сылтыр. *Салтыр-солтор килеп ватылды.*

**САЛЫШ-СОЛОШ I** с. ‘перекошенный, искривлённый, весь кривой’. Төрлө яҡҡа ҡыйыш, ҡыйыш-мыйыш. *Салыш-солош тәҙрәләр. Салыш-солош тештәр.* ■ *Салыш-солош аҙымдары менән генә түгел, көтөлмәгән һәм киҫкен хәрәкәттәре менән дә хайран ҡалдырғайны ул [Йәнтимер] уны.* Р. Мөхәмәҙиев.

**САЛЫШ-СОЛОШ II** *р.* ‘косо, вкось; криво, вкривь’. Төрлө яҡҡа ҡыйыш, ҡыйыш-мыйыш. *Ауыр юл ныҡ интектергән булһа кәрәк, малай салыш-солош атлай.* Ә. Бикчәнтәев.

**САҢҠ-СОҢҠ** *оҡш.* ‘подражание глухому звуку удара о железо: динь-динь’. Яткан тимергә ҡаты нәмә менән һуҡҡанда сыҡҡан тоноҡ тауышты белдергән һүҙ. *Саңҡ-соңҡ килеү. Саңҡ-соңҡ һуғыу.* ■ *Ғәфүрҙәр килеп еткәндә, тимерлектең ишеге,*

*гәҙәттәгесә, асыҡ һәм унан саңҡ-соңҡ итеп сүкештең ниндәйҙер тимергә бәрелгәне ишетелеп тора.* М. Садиҡова.

**САҢ-СОҢ** *оҡш.* ‘подражание звуку многократного удара о железо: динь-динь’. Тимергә өҙлөкһөҙ һуҡҡанда сыҡҡан яңғырауыҡлы тауышты белдергән һүҙ. *Саң-соң .. тимер сыңғырауына, ат дағалаусыларҙан арыраҡ, ҡыуаҡлыҡ төбөнән урғылып килгән ҡорос зыңлауы ҡушыла.* Ә. Ихсан.

**САҢ-ТОМАН** I *и. йыйн.* ‘густая пыль’. Томан кеүек ҡуйы саң. ■ *[Һыуһылыу:] һинең ырыуҙаштарың саң-томан туҙҙырып бында сабып килә.* «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосынан.

**САҢ-ТОМАН** II. *с. күсм. ‘перен.* горячий, шумный’. Пыр туҙышҡан; шау-шыулы. ■ *Ике көндәш араһында саң-томан талаш сығып барғанда, Этҡол бай килеп инде.* Т. Хәйбуллин.

**САҢ-ТУҘАН** *и. йыйн.* ‘густая пыль, пылища’. Ҡаты есемдәрҙең онтаҡ рәүешендәге бик ваҡ өлөшсәләре; туҙан. *Урам саң-туҙаны. Саң-туҙан ҡалҡты. Саң-туҙан баҫылыу. Саң-туҙан туҙҙырыу.* ■ *Саң-туҙан туҙҙырып, үкереп-мөңрәп, урге остан көтөү ҡайта ине.* З. Биишева. *Саң-туҙанға күмелеп, ҡарағa ҡатып килеүсе егеттәрҙең дә, бышҡыра-бышҡыра берсә әкрен генә, берсә шәпләп юртып килгән аттарҙың да маҡсаты бар: Йәнәй! Йәнәй!* К. Мәргән.

**САП-СОП** *оҡш.*

1) ‘подражание звуку многократного удара по воде или обо что-либо мягкое: шлёп-шлёп’. Яҫы нәмә менән йомшағыраҡ икенсе бер нәмәгә ҡабат-ҡабат һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Сап-соп иттереп һуғыу.*

2) ‘подражание звуку чавканья, чмоканья’. Ауыҙ-иренде йомоп асҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Сап-соп итеү. Сап-соп иттереп ашау.*

**САРА-БИСАРА** *р* . ‘невольно, нечаянно, случайно’. Ирекһеҙҙән, көтөлмәгәндә, осраҡлы рәүештә.

**САРҠ-СОРҠ** *оҡш.* ‘подражание резкому пронзительному голосу птиц’. Өҙөк-өҙөк яңғырап сыҡҡан ҡош тауышын белдергән һүҙ. *Сарҡ-сорҡ килеү.*

**САРПЫ-ҺАРПЫ** *и. диал.* ‘разные чурки, щепки’. Ҡый, сүп-сар, тап-топ. *Сарпы-һарпыһын йыйып мейескә яғырға кәрәк.*

**САР-СОР** *оҡш.* ‘подражание визгу’. Ҡабат-ҡабат сар иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сар-сор килеү. Сар-сор ҡысҡырыу.* ■ *Аҡсарлаҡтар сар-сор аҙыҡ аулай, һыу таҙарта шаулап тулҡындар.* Т. Ҡарамышева.

**САРЫЙ-СОРОЙ** *оҡш. диал.* ‘подражание визгу’. Сар-сор (әсе итеп ҡапыл ҡысҡырған тауыш). *Сарый-сорой килеү.* ■ *Йорт эсенә йыйылып өлгөргәндәр ҙә сарый-сорой ҡысҡырыштылар, төрлөһө төрлө яҡҡа һуғылып ҡараны.* Ғ. Ибраһимов. *Алда кемдәрҙеңдер сарый-сорой килгәнен ишетеп, туҡтап ҡалдыҡ.* Н. Мусин.

**САТАЙ-БОТАЙ I** *с.*

1) ‘неровный, некрасивый, неряшливый, небрежный (о почерке)’. Тейешле тәртип, симметрия, пропорция ҡағиҙәләренә тура килмәгән, тәртипһеҙ хәлдә; сатаҡ-ботаҡ. *Сатай-ботай хәрефтәр.*

2) *перен.* ‘беспорядочный, бессистемный’. *күсм.* Рәте, сираты булмаған, нисек етте шулай. *Сатай-ботай тормош башланды.*

**САТАЙ-БОТАЙ II** *р.*

1) ‘неряшливо, небрежно’. Тәртипһеҙ хәлдә; сатаҡ-ботаҡ. *Сатай-ботай яҙып ҡуйҙы.* ■ *[Ҡарабаев:] Сатай-ботай килеп ер тултырып ятмаһын тип, эрерәк ағастарҙы колхозсыларға утынға алып ҡайтып өләштек.* И. Ғиззәтуллин.

2) *перен.* ‘беспорядочно, бессистемно’. *күсм.* Рәте, сираты булмаған, нисек етте шулай. ■ *[Иштуған:] Сәрелдәк тауышын ишетеү менән [бисәкәйҙең], бөтөн француз сатай-ботай ҡасып бөтөр ине.* Ф. Аҡбулатова. *Дәрестәргә әҙерләнмәй йөрөй башланым. Бөтәһе лә сатай-ботай китте.* Ә. Әхмәт-Хужа. *Йәш ғүмеркәйҙәрҙе уҙмай, тиҙәр, сатай-ботай барып уҙа икән.* Халыҡ йырынан.

**САТАҠ-БОТАҠ** *с. ҡар.* **сатай-ботай.**

**САТЛЫ-БОТЛО** *с. ҡар.* **сатай-ботай**. *Сатлы-ботло яҙыу.*

**САТ-СОТ** *оҡш.* ‘подражание многократному звуку чавканья’. Ҡабат-ҡабат ауыҙ шапылдатыуын белдергән һүҙ. *Сат-сот итеү. Сат-сот һағыҙ сәйнәү.* ■ *Берәүҙәр пар күгәрсен кеүек гөрләшеп, икенселәр сат-сот һүрышып йәшәп ята.* Г. Ғиззәтуллина.

**САТЫР-СОТОР** *оҡш.* ‘подражание звуку, издаваемому при треске, хрусте ломающихся сучьев или горящих дров’. Ҡабат-ҡабат сатыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сатыр-сотор итеү. Сатыр-сотор килеү.* ■ *Ваҡ ҡына итеп сәрпәкләнгән*

*солан тактаһы, сатыр-сотор килеп, осҡондарын сәсрәтеп янды.* Т. Килмөхәмәтов.

**СЕБЕН-СЕРӘКӘЙ** *и. йыйн.* ‘мошкара и мошки’. Тешләй, талай торған һәр төрлө ваҡ бөжәк. ■ *Бөгәрсә күбеһенсә һыуҙағы ваҡ ҡына зоопланктон, шулай уҡ һыуға төшкән себен-серәкәй, ләмдәге ҡыҙыл ҡорт-маҙар менән туҡлана.* Ш. Нафиҡов. *Ямғыр, ысынлап та, әҙ яуҙы быйыл. Эттәр, телдәрен арҡыры сәйнәп, көнө буйы күләгәлә ята, күгәүен мыжғый, себен-серәкәй геүләп оса.* Р. Камал.

**СЕЙЛЕ-БЕШЛЕ I** с.

1) ‘недопечённый, недоваренный’. Өлгөрмәгән, тейешенсә бешеп етмәгән, бешер-бешмәҫ. *Сейле-бешле ит.* ■ *Әлегә тиклем [лавкала] гел сейле-бешле арыш икмәген генә һата торғайнылар.* К. Кинйәбулатова.

2) ‘недозрелый’. Өлгөрмәгән; бешеп етмәгән. *Сейле-бешле еләк.* ■ *Ҡайһы берәүҙәр, бигерәк тә атлылар, .. аҙмы-күпме сейле-бешле бесән ташырға өлгөрә.* С. Шәрипов.

3) *перен.* ‘сырой, недоработанный’. *күсм.* Тейешле кимәлгә еткереп эшләнмәгән; булыр-булмаҫ. *Сейле-бешле пьеса.* ■ *Бына шул кеше [Усман] хәҙер өс йыл буйы үҙен үҫендереп, сейле-бешле шиғырҙарын етдигә алып хатлашып ятҡан гәзит редакцияларына һәм нәшриәткә инмәй, ҡәләмдәштәрен күрмәй китә аламы?!* Г. Ғиззәтуллина.

**СЕЙЛЕ-БЕШЛЕ II** *р.* ‘кое-как, как попало’. Тейешле сифатҡа ярашлы түгел. *Сейле-бешле әҙерләү. Сейле-бешле яҙыу. Бөгөнгө пьесалар күбеһе сейле-бешле яҙылған.*

**СЕПРӘК-САПРАҠ** *и. йыйн.*

1) ‘ветошь, барахло, хлам’. Төрлө алама сепрәк. *Сепрәк-сапраҡты сығарып яҡтым.* ■ *Сепрәк-сапраҡ һалынған төйөнсөктө аҫтына һалып, көтөүсе алға ултырҙы, янына һандыҡты урынлаштырҙы, аяҡтарын һәлендереп, ҡатын арбаның артына сүгәләне.* Т. Ғиниәтуллин.

2) *разг.* ‘старая одежда, тряпье’. *һөйл.* Алама-кейем-һалым. ■ *Инһәләр, өй эсе шундай ҡойто, ти, үгеҙ мөгөҙөнә элеп сығырлыҡ сепрәк-сапраҡ заты юҡ, ти.* Әкиәт.

**СЕРЕК-САРЫҠ** *и. йыйн.* ‘гниль, гнилье, гнилушки’. *Баҙҙан серек-сарыҡты сығарҙыҡ.*

**СИКҺЕҘ-ҠЫРЫЙҺЫҘ** *с.* ‘безграничный, бескрайний, бесконечный’. Осо-ҡырыйы булмаған, күренмәгән. *Сикһеҙ-ҡырыйһыҙ дала. Сикһеҙ-ҡырыйһыҙ диңгеҙ. Сикһеҙ-ҡырыйһыҙ хыял. Сикһеҙ-ҡырыйһыҙ ҡара урман.* ■ *Шаулап ятҡан оло даръяны ҙур юғалтыуҙар менән аша сыҡҡан төп сиреү сикһеҙ-ҡырыйһыҙ ҡаҙаҡ далаларына китеп өлгөрә.* И. Ноғоманов.

**СИР-СИРПӘТ** *и. йыйн. диал. ҡар.* **сир-сырхау**. *Сир-сирпәт яфалай.*

**СИР-СОР** *и. йыйн. ҡар.* **сир-сырхау**. ■ *«Зарар юҡ, улым, эсең әшәкенән, сир-сорҙан таҙара».* Ә. Әминев.

**СИР-СЫРХАУ** *и. йыйн.* ‘разные болезни, хворь’. Һәр төрлө сир, ауырыу; сир-сирпәт. ■ *«Сир-сырхау күрмәй, ҡайғы-хәсрәтһеҙ үҫ, ғүмерле бул, балам», – тип Мансур ҡыуанысынан йылмайып, баш ҡағып ҡуйҙы.* Ә. Хәкимов.

**СИТ-ҠЫРЫЙҺЫҘ** *с. диал. ҡар.* **икһеҙ-сикһеҙ**.

**СИХЫР-ЗӘХМӘТ** *и. йыйн.* ‘порча, колдовство’. Һәр төрлө ауырыу. ■ *Мулла уны әш-мәшә килеп сихыр-зәхмәттән өшкөрҙө, доғаларын уҡыны.* «Ағиҙел» журналынан.

**СОҠОРЛО-САҠЫРЛЫ** *с. ҡар.* **соҡор-саҡырлы.** ■ *Юлы таулы, соҡорло-саҡырлы ине.* М. Тажи.

**СОҠОР-САҠЫР** *и. йыйн.* ‘рытвины, ухабы, ямы, овраги’. Эреле-ваҡлы төрлө соҡор. ■ *Юлда соҡор-саҡыр күп, уларҙы урап үтеп бөтөрлөк тә түгел.* Н. Мусин. *Урманды уҙғас, соҡор-саҡыр кәмене, юл һәйбәтләнде, аттар ҙа күңелләнеберәк юрттылар.* Я. Хамматов. *Бына хәҙер алда һәр бер уба, соҡор-саҡырҙарына тиклем таныш булған урындар башлана.* Б. Бикбай.

**СОҠОР-САҠЫРЛЫ** *с.* ‘ухабистый, неровный, изрытый, овражистый’. Күп соҡорло, тигеҙһеҙ. *Соҡор-саҡыр ерҙәр күп.* ■ *Таулы-ташлы ерҙәрҙе, соҡор-саҡырлы урындарҙы үттеләр, ти, былар.* «Урал батыр» эпосынан. *Юл, туңған булыуға ҡарамаҫтан, насар, тар, соҡор-саҡырлы, бер үргә күтәрелә, бер түбән төшә ине.* Б. Дим.

**СӨЙӨР-СИТНАУ** *и. йыйн. диал. ҡар.* **сир-сырхау**. *Сөйөр-ситнауҙан һаҡланыу.*

**СУЛПЫ-ТӘҢКӘ** *и. йыйн.* ‘башкирские женские украшения, подвески из камней и монет’. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының төрлө биҙәүестәре ■ *Ҡаршылағы соланда, сулпы-тәңкәләрҙең сылтырауы ишетелә.* Н. Крашенинников.

**СУРТ-СУРАМАН** *и. һөйл.* ‘всякая всячина, чертовщина, дребедень’. Теләһә ниндәй нәмә. *Сурт-сураман һөйләү.* ■ *Һыуҙың ҡайнап сығыуы булды, итен, майын, ярмаһын,*

*кәбеҫтәһен, һуғаның, картуфын, башҡаса сурт-сураманың бер-бер артлы ҡаҙанға оҙатырға тотондом.* Д. Исламов.

**СҮП-САР I** *и. йыйн.*

1) ‘всякий мусор, сор, хлам’. Теләһә ниндәй сүп. Төрлө ваҡ-төйәк ҡалдыҡ, ташландыҡ нәмә. ■ *[Сәғиҙә] ҡойма буйындағы сүп-сарҙы һеперергә тотондо.* М. Тажи.

2) ‘негодное, бесполезное; чепуха, ерунда’. Теләһә ниндәй файҙаһыҙ ваҡ-төйәк, буш нәмә. ■ *Һөймәйем мин, ниндәй күркәм булһа ла, үҙ шиғырым, сөнки һөймәҫкә хаҡым бар – һәммәһе үҙ сүп-сарым.* Ш. Бабич.

3) *перен.* ‘дрянь; шваль; дрянной (о человеке)’. *күсм.* Насар (хөрт, әшәке) кеше. *Йыйын сүп-сар менән аралашыу.* ■ *Хәтһеҙ сүп-сар әҙәм өҫкә ҡалҡып сыға: Новотроицкиҙа ғына пристав Турин, телеграфист Канцернов, кулактар Ширяев, Плотников, Легостаев, Каменев – уларҙы һанап бөтмәле түгел.* В. Исхаҡов.

**СҮП-САР II** *и. йыйн.* ‘сорняк, сорная трава’. Баҡса, баҫыуҙы баҫып алған төрлө сүп үләне. *Сүп-сар утау.* ■ *Баҫыуҙы алабута, әрем, билсәндән башлап шайтан таяғына тиклем сүп-сар үлән баҫҡайны.* Ғ. Аллаяров. *Тик ер ауыр яра алды: баҫыуҙарҙан азот китте, баҫыуҙы сүп-сар баҫты.* Т. Килмөхәмәтов. ● *Таҙа орлоҡ таҙа иген үҫтерер, насар орлоҡ ҡырға сүп-сар тултырыр.* Әйтем. ■ *Картуф баҡсаһын сүп баҫҡан, баҡсалағы сүп-сарҙы утарға кәрәк.* Ж. Кейекбаев.

**СЫБЫҠ-САБЫҠ** *и. йыйн.*

1) ‘хворост, прутья, прутики; валежник’. Йыйылмай ятҡан ағастар һәм ботаҡтар, ваҡ ағас киҫәктәре; ҡоро-һары. *Сыбыҡ-сабыҡ йыйыу.* ■ *Туҡмас һалыр алдынан усаҡҡа ҡоро сыбыҡ-сабыҡ яғалар.* И. Абдуллин. *Хасбулат олатай, төтөнләккә*

*сыбыҡ-сабыҡ ырғыта-ырғыта, һалмаҡ, уйсан ғына тауыш менән һөйләп китте.* З. Биишева. *Малай кеҫәһенән шырпы алып, кәбән эргәһендә өйөлөп ятҡан сыбыҡ-сабыҡҡа ут төртөп ебәргән.* Әкиәттән.

2) ‘ветки, сучья’. Үҫемлек һабағынан сыҡҡан үҫенте; ботаҡтар. *Сыбыҡ-сабыҡ ботау.* ■ *Ғәлиәхмәт, бит-ҡулдарын сыбыҡ-сабыҡ һыҙырыуына ла иғтибар итмәҫтән, тауыш килгән яҡҡа йүнәлде.* Р. Байымов.

**СЫМ-СЫҠЫР** *и. диал.* **сыр-сыу.** *Сым-сыҡыр килеү.*

**СЫМ-СЫРЫҠ** *с.* ‘тихо, молча’. Шым ғына, шым-шырыҡ. *Сым-сырыҡ ултырыу.*

**СЫП-СЫЙТЫ I** *с. диал.* ‘сырой’. Утта бешерелмәгән йәки һыуҙа ҡайнатылмаған. *Сып-сыйты йомортҡа. Сып-сыйты икмәк.*

**СЫП-СЫЙТЫ II** *р. диал.* ‘недопечённый, непропечённый, недоваренный, сырой’. Бешеп етмәгән, тейешле дәрәжәлә бешереп еткерелмәгән. Сей икмәк. Сей ҡоймаҡ. Сей бутҡа. *Сып-сыйты булыу. Сып-сыйты килеш мейестән алыу.*

**СЫР-СЫУ** *и. йыйн.*

1) ‘гомон, галдёж’. Күмәк шау-шыулы, ығы-зығылы сырылдаған тауыш. *Ҡоштар сыр-сыуы. Сыр-сыу ҡубыу. Сыр-сыу килеү. Сыр-сыу итеү. Сыр-сыу иткән тауышҡа һиҫкәнеп китеү.* ■ *Уны [Емеште] аҡсарлаҡтар сыр-сыуы ҡаршыланы.* З. Биишева.

2) ‘галдеж’. Шаулашҡан ығы-зығылы тауыш. Күмәкләп ҡысҡырышыу; шаулашыу. *Сыр-сыу ҡупты.* ■ [Айбулат] *Ул был сыр-сыуҙың бик һуң булғанын, Ныязғол менән Тимерғәле*

*ҡарттың хәҙер инде никахҡа килеп терәлгән эште кире һүтә алмауҙарын яҡшы төшөнә ине.* Һ. Дәүләтшина.

**СЫР-СЫУ КИЛЕҮ** *ҡ.*

1) ‘гомонить (о птицах)’. Күмәкләп сырылдашыу, сыр-сыр килеп ҡысҡырышыу (ҡош-ҡортҡа ҡарата). *Сыр-сыу килеп осоу. Сыр-сыу килеп ҡысҡырышыу. Сыр-сыу килә башлау.* ■ *Баш осонда аҡсарлаҡтар осалар сыр-сыу килеп.* Ш. Бикҡол.

2) ‘галдеть’. Күмәкләп ҡысҡырышыу; шаулашыу. *Сыр-сыу килеп йөрөү. Сыр-сыу килеп уйнау.* ■ *Өй артына түңәрәкләп йәйгән ике өлкән йәйем мәте ҡатыш ҡомдоң уртаһына ат тиҙәге ташып өйгәс, ҡыҙҙар, килендәр сыр-сыу килеп шаярыша-көлөшә, Ырғыҙҙан көйәнтәләп һыу ташып ҡойҙолар, һалам һалдылар.* Һ. Дәүләтшина. *Сыр-сыу килеп көлөшөп, урамдан бала-саға йүгерешеп уҙһа, Нуранияның ирекһеҙҙән күҙенә йәш төйөлә.* Ә. Хәкимов. *Һуғыш ҡыҙған һайын, Працен ҡалҡыулығы, туҙҙырып ташланған ҡырмыҫҡа иләүендәге шикелле, сыр-сыу ҡайнаны.* Я. Хамматов.

**СЫР-СЫУЛАШЫУ** *ҡ.* ‘галдеть’. Сыр-сыу килеп шаулашыу. ■ *Урамда балалар сыр-сыулашып тау шыуа.* Р. Низамов.

**СЫТЫР-МЫТЫР** *и. йыйн.* ‘хворост, ветки, сучья’. Йыйып өйөлгән ваҡ-төйәк ағас, ағас ботаҡтары. ■ *Сытыр-мытыр яғып, ҡула менән тамаҡтарына бешерәләр.* Ж. Кейекбаев.

**СЫТЫР-САТЫР** *и. йыйн. ҡар.* **сытыр-мытыр.**

**СӘГӘЙ-СӨГӘЙ I** *и. диал.* ‘мелкота, мелюзга’. Әһәмиәте бәләкәй булған, күп һанлы ыбыр-сыбыр кеше йә бала-саға. *Бөтөн сәгәй-сөгәй урамға сыҡҡан.*

**СӘГӘЙ-СӨГӘЙ II** *с. диал.* ‘маленький, малый’. Ваҡ, ыбыр-сыбыр. *Сәгәй-сөгәй кешеләр. Сәгәй-сөгәй бала-саға. Сәгәй-сөгәй ҡыяр тороп ҡалған.*

**СӘҒИТ-ҠЫУАҠАН** *и. этн.* ‘название подразделения башкирского рода Кувакан’. Ҡыуаҡан ырыуы башҡорттары тармағының исеме. *Сәгит-Ҡыуаҡан ырыуы. Сәгит-Ҡыуаҡан ырыуы башҡорттары йылъяҙмаһы. Сәгит-Ҡыуаҡан ырыуы биләмәһе.*

**СӘҒЛӘЙӘН-БИШУЛ** *и. этн.* ‘название одного из родовых подразделений башкир’. Бишул-унғар-табын ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағы исеме. *Сәгләйән-бишул аймагы. Сәгләйән-бишул иләүе. Сәгләйән-бишул араһы тамғалары.*

**СӘЙЕР-СӘЙӘХӘТ** *и. йыйн.* ‘путешествие’. Ил буйлап донъя гиҙеү. *Сәйер-сәйәхәттә йөрөү.*

**СӘЙ-ШӘКӘР** *и. йыйн.* ‘чай и сладости’. Сәй менән шәкәр. *Сәй-шәкәр бөткән.* ■ *Сажидә өләсәһенә һирәкләп сәй-шәкәр, яулыҡ, күлдәклек кеүек әйберҙәр ебәреп торорға ла аҡсаһын арттыра.* Н. Мусин.

**СӘЙ-ШӘКӘРЛЕК** *с. йыйн.* ‘для чая и сладостей’. Сәй менән шәкәр өсөн. *Сәй-шәкәрлек аҡса биреү. Сәй-шәкәрлек аҡса эшләү. Мотаһар ҡул араһына ингәнсе, сәй-шәкәрлек аҡсалары ла булманы.* Д. Бүләков.

**СӘКЕН-СӨКӨН** *и. йыйн.* ‘мелочи, пустяки; всякая ерунда’. Юҡ-бар ваҡ нәмә; ваҡ-төйәк. ■ *[Мәрхәбә:] Анау бер*

*ваҡыт уйнап ҡына һөйләгәнемде сәкен-сөкөнөн дә ҡалдырмай .. кеше ышанырлыҡ итеп яҙып сыҡтығыҙ бит.* М. Тажи.

**СӘЛӘМ-ХАТ** *и. иҫк.* ‘приветственное письмо’. Иҫәнлек-һаулыҡты белдергән, теләгән хат; сәләм хаты. *Сәләм-хат тапшырыу.* ■ *[Тайфур:] Икенсе тосты һуғыш йылдарында беҙҙе сәләм-хаттар менән һөйөндөргән хат ташыусыларҙың һаулығы һәм бәхете өсөн тотайыҡ әле.* Т. Килмөхәмәтов. *Беләм, иркәм, беләм ниңә һинең юҡ икәнен сәләм-хаттарың.* Р. Ғарипов.

**СӘҢГЕМ-СӨҢГӨМ** *с.* ‘тревожный, зловещий’. Ҡолаҡтан ҡолаҡҡа йөрөгән, ғәҙәттә, ниндәйҙер шомло, йәшертен (һүҙ, хәбәргә ҡарата). *Сәңгем-сәңгәм хәбәр. Сәңгем-сөңгөм һүҙ.* ■ *Халыҡ араһында сәңгем-сөңгөм әңгәмәләр күбәйҙе. Ошо айҡанлы ауыл ҡырҡа икегә айырылды.* Т. Хәйбуллин.

**СӘП-СӨП** *оҡш.* ‘подражание звуку шлепка: шлёп’. Ҡабат-ҡабат сәп иткән тауышты белдергән һүҙ. ■ *Эйек тулҡындары бала һымаҡ сәп-сөп һуға текә ярҙарға.* Ғ. Дәүләтов.

**СӘПТЕР-СӨПТӨР** *оҡш.* ‘подражание звуку плещущейся воды’. Нәҙек кенә булып атылып сыҡҡан һыу тауышын йәки һай ғына һыуҙы кисеп барғанда сыҡҡан йомшаҡ тауышты белдергән һүҙ. *Сәптер-сөптөр килеү. Сәптер-сөптөр һыу кисеп йөрөү.*

**СӘР-СОУ** *оҡш.* ‘подражание звуку резкому, пронзительному крику, разговору, плачу’. Әсе итеп нәҙек тауыш менән ҡысҡырғанды, ҡысҡырып һөйләшкәнде, илағанды һ.б. белдергән һүҙ. *Сәр-соу килеү.*

**СӘС-БАШ** *и. йыйн.* ‘волосы и лицо; внешность’. Сәс һәм баш. Кешенең тышҡы күренеше. *Сәс-башыңды туҙҙырып йөрөмә.* ■ *Маһира, көҙгө янына килеп, сәс-баштарын төҙәткеләне лә Әклимә янына килеп ултырҙы.* Х. Ғиләжев. *Эште тамамлағас, ҡыҙҙар Йәнәшкә төшөп, һыу инеп, таҙарынып, сәс-башын тарап, матурланып килә.* Ғ. Хисамов.

**СӘС-ҺАҠАЛ** *и. йыйн.* ‘волосы, усы и борода; растительность (на лице мужчины)’. Сәс һәм һаҡал. ■ *Өлкаман бай сәс-һаҡалын Хажғәленән генә ҡырҙыра.* Ш. Насыров.

**СӘТЕР-СӨТӨР** *оҡш.* ‘подражание звуку трещотки или тараторки’. Нәҙек тауыш менән туҡтауһыҙ һөйләгән тауышты белдергән һүҙ. *Сәтер-сөтөр һөйләү. Сәтер-сөтөр һөйләшәләр.*

## Т

**ТАБАҠТАЙ-АШТАЙ КИЛЕҮ** *ҡ. диал.* ‘получить возмездие’ Үҙ ҡылығыңдың кейәһен күреү. *Уткәндәр өсөн табаҡтай-аштай килеү. Табаҡтай-аштай килә башлау.*

**ТАБАҠ-ҺАУЫТ** *и. йыйн.* ‘разная посуда’. Аш-һыу өсөн тотонған төрлө һауыт; һауыт-һаба. ■ *Шәхми ҡарт шунда уҡ табаҡ-һауыттарҙы йыя һалды.* Т. Йәнәби. *Уңған кеше өсөн табаҡ-һауыт йыйыу бер ни түгел.* Ә. Бикчәнтәев.

▲ **табаҡ-һауыт шалтырау (йәки шалтыратыу)** ‘размолвка, ссора в семье’. Ғаиләлә талаш-тартыш, тауыш сығарыу ■ *Бергә йәшәлгән ғүмер эсендә табаҡ-һауыт та шалтыраманы, шикелле, хатта.* Ғ. Хисамов.

**ТАЖ-ТОЖ** *окш.* ‘подражание резкому низкому горловому звуку, громкому плачу’. Киҫкен түбән тамаҡ тауышын, көслө илауға оҡшаған тауышты белдергән һүҙ. *Таж-тож ниҙер эшләү. Таж-тож итеп ҡалды балалар.*

**ТАЖ-ТӘХЕТ** *и. йыйн.*

1) ‘власть царя, царство’. Батша власы, батшалыҡ. ■ *Таж-тәхеттәр китһен йөҙ түбән.* Ғ. Мәсғүт.

2) ‘трон и корона’. Батша атрибуттары. *Таж-тәхет ҡыҙыҡһындырманы. Таж-тәхет алыу.*

**ТАЗ-ТОЗ** *окш.* ‘звукоподражание пронзительному голосу, истошному крику’. Яман итеп ҡысҡырған әсе тауышты белдергән һүҙ. *Таз-тоз ҡысҡырыу.*

**ТАЙПАН-ТОЙПАН** *окш.* ‘вперевалку, неуклюже’. Ян-яҡҡа сайҡалып, аушанлап атлаған хәрәкәтте белдергән һүҙ. ■ *Тайпан-тойпан килеү. Йомғаҡ, тайпан-тойпан баҫып, кепка артынан йүгерҙе.* З. Биишева.

**ТАЙ-ТУЛАҠ** *и. йыйн.* ‘конский молодняк’. Йәш йылҡы малы. ■ *Һауын бейәләр генә әллә нисәмә өйөр,.. тай-тулаҡ иҫәпһеҙ күп була торғайны.* Н. Мусин. *Ҡыңғырауҙар, көмөш ҡыңғырауҙар ҡыңғырайҙар айлы тынлыҡта. Ярышып шул тай-тулаҡтар менән һандуғастар шаша таллыҡта.* Р. Ғарипов.

**ТАЙШАН-ТОЙШАН** *окш.* ‘вразвалку, переваливаясь’. Ян-яҡҡа аушан-таушан килгән хәрәкәтте белдергән һүҙ. ■ *Бүре, тайшан-тойшан баҫып, тал араһына инеп бара.* С. Кулибай.

**ТАЙЫШ-ТОЙОШ** *р.* ‘вразвалку’. Бер тегеләй, бер былай, ҡыйыш-мыйыш. *Тайыш-тойош баҫыу. Тайыш-тойош баҫыу. Тайыш-тойош бейеү.* ■ *Азамат уйлап та өлгөрмәне, Парайко ... бейек машинанан төштә лә, тайыш-тойош баҫып, был яҡҡа һылтыҡланы.* Р. Солтангәрәев.

**ТАҠАЙ-ТОҠАЙ** *р.* диал. ‘немного’. Саҡ-саҡ ҡына, әҙ-мәҙ. ■ *[Әбей:] Таҡай-тоҡай булһа ла ҡул ҡуя беләм бит мин.* Һ. Дәүләтшина.

**ТАҠ-ТОҠ** *оҡш.* ‘подражание стуку: тук-тук’. Ҡабат-ҡабат туҡылдаған тауышты белдергән һүҙ. ■ *Таҡ-тоҡ утын ҡырҡырмын, ҡырҡып бөткәс килермен.* Әкиәттән.

**ТАҠ-ТУҠ** *оҡш. ҡар.* **таҡ-тоҡ**. ■ *[Хәмиҙә] таҡ-туҡ итеп баҫып, эре аҙымдары менән алға ынтылып барған аттарҙың эләктереп алып китеүҙәренән ҡурҡып, имсәк балаһын ҡосағына ҡыҫты.* М. Ғафури.

**ТАҠЫР-ТОҠОР** *оҡш.* ‘подражание звукам удара о твёрдую поверхность твёрдым предметом’. Ҡаты нәмә ҡаты, ҡытыршы әйбергә тейеп барғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Таҡыр-тоҡор арба үтте.*

**ТАҠЫ-ТОҠО** *р. һөйл.* ‘немного, мало, недостаточно’. Тейешле күләмдән ныҡ кәм; етер-етмәҫ. ■ *Әхмәдиҙең тауҙа эшләткән бесәне байтаҡ ине, ләкин бесән ишле малға таҡы-тоҡо булып ҡына ҡалды.* Ж. Кейекбаев. *Минең белем яғы ла таҡы-тоҡо.* Т. Килмөхәмәтов.

**ТАЛАШ-ТАРТЫШ** *и. йыйн.* ‘скандал, ссора, ругань’. Үҙ-ара әрләшкән, дәғүәләшкән ғауға; ыҙғыш. ■ *Талаш-*

*тартышты бөтөрөп, тыныс ҡына торорға тырышайыҡ.* Һ. Дәүләтшина. *Ғаиләлә талаш-тартыш, илаш-ҡысҡырыш күреп өйрәнмәгән Байгилде ағай ни әйтергә, нимә эшләргә белмәй аптырап ҡалды.* З. Биишева.

**ТАЛ-ТИРӘК** *и. йыйн.* ʻивы и тополя, тальникʼ. Тал һәм тирәк ағастары. ■ *Һандуғаскай һайрай тал-тирәктә, бер йырламай нисек түҙергә.* Халыҡ йырынан.

**ТАМ-ТОМ** *с. һөйл.* ʻнебольшой (о слове, о речи)ʼ. Әҙмәҙ *(һүҙ-хәбәргә ҡарата).* Там-том телмәр. ■ *Әле там-том булһа ла, халыҡ эсендә һүҙҙәр бар.* Т. Хәйбуллин.

**ТАМЫР-ТОМОР** *и. йыйн.* ʻкореньяʼ. Төрлө үҫемлектәр тамыры. *Тамыр-томор йыйып ягыу.* ■ *Иҫке үҙәндәрҙе, баҡасай, ылымыҡ алған күләүектәрҙе буръяҡ һыу баҫҡан, тал аралары ағып килгән таҡта, тамыр-томор менән тулған.* З. Ураҡсин.

**ТАНА-ТОРПО** *и. йыйн.* ʻмолодняк крупного рогатого скота: тёлки и бычкиʼ. Йәш һыйыр малдары. ■ *Дала күкрәгендә ирәүән йөрөп өйрәнгән ваҡ мал, иҫһеҙ тана-торпо, хатта зирәк йылҡы абайһыҙҙан ара-тирә ошо соҡорҙарға ҡолай.* Ә. Хәкимов.

**ТАНА-ТЫУСА** *и. йыйн. ҡар.* **тана-торпо**. Йәш һыйыр малдары. *Тана-тыуса көтөүҙән ҡайта.*

**ТАНЫШ-БЕЛЕШ** *и. йыйн.* ʻзнакомыеʼ. Күргән-белгән кешеләр; таныштар. ■ *[Зөләйха:] Унда артыҡ кеше юҡ, таныш-белеш кенә.* Т. Йәнәби. *Ул [Ғәлиәхмәт] байҙың урман төпкөлдәренә, йыраҡ таныш-белештәренә таратылған малдарын, күмелеп ҡуйылған әллә күпме игендәрен, башҡа байлыҡтарын эҙләп тапты.* Р. Байымов.

**ТАНЫШ-БЕЛЕШЛЕК** *и.* ‘знакомство, близкие отношения’. Үҙ-ара таныш булыуға бәйле мөнәсәбәт, таныш булған хәл. *Таныш-белешлек булдырыу. Таныш-белешлектең файҙаһын күреү.* ■ *[Ҡайһы берәүҙәр] бөтәһен дә таныш-белешлек, алыш-биреш менән алып бара.* Н. Мусин.

**ТАНЫШ-ТОНОШ** *и. йыйн. һөйл.* ‘знакомые’. Таныш булған төрлө кеше; таныш-белеш. ■ *Бәләкәй генә ҡалала, ятаҡ тормошона аҙмы-күпме күнеккәс, занятиеларҙан һуң курста шөғөлләнеүселәр таныш-тоноштарына, туған-тыумасаларына, үҙҙәренә оҡшаған ерҙәргә йөрөштөрә башланы.* С. Шәрипов.

**ТАҢҒЫР-ТОҢҒОР** *оҡш.* ‘подражание стуку, грохоту, возникающему при ударе большого полого предмета о твёрдую поверхность’. Ҡаты юлдан буш арба барғанда, эсе ҡыуыш ҙур нәмә ҡатыға бәрелгәндә һ. б. ваҡытта сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ; даңғыр-доңғор. *Таңғыр-тоңғор килеү. Таңғыр-тоңғор ат арбаһы үтеп китте.*

**ТАҢ-ҒӘЖӘПКӘ ҠАЛЫУ** *ҡ.* ‘быть в удивлении, удивляться, изумляться’. Бик ныҡ аптырау. ■ *[Байғужа:] Шуны аңламай, таң-ғәжәпкә ҡалып ултырам әле.* Д. Юлтый.

**ТАҢ-ИРТӘ** *и.* ‘рассвет, раннее утро’. Иртә таң, таң ваҡыты. ■ *Хисбулла, ямғыр серетеп бөтөп барған ҡарабойҙайҙы әүенгә һалып, елләтеп булмаҫмы тип, таң-иртәнән тороп баҫыуға китте.* З. Биишева. *Ял көнөнөң таң-иртәһе, ҡарҙай ап-аҡ шау сәскәле алма баҡсаларының өҫтөндә аҡ бурандар уйнатып, һыҙғыр елле булып килде.* Й. Солтанов.

**ТАПҠАН-ТАЯНҒАН** *и. йыйн.* ‘все приобретенное, заработанное, нажитое, имущества’. Эшләп тапҡан, йүнләгән бөтә мал-мөлкәт. *Тапҡан-таянғанды бөтөрөп тороу.* ■ *[Ҡарт – Шүлгәнгә:] Тапҡан-таянған бары һис айырым булмаҫҡа; көслөнөкө — байман, тип, еҫерҙе сит күрмәҫкә ... тигән илдең анты бар.* «Урал батыр» эпосынан. *Хатта бер айлыҡ юҡ миндә байлыҡ. Тапҡан-таянған – Халыҡтан алған.* Х. Назар.

**ТАП-ТОП I** *и. йыйн.* ‘щепки и стружки’. Ағастан юйылып төшкән төрлө киҫәк, төрлө тап. ■ *Илгизәр, бар, улым, утынлыҡтан тап-топ йыйып килтер. Самауырҙы шыжлатып ебәрәйек.* Ш. Биҡҡол.

**ТАП-ТОП II** *оҡш.* ‘подражание звуку тяжёлых шагов: топ-топ’. Ҡабат-ҡабат тап иткән тауышты белдергән һүҙ. *Тап-топ килеү. Тап-топ иткән тауыш* ишетелде.

**ТАПТЫР-ТОПТОР** *оҡш. ҡар.* **тапыр-топор**. ■ *Ҡолаҡ төбөндә иләмһеҙ яңғыраған һөрәндән, йәнә таптыр-топтор иткән ат тояғы тауышынан Мәҙинә саҡ һуштан яҙманы.* Т. Ғарипова.

**ТАПЫР-ТОПОР** *оҡш.* ‘подражание топоту лошадей или людей’. Күмәк кеше йәки мал аяғының тауышын белдергән һүҙ. *Тапыр-топор сабыу.* ■ *Алтын башаҡ игенде ырҙындарҙа баҫырбыҙ, тапыр-топор юрттырып, аҙбарҙарға ташырбыҙ.* Ғ. Амантай.

**ТАРБАЙ-ТОРБАЙ** *с. һөйл. ҡар.* **тарбаҡ-торбаҡ.**

**ТАРБАҠ-ТОРБАҠ** *с. һөйл.* ‘растопыренный’. Ныҡ тарбаҡлы булған. *Тарбаҡ-торбаҡ ағас.*

**ТАРБАН-ТОРБАН** *оҡш.* ʻраскорякойʼ. Аяҡ-ҡулдар менән тәртипһеҙ, сатай-ботай хәрәкәттәр яһағанды белдерә. *Тарбан-торбан атлау.* ■ *Бына айғыр йән-фарман ялан буйлап саба, ҡороҡто ҡулына ураған Шоңҡар тарбан-торбан килеп һөйрәлеп бара.* Н. Мусин.

**ТАР-МАР БУЛЫУ (йәки тар-мар ителеү)** *ҡ.* ʻбыть разгромленнымʼ. Ҡыйралыу, емерелеү, юҡҡа сығыу. *Тар-мар булып ҡуйыу. Тар-мар булған ғәскәр.* ■ *Торатау янындағы туғайға яһаған ябырылыуында Килмәктең сиреүе тар-мар ителгәс, Румянцев, бөтә көсөн уның урдуғаһына табан йүнәлтеп, яу башлыҡтарын ҡамап алырға тырышҡан.* Ғ. Ибраһимов.

**ТАР-МАР ИТЕҮ** *ҡ.* ʻразгромить, разрушить, уничтожить.ʼ Ҡыйратыу, емереү, юҡ итеү. *Тар-мар итеп бөтөү. Тар-мар итеп ҡуйыу. Дошманды тар-мар итеү.* ■ *Дошман оборонаһын өҙөп, нығытмаларҙы тар-мар итеп, танкылар алға уҙҙы.* Ғ. Аллаяров. *Яуҙы тар-мар иткәс, бер нисә көн буйына байрам иткәндәр.* К. Дияров.

**ТАРҪ-ТОРҪ** *оҡш. һөйл.* ʻподражание звуку отдаленного грохота или сильному биению сердцаʼ. Ҡабат-ҡабат тарҫ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Тарҫ-торҫ итеп ҡалды. Йөрәк тарҫ-торҫ тибә.*

**ТАРТЫП-ЙОЛҠОП** *р.*

1) ʻвыдергиваяʼ. Теләһә нисек тартҡылап; өҙә-йолҡа. *Тартып-йолҡоп сәс тарау.*

2) *перен.* ʻс трудом, еле-елеʼ. *күсм.* Көскә генә, теләр-теләмәҫ, ауырлыҡ менән. *Тартып-йолҡоп аҡса йыйҙы.* ■ *Гәп тегенән-бынан, тартып-йолҡоп ҡына барҙы.* И. Абдуллин.

**ТАРТЫП-ҺУҘЫП** *р.*

1) ʻвытягивая, растягивая (напр. что-либо узкое)ʼ Теләһә нисек һуҙғылау, тарткылау. *Күлдәкте тартып-һуҙып кейеү.* ■ *Йөндәрҙе тартып-һуҙып тетә-тетә, Емештең кескәй, нәҙек бармаҡтары талып, һыҙлап бөттө.* З. Биишева.

2) *разг. перен.* ʻрастягивая, с натяжкойʼ. *һөйл.* Әҙ нәмәне көс-хәл менән оҙаҡҡа һуҙыу. ■ *Улар [Камаловтар] бик самалы йәшәнеләр, аҡсаны тартып-һуҙып ҡына еткерҙеләр, әммә, теге йәки был нәмә етешмәй, тип өйҙә ҡәнәғәтһеҙләнеү, һуҡраныу, етәкселәргә, власҡа тел тейҙереү булманы.* И. Абдуллин.

3) *перен.* ʻс натяжкойʼ. Этеп-төртөп, көс-хәл менән. *Тартып-һуҙып бишле ҡуйҙы.*

**ТАСМА-ТАС** *р.* ʻна кулаках;ʼ. Ҡара-ҡаршы килеп, йоҙроҡ менән бәрешеп. *Тасма-тас һуғышыу.* ■ *Бер мәлде, цехта эшләгәндә, Йәмил һөмһөҙ Едрёнкин менән тасма-тас бәрелешер ваҡыт еткәнен үҙе лә һиҙмәй ҡалды.* Р. Байбулатов.

**ТАС-ТАРАФ ИТЕҮ** *ҡ. диал.* ʻразбазариватьʼ. Әрәм-шәрәм итеү. *Аҡсаны тас-тараф итеү.*

**ТАС-ТОС** *оҡш.* ʻподражание многократному звуку шлёпанья, удара по чему-либо мокрому: шлёп-шлёпʼ. Ҡабат-ҡабат тас иткән тауышты белдергән һүҙ. ■ *Үҫмерҙәр, карауаттарҙы урындарынан дөбөр-шатыр шылдыра-шылдыра, тас-тос төртөшөп китте.* Р. Байбулатов. «*Тап-топ, топ-тап, тас-тос!*» *тип тамсылар, һәр ҡайһыһы үҙенә хас тауыш сығарып, ерҙе сәләмләй.* З. Биишева.

**ТАСЫР-ТОСОР** *оҡш. диал. ҡар.* **даһыр-доһор**. *Тасыр-тосор итеү. Тасыр-тосор иткән тауыш ишетелә.*

**ТАУ-ТАШ** *и. йыйн.* ‘каменистая местность, горы; камни и глыбы’. Тау һәм таштар; таулы, ташлы урын. ■ *Һыу ярып, тау-таш тетрәтеп, Һәүбән донъяға сыҡҡан.* «Аҡбуҙат» эпосынан. *Юлымда бар тау-таш, боролмалар, күк күкрәүе, йәшен йәшнәүе.* Р. Ғарипов.

**ТАУ-ТАШЛЫ** *с.* ‘гористый’. Таулы, ташлы урын. *Ауыл тау-ташлы ерҙә урынлашҡан.*

**ТАУЫШ-ҒАУҒА** *и. йыйн.* ‘крик, шум, гам’. Тәртипһеҙ күмәк ҡысҡырыш; шау-шыу. *Тауыш-ғауға ҡуптарып йөрөмәгеҙ!*

**ТАУЫШ-ТЫН** *и. йыйн.* ‘голоса, звуки’. Уяулыҡ, терелек билдәһе; тауыш һәм тын. ■ *Тауыш-тын сығармай, хужа әфәнде йоҡоға талды.* Ф. Исәнғолов.

**ТАУЫШ-ТЫНҺЫҘ I** *с.* ‘беззвучный’. Тауыш-тын сығармаҫ; шым. *Тауыш-тынһыҙ кеше.*

**ТАУЫШ-ТЫНҺЫҘ II** *р.* ‘бесшумно, тихо.’ *Тауыш-тынһыҙ бара. Тауыш-тынһыҙ ултырыу.* ■ *Гөлгөнә, һәр ваҡыттағыса, иренең күҙҙәренә тултырып ҡарап, тауыш-тынһыҙ йылмайҙы ғына.* Ш. Янбаев. *Вәли нимәлер әйтергә теләне, ирендәрен тауыш-тынһыҙ ғына ҡыбырлатты, һуңынан Ғарифҡа асыу менән генә ҡараны ла кире әйләнде.* Ғ. Хәйри.

**ТАҺЫР-ТОҺОР** *оҡш.* ‘подражание грохоту, громыханию’. Бәрелгәндән, һуғылғандан, шәп тибеүҙән (йөрәккә ҡарата) килеп сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Таһыр-тоһор итеү.* ■ *Атыш тауышына таһыр-тоһор килеп сыҡҡан милиционерға өйҙө һаҡларға ҡушып, ул [Төбәй] ҡасып*

*ҡотолған бандиттың эҙенән тороп йүгерҙе.* Ә. Хәкимов. *Шатлыҡтандыр, йөрәк таһыр-тоһор тибә.* К. Кинйәбулатова.

**ТЕГЕ-БЫЛ** *йыйн. а.* ʻвсякий, разныйʼ. Теге һәм был; һәр төрлө. *Теге-был хәбәр.* ■ *[Әминә әбей:] Әҙерләгән кәфенлектәремде, хәйерлектәремде алам, әммә, теге-был хәл булһа, мине атайың эргәһенә алып ҡайтып ҡуй.* Н. Мусин.

**ТЕГЕЛӘЙ-БЫЛАЙ** *р.*

1) ʻтуда-сюдаʼ. Тегеләй ҙә былай, төрлө яҡҡа. *Тегеләй-былай йөрөү.* ■ *Бибекәй әбей Емештең галстугын тегеләй-былай әйләндереп, һыйпап-һыйпап ҡараны.* З. Биишева. *Егет йәһәт кенә эйелеп һауытты ҡулына алды, тегеләй-былай өйөрөлттө.* Ф. Аҡбулатова. *Бына Һолтанбай тегеләй-былай эткеләп серек түңгәкте ҡумшытты ла йығып ебәрҙе.* Н. Мусин. *Ҡуҙыйкүрпәс тегеләй-былай ҡараһа ла, бер нәмә белерлек түгел ине.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосынан.

2) ʻкое-как, как-нибудьʼ. Көс-хәл менән, арлы-бирле. *Тегеләй-былай эшләү. Тегеләй-былай ғына өйөп ҡуйыу.*

**ТЕГЕНДӘ-БЫНДА** *р.*

1) ʻтуда-сюдаʼ. Төрлө ергә. *Тегендә-бында барыу.* ■ *Сөнәгәттең тегендә-бында сабыуға һәләтлеге, егәрлелеге һәм сослого мастерға бик оҡшай ине.* Ж. Кейекбаев. *Ҡыҫҡаһы, Хулхаштың бурысы – тегендә-бында сабып низағтарға тығылыу түгел, ә ошонда тарихты мәңгеләштереү.* Б. Рафиҡов. *Был етен кеүек һары бөҙрә сәсле, һипкелле йөҙлө, теремек егет Ташлыла тыуып үҫкән, Алтынбай кеүек тегендә-бында күсеп йөрөмәй, йыл уртаһына урман ҡырҡа ла ағас сығара, күмер үртәй ҙә дегет ҡайната, уларҙан бушағанда мал ҡарай.* З. Ураҡсин.

2) ʻтам и сямʼ. Төрлө ерҙә. ■ *Тегендә-бында кәкүк сәскәләре күҙгә ташлана.* Н. Мусин. *Тегендә-бында сережлдәшкән*

*ҡарабаш тургайҙар менән ара-тирә ҡыштырлашҡан алтын япраҡтар ғына ысын донъяны хәтерләтә.* Р. Ғабдрахманов.

**ТЕГЕНДӘЙ-БЫНДАЙ** *с.* ‘всякий, разный’. Һәр төрлө. *Кинйәнең тегендәй-быннай һүҙҙәрҙән, үҙенә янауҙарҙан ҡурҡа торған түгеллеген белгән Ғәбдессәләм уның кисәле-бөгөнлө тыуған үҙ уйынан кире ҡайтмаҫын да аңланы.* Ғ. Ибраһимов. *[Франгиза] хәкикәт өсөн судлашырға ла күп һорамай, тегендәй-быннай түрәләр алдында ла баш эйеп йөрөй торған заттан түгел.* К. Фазлый.

**ТЕГЕНӘН-БЫНАН** *р.* ‘отовсюду’. Төрлө ерҙән. ■ *[Әхмәҙулла мулланың] тегенән-бынан өҙөп-йолҡоп һаман байырға, күп тә, яҡшы ла ашап көрәйергә тырышып ятҡан көнө бит.* З. Биишева. *Тегенән-бынан йыйған хәрбиҙәр араһында әле мыйыҡ та сыҡмаған ун һигеҙ йәшлек елкенсәктәр ҙә, нужа ҡалъяһын арыу ғына йотоп, биш-алты, хатта ете-һигеҙ бала үҫтереп, картлыҡ ҡапҡаһына ҡул һуҙыусы илле йәшлек йонсоу ағайҙар ҙа бар ине.* С. Поварисов. *Тегенән-бынан тапҡан аҡсаға аслы-туҡлы көн иткән Гөлзәйнәп-Зина ҡыҙ бала тыуҙыра.* М. Хужин.

**ТЕЛ-АУЫҘ** *и. диал. йыйн.*

1) ‘голоса, звуки’. Тауыш-тын. *Тел-ауыҙ ишетелмәй. Тел-ауыҙ сығармау.*

2) ‘сплетни, пересуды, толки’. Төрлө һүҙ, ғәйбәт; ләстит. ■ *Игеҙәктәр, кеше тел-ауыҙына кергеләгәнсе, донъянан киткәне хәйерле инде, әлбиттә.* Т. Ғарипова.

**ТЕЛЛЕ-ТЕШЛЕ** *с. диал.* ‘бойкий на язык’. Үткер, батыр һүҙле. *Телле-тешле кеше.* ■ *Телле-тешле ярлыларҙы Андрей*

*Иванович үҙ өйөнә саҡырып, үҙ теле менән аңлатып та сығарған.* Р. Өмөтбаев.

**ТЕЛ-ТЕШ** *и. йыйн.* ‘язык и зубы, сплетни’. Төрлө һүҙ, ғәйбәт. ■ *Көтөр, Үҫәргән ырыуын ташлап, Ҡатай ырыуына күсә. Көтөр бында, тел-тешкә эләкмәй, боронғо данын юймай.* Хикәйәттән.

**ТЕЛ-ТЕШ БАҪЫУ** *ҡ. миф.* ‘заболеть от наговоров, пересудов и сплетен.’ Ышаныу буйынса, кеше һүҙенең зәхмәте тейеү. ■ *[Имсе:] Һиңә ен ҡағылған, һине күрә алмайҙар икән. Тел-теш баҫҡан, яҫтығыңа сихыр кергән.* «Башҡортостан ҡыҙы».

**ТЕЛ-ТЕШ ИМЛӘҮ** *и. миф.* ‘магический способ избавления от болезней, возникших от наговоров, пересудов и сплетен, *досл.* заговаривание от языка и зуба’. Кеше һүҙенең зәхмәте тейеүҙән йә тел-теш баҫыуҙан ҡотолдороу ысулы. *Ауылыбыҙҙа тел-теш имләү үткәреү юҡ.*

**ТЕЛ-ТЕШ КИҪЕҮ** *и. миф. ҡар.* **тел-теш имләү**. ■ *Берәүҙең малы үлә ине. Тел-теш киҫеү үткәргәс, малы уңып китте.* «Башҡорт мифологияһы» нан.

**ТЕЛ-ТЕШ ҠАЙТАРЫУ** *и. миф. ҡар.* **тел-теш имләү.** ■ *Тел-теш ҡайтарыу үткәргәндә, тел-теште, ҡарғышты эйәһенә ҡайтарып имләйҙәр.* «Башҡорт мифологияһы»нан.

**ТЕЛ-ТЕШ ҠЫРҠЫУ** *и. миф. ҡар.* **тел-теш имләү**. ■ *Тел-теш ҡырҡыуҙы башҡарып ҡына тел-тештән ҡотолоп була.* Экспедиция материалдарынан.

**ТЕЛ-ТЕШЛЕ** *с.* ‘бойкий на язык’. Үткер, батыр һүҙле. *Тел-тешле йәштәр.* ■ [*Ныязгол:] Айбулат кеүек тел-тешлеләре һуғышҡа ҡыуылһа, ҡалғандары уның ҡалай итһәң дә күнерҙәр.* Һ. Дәүләтшина.

**ТЕЛ-ТЕШ СИРЕ** *и. миф.* ‘болезнь от наговоров, пересудов и сплетен.’ Ҡарғыш, ғәйбәттәрҙән килгән ауырыу. ■ *Төрлө ғәйбәт һөйләһәләр, ҡарғаһалар, кеше иҫнәп ауырый, шуны тел-теш сире, тиҙәр.* «Башҡорт мифологияһы»нан.

**ТЕЛ-ТЕШ ТАШЛАУ** *и. миф. ҡар.* **тел-теш имләү**. ■ *Тел-теш баҫһа, ауырыуҙың үксәһенә тиклем еп үлсәп, шуны башына ҡырҡҡылап ташлайҙар. Шул имде тел-теш ташлау, тиҙәр.* Башҡорттарҙың им-том китабынан.

**ТЕЛ-ТЕШ ТӨЙӨҮ** *и. миф. ҡар.* **тел-теш имләү**. *Тел-теш төйөү үткәреү.* ■ *Тел-теш баҫһа, ҡырҡ төйөн төйнәп, ҡайсы менән ҡырҡ тапҡыр киҫкәндәр. Шул имде тел-теш төйөү, тиҙәр.* «Башҡорттарҙың им-том китабы»нан.

**ТЕЛ-ТЕШҺЕҘ** *с.* ‘безропотный, покорный’. Һүҙгә йыуаш; яуапһыҙ. *Тел-тешһеҙ кеше.*

**ТЕЛ-ТЕШ ӘПСЕНЕ** *и. миф.* ‘заговор от наговоров, пересудов и сплетен.’ Тел-теш баҫыуын туҡтатыу өсөн әйтелә торған әпсен. *Тел-теш әпсене әйтеү. Тел-теш әпсене белгән әбей.* ■ *Тел-теш баҫһа, тел-теш әпсене әйтер булғандар.* «Башҡорт мифологияһы» нан.

**ТЕЛӘК-ӨМӨТ** *и. йыйн.* ‘желание, стремление’. Өмөтләнеп теләгән һәм тормошҡа ашырына ышанған хыял. *Теләк-өмөттәр ҡабул булһын. Теләк-өмөттәр уртаҡ булһын. Һәр*

*кешене лә яҡты теләк-өмөттәре ҡанатландыра.* ■ *[Бондаренко:] Торсонбаев менән аңлаша торғайнылар, инде уйлап ҡараһа, дуҫын бик аҙ белгән икән, теләк-өмөттәренә, йөрәк серҙәренә төшөнөп етмәгән.* А. Мағазов. *[Бәҙерғол:] Балалай алдатылып, теләк-өмөттәр селпәрәмә килтерелде.* Ғ. Хөсәйенов.

**ТЕЛӘК-ТӘҠДИМ** *и. йыйн.* 'желание, пожелание'. Нимәнеңдер булыуын, эшләнеүен күңелгә ярашлы, кәрәк һанап әйткән һүҙ. Теләк-тәҡдим белдереү. Халыҡтың теләк-тәҡдимен еткереү. ■ *Алтын-көмөшкә ҡоролған был тормошта ҡала советы депутатының изге теләк-тәкдимдәре, фәлсәфәүи рәүештә инҡар ителмәһәләр ҙә, тормошсан нигеҙләнеү тапмайҙар.* Р. Вәлиев.

**ТЕЛӘК-ХЫЯЛ** *и. йыйн.* 'мечты и желания'. Күңел ынтылышы; уй-хыял. *Тормошҡа ашмаҫтай теләк-хыялдар. Теләк-хыялдар менән йәшәү.* ■ *Үҫкән һайын аңы асыла, теләк-хыялдары арта кешенең.* Ә. Хәкимов. [*Һандуғастың һеңлеһе:] Бойомға ашмаған теләк-хыялдарым шул килеш ҡала.* Т. Ғарипова.

**ТЕЛӘК-ЫНТЫЛЫШ** *и. йыйн. ҡар.* **теләк-хыял**. ■ *Әлфиә әхирәтенең күрһәнөүен дә ниндәйҙер тормошҡа ашмаған хыялмы, бер кемгә лә әйтергә ярамаған теләк-ынтылышмы һиҙҙе.* И. Абдуллин. *Уларҙа [публицистик яҙмаларҙа] шул осор башҡорт йәмғиәте өсөн мөһим булған социаль-иҡтисади һәм тарихи характерҙағы проблемалар күтәрелә, халыҡтың уй-ҡараштары, теләк-ынтылыштары сағылыш таба.* Ғ. Ҡунафин.

**ТЕЛӘР-ТЕЛӘМӘҪ** *р.* 'нехотя, неохотно, скрепя сердце'. Ул тиклем, бигүк теләмәйенсә. *Теләр-теләмәҫ кенә һөйләү. Теләр-теләмәҫ ҡайтып китеү.* ■ *Хәмзә, урынынан теләр-*

*теләмәҫ кенә тороп, эленеп торған карталар янына йүнәлде.* Р. Байбулатов. *Сәғиҙәнең тартынып, теләр-теләмәҫ кенә яуап ҡайтарыуын күргәс, Гөлнур һүҙҙе икенсегә борҙо.* М. Тажи.

**ТЕШЕ-ТЫРНАҒЫ МЕНӘН** *р.* ʻизо всех силʼ. Бар көскә. *Теше-тырнағы менән йәбешеү.* ■ *Дөрөҫ, Шомбаев теше-тырнағы менән ҡаршы төшәсәк һәм ҡаршы әйткәндә лә йөҙөндәге дежурный йылмайыуы бөтмәйәсәк.* И. Абдуллин. *Хәҙер ул [Тариф] Ҡыҙыраҫҡа теше-тырнағы менән ярарға ғына тырыша.* З. Биишева.

**ТИКТӘН-ТИК** *р.*

1) ʻдаром, бесплатноʼ. Буштан-бушҡа, тиккә. *Тиктән-тик аҡса түҙҙыра. Тиктән-тиккә эшләп йөрөй.*

2) ʻпонапрасну, попусту, зряʼ. Буштан-бушҡа, тиккә. *Тиктән-тик йөрөү. Тиктән-тик ваҡыт уҙғара. Был йөрөү тиктән-тиккә булды.*

**ТИҘ-ТИЛӘ** *р. диал.* ʻбыстроʼ. Тиҙ генә, йәһәт кенә. ■ *Ҡайта алмам бик тиҙ-тилә.* Й. Солтанов.

**ТИМЕР-ТОМОР** *и. йыйн.* ʻжелезки, железные предметыʼ. Һәр төрлө тимер. Тимерҙәр. ■ *Ғариф ағайҙың тимер-томор тултырған йәшниге бар… Кәрәк сағында шунан күп нәмә табып ала.* Б. Бикбай.

**ТИН-ТОМ** *и. йыйн.* ʻровесники, ровняʼ. Тиңдәш егет һәм ҡыҙҙар.

**ТИНМӘ-ТИН** *р.* ʻдо копейкиʼ. Һәр тиненә тиклем. ■ *Бурысты тинмә-тин биреү. [Ахун – Дәүләткирәйгә:] Баяғы беҙгә вәғәҙә иткән аҡсаңды, тинмә-тин беҙгә биреүең тураһында*

*үҙеңдең ҡулың менән яҙылған дөкәминтте беҙгә алдан биреп ҡуйыуҙы мәхкүл хисаплайым.* Р. Өмөтбаев.

**ТИҢ-ТОШ** *и. йыйн.*

1) ‘сверстники, ровесники’. Бер йәштәге кешеләр, йәштәштәр. *Тиң-тош йыйылды. Тиң-тошто ҡунаҡҡа саҡырыу. Тиң-тош менән кәңәшләшеү.* ■ *Беҙ һуңғы йылдарҙа булып үткән хәл-ваҡиғалар, тиң-тоштар тураһында оҙаҡ гәпләшеп ултырҙыҡ.* С. Кулибай. *Сәмиғулла тиң-тошо менән уйнап, һыу инеп, балыҡ ҡармаҡлап тик йөрөй.* З. Биишева.

2) ‘ровня, чета’. Бер дәрәжәләге яҡын кешеләр; дуҫ-иш. ■ *Көрәгәләр алып, ҡымыҙ эсеп, тиң-тоң менән йәшәр көн бармы икән?* Халыҡ йырынан.

**ТИП-ТИПЕКӘЙ** *р. диал.* ‘напрасно, не к месту’. Һис бер файҙаһыҙға, юҡҡа, урынһыҙға. *Тип-типекәй барыу. Тип-типекәй эшләү. Тип-типекәй һөйләнеү.*

**ТИПӘ-ТИҢ I** *с.* ‘одинаковый, совершенно равный *(по росту, длине, по статусу и др.)*’. Бер тиң, тигеҙ булған. ■ *Янымда торған, үҙем менән буйға типә-тиң Зәлифәгә юғарынан түбәнгә ҡарарға тырыштым.* З. Биишева. *Йөҙшишмә ауылы Аҡнөгөш үҙәнендә урынлашҡанға күрә, уның оҙон өс урамы ла бер-береһе менән бер тигеҙлек тә, оҙонлоҡтары ла типә-тиң.* Д. Бүләков.

**ТИПӘ-ТИҢ II** *р.* ‘одинаково, наравне’. Бер тиң, тип-тигеҙ. *Ҡояш менән типә-тиң. Егерме икенсе мартта көн менән төн типә-тиң була.* ■ *Ҡарт, күҙлеген сисеп, урындыҡ менән типә-тиң тәҙрә төбөнә һалды.* Т. Ғарипова. *Аҡыл менән йөрәк типә-тиң икән.* Ғ. Хөсәйенов.

**ТИРЕҪ-МИРЕҪ** *с. диал.* ʻупрямый, своенравныйʼ. Ыңғайлы булмаған, ҡаршы килеүсән; кире. *Тиреҫ-миреҫ малай.*

**ТИРЕ-ЯРЫ** *и. йыйн.* ʻразные шкуры, кожевенное сырьёʼ. Һәр төрлө тире. ■ *Былар [Ғәлиҙәр] туҡтаған ерҙә ит, май, тире-яры кеүек нәмә һатырға килгән ауыл кешеләренең иҫәбе лә юҡ ине.* М. Ғафури. *Йәй Өммәтҡол ағай ҡаҙнаға биреү өсөн бик күп һөйәк, тимер-томор, тире-яры йыйғайны.* Д. Юлтый.

**ТИРЛӘП-БЕШЕҮ** *ҡ.* ʻсильно вспотетьʼ. Ныҡ тирләү. *Тирләп-бешеп эшләү.* ■ *Зинүнә тирләп-бешеп ҡайтып ингәндә, Йомағужа лапаҫ аҫтында салғыларға тырма ҡуйып маташа ине.* Ә. Вәли.

**ТИРӘ-ЙҮН** *и. йыйн.*

1) ʻокружение, окружающая средаʼ. Кешене уратып алған донъя, мөхит. ■ *Улар тирә-йүн хәлен полк командиры менән дә бер дәрәжәлә белә ине.* С. Кулибай.

2) ʻокрестность, округаʼ. Яҡын-тирә, әйләнә тирә; тирәяҡ. ■ *Димдең ике яҡ ярында тирмә ҡороп урын да ҡалмай. Тирәйүн аҙналар буйы шау-шыу, ығы-зығы килеп тора.* «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосынан. *Тирә-йүн балҡып, мең нур менән тулышты.* Ф. Аҡбулатова.

**ТИРӘ-ЯҠ** *и. йыйн.* ʻокрестность, округаʼ. Әйләнәләге бөтә ер; ян-яҡ. ■ *Моратша, алйот улына тирә-яғынан ҡыҙ таба алмағас, беҙҙең ауылға килеп еткән икән.* Һ. Дәүләтшина. *Димдең тирә-яғы ҡарағусҡыл ҡуйы йәшел урман менән ҡапланған.* С. Агиш.

**ТИТИ-МИТИ УЙНАУ** *ҡ. и. һөйл.*

1) ‘заниматься несерьёзным делом’. Етди булмаған эш менән шөғөлләнеү. *Көнө буйы тити-мити уйнау. Тити-мити уйнарға әүәç. Ваҡытын тити-мити уйнап үткәрә.*

2) ‘мягко обращаться, нянчиться с кем-либо’. Йомшаҡ мөғәмәлә итеү. Мягко обращаться, нянчиться с кем-либо. *Дошман менән тити-мити уйнамайбыҙ. Һеңлеләре менән тити-мити уйнау.*

**ТИШЕКЛЕ-ТОШОҠЛО** *с.*

1) ‘дырявый, продырявленный’. Туҙып тишелгән, ныҡ туҙған. *Тишекле-тошоҡло кейем. Тишекле-тошоҡло салбар. Тишекле-тошоҡло биҙрә.*

2) ‘ноздреватый, пористый’. Бик күп тишектәре булған. *Тишекле-тошоҡло кирбес. Тишекле-тошоҡло таш. Тишекле-тошоҡло таш йыйыу.*

**ТИШЕК-ТОЛОҠ** *и. диал.* ‘тихий уголок’. Тыныс урын. *Тишек-толоҡ ер табыу.*

**ТИШЕК-ТОШОҠ I** *и. йыйн.*

1) ‘отверстия, дыры’. Төрлө ерҙәге тишек. *Тәҙрәнең тишек-тошоғонан ел өрә.* ■ *Өң иркен булғас, эреле-ваҡлы тишек-тошоғо байтаҡ, ахыры.* Р. Вәлиев.

2) *перен.* ‘дыры, бреши, недостачи; материальные трудности’. *күсм.* Төрлө мохтажлығы булған, етешмәгән ер. ■ *Кәрәк нәмә күбәйеп киткәс, бер йөк арыштың ғына тишек-тошоҡто бөтәйтә алмаçын белгәс, ҡунаҡ саҡырыуҙан тағы тайҡалап ҡарарға уйлаһалар ҙа, эш барып сығырлыҡ булманы.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТИШЕК-ТОШОҠ II** *с.* ‘дырявый, многодырчатый’. Тишектәре күп булған. *Тишек-тошоҡ салбар. Тишек-тошоҡ*

*түбә.* ■ *Күптәнге хыялына ирешеүгә ҡыуанып, Аҡмулла ла кейеменең тишек-тошоҡ ерҙәрен ямарға ултырҙы.* Я. Хамматов. *Ҡыуыштың ябылып бөтмәгән тишек-тошоҡ түбәһе үтә төшкән тулған айҙың нурҙары, селтәрләнеп, уның ябынып ятҡан ҡораҡ юрғаны өҫтөндә һаҡалға теҙгән көмөш тәңкәләр кеүек йымылданы.* Һ. Дәүләтшина.

**ТИШЕК-ЯРЫҠ** *и. ҡар.* **тишек-тошоҡ I**. ■ *Был юлы ул [Сәлкәй] хан яһағын тиҙ генә йыйып оҙатырға ... тейеш тә Шаҡмандың шикле тишек-ярыҡтарын күҙәтеп сығырға тейеш.* К. Мәргән.

**ТОҘЛО-БОРОСЛО** *с.*

1) ‘с солью и перцем’. Тоҙо һәм боросо булған. ■ *Рационығыҙҙан тоҙло-борослo ризыҡты алып ташлағыҙ.* «Йәшлек» гәзитенән.

2) *перен.* ‘колкий, язвительный, с перцем’. *күсм.* Бик үткер, бик тәьҫирле *(һүҙ һ.б. тураһында). Тоҙло-борослo һүҙ. Тоҙло-борослo һүҙҙәр һөйләп ултырыу. Тоҙло-борослo фекере мине ҡыҙыҡһындырмай.*

**ТОРА-БАРА** *р.* ‘с течением времени, со временем, постепенно’. Күпмелер ваҡыттан, бер аҙҙан. Тора-бара өйрәнеү. Тора-бара күнегеү. ■ *Тора-бара Нур был күңелһеҙ ваҡиғаны оноторға тырышты.* И. Абдуллин. *Ғәлиәкбәров үҙе һөйләгәндәргә тора-бара үҙе лә ышана башланы.* Х. Зарипов. *Тора-бара уның [ҡойоноң] һыуы өҫкә ҡалҡҡан, йылан-саян – барыһы унда урын тапҡан.* «Ҡиссаи Йософ».

**ТОРА-КИЛӘ** *к. ҡар.* **тора-бара.** *Тора-килә арыны. Тора-килә күнекте. Тора-килә шашты.* ■ *Тора-килә был икәүгә Ҡәмәр инәй менән Гәүһәр ярайһы ғына эйәләшә төштөләр.* В. Исхаҡов.

*Тамағы туҡ булһа ла, имеү иҫенә төшөп илаған бала тора-килә күкрәк һөтөнән төңөлдө, ашауға һалынды.* Ж. Кейекбаев.

**ТОРМОШ-КӨНКҮРЕШ** *и. йыйн.* ‘житье-бытье’. Тереклек итеп йәшәгән көн. *Тормош-көнкүреш хәле.* ■ *Моратов һәр кемдең өйөндә тормош-көнкүреш тураһында һүҙ башлап, аҙаҡ үҙе лә, хужа ла һиҙмәҫтән, колхоз эшенә күсә ине.* Ә. Вәли. *Сәй янында, билдәле, эш тураһында ғына түгел, тормош-көнкүреш хаҡында ла һүҙ сыҡты.* Ә. Хәкимов.

**ТОРОШ-ҠИӘФӘТ** *и. ҡар.* **торош-һын.** ■ *[Шамратовтың] торош-ҡиәфәте үҙгәреү менән, ҡулындағы ҡыҙыл сумка ла бер беләгенән икенсеһенә күсеп төрлөсә бәүелә, сайҡала торҙо.* Д. Бүләков. *Ул [Нурдәүләт] нисек кенә шат, асыҡ булырға тырышмаһын, һиҙелеп тора: йөҙө борсоулы, торош-ҡиәфәте үтә етди ине.* Ғ. Лоҡманов.

**ТОРОШ-ҺЫН** *и. йыйн.* ‘вид, внешность’. Кешенең тышҡы күренеше, килеш-килбәте, тышҡы ҡиәфәт. *Торош-һыны бик сибәр. Уның торош-һыны ҡапыл үҙгәрҙе.* ■ *[Платовтың] торош-һыны ла нык үҙгәрҙе. Оло йәштәгеләргә оҡшатып, бөкрәйеберәк, һалмаҡ баҫып атларға өйрәнде.* Д. Исламов.

**ТОТ-МОТ** *р. диал.* ‘еле-еле, кое-как, тяп-ляп’. Еткерер-еткермәҫ. *Тот-мот эшләп ҡуйыу.*

**ТӨБӨ-ЕРЕ** *и. диал. ҡар.* **нәҫел-нәсәбе.** *Төбө-ере таралыу.*

**ТӨБӨ-ТАМЫРЫ** *и. йыйн.* ‘корни (деревьев, растений)’. Үҫемлектең күҙгә күренмәгән, ер аҫтындағы өлөшө. *Төбө-тамырынан аҡтарыу. Төбө-тамыры ҡороу. Ағасты төбө-тамырынан ҡаҙып ташлау.* ■ *Бына-бына ҡотороп дауыллы*

*гәрәсәт күтәрелер ҙә ялан биҙәп ултырған тәлгәш ҡайынды төбө-тамырынан йолҡоп әллә ҡайҙарға, йәһәннәмгә ырғытыр кеүек тойолдо Абдрахманға.* Р. Өмөтбаев.

**ТӨЙӨН-ТАЙЫН** *с. диал.* 'с узлом, узловатый'. Төйөнө булған, төйөн менән. *Төйөн-тайын арҡан. Төйөн-тайын еп.*

**ТӨЛКӨ-ТӨЛӘЙМӘН** *и. диал.*

1) 'сказочный персонаж'. Әкиәт персонажы. *Әкиәттәге төлкө-төләймән.*

2) *перен.* 'лиса (о хитром человеке)'. *күсм.* Хәйләкәр кеше. *Ул хас төлкө-төләймән инде.*

**ТӨҪ-БАШ** *и. йыйн.* 'вид, облик, внешность'. Дөйөм тышҡы ҡиәфәт. ■ *Комендант ағай төҫ-башы менән хәрби әҙәмгә оҡшап тора.* Ә. Бикчәнтәев. *Гөлйөҙөм Закирйән ҡарттың башҡа ҡыҙҙарынан төҫ-башҡа матур булыуы менән дә, эшкә уңғанлығы яғынан да айырылып тора ине.* Ф. Чанышева.

**ТӨҪ-БИҘӘК** *и. йыйн.* '*перен.* украшение; то, что дает красоту и очарование'. Йәм, матурлыҡ биргән нәмә. ■ *күсм. Бәрәкалла, үтелгән юлдар, күрелгән илдәр һәр береһе Аҡмулланың йырҙарына үҙ аһәңен, үҙ төҫ-биҙәген өҫтәне.* М. Ямалетдинов.

**ТӨҪ-БУЯУ** *и. йыйн.* '*перен.* разные цвета; краски, колорит; то, что дает разные цвета и очарование'. *күсм.* Төрлө төҫ, матурлыҡ биргән нәмә. ■ *Ватаным минең йөрәгемдә ниндәй ҙә булһа айырым өлөштәре менән түгел, ә үҙенең бөтә киңлектәре, төҫ-буяуҙары, бөтә дәүерҙәре, үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән йәшәй.* М. Кәрим.

**ТӨҪ-ҠИӘФӘТ** *и. йыйн. ҡар.* **төҫ-баш**. ■ *Күрше ауылда әсәйем менән бер туған, төҫ-ҡиәфәте менән дә әсәйемә оҡшаған*

*Ғәмбәриә апайым йәшәй.* М. Садиҡова. *Миңһылыу .. Саръяндың төҫ-ҡиәфәтен күҙ алдына килтерергә тырышып, байтаҡ ара тәҙрәнән ҡарап барҙы.* Ә. Байрамов.

**ТӨҪ-ҺЫН** *и. йыйн.* 'вид, внешность'. Тышҡы ҡиәфәт. ■ *«Нурғәле ҡоҙаның Мохтары тип торам. Ҡалай төҫ-һыны Мохтар ҡоҙаға оҡшап тора», – тине әбей.* С. Кулибай.

**ТУҒАН-ҠӘРҘӘШ** *и. йыйн.* 'родственники, родня; братья и сёстры разных степеней'. Алыҫ һәм яҡын туғандар; туған-ырыу; нәҫел-нәсәп. *Ҡәҙерле туған-ҡәрҙәштәр. Яҡын туған-ҡәрҙәш. Туған-ҡәрҙәштәр менән һөйләшеп тороу.* ■ *Халыҡ музыкаһы уларға [башҡорт һуғышсыларына] туған-ҡәрҙәштәренән, ата-бабаларынан, һөйөклө ҡатындарынан ... һағынышлы сәләм килтергәндәй була.* Р. Өмөтбаев. *Мәрйәм ... Ҡазанда ҡунаҡ итерлек туған-ҡәрҙәштәре юҡ икәнен әйткәс, Лотфулла ағай ныҡ асыуланды.* М. Ғафури.

**ТУҒАН-ТЫУМАСА** *и. йыйн.* 'родственники, родня'. Ағай-эне; бөтә булған яҡын туған; туған-ырыу. *Барлыҡ туған-тыумаса йыйылды. Туған-тыумасаны йыйып, Ҡөрьән уҡытып алыу.* ■ *Билдәле инде, Рамазан ағайымды оҙатырға бөтә туған-тыумаса йыйылды.* В. Исхаҡов. *[Ғилман – Зөфәргә:] Яңғыҙ, туған-тыумасаһыҙ ғүмер итеүҙәре бик ауыр, мырҙам, һин быларҙы аңламаҫһың.* Д. Бүләков.

**ТУҒАН-ТЫУМАСАЛЫҠ** *и. һөйл.*

1) 'родственные отношения'. Ағай-энелек; ҡәрҙәшлек. *Туған-тыумасалыҡ тойғоларын күрһәтеү. Туған-тыумасалыҡ бәйләнештәре.* ■ *Ҡоҙа-ҡоҙағый, егет-еләр, туған-тыумаса тейәлгән биш-алты ҡырандас һәм арба теҙелешеп, ауыл буйлап елдерә.* М. Кәрим.

2) *перен.* ‘семейственность; кумовство’. *күсм.* Эштә, хеҙмәттә үҙеңдең ғаилә ағзаларын яҡын күреү, уларға өҫтөнлөк күрһәтеү; ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ. *Бында туған-тыумасалыҡ хөкөм һөрә икән. Туған-тыумасалыҡҡа юл ҡуймаҫҡа кәрәк.*

**ТУҒАН-ЫРЫУ** *и. йыйн.* ‘родственники, родичи’. Бөтә булған яҡын туған ҡәрҙәш-ырыу. ■ *Нигмәтйән ағай … кемгә барып һүҙ ҡушырға белмәне. Әйтерһең, ул туған-тыумасаһыҙ, ағай-энеһеҙ ғүмер үткәргән.* Ә. Зәйнуллин. *Ошо ауыл малайы булһам да минең бында туған-ырыу юҡ.* Н. Мусин.

**ТУҘАН-САҢ** *и. йыйн.* ‘пыль’. Бик ваҡ онтаҡ рәүешендәге бысраҡ; саң. ■ *Күңелсәк хужа килеүенә шатланғандай, әлегәсә туҙан-саңға күмелеп ятҡан баян, скрипкалар, мандолиналар телгә килде.* Яр. Вәлиев. *Йәйәүле һалдаттар ана шул туҙан-саң болото эсендә күмелеп бара.* С. Поварисов. *Туҙан-саң баҫыла башлағас, малайҙар мәсеткә табан йүгерҙе.* Ф. Чанышева.

**ТУЙ-СУЙ** *и. диал.* ‘мелочь, всякая всячина’. Юҡ-бар, ваҡ-төйәк. *Туй-суй алыу. Туй-суй менән маташыу.*

**ТҮБӘ-ТҮШӘМ** *и. диал.* ‘потолок, потолочный’. Өйҙөң, ҡураның бура өҫтөнә таҡтанан түшәп һалынған эске түбәһе. *Түбә-түшәм йәйеү. Түбә-түшәм алыштырыу. Түбә-тушәм буяу.* ■ *Түшәмгә ике урында суҡ-суҡтары аҫылынып торған ҙур гәлсәр шәмдәр эленгән.* Р. Байымов. *Иҙәндән түшәмгә етерҙәй булып торған сәғәт кенә һаман келтелдәүен белде.* Б. Бикбай.

**ТҮКМӘЙ-СӘСМӘЙ** *р.*

1) ʻвсецело, целикомʼ. Түккеләп, ҡойолтоп тәләф итмәй; тулыһынса. ■ *Баҫыуҙан бөтәһе лә түкмәй-сәсмәй йыйып алынған.* Р. Ғабдрахманов.

2) *перен.* ʻвесь, целикомʼ. *күсм.* ʻБер нәмәһен ҡалдырмай; тотош. ■ *Зөфәр, танауын һипкел баҫҡан теремек егет, ауылда күп йөрөй, халыҡтың хәбәрен йыйып, түкмәй-сәсмәй хужаһына еткерә белә торған егет.* Д. Бүләков. *Гәүһәр үҙе күргән-ишеткәндәрҙе түкмәй-сәсмәй һөйләп бирҙе.* В. Исхаҡов.

**ТҮРӘ-ҠАРА** *и. йыйн. һөйл.* ʻвсякие начальники, чиновникиʼ. Баш, етәксе кешеләр. ■ *Хәҙер бөтә район, бөтә түрә-ҡара уның [Ғәлимәнең] ҡулында.* Т. Ғарипова. *Түрә-ҡара байман таптырмай.* Т. Хәйбуллин.

**ТҮРӘ-ҺӘРЕ** *и. йыйн. ҡар.* **түрә-ҡара.**

**ТҮШ-БАШ** *и. йыйн.* ʻгрудь и голова; внешность, фигураʼ. Түш һәм баш (тышҡы ҡиәфәтте һыҙатлағанда әйтелә). ■ *Ул [ҡыҙ] түш-баштарын ҡалҡытып, ҡыр ҡаҙы кеүек осорға ғына тора.* Д. Юлтый.

**ТҮШӘК-ЯҪТЫҠ** *и. йыйн.*

1) ʻпостель, постельные принадлежностиʼ. Урын әйберҙәре, ҡаралды. ■ *Ҡәҙерле ҡунаҡ хөрмәтенә бығаса тотолмай килгән түшәк-яҫтыҡтар ҡуҙғатылдылар.* Б. Бикбай. *Ҡатын түр мөйөштәге сымылдыҡ эсенә инеп китте, гөрһөлдәтеп түшәк-яҫтыҡ ҡаҡты, унан һуң карауатҡа менеп ятты: тимер карауат шығырлап ҡуйҙы.* М. Кәрим.

2) ʻпостельные принадлежности (мифологизированные предметы)ʼ. *миф.* Һаҡлау, ҡурсалау көсөнә эйә әйберҙәр.

**ТЫЗ-МЫЗ** *оҡш.* ҡар. **тыз-быз.** *Себендәр тыз-мыз оса.*

**ТЫЗ-БЫЗ** *окш.* ‘звукоподражание быстрым движениям, полёту, бегу и т. д’. Туҡтауһыҙ бер тегеләй, бер былай йөрөгәнде, ҡабалан етеҙ хәрәкәтте белдерә. *Тыз-быз килеп йөрөү. Тыз да быз йүгерешеү.* ■ *Мин дә, табан аҫтын майлағандай, тыз-быз йүгерергә керештем.* М. Садиҡова.

**ТЫН-ҠАРЫУ** *и. йыйн.* ‘выдержка, терпимость’. Йөрәк тибешенә, тын иркенлегенә бәйле сыҙамлыҡ. ■ *[Ҡайһы бер] йүгеректең тын-ҡарыуы бары дүрт-биш саҡрымға ғына етә.* С. Кулибай.

**ТЫН-ТӘҠӘТ** *и.* ‘покой, спокойствие’. Тыныс хәл, тыныслыҡ, мәшәҡәтһеҙлек. ■ [*Ғәлләм:] Ниңә әле былай, тын-тәҡәт бирмәй, дөрөп алып бараһың?* С. Кулибай.

**ТЫРНАҠЛЫ-ҠУЛЛЫ** *с. диал.* ‘вороватый, жулик’. Кеше нәмәһенә тейгән, урларға әҙер торған; мут. *Тырнаҡлы-ҡуллының ҡылығы. Ул бит тырнаҡлы-ҡуллы, насар холоҡло әҙәм.*

**ТЫРҪ-МЫРҪ** *окш.* ‘подражание резким движениям человека при приступах гнева, обиды и т. п.’. Кешенең нимәгәлер үсегеп, үпкәләп, теләр-теләмәҫ һөйләшкәнде белдергән һүҙ. *Тырҫ-мырҫ килеү. Тырҫ-мырҫ һөйләшеү.* ■ *Түрбаш яғына тырҫ-мырҫ атлап үтте [Фәниә].* Н. Мусин. *Тәүге көндәрҙән үк Тәнзиләнең тырҫ-мырҫ ҡыланышы, йүнләп һөйләшергә теләмәүе уны [Сафияны] бигерәк тә йонсотто һәм иҙҙе.* Я. Хамматов.

**ТЫРТ-МЫРТ** *окш. ҡар.* **тырҫ-мырҫ**. Тырт-мырт йөрөү. ■ *Гөлнара, тырт-мырт атлап, йоҡо бүлмәһенә инеп китте.*

Н. Мусин. *«Фәрештә» тигәнде йәнә төртмә һүҙ тип ҡабул иткән Фазила, әлбиттә, тырт-мырт һөйләште.* С. Шәрипов.

**ТЫРЫМ-ТЫРАҠАЙ** *р.* ‘беспорядочно, как попало’. Тәртипһеҙ, тарау рәүештә. *Тырым-тыраҡай йүгереп ҡасыу. Тырым-тыраҡай ултырыу. Тырым-тыраҡай сәселеп ятыу.* ■ *Кем йәшлектең тәүге ауыҙлыҡһыҙ ялҡынын тырым-тыраҡай туҙҙырып, елгә осороп бөтә, ул кеше бик иртә, буш сүлмәк һымаҡ, шыңғырап ҡала торғандыр.* З. Биишева. *Алдар менән Сәйеттең улдары янындағы яугирҙар, күптән ҡамалып, тырым-тыраҡай туҙҙырылғайнылар инде.* Ғ. Ибраһимов.

**ТЫРЫШЫП-ТЫРМАШЫП** *р.* ‘очень старательно, усердно’. Бик ныҡ тырышып, бөтә көстө һалып. *Тырышып-тырмашып уҡыу.* ■ *Бал ҡорттары кеүек тырышып-тырмашып эшләп ятҡан үҫмерҙәргә Саръян айырыуса яғымлылыҡ күрһәтте.* Ә. Байрамов. *Үс иткәндәй, Хәмит һаман тырышып-тырмашып юғары үрмәләй.* Д. Бүләков.

**ТЫУҒАН-ҮҪКӘН** *с. йыйн.* ‘родной’. Тыуып үҫкән. *Тыуған-үҫкән ауыл. Тыуған-үҫкән яҡ.* ■ *[Миңһылыуҙың] ҡулына мандолина алып, дәртләнеп уйнап ебәргеһе, аҡҡош кеүек елпенеп, тыуған-үҫкән яҡтарына тиҙерәк осоп киткеһе килә.* Ә. Байрамов. *Эттең эте лә тыуған-үҫкән ерен ташлап китергә теләмәй бит*! З. Биишева. *Эҫе яҡтарҙа, сит ерҙәрҙә ҡышлап ҡайтҡан ҡоштар тыуған-үҫкән илдәренә иҫән-һау ҡайтып етеүҙәренә ҡыуаныштылар.* Д. Исламов.

**ТӘКМӘС-ТҮКМӘС** *р.* ‘кувырком, вверх тормашками’. Баш аша әйләнә-әйләнә, тәкмәсләй-тәкмәсләй. *Тәкмәс-түкмәс аунау. Тәкмәс-түкмәс барып төшөү.* ■ *Хәтәр бит, саҡ ҡына яҙа*

*баҫтыңмы, таштары сурайып-сурайып торған ярҙан тәкмәс-түкмәс китәсәгеңде көт тә тор.* Р. Солтангәрәев.

**ТӘКӘ-МӨКӘ** *и. диал.* ҡар. **ҡусҡар I**. *Бында тәкә-мөкә күп икән. Тәкә-мөкә ҡабырсағы.*

**ТӘМЛЕ-ТАТЛЫ I** *и. йыйн.* ‘всякая сладкая еда, вкусная пища’. Төрлө тәмле ашамлыҡ (ғәҙәттә, кәнфит, печенье, төрлө емеш һ.б. ҡарата әйтелә). *Тәмле-татлы ғына ашау. Тәмле-татлыға ҡарағанда, емеш-еләк, йәшелсәгә өҫтөнлөк биреү күп ауырыуҙы иҫкәртә.* ■ *[Ҡыҙырас] ҡала малайы шул. Ауыҙы тәмле-татлыға өйрәнгән.* З. Биишева.

**ТӘМЛЕ-ТАТЛЫ II** *с. йыйн.*

1) ‘сладкий, вкусный’. Тәмле, татлы булған. *Тәмле-татлы нәмәләр. Тәмле-татлы емеш. Тәмле-татлы күстәнәстәр. Тәмле-татлы ашамлыҡ.* ■ *Аҙналар буйы эйәрҙән төшмәй сабырға, тәүлегенә ике-өс сәғәт кенә серем итеп, ашау-эсеүҙә артыҡ талымланмаҫҡа күнегеп бөткән Туҡтамыш йомшаҡ түшәктә аунап ятыуҙы, тәмле-татлы ризыҡтар менән һыйланыуҙы үйына ла алманы.* Ә. Хәкимов. *Күҙле шишмә һыуы теште һындырырҙай саф-һалҡын, тәмле-татлы!* Й. Солтанов.

2) *перен.* ‘приятный’. *күсм.* Күңелде арбарлыҡ, матур. *Тәмле-татлы тел. Тәмле-татлы һүҙҙәр һөйләү. Тәмле-татлы һүҙҙәргә ышаныу.* ■ *Уның [Вахиттың] боронғо тәмле уйҙары урынына икенсе уйҙар урынлашып, теге уйҙарын, боронғо хыялдарын ҡыҫырыҡлап, бәреп сығарҙылар.* М. Ғафури. *Фәнисә, ай-вайына ҡуймай, тәмле-татлы һүҙҙәр менән өгөтләп, яңы әхирәтен тыуған яғына алып ҡайтып китте.* «Шоңҡар» журналынан.

**ТӘМЛЕ-ТОМЛО I** *и. йыйн.* ‘вкуснятина, вкусненькое’. Төрлө тәмле ашамлыҡ (ғәҙәттә, кәнфит, печенье, төрлө емеш һ.б. ҡарата әйтелә). ■ *Бөтә донъяһын онотоп, төйөнсөктәге тәмле-томлоларҙы ҡутарып ултырған Солтандың ҡабырға һына төрттө Носрат.* Т. Килмөхәмәтов. *[Ихсанбай] хәлле йәшәгән Сәбиләнең үҙенә тәмле-томло һуҙыуына ла шулай уҡ ҡарап та ҡуйманы.* Т. Ғарипова.

**ТӘМЛЕ-ТОМЛО II** *с. йыйн.* ‘сладкий’. Тәмле, татлы булған. ■ *[Кендек:] Оло инәйемдең камзул кесәһенә буйым саҡ-саҡ етә. Ул тылсымлы кесәнән тәмле-томло нәмәләр һис ваҡытта ла өҙөлмәй.* М. Кәрим.

**ТӘМ-ТОМ** *и. йыйн.* ‘разные кушанья, пряности, сладости’. Төрлө тәмле-татлы ашамлыҡтар һәм тәмләткес нәмәләр. ■ *Ҡаҙ ите ашалды, тирләп-бешеп, тәм-том менән сәй ҙә эселде.* Ф. Рәхимғолова. *Үтәгол килтергән сәй-шәкәр, тәм-томдарын, парса, бәрхәт, аҡ митҡал киҫәктәрен урындыҡҡа таратып ташланы.* З. Ураҡсин.

**ТӘҢКӘ-СУЛПЫ** *и. йыйн.* ‘украшения’. Ҡатын-ҡыҙҙың биҙәүестәре. ■ *Тәңкә-сулпыларын да үҙе таҡты Миңлебикә, сәсмау-сәс ҡаптарын да үҙе кейҙе.* К. Мәргән.

**ТӘРТИП-НИЗАМ** *и. йыйн.* ‘порядок, дисциплина, закон’. Эш, тормоштағы төрлө тәртип. ■ *Яҙылмаған ғөрөф-ғәҙәттәр, ыҙан-йолалар, әҙәп-әхлаҡ, хоҡуҡ-хөкөм, ижад-зауыҡ принциптары йөҙәр йылдар буйы формалаша, норма-ҡанунға, тәртип-низамға әйләнә.* Ғ. Хөсәйенов. *Ҡаһирәгә килеп урынлашҡас, ул [Сәйф] ят мөхиткә, бындағы тәртип-низамға тиҙ үк өйрәнде.* Ә. Хәкимов.

# У

**УӠАЛЫ-ҠАӠАЛЫ** *р.*

1) ‘как попало, в беспорядке’. Нисек етте шулай; тәртипһеӡ рәүештә, тигеӡ түгел. ■ *Аттар уӡалы-ҡаӡалы һырныгышып баҫҡандар.* Һ. Дәүләтшина.

2) ‘неровно, местами’. Тигеӡ түгел, урыны менән. *Иген уӡалы-ҡаӡалы сыҡҡан.*

**УӠҒАН-БАРҒАН I** *с.* ‘прохожий, проезжий, встречный, проходящий мимо,’. Ҡайӡа булһа ла уӡып, үтеп барыусы, юлаусы, юлсы, юл йөрөүсе (кеше). *Уӡган-барган кешеләр. Уӡган-барган халыҡ.* ■ *Һалдаттар, .. вагон тәӡрәләренән баштарын тығып, уӡган-барган кешеләргә асыуланып ҡарап торалар ине.* М. Ғафури.

**УӠҒАН-БАРҒАН II** *и.* ‘прохожий, проезжий, проезжающий’. Юл ыңғайы уӡып барған кеше. *Уӡган-барганды ҡарап тороу.* ■ *Эргәләге оло юлда уӡган-баргандар күренде, драгун дозорӡары үтеп китте.* Ғ. Ибраһимов. *[Баһау:] Ауыл осонда эйәрле бер туры хайуан йөрөй ине лә. Мин, был ни эшләп йөрөй бында, уӡган-баргандың аты булырмы икән, тинем дә ҡуйӡым.* Ж. Кейекбаев.

**УЙҒЫЛДЫ-СУЙҒЫЛДЫ** *с. диал.* **соҡорло-саҡырлы.**

**УЙЛЫ-ИҪЛЕ** *с. диал.* ‘памятливый’. Хәтере яҡшы булған; иҫле. *Уйлы-иҫле кеше.*

**УЙНАП-КӨЛӨП** *р.* ‘развлекаясь, веселясь’. Кәйеф-сафа ҡороп, күңел асып. ■ *Аулаҡ ҡалган өйгә йыйылып, уйнап-көлөп,*

*йырлап-бейеп, бергәләп төн үткәреү, ҡайһы саҡта бергәләп аулаҡ аш та бешереп ашау ҡыҙҙарҙың яратҡан гәҙәттәренән береһе ине.* З. Биишева. *Латифа абыстай илә Ғәле мулла ҡунаҡ өйөндә, матур өйҙә, рәхәт-рәхәт уйнап-көлөп, сәй эсәләр.* М. Ғафури.

**УЙ-ТЕЛӘК** *и. йыйн.* ‘мысли и желания’. Уйлаған бөтә уй һәм теләк. ■ *Беҙ милләтебеҙ яҙмышы, уның киләсәге тураһында борсолоп, хаҡлы рәүештә һүҙҙе былай тип башлайбыҙ: “Телебеҙҙе, йыр-моңобоҙҙо, изге йолаларыбыҙҙы, айыҡ аҡылыбыҙҙы һаҡлайыҡ.” Был – уй-теләктәребеҙҙең төп асылы.* М. Кәрим.

**УЙ-ТОЙҒО** *и. йыйн.* ‘мысли и чувства’. Бөтә булған эске хис, кисереш. *Уй-тойғо белдереү.* ■ *Хәсән ағайҙың урамда күренеүе Вәсиләнең күңелендә бөтөнләй башҡа уй-тойғолар уятты.* Б. Рафиҡов. *Аҙнаев шәхси уй-тойғоларҙың үтә йәйелеп китеүенә юл ҡуя торған кеше түгел.* Н. Мусин. *Ямалдың йөрәгендә төйөрләнеп ятҡан уй-тойғолары … тышҡа бәреп сыҡҡан.* М. Тажи.

**УЙ-ФЕКЕР** *и. йыйн.* ‘мысли’. Уйлаған бөтә уй һәм фекер. *Уй-фекер туплау.* ■ *Саръян Хәсәнша хаҡындағы бөтә уй-фекерҙәрен асып һалырға ниәтләгәйне лә, ағаһының былай ҙа ауыр кисерештәр утында ғазапланыуын күреп, тәүге уйынан кире ҡайтты.* Ә. Байрамов.

**УЙ-ХИС** *и. йыйн. ҡар.* **уй-тойғо.** ■ *Ауыр уй-хистәренән нисек ҡотолорға белмәйенсә аптырап, император Баштаб начальнигын саҡыртты.* Я. Хамматов. *Ҡәләм ашыҡмай ғына ҡағыҙ өҫтөнә әсәнең ҡыҙына еткерергә теләгән уй-хистәрен, яңылыҡтарҙы теҙә барҙы.* Ш. Янбаев.

**УЙЫН-КӨЛКӨ** *и. йыйн.* ‘веселье, забава, игра’. Кәйеф асыу өсөн эшләнгән төрлө ҡыҙыҡ. ■ *Дейеү ҡыҙҙары йыр, бейеү, уйын-көлкө менән Түҙемголдоң күңелен асырга тырышҡан.* Әкиәттән. *Аш янында төнгө йәшенле ямгыр ҙа, һалды ярҙан ситкә этәреү ауырлыгы ла онотолдо, йәнә уйын-көлкө башланды.* И. Абдуллин.

**УЙЫНЛЫ-ЫСЫНЛЫ I** *с.* ‘полушутливый, полусерьёзный’. Ярым шаяртыулы. *Уйынлы-ысынлы һүҙ.*

**УЙЫНЛЫ-ЫСЫНЛЫ II** *р.* ‘в шутку и всерьёз’. Ярым шаяртып. ■ *Иптәштәре Йәгәфәргә, ҡара уны, бында саҡта кәләш һайлап ҡал, ауылда ҡыҙҙар Өфөләге шикелле көтөүе менән йөрөмәҫ, тип уйынлы-ысынлы төрткөсләп тә ала торгайнылар.* Р. Солтангәрәев. *Ирйегет менән Буранша уйынлы-ысынлы бер-береһен «ҡоҙа» тип йөрөйҙәр.* З. Биишева.

**УЙЫН-МЫСҠЫЛ** *и. диал.* ‘всякая всячина *(о словах)*’. Теләһә ниндәй һүҙ. *Уйын-мысҡыл һөйләп тик йөрөй.*

**УЙЫН-ШАҒЫРАҠ** *и. диал. ҡар.* **уйын-көлкө**. *Бөгөн клубта уйын-шагыраҡ ойоштор҃олар.*

**УЙ-ХӘСРӘТ** *и. йыйн.* ‘печаль-кручина, внутренние переживания’. Күңелдәге бөтә булған ауыр уй һәм хәсрәт. ■ *Уй-хәсрәттәр тотоп, ялҡын йотоп, гүмер иткән ирҙә йоҡо юҡ.* Халыҡ йырынан.

**УЙ-ХЫЯЛ** *и. йыйн.* ‘мысли и мечты’. Уйлаған бөтә уй һәм теләк. ■ *Тамъян иленең хужаһы Шаҡмандың уй-хыялдары ҙур уның.* К. Мәргән.

**УҠ-ЙӘЙӘ** *и. йыйн.* ‘лук и стрелы’. Уҡтан, яндан торған бөтә ҡорал. ■ *Ете туған йондоҙ маңлайлы аттарҙы тотоп, ҡыл йүгәндәр менән йүгәнләгәндәр, көмөш өҙәңгеле эйәрҙәрҙе эйәрләп, яурынга ук-йәйә аҫып, билгә ҡылыс тағып, ҡая таштар араһына сабып кереп киткәндәр.* И. Абдуллин. *[Егет] Аҡбуҙ атын менгән дә, олатаһының олатаһынан тороп ҡалған ук-йәйәһен алып, теге дейеүҙе эҙләргә киткән.* Р. Ғабдрахманов.

**УҠТАН-СУҠТАН КЕЙЕНЕҮ** *ҡ.* ‘быть одетым с иголочки’. Матур итеп өр-яңынан кейенеү. ■ [*Айытбай – Алтынбикә тураһында:] Мәгәр донъяһын тота... Балалары ла уҡтан-суҡтан кейенеп, тап-таҙа йөрөй.* Ф. Иҫәнғолов.

**УҠТА-ҺУҠТА** *р. диал.* ‘изредка, иногда, время от времени, временами; урывками’. Ваҡыты-ваҡыты менән; һирәк-һаяҡ. ■ *Урам тын, тик беҙҙең командирҙың уҡта-һуҡта: «һайт-два-три!.. һайт-два-три!» – тип ҡуйған тауышы ғына тынлыҡты боҙа.* И. Насыри.

**УҠ-ҺАҘАҠ** *и. йыйн.*

1) ‘лук и стрелы, оружие, вооружение’. Яу һәм һунар уҡтары. ■ *Ялтырап та үтә, атҡан саҡта, ук-һаҙаҡтың башаҡ ҡоросо.* Халыҡ йырынан.

2) ‘саадак, сагайдак, сайдак (*лук с налучником, колчан со стрелами у конного воина*)’. *тар.* Уҡтан, яндан торған бөтә ҡорал. ■ *Яугирҙарҙың барыһы ла ук-һаҙаҡ, һөңгө, кәкре ҡылыс менән ҡоралланған.* Р. Байымов. *Кейенеп-яһанған, ук-һаҙаҡтарын, бүтән ҡоралдарын аҫҡан, .. төрлө ризыҡ таҡҡан төлкө һәм ҡамсат бүрекле егеттәр ултырыш осона йыйылғанда, ҡояш саҡ күтәрелеп килә ине әле.* Н. Мусин. *Әсфәндиәрҙең ҡул аҫтында һигеҙ кеше бар, уларҙы ла каруан алып килгән ук-һаҙаҡ менән ҡоралландырҙылар.* Б. Рафиҡов.

3) *миф.* ʻлук с налучником, колчан со стрелами, оружие *(в башкирской народной культуре связан с инициацией юношей)*ʼ. *миф.* Инициация менән бәйле мифлаштырылған предмет. ■ *Ҡатындарға уҡ-һаҙаҡ аша атларға ярамай.* «Башҡорт мифологияһы»нан.

**УҠ-ҺАЯ** *и. йыйн. ҡар.* **уҡ-һаҙаҡ 1, 2.** *Уҡ-һаяны ҡулға алыу. Иҫтәлеккә уҡ-һая бүләк итеү.*

**УҠЫУ-ЯҘЫУ** *и. йыйн.* ʻграмота (умение читать и писать)ʼ. Хәрефтәрҙе уҡый, яҙа белеү. *Уҡыу-яҙыуға һәләтле.* ■ *Уҡыу-яҙыу менән ҡоралланған кеше аңлы тормош ҡора ала.* М. Ғафури.

**УҠ-ЯН** *и. йыйн.* ʻоружие, лук со стрелойʼ. Боронғо атыу ҡоралы, уҡ һәм йәйә. *Уҡ-ян яһау. Уҡ-янды ҡулға алыу. Уҡ-ян менән ҡоралланыу.* ■ *Алыҫ ерҙе осоп үтер толпар атым дағаланған, уҡ-ян, ҡылыс ялтлап тора – өҙәңгегә тарта табан.* Й. Солтанов. *Мылтыҡҡа ҡаршы уҡ-ян менән һуғышып булмай бит.* Ғ. Хисамов. *Алпамыша ... алмас ҡылысын тағып, уҡ-янын алып, әсәһе, һеңлеһе, Барсынһылыу менән хушлашып, яу ҡайтарырға киткән, ти.* «Алпамыша» эпосынан.

**УЛАЙ-БЫЛАЙ** *р.*

1) ʻкак-нибудь, какой-нибудьʼ. Берәй төрлө, нисектер. *Улай-былай итеп ҡарау.* ■ *Донъя бит улай-былай, уйланмай йәшәп булмай: шатланған саҡ та була, моңланған саҡ та була, ауыр һулап тын ғына уйланған саҡ та була...* Р. Назаров.

2) ʻкое-как, как попало.ʼ Арлы-бирле, нисек етте шулай. ■ *Балыҡты нисектер бешерергә кәрәк. Улай-былай ғына итеп түгел, тәмле итеп.* Р. Ҡол-Дәүләт. *Ауыҙында бөртөк тә теше булмағанлыҡтан, ҡурайҙы олатай өҫкө иренenә һалып уйнай.*

*Шундай шәп килеп сыға, ҡәһәрең, улай-былай ғына сыйылдатҡан тешле ҡурайсың ары торһон*. И. Ноғманов.

**УЛАН-УШАҠ** *и. йыйн.* 'мальчики, ребята'. Ир балалар. *Улан- ушаҡты тәрбиәләү. Эшкә улан-ушаҡты йыйыу.*

**УЛ-БЫЛ** *билдәһ. а.*

1) 'что-нибудь, что-либо'. Берәй төрлө эш, хәл. *Ул-был булыу. Ул-был була ҡалһа, һин – мине, мин һине белмәйбеҙ! Уны-быны тикшереп тормай. Уны-быны аңлап еткермәү.* ■ *[Тимерғәле менән Үмәр] оҙаҡ һөйләште. Уны-быны абайламаған Муйыл .. йоҡларға ятты.* Һ. Дәүләтшина. *Нуранияның уны-быны уйларға форсаты юҡ, тәүлегенә өс-дүрт сәғәттән артыҡ йоҡо теймәй уға.* Ә. Хәкимов.

2) 'какой-нибудь, какой-либо, нечто'. Асыҡ билдәле булмаған ҡайһы бер нәмә, эш-хәл. *Ул-был йомош. Ул-был килеп сығыу.* ■ *Ауылға ҡайтҡас, Мөхәмәтша уны-быны һөйләп йөрөмәгән.* М. Хужин. *Хөснөлхаҡ менән Салих ул-был иткәнсе, ат ҡараусы кире боролоп килде.* Ғ. Хисамов.

3) 'табуированное название смерти'. Үлемдең табулаштырылған исеме. *Ул-был була ҡалһа, мине үҙең тәрбиәләрһең, тине әсәйем.*

▲ **ул-был булғансы** 'пока что-либо, плохое не произошло, соотв. пока суд да дело'. Көтөлмәгән хәүефле хәл килеп сыҡҡансы тип, иҫкәртеп әйткәндә ҡулланыла. ■ *[Әпләс ҡарт:] Ул-был булғансы, игенде йыйыштыра һалып алырға кәрәк.* Һ. Дәүләтшина.

▲ **ул-был итеү** 'сделать кое-что'. Төрлөсә ҡулдан килгәнде эшләргә тырышыу, арлы-бирле итеү ■ *Юлсылар ул-был итеп, йылы һыу менән бит-ҡулдарын йыуып алғансы, ҡатыны йәш ҡороттан иҙелгән бер туҫтаҡ айран килтереп тә ҡуйҙы*. З. Ураҡсин.

▲ **уны-быны ҡарап тормау** ‘не обращать внимания на что-либо’. Бер нимәгә иғтибар итмәү ■ *Ары шым һис бөтәсәк түгел, тип уйлаған Гөлбостан, уны-быны ҡарап торманы, бөтөн илле тиндән һата һалды ла, ҡалас, лампасын алып, өйөнә йомолдо.* Ғ. Дәүләтшин.

**УЛДЫМ-ТАЛДЫМ МЕНӘН** *р.* ‘кое-как, с трудом’. Ҡыйынлыҡ менән. ■ *Айбулат менән Гөлйөҙөм, улдым-талдым менән Ныязғол байҙан сығып, ҡарлуғас ояһындай бәләкәс кенә балсыҡ өйҙәрендә үҙ алдына йылы донъя ҡорҙолар.* Һ. Дәүләтшина.

**УНАН-БЫНАН** *р.*

1) ‘оттуда и отсюда’. Төрлө ерҙән. *Унан-бынан һайлап алыу. Өҫтәлдәге һәр төрлө ҡағыҙ, папкаларҙы унан-бынан ҡараштырып алыу.* ■ *[Рәхимә килендәренә:] «Ит тураған табыштыр, унан-бынан ҡабыштыр», ти, әйҙә, һоғонғолап ултырығыҙ.* Һ. Дәүләтшина. *Унан-бынан өҙөп-йолҡоп булһа ла кескәй генә резерв та булдырылды.* Д. Исламов.

2) *перен.* ‘кое-как, на скорую руку, мельком (делать что-либо)’. *күсм.* Арлы-бирле, өҫтән-мөҫтән; нисек етте шулай; асылына төшөп тормай, еренә еткермәй (башҡарыу). *Унан-бынан ғына эшләп ҡуйыу.* ■ *Сәлих хәбәрҙе ишетеү менән, унан-бынан ғына кейенеп алып, Хәсәнгә китте.* С. Агиш. *Унан-бынан ғына мөрйә рәтләштереп, Ғәзизә еңгәйҙең күңелен тапмаммы тип, мейесте ҡороп ебәргән булды ҡәйнеше.* Ш. Бикҡол.

**УНДА-БЫНДА** *р.*

1) ‘там и тут, там и сям, местами, кое-где’. Төрлө урында, төрлө ерҙә. *«Унда-бында туҡтама, шунда уҡ өйгә ҡайт!» – тип әйтеп ебәрҙе әсәйем.* ■ *Унда-бында бесән эҫкерттәре күренә.* М. Тажи.

2) ‘туда-сюда’. Төрлө яҡҡа, төрлө ергә. *Унда-бында йүгергеләү.* ■ *Инде сыҡты атлылар һәм унда-бында саптылар.* Ш. Бабич. *Ҡара Табын ырыуы нуғайҙарҙан ҡотолоп, йәй буйы унда-бында һуғылып йөрөнө лә, ана шулай итеп, ишле ил янына килеп һырыш май булдыра алманы.* Р. Ғарипов.

**УНДА-ҺАНДА** *р.* ‘редко, кое-где’. Һирәк-мирәк төрлө ерҙә. ■ *Ағастарҙың ҡоро япраҡтары унда-һанда ғына ҡалдылар.* Д. Юлтый.

**УҢМАЙ-ҺУҢМАЙ** *р. диал.* ‘точь-в-точь’. Тас, хас, нәҡ. *Уңмай- һуңмай атаһына оҡшаған был бала.*

**УП-ТАП** *р.* ‘самовольный’. Башбаштаҡ. Үҙ һүҙле. ■ *Яуға үҙе бармаһа, барғанға уң бирмәһә, уп-тап килеп арала, айбаһа дошман яуынан, ытырғанһа иленән, ил батыры булырмы?* Ҡобайырҙан.

**УП-ТУП I** *с. диал.* ‘самовольный’. Башбаштаҡ, үҙ һүҙле. *Уп-туп булыу.* ■ *Бәпәнәй барымтаның Кесе Урҙала бирәүгә лә баш бирмәй уп-туп килеүсе, яндырайлығын һәм нәфсеһен ауыҙлыҡлай белмәүсе ҡайһы бер солтандар, батырҙар тарафынан ойошторолғанын аңлатты.* Б. Рафиҡов.

**УП-ТУП II** *р. диал.* ‘самовольно’. Үҙ һүҙле ҡыланып, башбаштаҡлыҡ менән. *Уп-туп йөрөү.*

**УРАЙ-СУРАЙ** *с.* ‘неровный (о поверхности)’. Тигеҙ булмаған, соҡор-саҡырлы. *Урай-сурай боҙ өҫтө. Урай-сурай ерҙән атлау. Урай-сурай стеналы емерек бер бүлмә эсенә индек.*

**УРАҠАЙ-СУРАҠАЙ** *с.* ‘неровный (о поверхности)’. Тигеҙ булмаған, соҡор-саҡырлы. *Ураҡай-сураҡай юл. Ураҡай-сураҡай яр буйы. Урман аша ураҡай-сураҡай һуҡмаҡ үтә.*

**УРАЛА-ҺАРЫЛЫУ** *ҡ.* ‘увиваться, крутиться, вертеться возле кого, чего’. Ситкә китмәй эргәлә йөрөү, уралыу. *Урала-һарыла йөрөй. Урала-һарыла ҡойроҡ болғап китә.* ■ *Тирә-яҡтың иң сая егеттәре, бал тәпәненә ябырылған һағыҙаҡ һымаҡ, беҙҙең [Кендек йәшәгән урамға] тирәгә һырыла. Урала-һарыла ла һемәйеп ҡайтып китә.* М. Кәрим

**УРЫҠ-ҺУРЫҠ** *р.* ‘урывками, изредка, временами’. Әҙ-әҙләп, әллә ниҙә бер. *Урыҡ-һурыҡ ашау. Урыҡ-һурыҡ уҡыу.* ■ *Урыҡ-һурыҡ ишетеүҙәренә ҡарағанда, ололар хәҙерге бәғзе йәштәрҙең күңелһеҙ ҡылыҡтары, хоҡуҡ тәртибен боҙоуҙары хаҡында гәпләшә ине.* Р. Байбулатов. *Урыҡ-һурыҡ, ялҡау ғына ауаз-өн сығарып, пулемёттар татылдап ҡуя.* С. Поварисов. *Урыҡ-һурыҡ ишетелеп ҡалған һүҙҙәрҙән Ҡараһаҡал ... ниндәйҙер Солтангәрәй тигән бәндә килергә тейешлеген аңланы.* Б. Рафиҡов.

**УРЫН-ЕР I** *и. йыйн.*

1) ‘место, местность’. Ер өҫтөнөң билдәле бер урыны. *Урын-ергә барып етеү. Урын-ерҙе алмаштырыу.* ■ *[Ғилмишәриф – Зәһретдинға:] Урын-еренә барып еткәс, кәрәкле кешеһенә күрһәтермен.* Р. Өмөтбаев. *Бик булмаһа, һөйләгән мажараһының урын-ерен, кешеләрен алмаштырып ебәрә [Әхмәҙулла].* З. Ураҡсин. *Йылҡыбай был урын-ерҙе оҡшатып, яр буйында оҙағыраҡ йөрөргә теләһә лә, Зөһрәне күреп ҡалған Аллабирҙе .. уны тирмәгә инергә ҡыҫтай башлай.* «Алдар менән Зөһрә» эпосынан.

2) ‘должный уровень’. Эш-хәлдәге тейешле кимәл. *Урын-еренә еткереп эшләү.* ■ *Семәрләп, урын-еренә еткереп, ысын

*арба, ысын ат кеүек итеп эшләнгән уйынсыҡтар аша, күрәһең, сабый күңелендә уны яһаусыға ҡарата ҡыҙыҡһыныу уянды.* Т. Ғарипова.

3) *диал.* 'постель'. Йоҡлау, ятыу өсөн кәрәкле нәмәләр; түшәк. *Урын-ерҙе йыйыштырыу.* ■ *[Караусат] өҫтөнә сыҡҡансы урын-ер менән тултырылған ине.* Н. Иҙелбай.

**УРЫНЛЫ-УРЫНҺЫҘ** *р.* 'некстати; не к месту'. Маҡсатҡа ярашһыҙ; кәрәкһеҙ. *Урынлы-урынһыҙ кеше һүҙенә ҡыҫылыу.* ■ *Рәхмәт .. үҙенең көләс күҙҙәрен төрлө яҡҡа йүгертеп, ҡулдарын урынлы-урынһыҙ һелтәй башланы.* Ғ. Хәйри. *[Форпостар] ил сиген аша атлап, урынлы-урынһыҙға үтеп-һүтеп йөрөмәһендәр, тыныслыҡты боҙмаһындар тип һалынғандар.* Ғ. Ибраһимов.

**УРЫН-ТУРЫН** *р. диал.* 'тайно'. Кемдән дә булһа йәшерелеп. *Урын-турын аҡса йыйыу. Урын-турын эш башҡарыу.*

**УРЫН-ТЫН** *и. диал. ҡар.* **урын-ер 3.** *Урын-тын бөтә яҡшы ҡаралдынан. Матур итеп йыйыштырылған урын-тын.*

**УРЫП-ЙЫЙЫУ** *ҡ. йыйн.* 'убирать, жать, косить, скашивать хлеба; уборка, жатва'. Көҙ көнө ашлыҡты урыу, йыйып алыу. ■ *Ашлыҡты урып-йыйып алғандан һуң, ҡамылын яндырып, төбө-тамырын тәрән кәҫ аҫтына күмдергәс тә, ҡурпы йәшәреп шыта.* Ш. Янбаев.

**УРЫҪ-УЛАҠ** *и. йыйн. һөйл.* 'рус кешеләре'. *Урыҫ-улаҡты ҡунаҡҡа саҡырыу. Урыҫ-улаҡтарҙың йолаһы.* ■ *Ҡаланан-ниҙән килгән татар, урыҫ-улаҡ булһа, [Имаметдин] кинәнә инде.* Һ. Дәүләтшина. *[Иҫәкәй тархан – Мәмбәтсураға:] Мин дә*

*ошондай өй һалдырам, ҡорҙаш, урыҫ-улаҡтан кәмме ни беҙ, – тине сәмсел ҡиәфәт менән.* Н. Мусин.

**УТ-ҒӘРӘСӘТ** *и. йыйн. ҡар.* **ут-һыу**. *Ут-гәрәсәт үтеү. Ут-гәрәсәт булмаһын. Ут-гәрәсәт касафаты.* ■ *Яңы ҡыуаҡ ҡалҡып, тын алмайынса, егерменсе йыйын йыйылмайса, бикле ята беҙҙең күп эштәр, әйтерһең дә, ут-гәрәсәт үтеп, урау юлдан тура юлға етеп, балҡымаған ерҙә Бабичтар.* Р. Ғарипов.

**УТ-КҮҘ** *и.*

1) ʻпожар, огоньʼ. Янғын, үрт (ут хәүефе хаҡында һөйләгәндә ҡулланыла). *Ут-күҙҙән һаҡланыу. Ут-күҙ сығыу.* ■ *«Йортомдо ут-күҙҙән, йәмәғәтемде яман һүҙҙән һаҡла, Тәңре», – тип теләк теләр ине [Ҡорбангәле*]. М. Кәрим. *Был тирәлә тәртип боҙоу, ут-күҙ менән шаярыу йә бер-береһенә хаслыҡ ҡылыу тигән нәмә юҡ, тирәк төбө – бөтәһе өсөн дә изге ер.* Р. Солтангәрәев.

2) *миф.* ʻдух огняʼ. Ут эйәһе. *Ут-күҙҙән ҡурҡыу.*

**УТ-ҠУҘ** *и. ҡар.* **ут-күҙ**. *Ут-ҡуҙҙан һаҡ булығыҙ!*

**УТ-УСАҠ** *и. йыйн.* ʻочагʼ. Усаҡ-мейес тирәһе. *Ут-усаҡ тирәһендә ҡайнашыу.*

**УТ-УСАҠ ТӘҢРЕҺЕ** *и. миф.* ʻдух огняʼ. Башҡорттарҙың боронғо ун ике тәңреһенең береһе. *Ут эйәһенә май тамыҙыу.* ■ *Боронго төркиҙәрҙә ут-усаҡ тәңреһе булган.* «Башҡорт мифологияһы»нан.

**УТ-ҺЫУ** *и. йыйн.* ʻогонь и водаʼ. Тәбиғәттең ҡапма-ҡаршы ике стихияһы.

▲ **ут-һыу кисеү** ‘*пройти огонь и воду*’. Бик күпте күреү, күпте кисереү. ■ *Хәҙер иһә ул [Марат], донъяның әсеһен-сөсөһөн татып, ут-һыуҙарҙы кисеп ҡайтҡаны бирле донъяның ете йоҙаҡ менән бикле серҙәрен дә ныгыраҡ аңлай башланы.* Ә. Хәкимов. *Сураш – хәҙер ҡырҡты тултырган мыҡты ир, өҫтәүенә, йәшләй ут-һыуҙар кискән яугир ҙа.* Ғ. Хөсәйенов.

**УТ-ӘСӘ** *и. миф.* ‘дух огня’. Башҡорттарҙың боронғо ун ике тәңреһенең береһе. *Ут-әсәне ололау.*

**УТ-ЯЛҠЫН** *и. йыйн.* ‘огонь и пламя’. Ялҡынланып янған ут. ■ *Күк йөҙө ҡара төтөн, ут-ялҡын менән ҡапланды, йылгалар ярҙарынан ташып сыҡты, меңәр йәшлек ҡалын имәндәр тамырҙарынан ҡуптарылып ташландылар.* Б. Бикбай.

**УЯНЫР-УЯНМАҪ** *р.* ‘спросонок, спросонья, в полудрёме’. Уянып етмәйенсә. *Уяныр-уянмаҫ кейенә башлау. Уяныр-уянмаҫ һикереп тороу. Уяныр-уянмаҫ һөйләшеү.*

**УЯУЛЫ-ЙОҠОЛО** *с.* ‘полусонный’. Ярым йоҡоло, уяу менән йоҡо араһындағы. *Уяулы-йоҡоло хәлдә булыу. Уяулы-йоҡоло ятыу.* ■ *Хисамов вагон һикеһендә салҡан төшөп йоҡлап ятҡан еренән ҡапыл тороп ултырҙы ла, уяулы-йоҡоло иләҫ-миләҫ килеп, тирә-ягына ҡаранды.* Н. Мусин. *Ҡәҙриә, уяулы-йоҡоло килеш, нимә булганын төшөнөргә тырышып, күҙҙәрен ыугылаиы.* Т. Ғарипова. *Командир, уяулы-йоҡоло килеш, трубканы алды.* Ә. Бикчәнтәев.

# Ү

**ҮГӘЙ-ҺАҒАЙ** *и. йыйн.* ‘сироты’. Үгәй балалар. *Ғәлим үгәй-һағай айырмай тырышып эшләй ине.* К. Туйкин.

**ҮҘ-АРА I** *с.* ‘взаимный, обоюдный’. Бер-береһенә ҡарата мөнәсәбәттәш. *Үҙ-ара бәхәс. Үҙ-ара дуҫлыҡ һәм ярҙамлашыу тураһында килешеү. Үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе нығытыу. Үҙ-ара ярҙам кассаһы.* ■ *Етенсе «А» класы үҙ-ара ярышта бөтә фәндәрҙән тиерлек алда барһа ла, ниңәлер математиканан ҡалыша ине.* Р. Байбулатов.

**ҮҘ-АРА II** *р.* ‘взаимно, обоюдно’. Бер-береһенә ҡарата мөнәсәбәттәш. Үҙ-ара бүлешеү. Үҙ-ара ҡысҡырышыу. Үҙ-ара һөйләшеү. ■ *Ҡыҙҙар, үҙ-ара ниҙер һөйләшеп, саф тауыш менән шарҡылдашып көлөшәләр.* Һ. Дәүләтшина. *Аҙыраҡ мариса аңлаған йәштәр шарҡылдап көлә, ҡыҙҙар үҙ-ара шыш-быш килә: «Нимә йырланы?»* И. Абдуллин.

**ҮЛЕМ-ЕТЕМ** *и. йыйн.* ‘смерть, разруха, смертность’. Төрлө үлем һәм һәләкәт. *Үлем-етем арҡаһында халыҡтың һаны кәмегән.* ■ *Һыйыр егеп ер һөрөү тиһеңме, арҡаға йөкмәп орлоҡ ташыу тиһеңме, ҡар аҫтынан сыҡҡан башаҡты йыйып ашауҙан килгән үлем-етемдәр тиһеңме – бөтәһе лә булды.* Ф. Чанышева.

**ҮЛЕМ-КИТЕМ** *и. йыйн. ҡар.* **үлем-етем**. *Үлем-китем артыу.*

**ҮЛЕШ-ҠЫРЫЛЫШ** *и. йыйн.*

1) ‘убийства, побоище’. Күмәк үлем, ҡырылыш. ■ *Һуғыштан һуң тормош бөтөнләй башҡаса ағыр, донъя*

*яуызлыҡтан, бысраҡлыҡтан арыныр, гел ыңғай торор, үлеш-ҡырылыш, бер-береңә дошманлыҡ хисе юҡҡа сығыр төҫлө ине.* Р. Байымов. *Ундағы үлеш-ҡырылыш бик яман булған.* Я. Хамматов.

2) *перен.* 'давка, толкотня'. *күсм.* Этеш-төртөш, ҡыҫылыш. *Бөгөн касса янында хоккейға билет өсөн үлеш-ҡырылыш.*

**ҮПКӘ-БАУЫР** *и. йыйн.* 'внутренности убойного скота, ливер'. Һуйған малдың йөрәк, үпкә, бауыры. *Үпкә-бауыр ашағым килә. Үпкә-бауыр тултырмаһы. Үпкә-бауыр бәлеше.* ■ *Ташбулат ағайҙың бисәһе Сабира еңгә үпкә-бауыр килтергән.* С. Агиш.

**ҮРЛЕ-ҠЫРЛЫ** *р.* 'то вверх, то в стороны'. Үргә лә, ҡырға ла; төрлө яҡҡа. *Шатлығынан үрле-ҡырлы һикерҙе.* ■ *Емеш, ҡыуанысынан ни эшләргә белмәй, үрле-ҡырлы һикеренде.* З. Биишева. *Иң әүәл малайҙар, йылға өҫтөндә осоп йөрөгән самолётты күреп ҡалып, үрле-ҡырлы һикерергә тотондолар.* Ә. Бикчәнтәев.

**ҮРЛЕ-ТҮБӘНЛЕ** *р.* 'то вверх, то вниз'. Бер үргә, бер түбәнгә. *Үрле-түбәнле осоу. Үрле-түбәнле йөрөү. Үрле-түбәнле ҡарау.* ■ *Кемдәрҙер урамда, шарт-шорт ат тояҡтары тауышы сығарып, үрле-түбәнле саба.* Т. Хәйбуллин. *Туғаҙаҡтың турғай башы тиклем боғаҙ төйөнө үрле-түбәнле һикергеләп алды.* Т. Килмөхәмәтов.

**ҮРЛЕ-ТҮРЛЕ** *р.* 'туда-сюда, взад-вперёд'. Бер түргә, бер ирегә. ■ *Ғәлиәкбәров, икеләнеп байтаҡ үрле-түрле йөрөгәс, башта телефон аша һөйләшергә тигән ҡарарға килде.* Х. Зарипов.

*Иван Григорьевич иркен ҡунаҡ залы буйлап байтаҡ үрле-түрле йөрөнө.* Ғ. Хөсәйенов.

**ҮТЕП-ҺҮТЕП ЙӨРӨҮ** *ҡ.* 'ходить туда-сюда'. Тегеләй-былай үтеп йөрөү. ■ *Үтеп-һүтеп йөрөгән кешеләрҙе күҙәтеп, бер урында оҙаҡ баҫып торҙом.* Д. Юлтый. *Шул саҡ подъезда үтеп-һүтеп йөрөүселәрҙең аяҡ тауыштары, ниндәйҙер шау-шыу ишетелде.* Р. Байбулатов.

**ҮТКӘН-БАРҒАН** *и.* 'проезжий и прохожий'. Үтеп, китеп барған; уҙған-барған. ■ *[Мин – Йәнтимергә:] Аҡылың менән генә әйт. Ни ашап торорһоң? Урамға сығып, үткән-барғандан хәйер һорашырһыңмы?* С. Агиш. *Үткән-һүткәндең осо-ҡырыйы юҡ та, исмаһам, бер таныш әҙәм күҙгә салынһа икән.* Г. Яҡупова.

**ҮТКӘН-СҮТКӘН** *с. ҡар.* **үткән-һүткән**. *Үткән-сүткән кеше. Үткән-сүткән халыҡ.*

**ҮТКӘН-ҺҮТКӘН** *с.* 'всякий, проезжий, прохожий'. Юлаусы, үтеп барыусы, үткенсе. ■ *Билал, урамға сыҡҡас, үткән-һүткән халыҡты ҡарарға сыҡҡан кеше кеүек, бер аҙ туҡтап, ҡарап торҙо.* А. Таһиров. *Ул арала инде фабрика эшселәре генә түгел, үткән-барған кешеләр ҙә бик күп йыйылғайны.* Х. Мохтар.

**ҮТКӘН-ҺҮТКӘНДӘ** *р.* 'мимоходом, попутно, по пути, проездом'. Тегендә-бында йөрөгәндә, үтешләй. ■ *Асия элек үткән-һүткәндә генә өҙҙөрөп бер ҡарап ала ла үҙ юлына китә лә бара ине.* Ә. Байрамов.

# Ф

**ФИҒЕЛ-ҠЫЛЫҠ** *и. йыйн.* ‘характер, нрав’. Ҡылык, холоҡ. *Фиғел-ҡылығы матур.* ■ *Бына ошо хәл [донъялағы үҙгәрештәргә өлгөрөргә кәрәклек], ҡеүәтле шарлама һымаҡ, кешенең уйын да, фиғелен-ҡылығын да, тойғо-хистәрен дә – һәммәһен дә өйрөлдөрә-өйрөлдөрә үҙенә тартып индерә.* А. Мағазов.

**ФИҒЕЛ-ХОЛОҠ** *и. йыйн. ҡар.* **фиғел-ҡылыҡ.** ■ *Йәшәү шарттары көндән-көн үҙгәрә, талап та ҡатылана, кеше киләсәккә күҙ төбәп, өмөтөн өҙмәй алға бара, әҙәмдең эсе-тышы менән бергә телмәре, аң даирәһе, фиғел-холҡо ла үҙгәрә, һөйләше беҙҙә лә сит-ят һүҙҙәр күберәк яңғырай.* «Ашҡаҙар».

**ФӘЛӘН-ТӨГӘН** *билдһ. а.* ‘такой-сякой, то да сё’. Нимәнелер теҙеп һанап китеү йәки кеше һүҙен тотош ҡабатлау урынына ҡыҫҡартып әйткәндә ҡулланыла. ■ *Идаралыҡта, фәлән-төгән эштәр эшләнмәне, тип һөйләнеп йөрөмәһендәр аҙаҡтан.* Н. Мусин. *Гәзит мәҡәләләрендәге кеүек, теге ере килмәгән, был ере өлгөрөп етмәгән, фәлән-төгән тип, пыран-заран килтерергә тотонор тип көткәйнем.* Яр. Вәлиев.

**ФӘЛӘН-ФӘСМӘТӘН** *билдһ. а. ҡар.* **фәлән-төгән**. ■ *[Таймаҫ:] Һин, Юлдыбай, миңә фәлән-фәсмәтән тигән булып, өҫтән һыйпауыңды ҡуй әле.* Һ. Дәүләтшина.

**ФӘҠИР-ФОҠАРА** *и. йыйн.* ‘бедняки, беднота, неимущие’. Ярлылар, ярлы-ябаға. ■ *Фәҡир-фоҡара, үҙ алдына йәшәп, бер иркен тын алып ҡалыр ине.* Р. Өмөтбаев. *Үҙ рәте бөткәс, фәҡир-фоҡараға ярҙам итеүҙе һорап, Кинйә атаһына ялбарҙы.* Ғ. Ибраһимов. *Ауыл халҡы икегә бүленгән. Бер яҡта –*

*байҙар, муллалар, уларҙың ҡуштандары; икенсе яҡта – фәҡир-фоҡара, юҡһылдар.* И. Ғиззәтуллин.

## Х

**ХАЙРАН-ВАЙРАН БУЛЫУ** *ҡ.* ʻпогибнутьʼ. Ҡыйралыу, һәләк булыу. ■ *Ошо көнгәсә кәзә кимереп бөтөргән ялангас емеш-еләк ҡыуаҡтары һерәйеп ултырған әллә күпме гектар ерҙәр хайран-вайран булып ята бирҙе.* Ф. Рәхимғолова.

**ХАҠ-НАХАҠ** *и. йыйн.* ʻправда и кривдаʼ. Дөрөҫлөк һәм ялғанлыҡ. *Хаҡ-нахаҡ һөйләү. Хаҡ-нахаҡты айырыу.* ■ *Яҙманы ентекләберәк уҡып, уның хаҡ-нахағын айырырға, иҫбат ителмәҫтәй урындарын табырға кәрәк ине уға [Мәҙинәгә].* Ә. Хәкимов. *[Ҡотой:] Ауылдаштар, хаҡ-нахағығыҙҙы Хоҙай үҙ бизмәненә һалыр әле. Хуш, Мәғҙән иле, хәтерҙән сыҡмаҫһығыҙ инде!* Р. Камал.

**ХАПЫР-ХОПОР** *оҡш. диал. ҡар.* **шапыр-шопор**. *Хапыр-хопор сәй эсеү.* ■ *Ҡарт ... ашты хапыр-хопор бер-ике ҡалаҡ ҡапҡылаы ла кейенә башланы.* Б. Бикбай.

**ХАТ-ХӘБӘР** *и. йыйн.* ʻвести, известияʼ. Хат йәки башҡа юл менән ишеттерелгән һүҙ, хәбәр. ■ *Миңлебайҙың фронттан хат-хәбәре һирәк-һаяҡ ҡына килеп торҙо.* В. Исхаков.

**ХАТ-СӘЛӘМ** *и. йыйн.* ʻвести, известияʼ. *Офоҡтарға йыш күҙ һалаһыңдыр, күренмәҫме минең улым, тип, юлсыларға ҡарап ҡалаһыңдыр, хат-сәләме юҡмы уның, тип, бәлки, ҡайтыр тиҙҙән улым, тип.* Р. Назаров.

**ХОЛОҠ-ФИҒЕЛ** *и. йыйн.* ‘характер, нрав’. Төрлө ҡылыҡ һәм ғәҙәт. ■ *[Бабай:] Ғәйепләштән булмаһын, кем, Зиннур, балыҡ тотор өсөн дә уның холлоҡ-фигелен белеп эш итергә кәрәк.* Ә. Вахитов. *Һәр әҙәмдең үҙ холоҡ-фиғылы, хатта гилләһе бар.* Ғ. Хөсәйенов.

**ХӨРМӘТ-ҺЫЙ** *и. йыйн.* ‘угощение’. ■ Ҡунаҡ өсөн әҙерләнгән һәр төрлө һый; һый-хөрмәт. *Төндәр буйы хөрмәт итә [Төлкө] ҡоҙаһын, ҡоҙағыйын … теҙеп ҡуя өҫтәл тулы ҡиммәтле хөрмәт-һыйын.* Х. Кәрим.

**ХӘБӘР-ХӘТЕР** *и. йыйн.*

1) ‘всякие вести, известия, сведения, новости’. Хәл-әхүәл тураһында һүҙ; төрлө хәбәр. *Хәбәр-хәтер ишетеү.* ■ *Һаман бер кем дә күренмәй, үҙе лә юҡ, башҡаларҙан да хәбәр-хәтер ишетелмәй.* Ә. Бикчәнтәев. *Әхмәтйән менән Хәкимйән тураһында шул китеүҙәренән хәбәр-хәтер булманы.* Ә. Хәкимов.

2) ‘письмо’. Яҙма хәбәр, хат. *Хәбәр-хәтер ебәреү.* ■ *Ғилмиярҙан бөтөнләй хәбәр-хәтер булманы.* С. Агиш. *Ҙур сумаҙанын күтәреп килеп ингәс, өйҙәгеләр тәүҙә аптырап ҡалды: бер ниндәй хәбәр-хәтерһеҙ ҡайтып төшкәйне шул Ғайса.* Н. Мусин.

**ХӘБӘРҺЕҘ-НИҺЕҘ** *р.* ‘без вести, без предупреждения’. Хәбәр итмәйенсә. ■ *Буранбай хәбәрһеҙ-ниһеҙ генә төнләтеп ҡайтҡайны.* Р. Мифтахов. *Биксәнтәйҙең өлкән көтөүсеһе хәбәрһеҙ-ниһеҙ ғәйеп булды ла ҡуйҙы.* И. Ноғманов. *Туй табыны ҡыҙған мәлдә генә хәбәрһеҙ-ниһеҙ Ғайсаһы ҡайтып төштө.* И. Ғиззәтуллин.

**ХӘЙЕР-САҘАҠА** *и. йыйн.* ‘подаяние, милостыня; пожертвование’. Дини йола буйынса Алла исеменә доға ҡылдырып биргән төрлө саҙаҡа. *Хәйер-саҙаҡа биреү. Хәйер-саҙаҡа таратыу. Хәйер-саҙаҡа биреп тороу.* ■ *Шәрғиә генә һаман балаһыҙ. Хәйер-саҙаҡа биреп, яңғыҙ ҡалғанда алғышлап-алғышлап Хоҙайға күпме ялбармаһын, ҡарыны буш.* Ә. Хәкимов.

**ХӘЙЕР-ФАТИХА** *и. йыйн.* ‘благословение’. Ризалыҡ биреп ҡылған доға, фатиха. *Хәйер-фатиха алыу.* ■ *Һеҙҙең хәйер-фатихағыҙ арҡаһында иҫән-һау йөрөп, һеҙҙә инде бына икенсе тапҡыр дин байрамы – ҡорбан ғәйетен үткәрәбеҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**ХӘЛ-ВАҠИҒА** *и. йыйн.* ‘случай, происшествие’. Тормошта була торған һәр төрлө ваҡиға. *Ижтимағи тормошҡа бәйле булған хәл-ваҡиға. Ғибрәтле хәл-ваҡиға. Тарихи хәл-ваҡиға. Хәл-ваҡиғаны асыҡлау.* ■ *[Азаттың] тормошо сыбар, һикәлтәле хәл-ваҡиғаларға, көйөнөс-һөйөнөстәргә бай.* Т. Ғарипова.

**ХӘЛ-ТОРОШ** *и. йыйн.* ‘ситуация, жизненные обстоятельства’. Тормоштағы төрлө хәл-ваҡиғалар, шарттар. *Илдәге хәл-торош. Республикалағы хәл-торош. Бәхәсле хәл-торош. Хәл-торош менән таныштырыу.*

**ХӘЛҺЕҘ-БЫУЫНҺЫҘ** *с.* ‘слабый, бессильный’. Көс-хәле самалы; көсһөҙ. *Хәлһеҙ-быуынһыҙ бала. Хәлһеҙ-быуынһыҙ кешеләй. Хәлһеҙ-быуынһыҙ ҡарт.*

**ХӘЛ-ӘХҮӘЛ** *и. йыйн.*

1) ʻжитье-бытьеʼ. Тормош, көнкүреш хәлдәре. ■ *Соня табын әҙерләй, Сергей менән әсәһе бөтә хәл-әхүәл тураһында һөйләшәләр.* Ф. Рәхимғолова.

2) ʻсостояние, здоровьеʼ. Кешенең хәле; иҫәнлек-һаулыҡ. *Яҡшы хәл-әхүәл. Балаларҙың хәл-әхүәле. Хәл-әхүәл һорашыу.* ■ *Көндәрҙең бер көнөндә Ҡарабай, үҙ иптәштәре менән Сарыбай ауылына барып, уның хәл-әхүәлен белешергә булған.* Халыҡ ижадынан.

**ХӘҮЕФ-ХӘТӘР** *и. йыйн.* ʻразные происшествия, случаи, опасность, угроза *чего*ʼ. Һәр төрлө ҡурҡыныс хәл; бәлә-ҡаза, бәхетһеҙлек. ■ *Бирешмәсе, зинһар, бирешмәсе. Яҙыла күр инде, әсәйем! Тағы ла бер аҙ һинең ышығыңда хәүеф-хәтәр күрмәй йәшәйем!* М. Кәрим.

**ХӘҮЕФ-ХӘТӘРҺЕҘ** *с.* ʻбезопасныйʼ. Хәүеф-хәтәре булмаған, тыныс. *Хәүеф-хәтәрһеҙ урын.*

## Һ

**ҺАҠАЛ-МЫЙЫҠ** *и. йыйн.* ʻборода и усыʼ. Һаҡал һәм мыйыҡ. *Бай Оморҙаҡты танымаған. Уны һаҡал-мыйыҡ баҫып бөткән булған.* Әкиәттән.

**ҺАЛАМ-ТОРХАН** *и. һөйл.* ʻхлам, барахлоʼ. Иҫке, насар әйбер, сүп-сар. *Балаҡайым, ишек алдындағы һалам-торханды өйөп ҡуй әле.*

**ҺАЛП-ҺОЛП** *оҡш.* ʻвыражает движение вверх-вниз, вправо-влевоʼ. Аҫҡа-өҫкә, уңға-һулға ауыр сайҡалғанды белдергән һүҙ. *Һалп-һолп атлау.*

**ҺАНДА-ҺАЯҠ** *р.* ʻизредка, иногдаʼ. Әллә ниҙә бер; бик һирәк. *Һанда-һаяҡ осрау.* ■ *Азаттың тауышы һанда-һаяҡ сығып ҡала.* «Ағиҙел» журналынан.

**ҺАРЫҠ-КӘЗӘ** *и. йыйн.* ʻовцы и козы, мелкий скотʼ. Ваҡ мал. ■ *Әбей һарыҡ-кәзә аҫырап көн күргән, ти.* Әкиәттән. *Күп тә үтмәй, урамда һалмаҡ ҡына мал тояҡтары тып-тып килде, һарыҡ-кәзәләр баҡырышты, яҡын-тирәлә ҡапҡалар шығырлап асылды.* Р. Байбулатов.

**ҺАТЫУ-АЛЫУ** *и. йыйн.* ʻкупля-продажаʼ. Сауҙа эше. ■ *Ҡайһы бер аҡһаҡалдар, һатыу-алыу шарты, хаҡтары менән килешмәйенсә, бер аҙ шаулашып, бәхәсләшеп булаштылар.* Ғ. Хөсәйенов.

**ҺАУ-СӘЛӘМӘТ** *р.* ʻжив-здоровʼ. Һау һәм сәләмәт; имен, иҫән-һау. *Һау-сәләмәт булығыҙ!* ■ *Ил башында ултырған түрә һау-сәләмәт саҡта һәм бигерәк тә үҙе өйҙә ваҡытта рөхсәтһеҙ-ниһеҙ бүтән кешегә ситтән илселәр килеп йөрөүе эш түгел инде ул!* К. Мәргән.

**ҺАУЫТ-ҺАБА** *и. йыйн.* ʻпосудаʼ. Аш-һыу әҙерләү, һаҡлау һ.б. өсөн ҡулланылған һауыттар. ■ *Тирмәнең кирәгә, сағараҡтары, кейеҙҙәре нығытып тейәлгән пар аттар егелгән биш-алты йөк, уның артынан һауыт-һаба, урын-ер, эшсе ҡатындар бала-сағалары менән теҙелешеп ултырған тағы бер нисә йөк килде.* Һ. Дәүләтшина. *Сәйҙән һуң Ғәйшә әбей һауыт-һабаны йыйып, аш өйөнә сығырға ашыҡты.* З. Биишева.

**ҺАУЫТ-ҺАБА ЙЫУЫУСЫ** *и.* ʻпосудомойщица, судомойкаʼ. Дөйөм туҡланыу урындарында һауыт-һаба

таҙартыу эше менән шөғөлләнгән кеше. ■ *Кафеға һауыт-һаба йыуыусылар талап ителә. Әсәйем ашханала һауыт-һаба йыуыусы, аҙаҡ ашнаҡсы булды.* «Юшатыр» гәзитенән.

**ҺАУЫТ-ҺАЙМАН** *и. диал. ҡар.* **һауыт-һаба**. ■ *Татлыбай ыҫлаған тиренән төрлө аяҡ кейеме, һаба, ботлоҡ … турһыҡ кеүек һауыт-һаймандар … яһарға өйрәнде.* Ш. Шәһәр.

**ҺИҘЕЛЕР-ҺИҘЕЛМӘҪ** *р.* ‘еле заметно, еле уловимо, едва ощутимо’. Асыҡ, анығ булмаған, һиҙелмәҫ; беленер-беленмәҫ. ■ *Әминә тағы өндәшмәне, һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә башын сайҡап ҡуйҙы.* Р. Байымов. *Томандан шыйыҡ болоттар аша йондоҙҙар һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә емелдәшәләр.* Ә. Бикчәнтәев.

**ҺИНЕКЕ-МИНЕКЕ** *эйл. а.* ‘твоё-моё’. Нимәнелер бүлеп, айырып ҡарауҙы аңлата. ■ *[Хөрмәт – Ямаҡаевҡа:] Мәктәп менән ғаилә араһында һинеке-минеке юҡ.* Яр. Вәлиев.

**ҺИРӘК-МИРӘК I** *р.*

1) ‘изредка, нет-нет да и, время от времени’. Бик һирәк, йыш түгел. ■ *Күршеләрҙең Шариғы һирәк-мирәк сәңгелдәп ҡуя.* И. Абдуллин. *Ватыҡ тәҙрәнән ел өрә, һирәк-мирәк ҡыҙыҡайға ямғыр тамсылары килеп эләгә.* Д. Бүләков.

2) ‘там и тут, там-сям’. Тегендә-бында, һирәклэп. ■ *Ҡайһылары элекке йылда мал тапағанда ҡойолған орлоҡтан һирәк-мирәк кенә һерәйеп үҫкән арыш башаҡтарын йыйып ыуҙылар.* Ғ. Ибраһимов.

**ҺИРӘК-МИРӘК II** *с. ҡар.* ‘редкий.’ Бер-береһенән алыҫ, аралыҡлы урынлашҡан; ҡуйы түгел. ■ *Йорт һирәк-мирәк ҡарағай ағастары менән уратылған.* З. Биишева. *Ҡайһы бер*

*ботаҡтарҙа һирәк-мирәк ҡып-ҡыҙыл алмалар аҫылынып тора.* Р. Ғабдрахманов.

**ҺИРӘК-ҺАРАҠ** *р. диал. ҡар.* **һирәк-һаяҡ**. ■ *Ҡыҙ ниңәлер шат кеүек күренмәй, һирәк-һараҡ ауыр ғына һулап ҡуя.* Ғ. Хәйри.

**ҺИРӘК-ҺАЯҠ** *р. ҡар.* **һирәк-мирәк I.** ■ *Малай һирәк-һаяҡ селектәр менән генә ҡапланған ялanғас тауға атаһының нисек күтәрелеүен күҙәтергә кереште.* Р. Байбулатов. *Һирәк-һаяҡ төҫһөҙ генә йондоҙҙар ҙа ҡалҡып сыҡты.* З. Биишева. *Председатель һирәк-һаяҡ сал инә башлаған һары мыйығы аҫтынан йылмайҙы.* Б. Дим. *Көтөү, ошо тынлыҡҡа сумған һымаҡ, өйөр айғырының һирәк-һаяҡ ушҡырыуынан бүтән тауыш сығармай.* Һ. Дәүләтшина.

**ҺИРӘК-ҺАЯҠЛАП** *р.* 'изредка, иногда.' Әллә ниҙә бер, йыш түгел. ■ *Мөхәмәтша тағы, һирәк-һаяҡлап булһа ла, талсыҡҡан тәнгә көс-кеүәт биргән туҡлыҡлы һарына ҡаҙып ашаштырғылай.* И. Ноғманов. *Ҡырыҫ, тупаҫыраҡ окоп тормошо үҙенең бер төрлөлөгө менән нисек кенә ялҡытмаһын, бында ла һирәк-һаяҡлап күңелле минуттар ҙа була торғайны.* Д. Исламов.

**ҺӨНӘР-ҮНӘР** *и. йыйн.* 'всякое мастерство, разные ремесла'. Төрлө һөнәр. ■ *Йәш елкенсәк нисек итеп бил быуғанын айҡап-байҡап тора күпте күргән ҡарттар. Һөнәр-үнәр шул ҡарттарҙан ҡала беҙгә ҡалған һымаҡ ерҙә изге аманаттар.* М. Илбаев.

**ҺӨРӘН-ҠЫЙҠЫУ** *и. йыйн.* 'шум-гам, разные громкие голоса'. Ҡысҡырышҡан көслө тауыш. ■ *Фашистарҙың күбеһе*

*иҫерек, үҙҙәре тәртипһеҙ рәүештә һөрән-ҡыйҡыу ҡысҡыралар.* Ж. Кейекбаев.

**ҺӨТ-ҠАТЫҠ** *и. йыйн.* ‘молочные продукты’. Һөттән яһалған төрлө аҙыҡ. *Магазиндан һөт-ҡатыҡ алып ҡайтырһың әле.*

**ҺҮҘ-МАҘАР** *и. йыйн.* ‘разные новости, слухи, разговор (о чем-то)’. Төрлө һүҙҙәр, хәбәр. ■ *[Фатима:] Ҡарлуғас, әйҙә ҡайтайыҡ инде... үҙеңдән дә кеше көлмәһен, беҙгә лә һүҙ-маҙар теймәһен.* Б. Бикбай.

**ҺЫЙ-ХӨРМӘТ** *и. йыйн.*

1) ‘угощения, лакомства’. Ҡунаҡты ҡәҙерләп ашатыу-эсереү өсөн әҙерләнгән аҙыҡ-түлек. *Һый-хөрмәт әҙерләү.* ■ *Йырлайыҡ беҙ был яңы йылда, һый-хөрмәт мул булһын табында.* Н. Иҙелбай. *Юлда ҡара янып тигәндәй килеп ингән үҫмерҙе күргәс, күрше апай, ҡәҙерле ҡунаҡты ҡаршылаған һымаҡ, ихлас һый-хөрмәт әҙерләргә керешеп китте.* Р. Байбулатов. *Ҡунаҡтар һый-хөрмәт көтәләр.* Әкиәттән.

2) ‘почёт и уважение’. Ҡәҙер-хөрмәт. *Һый-хөрмәткә лайыҡ. Һый-хөрмәттән күңеле булды.* ■ *Эйе, оло балалары тыуған йорт юлына туҙан төшөрмәне, әсәләрен һый-хөрмәттән өҙмәнеләр.* Н. Ҡотдосов.

**ҺЫЙ-ХӨРМӘТ ИТЕҮ** *ҡ.* ‘угощать, оказывать почёт’. Ҡәҙерләп ашатыу-эсереү, хөрмәтләп ҡунаҡ итеү. ■ *Рахманғол килгәндә, Ғариф, яҙыу-һыҙыу эше бөткәс, билдәле, һикегә көрәгә менән бал килтереп ултырта, һый-хөрмәт итә.* Ж. Кейекбаев.

**ҺЫЙ-ХӨРМӘТ КҮРҺӘТЕҮ** *к. ҡар.* **һый-хөрмәт итеү**. *Ҡунаҡтарға һый-хөрмәт күрһәтеп йоҡларға һалғас, Юламан менән Барса тағы икәүҙән-икәү генә ҡалдылар.* Б. Рафиҡов.

**ҺЫЛАП-ҺЫЙПАП** *р.*

1) ʻбережливо *(по отношению к одежде и т. д.)*ʼ. Һаҡлап, ҡәҙерләп тотоноу (кейем-һалымға һ.б. ҡарата). ■ *Таиба әбей китаптарҙы, һаҡлыҡ менән берәм-берәм ҡулына алып, һылап-һыйпап ҡарай-ҡарай, урындыҡҡа теҙә барҙы.* З. Биишева.

2) ʻзаботливо, любяʼ. Яратып, һөйөп, һылап-һыйпап үҫтереү. ■ *Баланың бит һылап-һыйпап буйын ғына үҫтерәһең, аҡылын үҫтермәйһең шул!* Т. Сәғитов. *Мәҙинә Бөйрәкәйен һылап-һыйпап йыуыуын белде.* Т. Ғарипова.

3) *перен.* ʻобманывая, вводя в заблуждение *кого*ʼ. *күсм.* Хәйләләп, хәйлә менән. *Һылап-һыйпап оҙатыу.* ■ *[Исламғәле] бер көн бер аулаҡ ҡына ваҡыт ҡарап торҙо ла, ҡыҙын саҡырып алып, һылап-һыйпап яйын тартып ҡараны.* И. Насыри.

4) заваливая, заметаяʼ. Күмеп, ҡаплап. ■ *Хәҙер теге юлсының эҙҙәрен ҡар саңдар өйөрмәһе урыны-урыны менән һылап-һыйпап та ҡуйған.* Р. Байбулатов.

**ҺЫН-БУЙ** *и. йыйн.* ʻвнешний облик, фигура, станʼ. Һын һәм буй. ■ *[Гөлнур:] Уҡытыусы кешегә оҙон толомло сәс килешә ул. Йөҙөнә, һын-буйына ла үҙенә бер һомғоллоҡ бирә.* М. Тажи.

**ҺЫН-ҺЫПАТ** *и. йыйн. ҡар.* **һын-буй.** ■ *[Таймаҫ – Юлдыбайға:] Нишләп һин шул ҡатынды алдың, әйт әле? Ул һыны-һыпаты менән һиңә ҡул кеше түгел.* Һ. Дәүләтшина.

**ҺЫНЫҠ-МЫНЫҠ I** *с.* ʻсломанный, треснувшийʼ. Һынып, ватылып бөткән. *Һыныҡ-мыныҡ көрәктәр, һыныҡ-мыныҡ таяҡтар. Һыныҡ-мыныҡ тырмалар.*

**ҺЫНЫҠ-МЫНЫҠ II** *и. йыйн.* ‘объедки, куски (хлеба)’. Ҡалдык-боҫток икмәк. *Һыныҡ-мыныҡ ашау. Һыныҡ-мыныҡ менән туҡланыу. Һыныҡ-мыныҡты йыйып барыу.*

**ҺЫУ-ҺҮЛ** *и. йыйн.*

1) ‘половодье, разлив’. Яҙғы ташҡын һыу. *Яҙғы һыу-һүл. Һыу-һүл ваҡыты.* ■ *Байтаҡ бала йөрөп уҡығанлыҡтан, яҙғы каникулды һыу-һүл ваҡытында яһайҙар.* Н. Мусин.

2) ‘водоем’. Йыйылып йәки ағып ятҡан һәр төрлө һыу, төрлө йылға, күл. *Был ике быҙау һис һыу-һүлгә эләкмәй… Уралға барып сыҡҡан.* “Ҡуңыр буға” эпосынан.

**ҺӘЛПӘН-ҺӨЛПӘН** *р.* ‘покачиваясь, вразвалку, вперевалку’. Кәүҙәне уңға-һулға ташлап, ауыр итеп (атлау). ■ *[Иҙеүкәй:] Ҡатындай булып ҡайтмамын, һәлпән-һөлпән йөрөрмөн.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосынан. *[Ерән алабайҙың] һәлпән-һөлпән йүгереүенән, иңкәйгән арҡаһынан эт уның уҫал уй менән йөрөгәнен һиҙемләп алды.* Й. Мостафин.

**ҺӘЛПӘН-ҺӨЛПӘН ИТЕҮ** *ҡ.* ‘шагать вразвалку’. *Һәлпән-һөлпән итеп атлау. Һәлпән-һөлпән итеп йөрөү.*

**ҺӘЛТЕР-ҺӨЛТӨР** *оҡш. диал.* ‘подражание громыханию, перестуку, вращающегося твердого предмета’. Ҡаты нәмә бәрелеп-һуғылып әйләнгәндә, тәгәрләгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Һәлтер-һөлтөр эшләү. Һәлтер-һөлтөр йөрөү. Элекке паровоз һәлтер-һөлтөр генә йөрөй ине.*

**ҺӘЛӘН-ТӨГӘН** *билдһ. а. диал. ҡар.* **фәлән-төгән**. *Һәлән-төгән кеше. Һәлән-төгән эш эшләп йөрөү.*

**ҺӘЛӘН-ҺӘСҠУН** *билдһ. а. диал. ҡар.* **фәлән-төгән**. *Һәлән-һәсҡун әтрәгәләм. Һәлән-һәсҡундың туғаны, һәлән-һәсҡун ерҙән килгән, ти.*

**ҺӘНӘК-ТЫРМА** *и. йыйн.* ʻвилы и граблиʼ. Бесән йыйыу өсөн эш ҡоралдары. ■ *Кешеләрҙән артта һәнәк-тырмалары, ҡаралтылары һәм башҡа нәмәләр тейәлеүле ылауҙар эйәрҙе.* Я. Хамматов. *Эшкә инган бөтә кеше салғы тотоп, һәнәк-тырма өҫтөрәп, әрәмәлектәргә таралды*. Г. Яҡупова.

**ҺӘШ-ТИРГӘ** *саҡ.* ʻвозглас, которым гонят коровʼ. Һыйыр ҡыуғанда әйтелә торған һүҙ. *Һәш-тиргә, малҡай*!

**ҺӘШ-ТҮКӘ** *саҡ.* ҡар. **һәш-тиргә.** *Һәш-түкә, һыртаҡ һыйыр!*

## Ш

**ШАБЫР-ШОБОР** *оҡш.*

1) ʻподражание частому дробному стуку дождяʼ. Йыш һәм шәп яуған ямғырҙың тауышын белдерә. ■ *Шабыр-шобор ямғыр яуа өй башы ҡалайҙарға.* Халыҡ йырынан.

2) ʻподражание шумному плеску или шумному стеканию водыʼ. Һыуҙың көслө шапылдауын йәки ағыуын белдергән һүҙ. ■ *Улар [малайҙар] шунда уҡ бер-бер артлы шабыр-шобор һыуға һикерештеләр.* Р. Ғабдрахманов.

**ШАҒЫР-ШОҒОР** *оҡш.* ʻподражание ритмичному скрипу *(двери, телеги, снега под ногами)*ʼ. Ҡат-ҡат шағырлаған тауышты белдергән һүҙ. *Шағыр-шоғор итеү.* ■ *Төш ауыуға урам ҡапҡаһы шағыр-шоғор асылып китте.* З. Биишева. *Аяҡ аҫтында*

*ҡырпаҡ ҡар ғына шағыр-шоғор шығырлай ине.* Яр. Вәлиев. *Шағыр-шоғор баҙ ауыҙы асылды.* Р. Ғабдрахманов.

**ШАЖ-ШОЖ** *оҡш.* ‘подражание шипению при попадании воды, масла на раскалённый камень, металл’. Ҡабат-ҡабат шаж иткән тауышты белдергән һүҙ; саж-сож. ■ *Ләүкәлә ах-ух килеп оло түшкәләй ятҡан берәүҙе шапылдығын сығарып сабалар, миндек, пар тауыштары шаж-шож килеп тора.* Ғ. Хөсәйенов.

**ШАЙМА-ШАЙ** *диал.* ‘нагло, бессовестно’. Тартына, ояла белмәгән рәүештә, намыҫһыҙ. *Шайма-шай әйтешеү. Ололар менән шайма-шай һөйләшеү.*

**ШАҠТОР-ШОҠТОР** *ымл. диал. ҡар.* **шатор-шотор**. *Шаҡтор-шоҡтор килеү. Шаҡтор-шоҡтор итеп ҡалыу.*

**ШАҠЫЙ-ШОҠАЙ** *и. диал. ҡар.* **шаҡы-шоҡо.** *Шаҡый-шоҡай һатып алыу. Иҙәндә шаҡый-шоҡайҙар аунап ята. Шаҡый-шоҡай менән өй тулған.*

**ШАҠЫР-ШОҠОР** *оҡш.* ‘подражание шуму, треску от трения твёрдых предметов’. Ҡаты, ҡытыршы нәмә өҫтөндә шундай уҡ ҡаты нәмәне йөрөткәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шаҡыр-шоҡор итеү. Шаҡыр ҙа шоҡор килеү.* ■ *Дуғаға беркетелгән еҙ ҡыңғырау сыңғырҙаны, тәгәрмәстәр шаҡыр-шоҡор килде.* Я. Хамматов.

**ШАҠЫ-ШОҠО I** *и. йыйн.* ‘мусор, всякая всячина’. Йыйын ваҡ-төйәк нәмә; ҡый-һай. *Шаҡы-шоҡо йыйыу.* ■ *Морат фургон ишеген асып ҡараны ла танауын сирыштырып ебәрҙе – эсе бысраҡ, шаҡы-шоҡо аунап ята.* Р. Солтангәрәев. *Рияз сепрәк-*

*сапраҡ һәм башҡа шаҡы-шоҡоно байтаҡ тултырғайны.* Ғ. Хисамов. *Ата сыйырсыҡ оя яһау өсөн шаҡы-шоҡо ташыны, ә инә сыйырсыҡ оя яһаны.* З. Хисмәтуллин.

**ШАҠЫ-ШОҠО II** *оҡш. ҡар.* **шаҡыр-шоҡор**. ■ *Ул арала конвоирҙар, шаҡы-шоҡо килеп, вагон ишектәрен астылар.* Ә. Байрамов.

**ШАМБЫР-ШОМБОР** *оҡш.* 'подражание многократным звукам бултыхания чего-либо бултых'. Ҡабат-ҡабат шамбыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шамбыр-шомбор итеп ҡалыу. Балалар һыуҙа шамбыр ҙа шомбор килә.*

**ШАМТЫ-ШОМТО** *и. йыйн. диал.* 'тряпье, старье'. Иҫкергән, туҙған кейем-һалым. *Шамты-шомто өй тулы.*

**ШАН-ШӘРӘФ** *и. йыйн. ҡар.* **шан-шәүкәт**. ■ *Йөрәк ҡағып, тупылдап сапҡан аттарға, тояҡтарынан ут сәсрәтеп уҙышыусы саптарҙарға, таң атҡанда йыһат өсөн яу сапҡан арғымаҡтарға, күкте саң менән ҡаплаған йылҡыларға, дошман өйөрөнөң уртаһына бәреп ингән юрғаларға шан-шәрәфтәр булһын!* М. Ғиләжев.

**ШАН-ШӘҮКӘТ** *и. йыйн.* 'слава, похвала'. Төрлө дан һәм хөрмәт. *[Хәҙрәт:] Бадишаһыбыҙҙың шан-шәүкәтен һаҡлау һәр бер аңлы мосолман бәндәнең бурысы.* Ғ. Хәйри.

**ШАПТЫР-ШОПТОР** *оҡш.* 'подражание звуку плеска, шелеста плеск, шелест'. Ҡабат-ҡабат шаптыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шаптыр-шаптыр һыу кисеү. Япраҡ шаптыр-шоптор ҡойола.* ■ *Ятыу уртаһында баяғы егет менән өлкәнерәк ир, бер-берeһен батырырға теләгән төҫлө, шаптыр-шоптор*

*киләләр, икеһенең дә баштары һыу өҫтөнә бер ҡалҡа, бер юғала.* Р. Байбулатов. *Шәнгәрәй шаптыр-шоптор булып һыуҙан килеп сыҡты, үҙенең теше-тешкә теймәй ҡалтырай.* Т. Ғарипова.

**ШАП-ШАҠЫР** *и. диал. ҡар.* алаҡ-шаҡалай ‘чехарда’. Малайҙар, егеттәр уйнай торған уйын *(билдән бөгөлөп, бер-бер артлы теҙелеп баҫалар; иң арттағы малай берәм-берәм улар аша һикереп сыға ла, алға тора; иң артта ҡалғаны дауам итә). Малайҙар көнө буйы шап-шаҡыр уйнаны.*

**ШАП-ШОП** *оҡш.* ‘шлёп-шлёп, хлоп-хлоп *(подражание повторяющемуся глухому удару, стуку)*’. Ҡабат-ҡабат шап иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шап-шоп килеү. Шап та шоп итеү.* ■ *Тышта буран ҡотора, туҡтауһыҙ яуған һылашма ҡар, киске уҡыуҙа ултырыусыларға ҡайтығыҙ инде, ятығыҙ инде тигән һымаҡ, шап-шоп тәҙрәгә һуға.* Б. Бикбай

**ШАПЫР-ШОПОР** *оҡш.* ‘подражание звукам повторяющегося шума воды’. Ҡабат-ҡабат шапыр иткән тауышты белдергән һүҙ. ■ *Колоннаның шапыр-шопор килеп атлаған аҙым тауыштары ла ишетелмәҫ булды.* Х. Ғиләжев. *Әсфәндиәр атын таллыҡҡа ҡыуҙы, тик һаҙламыҡҡа эләкте, шапыр-шопор кире сыҡты.* Б. Рафиҡов.

**ШАРА-БАРА** *и. диал. ҡар.* **юҡ-бар** ‘ерунда, чепуха’. Ваҡ-төйәк әһәмиәтһеҙ нәмәләр. *Шара-бара һөйләү.*

**ШАРАН-ЯРА** *р. ҡар.* **шарран-яра**. ■ *Ҡапҡалар, ишектәр шаран-яра асыҡ.* Ғ. Ибраһимов. *Йәй көнө ауыл халҡының ишектәре, тәҙрәләре шаран-яра асыҡ була.* С. Поварисов.

**ШАРҠ-ШОРҠ** *оҡш.* ʻха-ха, ха-ха-ха (подражание раскатистому смеху, хохоту)ʼ. Яңғырауыҡлы көлгән тауышты белдергән һүҙ. *Шарҡ-шорҡ көлөү.*

**ШАР-МАР I** *оҡш.* ʻподражание шуму, гаму, галдёжуʼ. Ғауғалап ҡысҡырған тауышты белдергән һүҙ. *Шар-мар итеп ҡалыу. Шар ҙа мар килеү.*

**ШАР-МАР II** *с.* ʻпрямодушный, шумливыйʼ. Уй-хисен йәшерә белмәгән, эсендәге тышында. *Шар-мар ҡатын.* • *Шар-мар кеше һүҙ күтәрә, аҫтыртын ҡул күтәрә.* Мәҡәл.

**ШАРП-ШОРП** *оҡш. һөйл.* ʻподражание звуку шарканьяʼ. Һыулы, бысраҡ ерҙән атлағанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шарп-шорп атлау. Бысраҡты шарп-шорп кисеп сығыу.*

**ШАРРАН-ЯРА** *р.*

1) ʻшироко, настежьʼ. Тулыһынса киреп; шар. ■ [*Фәриҙә*] *йәһәтләп, ҡапҡаны киренән шарран-яра асты*. Ш. Янбаев.

2) ʻполностьюʼ. Тотош, тулыһынса, бөтөнләй. ■ *Бына бер нисә йыл инде ул [келәт] шарран-яра буш тора*. Ф. Иҫәнғолов.

3) *перен.* ʻоткрыто, искренне, откровенноʼ. *күсм.* Йәшермәй, асыҡтан-асыҡ. ■ *Кинйә үҙенең һөйөүенә ҡаршы ҡуйылған ҡырылмаһа-ҡырҡ төрлө кәртәләрҙең бөтәһен бер ыңғай аша атлап, күҙ ҡырыйынан ғына ҡарап килгән атаһына йөрәгендәгеһен шарран-яра асты*. Ғ. Ибраһимов.

**ШАР-ШОР** *оҡш.* ʻподражание визгуʼ. Сарылдап ҡысҡырған әсе тауышты белдергән һүҙ; сар-сор. *Балалар шар-шор килә. Шар-шор итеп ҡалыу.*

**ШАТЛЫҠ-ҠЫУАНЫС** *и. йыйн.* ‘радость’. Күңелгә ҙур ҡәнәғәтлек, рәхәтлек биргән хис. ■ *Көн шатлыҡ-ҡыуаныстар менән башланып китте.* Х. Зарипов. *Тирә-йүн, бар донъя.. шатлыҡ-ҡыуаныс менән генә сорналған кеүек.* Ғ. Хөсәйенов. *Шатлыҡ-ҡыуаныстар урынына донъяны ҡара хәбәр тетрәтте.* Ш. Янбаев.

**ШАТОР-ШОТОР** *оҡш. ҡар.* **шатыр-шотор**. ■ *Торған еренән үк мотоцикл шатор-шотор килеп ҡуҙғалып китте.* И. Ғиззәтуллин. *Иртәнсәкке һымаҡ уҡ, шатор-шотор ботаҡтар һынды.* Й. Солтанов.

**ШАТЫР-ШОТОР** *оҡш.* ‘подражание повторяющемуся треску, грохоту’. Ҡабат-ҡабат шатыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шатыр-шотор ағас һынды.* ■ *Бына бер мәл ыңғырашып тышҡы ишек асылды, соланда нимәләр шатыр-шотор итеп иҙәнгә төштө.* И. Абдуллин. *Ҡайырылып, шатыр-шотор һынған ағас шауы ғына ишетелеп торҙо.* Р. Байымов.

**ШАУ-ГӨЖ** *оҡш. ҡар.* **шау-гөр**. ■ *Ихата умарта кеүек шау-гөж килә башланы.* Ғ. Лоҡманов.

**ШАУ-ГӨР** *оҡш.* ‘подражание шуму, гаму’. Көслө күмәк шаулашҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шау-гөр килеү.* ■ *Ятаҡ ишеге алдындағы кипкән майҙансыҡта малайҙар, шау-гөр килеп, туп һуға ине.* А. Абдуллин. *Йәштәр, шау-гөр килеп, ихатаға һибелде.* Ә. Байрамов. *Халыҡ шатлыҡтан шау-гөр килә.* Әкиәттән.

**ШАУ-ШЫУ I** *оҡш.* ‘подражание гулу, шуму’. Күмәк тауышты белдергән һүҙ. ■ *Һары ла ҡамыш беҙҙең күлдәрҙә, шау-шыу килә ҡаты елдәрҙә.* Халыҡ йырынан.

**ШАУ-ШЫУ II** *и.*

1) шум, гам, галдёж’. Гөж килеп торған күмәк тауыш. ■ *Тирә-яҡҡа, ер тетрәгәндәге кеүек, ҡот осҡос тауыш, шау-шыу тарала.* И. Абдуллин. *Станцияла бик аҙ ғына баҫылған шау-шыу тағы ла көсәйеп китте, кеше, свисток тауыштарына бер-береһенә бәрелгән һауыт-һаба тауыштары ҡушылды.* С. Агиш. *Ә ауылда шау-шыу: урамдан бер туҡтауһыҙ машиналар үтә, кешеләр ҡысҡырып һөйләшә, ҡайҙалыр музыка уйнай.* С. Ильясов. *Бүтән табындарҙа ла шау-шыу тиҙ үк баҫылды.* М. Кәрим.

2) *перен.* ‘спор, препирательство; скандал’. *күсм.* Иреш-талаш, ығы-зығы, ҡысҡырыш. *Шау-шыу ҡуптарыу. Шау-шыу сығарыу.* ■ *Ер мәсьәләһен тикшереүҙә генә съезда йәнә бер килке шау-шыу ҡупты.* Р. Байымов. *Абулхайыр хан, ҡабаттан шау-шыу ҡупмаһын типме, эште тиҙерәк ослап ҡуйыу яғын ҡайырҙы.* Н. Мусин.

**ШАУ-ШЫУЛЫ** *с.*

1) ‘шумный’. Күмәк тауышлы, ҡысҡырышлы; шаулы. ■ *Күңелле, шау-шыулы уйын башланды.* З. Биишева. *Шау-шыулы уҡыу йылы үтеп китте.* Яр. Вәлиев. *Шау-шыулы мастерскойҙан сыҡҡас, тышта Шакировты һалҡынса ғына һауа һәм тынлыҡ урап ала.* А. Карнай.

2) *перен.* ‘скандальный, спорный’. *күсм.* Ығы-зығылы, бәхәсле. ■ *Шау-шыулы кәңәшмә бөткәнсе ләм-мим һүҙ әйтмәй, ауыҙына һыу уртлағандай ултырҙы Хәбибулла.* Р. Байымов. *Сходтың шундай шау-шыулы әңгәмәһендә бөтә кешеләр, әллә ниндәй бер бик көслө ташҡында ҡаҡлығып үргә күтәрелгән*

*һымаҡ, күтәренке рух менән шаулашып, геүләп киттеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**ШАШТЫР-ШОШТОР** *оҡш.* 'подражание шуршанию, шарканью, шороху от движения, трения, соприкосновения чего-либо'. Ҡабат-ҡабат шаштыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шаштыр-шоштор килеү* ■ *Рәүф шаштыр-шоштор газетаны әйләндерҙе лә, бер битенә текләп, шыш-быш уҡырға тотондо.* Р. Ғабдрахманов. *Самат иһә, ул-был була ҡалһа тип, табаҡ дәүмәлле әрекмән япраҡтарын шаштыр-шоштор килтереп, кесерткән йырып, күршеләрҙең бейек текмәһенә үрмәләне.* Ә. Хәкимов.

**ШЕП-ШИКЕРТ** *и.* 'еле слышный звук, шорох'. Саҡ ҡына ишетелгән, бик аҡрын сыҡҡан тауыш. *Шеп-шикерт тә ишетелә.*

**ШЕП-ШИКЕРТҺЕҘ** *р.* 'тихо, незаметно, украдкой'. Тауышланмай, кешегә һиҙҙермәй. *Шеп-шикертһеҙ баҫып тороу. Шеп-шикертһеҙ йөрөү. Шеп-шикертһеҙ сығып китеү.*

**ШӨРӨП-ШӨРӘМӘН** *и. йыйн. һөйл.* 'всякие шурупы и винты'. Һәр төрлө шөрөп, винт, ҡаҙаҡтар. *Шөрөп-шөрәмән бөткән, магазинға барып ҡайтам.*

**ШҮРӘЛЕ-ТИПТӘР** *и. этн.* 'название одного из родовых подразделений башкир рода Кадыкай-киргиз'. Ҡаҙыҡай-ҡырғыҙ ырыуының бер аймағы исеме. *Шүрәле-типтәр аймағында ҡырғыҙ ҡәбиләһенең ҙур йыйыны уҙғарыла.*

**ШИК-ШӨБҺӘ** *и. йыйн.* ‘чувство недоверия’. Ышанып етмәй икеләнеү, хәүефләнеү тойғолары. *Шик-шөбһәнән ҡотолоу.*

**ШЫЛДЫЙ-МЫЛДЫЙ** *р. һөйл.* ‘тайно, секретно, скрытно’. Йәшертен-бошортон; аҫтыртын. *Шылдый-мылдый эш итеү.*

**ШЫЛҠЫМ-ШАЛҠЫМ ЙӨРӨҮ** *ҡ. диал.* ‘бродить без дела, шататься’. Эшһеҙ, тегеләй-былай йөрөү. *Шылҡым-шалҡым йөрөмәне малайҙар.*

**ШЫМ-ШЫРЫҠ** *и. һөйл.*

1) ‘тишь’. Һил булыу, шым булыу. *Бүлмәлә бер тауыш юҡ, шым-шырыҡ.*

2) ‘Тишина! (просьба установить тишину)’. Шым булырға, һөйләшмәҫкә өндәгәндә әйтелә. ■ *Шым-шырыҡ, шым-шырыҡ, кем шаяра, кем көлә, шуның ауыҙы йырыҡ.* Халыҡ ижадынан.

**ШЫПА-ШЫМ** *р. ҡар.* **шып-шым II**. *Шыпа-шым, бер тауыш та ишетелмәй.*

**ШӘЛӘЙ-БӘЛӘЙ** *р. һөйл.* [рус. шаляй-валяй] ‘как попало, так-сяк’. Нисек етте шулай. ■ *Өйрән инде, тиҙерәк өйрән, Гөлкәйем, һиңә, Мыжыҡовтың ҡатынына, шәләй-бәләй эшләү килешмәй инде ул.* З. Биишева.

**ШӘМ-ШӘКӘР** *и. диал. ҡар.* **алаҡ-шаҡалай** ‘чехарда’. Эйелеп торған бер уйынсы өҫтөнән икенсеһе һикереп үтеүгә ҡоролған уйын; шап-шаҡыр. *Әллә шәм-шәкәр уйнайһығыҙ инде,*

*кейемдәрегеҙҙе өҙгәләгәнһегеҙ бит. Шәм-шәкәр етеҙлек, ҡыйыулыҡ, үҙ-үҙеңә ышаныс тәрбиәләй, ҡулдарға, аяҡтарға көс бирә.*

**ШӘМ-СЫРАҠ** *и. йыйн.* 'разные свечи, осветительные приборы'. Ут яҡтыһы бирә торған төрлө яҡтыртҡыс. *Шәм-сыраҡ әҙерләү.* ■ *Ҡарт усын-уска һуғыуы булды, бүлмәгә яҡты шәм-сыраҡ тотҡан йән һаҡсыһы килеп инде.* Ә. Хәкимов.

## Ы

**ЫБЫР-СЫБЫР I** *и. йыйн.* 'мелкота, мелюзга, ребятня'. Бәләкәй балалар, бала-саға. *Ыбыр-сыбырҙар уйыны. Ыбыр-сыбырҙар менән һөйләшеү.* ■ *Шырҡ-шырҡ көлөшөп йүгергән ыбыр-сыбырға ҡарап, Фазлетдин үҙе лә йылмая.* Р. Байымов. *Беҙ, ыбыр-сыбырҙар, шунда [текә ярҙа] уйнап йөрөй инек.* Б. Бикбай.

**ЫБЫР-СЫБЫР II** с. 'маленький, малый, мелкий'. Әһәмиәте бәләкәй булған, ваҡ-төйәк, ваҡ (күп һанлы кеше йәки нәмәләргә ҡарата). *Ыбыр-сыбыр болоттар. Ыбыр-сыбыр еләктәр.* ■ *Яр буйында балыҡ тотоусы ыбыр-сыбыр бала-сағанан башҡа кеше күренмәй.* Р. Байбулатов. *Хаммат Сәлимәне ... донъяның ыбыр-сыбыр ваҡлыҡтарынан юғары торған, гәҙел, тоғро йөрәкле ир һөйөүе менән һөйҙө.* З. Биишева. *Мәрхүм Ғәйнетдин ағай ... ауылдың ыбыр-сыбыр балаларын үҙе менән өйөрөп алып йөрөтә торғайны.* М. Ямалетдинов.

**ЫҒЫ-ЗЫҒЫ** *и. йыйн.*

1) 'суматоха, переполох, шум-гам, гвалт'. Сыр-сыулы тәртипһеҙ хәрәкәт, буталыш, талаш-тартыш. ■ *Ауыл инде күптән уянған, урамдар ығы-зығы менән тулған.* Ф. Рәхимғолова. *Киткән тартыш, шау-шыу, ығы-зығы ҡупҡан.* М. Тажи.

2) ‘суета, хлопоты, возня’. Төрлө шау-шыу, хәрәкәттән торған мәшәҡәтле эш. ■ *Ваҡ мәшәҡәт, ығы-зығы тамам, бар эшемдең сыҡтым осона.* М. Кәрим.

**ЫҒЫ-ЗЫҒЫ КИЛЕҮ** *ҡ.* ‘суетиться, метаться’. Сыр-сыу килеп буталышыу; тауышланыу, тынысһыҙланыу, зыҡ ҡубыу. *Уҡыусылар ығы-зығы килә.* ■ *Көлләһө, ығы-зығы килеп, спектаклгә әҙерләнә.* А. Абдуллин. *Тәүлектән ашыу юлда Коршунов менән ығы-зығы килгән Айҙар... вагондан иң алда сығып олаҡты.* Р. Байбулатов. *Дошман сағыштырмаса асыҡ урында ине; һалдаттар, ышыҡланыр урын тапмай, ығы-зығы килде.* Ф. Исәнғолов.

**ЫҒЫ-ЗЫҒЫЛАНЫУ** *ҡ. ҡар.* **ығы-зығы килеү**. *Ҡыҙҙар ығы-зығылана.* ■ *Булаттимер Әбелхайыр тирәһендә шулай ығы-зығыланыуҙы етди ҡабул итә алмай.* Б. Рафиҡов. *Официант кешеләрҙе ихлас хеҙмәтләндерә, зарланмай ҙа, ығы-зығыланмай ҙа.* «Киске Өфө» гәзитенән.

**ЫҒЫ-ЗЫҒЫЛЫ** с. ‘суматошный, суетливый’. Сыр-сыулы, буталышлы. *Ығы-зығылы ҡала.* ■ *Ығы-зығылы уҡыуын дауаханалағы эше менән аралаштырырға мәжбүр булған ҡыҙҙың болоҡһорға ваҡыты ла ҡалманы инде.* Р. Вәлиев. *Игелекле йылмайыуы менән ҡаршылаусы, шаулы, ығы-зығылы ҡартлас ҡала ҡайһылай үҙгәреп, ҡырыҫланып киткән!* Д. Исламов. *Элемтә йортонда радио рупоры... ығы-зығылы халыҡ өҫтөнә Бизе ижадының тәрән лирик һәм күтәренке моңдарын һибә.* А. Карнай.

**ЫҒЫР-ШЫҒЫР I** *оҡш.* ‘подражание скрипу колёс *(например, телеги)*’. Ауыр, яй әйләнгән тәгәрмәс тауышын белдергән һүҙ. *Ығыр-шығыр тауышы. Ығыр-шығыр барыу.*

**ЫҒЫР ШЫҒЫР II** *р. 'перен.* скрипя, со скрипом, потихоньку'. Көс-хәл, ауырлыҡ менән, әкренләп. *Ығыр-шығыр йәшәп ятыу (жить потихоньку).*

**ЫҒЫР-ШЫҒЫР КИЛЕҮ** *ҡ.* 'скрипеть'. Шығыр-шығыр тигән тауыш сығарыу, шығырлау. ■ *Аҙаҡҡы көндәрҙә генә көйлө тәгәрләгән тәгәрмәс ығыр-шығыр килә башланы.* Ш. Янбаев.

**ЫҘАЛАНЫУ-МЫҘАЛАНЫУ** *ҡ. диал.* 'мучиться, страдать'. Ыҙа-яфа сигеү, этләнеү; яфа кисереү, яфаланыу, интегеү *Йоҡлай алмай ыҙаланыу-мыҙаланыу. Ауыр эштә ыҙаланыу-мыҙаланыу.*

**ЫҘАН-ЙОЛА** *и. йыйн.* 'обычаи, нравы, обряды'. Төрлө ғөрөф-ғәҙәт, йолалар тәртибе. ■ *Сәлим өсөн үндағы уйындар, ыҙан-йолалар бөтәһе лә ят булыу сәбәпле, ул уйынға ҡатнашманы.* И. Насыри. *Ыҙан-йолаһына килтереп, ике көн һырға туйын туйланылар ҙа ҡоҙа-ҡунаҡтар ҡайтырға таярланды.* Ғ. Хөсәйенов.

**ЫҘА-ЯФА** *и.* 'мучение, страдание'. Эш-тормоштағы төрлө ауырлыҡ, ауыр кисереш. *Ыҙа-яфа сигеү. Ыҙа-яфа күрмәү.* ■ *[Абрам-Ибраһим:] Гел генә ғәҙеллекте яҡлап һуғышҡан, шул арҡала үҙе күп ыҙа-яфа күргән Ҡараһаҡал батыр ошо булыр.* Б. Рафиҡов.

**ЫҘЫР-МЫҘЫР** *и. диал.* 'возражение'. Кешенең ниәтенә, теләгенә ҡарата булған кире мөнәсәбәт; ризаһыҙлыҡ, ҡаршылыҡ. *Ыҙыр-мыҙырына ҡуймай, һайлап ҡуйыу.* ■ *[Ҡотлояр:] Ни һин, Айбулат, шуларҙың [Үмәр ҡарттарҙың] ыҙыр-мыҙырына ҡарайһың? Ҡыҙҙы ал да ҡас.* Һ. Дәүләтшина.

**ЫҘЫ-СЫУЫ ТӨШӨҮ** *ҡ. диал. ҡар.* **ығы-зығы килеү**. *Ыҙы-сыуы төшөп ҡысҡырыныу. Ыҙы-сыуы төшөп эшләү.*

**ЫЗЫ-СЫУЫТ** *и. диал. ҡар.* **ығы-зығы.** *Донъяның ызы-сыуыты. Ызы-сыуыттан арыныу. Ызы-сыуыт башланды.*

**ЫҠ-МЫҠ ИТЕҮ** *ҡ.* 'запинаться, мямлить'. Ни әйтергә, нисек әйтергә белмәй буталып, тотлоғоу. *Ҡаушауҙан ыҡ-мыҡ итеү.* ■ *Илмырҙа ыҡ-мыҡ итте, кәрәк-кәрәкмәһә лә ике-өс тапҡыр йүткереп тә ҡуйҙы.* Ш. Бикҡол. *Вәләүетдин, алмаш-тилмәш баҫып, ыҡ-мыҡ итте.* Т. Ғарипова.

**ЫЛДЫМ-ЙЫЛДЫМ ИТЕҮ** *ҡ. диал.* 'поторапливаться'. Йәһәтләү, хәстәрләү. • *Ылдым-йылдым иткән ике туйыр, иң-һынын тартҡан тик торор.* Мәҡәл.

**ЫЛҠА-ҺАЛҠА** *р. диал. ҡар.* **илке-һалҡы.** *Ылҡа-һалҡа бейеү. Ылҡа-һалҡа эшләү.*

**ЫЛЫМ-ШЫЛЫМ** *и. йыйн. диал.*

1) 'разная, всякая мелочь'. Баһаһы булмаған теләһә ниндәй ваҡ-төйәк нәмәләр. *Ылым- шылым һатып алыу. Ылым-шылым йыйыу.*

2) *пренебр.* 'гадость'. *кәмһ.* Ерәнгес нәмә. *Сүплектәге ылым-шылым. Тауыҡ һарайындағы ылым-шылым.*

3) 'прохожие, проезжие'. Юл ыңғайы үтеп барған кешеләр. *Ылым-шылым килеп тора. Ылым-шылым күбәйгән.*

**ЫЛЫМ-ШЫЛЫМ ЙӨРӨҮ** *ҡ. диал.* 'ходить бесцельно, болтаться'. Ҡайҙа етте шунда бәрелеп-һуғылып йөрөү. *Ылым-шылым йөрөгән йәштәр. Балалар ылым-шылым йөрөйҙәр.*

**ЫНЙЫ-МӘРЙЕН** *и. йыйн.* ‘жемчуга и кораллы’. Ынйы һәм мәрйендәр. ■ *[Зөлхизәнең] ҡолаҡта – алтын алҡалар, муйында – ынйы-мәрйен муйынсалар.* З. Биишева. *Иң бәхетле, иң ҡотло, иң абруйлы ғүмерҙең ошо бөртөк-бөртөк төймәләрен бер епкә теҙеп ҡараһаң, барыбер гел ынйы-мәрйендән йәки алтын-көмөштән генә торған ҡиммәтле матур муйынса килеп сыҡмаҫ ине.* М. Кәрим. *Тел тигән диңгеҙ бар, төбөндә ынйы-мәрйен бар.* Ғ. Хөсәйенов.

**ЫНЙЫ-СӘЙЛӘН** *и. йыйн. ҡар.* **ынйы-мәрйен**. *Ынйы-сәйлән менән биҙәү. Ынйы- сәйләндән эшләнгән ҡашмау.*

**ЫҢҒЫР-ШЫҢҒЫР** *р.* ‘кряхтя, со стонами’. Саҡ-саҡ һөйрәлеп, ыңғырашып, һыҙланып. *Ыңғыр-шыңғыр йәшәү.* ■ *Фурмандар, ыңғыр-шыңғыр килеп, туғайға йүнәлде.* Р. Низамов. *Гөлғәйшә апай улы иҫән-һау саҡта ыңғыр-шыңғыр ғына йөрөгән ҡарсыҡ ине.* Ф. Әсәнов.

**ЫРҠЛЫ-ТЫРҠЛЫ** *р. диал.* ‘непочтительно, грубо’. Теләһә ҡалай, тупаҫ. *Ырҡлы-тырҡлы һөйләшеү. Ырҡлы- тырҡлы ҡыланыу.*

**ЫРЪЯ-МЫРЪЯ** *р. диал. ҡар.* **теләр-теләмәҫ**. ‘нехотя, неохотно.’ Ул тиклем, бигүк теләмәйенсә. *Ыръя-мыръя ғына эшләү.*

**ЫРЫҠ-МЫРЫҠ** *с. диал.* ‘непримиримый (о человеке).’ Үҙ фекерендә тороусан, риза булмаусан, килешмәүсән. *Ырыҡ-мырыҡ кеше. Күршеләр араһында ырыҡ-мырыҡ ағай бар.*

**ЫРЫҠ-ШЫРЫҠ** *р. диал. ҡар.* **урыҡ-һурыҡ** ‘урывками’. Әҙ-әҙләп, әллә ниҙә бер. *Ырыҡ-шырыҡ ашау.*

**ЫРЫМ-СЫРЫМ** *и. йыйн.* ‘заклятия, заговоры, поверья’. Төрлө ырым, им-том. *Ырым-сырымға ышаныу.* ■ *Ырым-сырымға ышаныусы әмирҙең күңелен шик тырнаһа ла, ул атын ҡайырмаҫҡа, ҡойон имгәткән ағаслыҡты урап уҙырға булды.* Ә. Хәкимов.

**ЫРЫҪ-БӘХЕТ** *и. йыйн.* ‘счастье’. Тормошто, кеше яҙмышын ҡыуаныслы, матур иткән төрлө хәл. ■ *Юлға сыҡтым үҙ ҡулдарым менән төҙөргә тип, ырыҫ-бәхетте.* Р. Мифтахов. *Бынау яҡты донъяла, күркле, киң дала күкрәгендә әҙәм балалары ырыҫ-бәхет ҡосағында йәшәргә хаҡлы ла баһа.* Ә. Хәкимов.

**ЫРЫҪ-ДӘҮЛӘТ** *и. йыйн.* ‘счастье и богатство’. Ырыҫ һәм байлыҡ. ■ *[Ҡарасәс:] Ырыҫ-дәүләт менән мөгөҙ сыҡмай, ярлымын тип, кеше бойоҡмай.* Х. Ғәбитов.

**ЫРЫҪ-ҠОТ** ‘благополучие, счастье, удача’. ■ Ырыҫ һәм ҡот. *Оло йортом Уралым, ырыҫ-ҡотом Уралым, ... һиндә минең йөрәгем.* Р. Шәкүров.

**ЫРЫУ-ОРПАҠ** *и. йыйн.* ‘род, потомство, родня’. Бер нәҫелдән ишәйеп, бер халыҡ берәмеге булып киткән төркөм. *Ырыу-орпаҡтар менән дуҫ йәшәү.*

**ЫРЫУ-ТУҒАН** *и. йыйн.* ‘род, потомство, родня’. Бер нәҫелдән ишәйеп, бер халыҡ берәмеге булып киткән төркөм. *Ырыу-туған дуҫлығы. Ырыу-тугандарҙың аралашып йәшәүе.* • *Ырыу-туған талашыр, дошман килһә, ярашыр.* Мәҡәл.

**ЫРЫУ-УРБАҠ** *и. йыйн.* ‘род, потомство, родственники’. Бер нәҫелдән ишәйеп, бер халыҡ берәмеге булып киткән төркөм. *Ауыл-ауыл ултырып, ырыу-урбагың йәйелһен.* Туй йырынан.

**ЫСЫН-ИХЛАС** *р.* ‘от всей души’. Ысын күңелдән, аҫтыртын уйһыҙ, бөтә ихласлыҡ менән. *Ысын-ихлас, шулай булды. Ысын-ихлас шатланыу. Ысын-ихлас теләк теләү.*

**ЫУАҠ-СЫБАР** *с. диал. ҡар.* **ыбыр-сыбыр.** *Ыуаҡ-сыбар балалар. Ыуаҡ-сыбар эштәр.*

**ЫУ-АРАМА КИЛЕҮ** *ҡ. диал.* ‘шуметь’. Кем йәки нимә менәндер булашып, ығы-зығы килеү; зыҡ ҡубыу. ■ *Кил, улым, - тип ашыҡтырҙы Кинйәгол усаҡ тирәһендә ыу-арама килгән ейәнен.* Б. Хажиева. *Әле генә ер һиңкетеп, хужалыҡ хәстәрлеге менән ыу-арама килеп йөрөгән [Аллаяр] бөтөнләй һүнеп ҡалды.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЫУ-СЫУ** *и. диал. ҡар.* **сыр-сыу** ‘гомон, галдёж’. Шаулашҡан ығы-зығы, сыр-сыу тауыш. *Ыу-сыу килеү. Ыу-сыу ҡыланыу.*

# Э

**ЭҘМӘ-ЭҘ** *р.* ‘последовательно’. Тейешле тәртип менән, тейешле талапҡа, тәртипкә ярашлы рәүештә. *Эште эҙмә-эҙ тормошҡа ашырыу.* ■ *Юҡ, Хәбибулла хәтирәләргә бирелмәне, ул аңлы рәүештә үҙенең тормош йомгагын эҙмә-эҙ тагатып сыга белмәй.* Т. Ғиниәтуллин. *Ҡаты расписание, киҫкен приказдар эҙмә-эҙ үтәлеп кенә торалар.* Н. Ҡәрипов.

**ЭҘМӘ-ЭҘЛЕ** *с.* *ҡар.* **эҙмә-эҙлекле**. ■ *[Ҡеүәтов Ишбулдиндың сығышын] ошо яңы эштәр башланғандан бирле ике арала килгән аңлашылмау һәм күңелһеҙ хәлдәрҙең эҙмә-эҙле һәм логик үҫеше итеп, шуның шаҡтай юғары нөктәһе итеп ҡараны.* Ә. Вәли.

**ЭҘМӘ-ЭҘЛЕКЛЕ** *с.* 'последовательный'. Билдәле бер тәртипкә, системаға нигеҙләнгән, логик бәйләнеше булған. *Эҙмә-эҙлекле аңлатма. Эҙмә-эҙлекле фекер.* ■ *Назаров үҙенең ана шулай эҙмә-эҙлекле фекер йөрөтөүенән ҡыҙғандан-ҡыҙа барҙы һәм һуңғы һүҙҙәрен ҡысҡырып уҡ әйтте.* Н. Мусин. *Бында [колледжда], үҙ һөнәренең оҫталарын уҡытып сығарыу менән бергә, уларҙың күңел байлығын үҫтереү өсөн эҙмә-эҙлекле саралар күрелә.* «Ағиҙел» журналынан.

**ЭҘМӘ-ЭҘЛЕЛЕК** *и.* 'последовательность'. Эҙмә-эҙлекле, бер тәртиптә булған хәл. *Фекер эҙмә-эҙлелеге.* ■ *Бүлектәрҙә һәм бүлексәләрҙә материалдар аңлайышлы, логик эҙмә-эҙлелектә, үҙ-ара бәйлелектә яҡтыртыла.* Г. Гәрәева. *Ваҡиғаларҙың логикаһыҙ сылбырында ла ниндәйҙер эске эҙмә-эҙлелек төҫмөрләнде.* «Йәшлек» гәзитенән.

**ЭЙЕЛЕП-БӨГӨЛӨП** *ҡ.*

1) 'низко наклоняясь, нагибаясь'. Бер эйелеп, бер яҙылыу. ■ *[Алдар] эйелеп-бөгөлөп алды, ҡыҙыу ғына атлап йөрөп әйләнде.* Н. Мусин. *Улар [яңы үҫентеләр], яңы көндө ҡотлағандай, эйелеп-бөгөлөп баштарын һелкәләр.* *Яр.* *Вәлиев.* *Ағиҙелкәйҙәргә барҙыңмы, эйелеп-бөгөлөп һыуын алдыңмы?* Халыҡ йырынан.

2) *перен.* 'заискивать *перед кем*, угождать, льстить *кому*'. *күсм.* Кемдеңдер алдында ярамһаҡланыу. *Эйелеп-бөгөлөп тороу.* ■ [*Кәбир:]* *«Рәхим итегеҙ!», «Ни бойораһығыҙ?» - тип*

*көслөләр алдында эйелеп-бөгөлөп, көлөп-йылмайып тороусыларға ла күңелем ятмай.* Яр. Вәлиев.

**ЭЙЕЛЕП-ҺЫҒЫЛЫП** *ҡ. ҡар.* **эйелеп-бөгөлөп**. ■ *[Ат] теләһә кем алдында баш эйеп, эйелеп-һығылып барманы.* М. Кәрим.

**ЭЙӘЛЕ-БАШЛЫ БУЛЫУ** *ҡ.* ʻпожениться, выйти замужʼ. Кейәүгә сығыу йәки кәләш алыу, өйләнешеү. ■ *Үҫте шул ҡыҙ, үҫте... Эйәле-башлы булырға ваҡыт етте...* З. Биишева. *[Юлдыбикә:] Ҡыҙыбыҙ Хөмәйрәгә ҡоҙа килеү менән аптыраныҡ, эйәле-башлы итер инек, үҙебеҙгә тиң ырыуҙан ҡоҙа килмәй.* Т. Хәйбуллин.

**ЭЙӘР-ӨПСӨН** ʻснаряжение для верховой ездыʼ. Һыбай йөрөүгә тәғәйенләнгән бөтә кәрәк-яраҡ. ■ *Көмөш үңелдерек, көмөш йүгән, көмөш бөтә эйәр-өпсөнө.* Х. Ғәбитов. *Кинйәнең дә әҙернә яны, атаһы алып биргән һуғыш яраҡтары, эйәр-өпсөндәре бар*. Ғ. Ибраһимов.

**ЭЙӘР-ТУҠЫМ** *и. диал. ҡар.* **эйәр-өпсөн**. ■ *Айбулат, ... эйәр-туҡымын ҡулына алып, йүгәнен яурыны аша һалып, тирмәләр ҡоролаҫаҡ ҡалҡыуға табан атланы.* Һ. Дәүләтшина.

**ЭЛДЕ-ҺАЛДЫ** *р. диал.* ʻкое-как, как попалоʼ. Арлы-бирле. *Элде-һалды эшләү. Элде-һалды бәйләү. Эшкә элде-һалды ҡарау.*

**ЭЛЕНКЕ-ҺАЛЫНҠЫ** *с.* ʻнеряшливый, неаккуратный (об одежде)ʼ. Тәнгә ятып тормаған, килешһеҙ (кейем-һалымға ҡарата). ■ *[Таҙ] аҡ сәкмән кейгән, ул да эленке-һалынҡы, ти.* Әкиәттән.

**ЭЛЕН-ҺАЛЫН** *и. диал.*

1) ‘старьё, хлам; тряпьё; барахло’. Иҫкергән, туҙған кейем-һалым; тотонолған сепрәк; алам-һалам. *Элен-һалын йыйыу. Элен-һалын кейеү.*

2) ‘одежда’. Һәр төрлө өҫ кейеме; кейем-һалым. *Элен-һалынды йыуыу.*

**ЭЛӘГЕП-ҺАРҠЫП р**. *диал. ҡар.* **эләгә-йығыла.** *Эләгеп-һарҡып эшләп бөтөү. Эләгеп-һарҡып уҡыуын тамамланы.*

**ЭЛӘГӘ-ЙЫҒЫЛА** *р.* ‘спотыкаясь’. Бик ашығып, йығыла яҙып, абына-һөрөнә. *Эләгә-йығыла йүгереү. Эләгә-йығыла йөрөү. Эләгә-йығыла атлау.* ■ *Рәмил һалдат ағаһының сумаҙанын бәләкәй санаһына һалды ла эләгә-йығыла өйҙәренә ашыҡты.* Р. Низамов. *Ул [Тулыбай ҡарт] ни өсөндөр тыныс атлап түгел, ә үңәсен алға һуҙып, тыбызлап, эләгә-йығыла ашығып бара торғайны.* З. Биишева.

**ЭЛӘГӘ-ТӘГӘРӘЙ** *р. ҡар.* **эләгә-йығыла**. *Эләгә-тәгәрәй ҡайтып бара. Эләгә-тәгәрәй атлап китте. Эләгә-тәгәрәй ишеккә килеп етеү.* ■ *Үҙ аяҡтарына үҙе эләгә-тәгәрәй атлаған айыу балаһы әсәһенән ситкә китте лә алғараҡ сыҡты.* Ғ. Хисамов. *Кәбир эләгә-тәгәрәй Тәнзилә еңгәләренә ашыҡты.* М. Хужин.

**ЭЛӘГӘ-ҺАРҠА** *р.*

1) ‘спотыкаясь’. Бик ашығып, йығыла яҙып, абына-һөрөнә. ■ *Ваня, асыуынан ырғып тороп, ағас тамырына, ауған ағастарға эләгә-һарҡа, ярһып ары-бире йөрөргә кереште.* Ә. Хәкимов.

2) *разг.* ‘то пешком, то на чём-либо (двигаться)’. *һөйл.* Нимәгәлер ултырып йә йәйәүләп (юлда барыуға ҡарата әйтелә). *Эләгә-һарҡа барып етеү. Эләгә-һарҡа ҡайтып килеү.*

**ЭЛӘГӘ-ҺӘБӘ** *р. диал. ҡар.* **эләгә-һарҡа 2.** *Эләгә-һәбә юлда йөрөү.*

**ЭЛӘ-САЛА** *р. һөйл.*

1) ‘как попало, кое-как’. Нисек етте шулай; арлы-бирле. *Элә-сала ғына ҡарап сығыу. Элә-сала эшләү.*

2) ‘отрывочно, мельком’. Асыҡ түгел, яҙа-йөҙа; сала-сарпы. *Элә-сала ғына ишетеп ҡалыу. Элә-сала күреп ҡалыу.*

**ЭЛӘ-ҺӨЛӘ** *р. диал. ҡар.* **элә-сала 2.** *Элә-һөлә ишетеү. Элә-һөлә күреп ҡалыу.*

**ЭНӘ-ЕП** *и. йыйн.* ‘иголка с ниткой’. Тегенеү өсөн кәрәк-яраҡ; энә һәм еп. ■ *Шәм филтәһе, тегенергә энә-еп, һөт айырғысҡа бер-ике шөрөп, арыу сәй-маҙар кәрәк ине уларға [Сәлмән менән Вәлимәгә].* С. Шәрипов.

**ЭНӘНӘН-ЕПТӘН** *с.* ‘совершенно новый, с иголочки’. Бер ҙә кейелмәгән; өр-яңы. ■ *[Сәхип:] Энәнән-ептән сыҡҡан кейемдәр менән сын яһау итеп, бөтәйтеп ҡайтарғандар улымды.* С. Агиш.

**ЭҢГЕР-МЕҢГЕР I** *и.* ‘сумерки’. Ҡояш байығас йә таң атыр алдынан булған ҡараңғылы-яҡтылы мәл. *Эңгер-меңгер ваҡыты. Эңгер-меңгерҙә йөрөү.* ■ *Ҡояш байып, эңгер-меңгер төшә башлағайны инде.* С. Поварисов. *Эңгер-меңгер яҡынлаша, әле генә ап-аҡ булып күҙҙе сағылдырып ятҡан ҡар шәмәхәләнә, күк йөҙө шәмәрә бара.* Г. Яҡупова.

**ЭҢГЕР-МЕҢГЕР II** *р. диал. ҡар.* **аңҡы-тиңке** ‘шатаясь, качаясь’. Ике яҡҡа аумаҡайланып, болғанлап. *Эңгер-меңгер йөрөү. Эңгер-меңгер атлап китеү.*

**ЭРГӘ-ТИРӘ** *и. йыйн.* ‘рядом’. Кемдеңдер йәки нимәнеңдер торған еренә яҡын булған урын, тирә; ян. *Эргә-тирәне йыйыштырып алырға кәрәк.* ■ *Ғәлимә, эргә-тирәлә кеше-фәлән күренмәһә лә, Мәҙинәнең ҡолағына эйелде.* Т. Ғарипова.

**ЭРЕЛЕ-ВАҠЛЫ** *с.* ‘разной величины, возраста; крупное и мелкое (без сортировки); крупное вперемешку с мелким’. Бер тигеҙ генә түгел, төрлө ҙурлыҡтағы. *Эреле-ваҡлы бауырһаҡ. Эреле-ваҡлы eләк.* ■ *Миңлейыһангир менән Миңлебаныу, эреле-ваҡлы балаларын ҡаҙ бәпкәләре кеүек эйәртеп, гелән йәйәү йөрөй.* И. Аҡъюлов. *Ҡояштың сағыу нурҙары йылға төбөндәге эреле-ваҡлы һуйырташтарҙа уйнай.* Н. Алсынбаев. *Дуғала эреле-ваҡлы өс еҙ ҡыңғырау сыңлай, затлы ҡайыш сбруйҙарҙың баҡыр биҙәктәре йымылдап тора.* М. Кәрим.

**ЭРЕ-МАРЫ** *и. йыйн.* ‘разная крупная трава, бурьян’. Төрлө эре үлән. *Эре-мары сабыу. Баҡсаны эре-мары баҫҡан.*

**ЭРЕ-ТОРО I** *с.*

1) ‘крупный’. Берәмектәре тейешле дәүмәлдән эре, төрлө ҙурлыҡта булған. *Эре-торо икмәк киҫәктәре. Эре-торо утын ярҡалары. Эре-торо сәнсем менән тегеү. Эре-торо итеп бүленгән өлөштәр. Эре-торо үләнен генә уташтырыу.* ■ *Зиннәт әсәһенең, ут яҡмаҫҡа ҡушып, ҡат-ҡат тукыуына ҡараманы, мейескә тоҡандырып ебәрҙе, утлыҡсанан эре-торо һалам, һандыҡ тырнаштырып алып инде.* З. Ураҡсин.

2) *перен.* 'не требующий точности, аккуратности'. *күсм.* Ентекләп эшләүҙе талап итмәгән. ■ *Әлегәсә Муллағәли бабай .. эре-торо эш менән булыша ине. Ә был шкаф һынлы шкафҡа беренсе тотоноуы.* Р. Солтангәрәев.

**ЭРЕ-ТОРО II** *р. диал. күсм.* 'высокомерно, горделиво, надменно'. Һауаланып, маҡтанып. *Үҙеңде эре-торо тотоу. Эре-торо ҡыланыу. Эре-торо йөрөү. Эре-торо һөйләшеү. Эре-торо ҡыланыу.* ■ *Рая уйҙарын йәшерер өсөн юрамал шулай эре-торо һөйләгән булды.* Р. Солтангәрәев.

**ЭРЕ-ЯРЫ** *р. диал. ҡар.* **эре-торо I, 1.** *Эре-яры сәнсеп тегеү. Эре-яры итеп утын ярыу. Эре-яры итеп һалабаш тетеү.*

**ЭС-БАУЫР** *и. йыйн.*

1) 'внутренние органы'. Кешенең эске ағзаларының дөйөм атамаһы; үпкә-бауыр. ■ *Нурания сытырайып ҡына бер-ике йотто, тәмһеҙ шыйыҡса эс-бауырын яндырып ебәрҙе.* Т. Даянова.

2) 'внутренности, ливер'. Малдың эске ағзалары; үпкә-бауыр. *Малдың эс-бауырын бешереү. Эс-бауырҙан тултырма яһау.* ■ *[Ҡаранайҙың] ҡатыны сығып, табаҡҡа һалынған эс-бауырҙы, ҙур киҫәктәргә бүленгән иттәрҙе өйгә алып инеп китте.* М. Ғиләжев.

3) *перен.* 'душа'. *күсм.* Хис-тойғо тупланған фарази урын. ■ *[Шәфәк:] Өс йыл буйы көтә-көтә эс-бауырҙарым көйөп бөttө инде.* М. Кәрим. *Баги өҫтөндә яңғыраған дәһшәтле ажғырыуҙан Геннадий Самуиловичтың эс-бауыры ҡалтырап, бил-аяғы быуынһыҙланды.* Р. Вәлиев.

▲ **эс-бауырға инеү** *'располагать к себе душевным отношением'.* Кешене йылы һүҙ менән әүрәтеп, үҙ яғына ауҙарыу ■ *[Аҙнагол] эс-бауырына инеп килә. Бер ҡарауҙа һине*

*иретеп, ҡамырҙан йомшаҡ яһап, ҡул ҡаушыртып ҡуя.* З. Биишева.

▲ **эс-бауыр өҙөлөү** *'сильно печалиться, горевать'*. Ныҡ әрнеү, әсенеү ■ *Кем балаһы өсөн кем илаһын, эс-бауырҡайҙары өҙөлөп.* Халыҡ йырынан.

**ЭСЕ-ТЫШЫ** *и. йыйн.*

1) 'внутренняя и внешняя стороны предмета; изнутри и снаружи'. Нимәнеңдер эске һәм тышҡы яғы. *Эсе-тышы атлас юрған. Эсе-тышы матур итеп биҙәлгән йорт.* ■ *Шәүрәләрҙең эсе-тышы һыланып та ағартылмаған тупаҡ өйҙән дә бер һыйырлыҡ лапаҫтан торған йорттары урамдың Эйек яҡ осонда, Сәрбиямалдарға ҡапма-ҡаршы ултыра.* З. Биишева.

2) *перен.* 'душа и тело (человека)'. *күсм.* Кешенең күңеле һәм тышҡы ҡиәфәте. ■ *[Мәҙинәнең] өләсәһенең әле бер кемде лә шулай яҙылып, эсе-тышы берҙәй ялтырап һыйлағаны юҡ.* Т. Ғарипова.

**ЭС-ЗАР** *и.* 'скорбь, печаль, горе'. Йөрәккә ғазап һалған ауыр кисереш, эстән уйлап йөрөгән хәсрәт, зар. *Эс-зар һөйләү. Эс-зарҙы асыу. Эс-зарҙы йәшереү.* ■ *Элгәрге ваҡыттарҙа ахун менән асыҡтан-асыҡ һөйләшергә тартынған абыстай, үҙ аһ-зарын һөйләп, әҙерәк эс-зарын бүҫкәртеп алғандай булды.* Р. Өмөтбаев.

**ЭС-ҠАРЫН** *и. йыйн.*

1) 'внутренности (животных), ливер'. Һуйған малдың ҡарын һәм эсәктәре; эсәк-ҡарын. *Эс-ҡарын бешереү. Эс-ҡарын бәлеше.* ■ *Егерь, мышыны һуйып бөткәс, тиреһен, эс-ҡарынын һуйыусыларға тәкдим итте.* Р. Кинйәбаев. *Хәкимә менән Мәстүрә, тәкәнең эс-ҡарынын йыуырға, аш-һыу тәрбиәләргә тип, өйҙә ҡалдылар.* Н. Мусин.

2) 'внутренние органы (человека)'. Кеше ҡорһағындағы эске органдарҙың дөйөм атамаһы. ■ [*Шаһиморат] хатта һис тә үкенмәй-әрнешмәй үлде лә китте һымаҡ. Эс-ҡарынында ҡот осҡос ҡаты ауыртыу барған саҡта.* З. Биишева.

**ЭСЛЕ-ТЫШЛЫ I** *с.* 'имеющий нижнюю и верхнюю подкладку'. Эске һәм тышҡы ҡатлы. *Эсле-тышлы тун. Эсле-тышлы куртка.*

**ЭСЛЕ-ТЫШЛЫ II** *р.* 'отделанный с двух сторон, изнутри и снаружи, с двух сторон'. Эске һәм тышҡы яҡтан. *Ҡомғанды эсле-тышлы сайҡау. Аласыҡ эсле-тышлы һыланған.* ■ *Тағы ла ике көндән Кәлимә һыланған балсыҡты һыулап, шымартып сыҡты, шунан тауҙан килтерелгән аҡбалсыҡ һыуы менән эсле-тышлы ағартты.* Ғ. Хисамов.

**ЭСЛЕ-ТЫШЛЫ III** *р. диал.* 'необоснованно'. Дөрөҫлөккә тап килмәгән. *Эсле-тышлы юҡты һөйләү. Эсле-тышлы бушты әйтеү. Эсле-тышлы яла яғыу.*

**ЭС-МАУЫР** *и. диал. ҡар.* **эс-бауыр 2.** *Эс-мауырға инеү. Эс-мауырымды арбаны.*

**ЭС-ҠОРАМТА** *и. диал. ҡар.* **эс-ҡарын 1.** *Эс-ҡорамта йыуыу. Эс-ҡорамтанан бәлеш эслеге әҙерләү.*

**ЭСӘК-ҠАРЫН** *и. йыйн. ҡар.* **эс-ҡарын**. *Эсәк-ҡарын бешереү.* ■ *Һалҡын эсемлек, тереһыуҙай ағып, сарсаған эсәк-ҡарындарҙы һиҫкәндерҙе, йылытты, ҡатҡан быуындарға таралып, тәнде рәхәт иҙрәтте.* Р. Вәлиев. *Гөлйөҙөм, көйәнтәләп һыуҙан ҡайтып, эсәк-ҡарын йыуырға әҙерләнде.* Һ. Дәүләтшина.

**ЭҪЕЛЕ-ҠОРОЛО** *с.* ‘засушливый’. Эҫе һәм яуым-төшөмһеҙ булған. *Эҫеле-ҡороло көндәр. Эҫеле-ҡороло мәл.* ■ *Ерҙә һыуыҡ-һыуыҡ ҡыштар, ташҡынлы-һыулы яҙҙар, эҫеле-ҡороло йәйҙәр, ямғырлы-боҙло көҙҙәр була.* Әкиәттән.

**ЭҪЕЛЕ-ҺЫУЫҠЛЫ БУЛЫУ** *ҡ.*

1) ‘бросать то в жар, то в холод (от испуга)’. Ныҡ ҡурҡыуҙан йә өшөнөп, йә тирләп китеү. ■ *Ҡағыҙҙарҙың береһенә иғтибары туҡтауҙан Мәҙинәнең тәне эҫеле-һыуыҡлы булды.* Ә. Хәкимов. *Сананан алыҫ түгел, юл ситендә ике бүре ята ине. Өмәттең тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте.* Д. Юлтый. *Бармаҡ эҙҙәрен күргәс, Бибекәйҙең тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте.* Ғ. Лоҡманов.

2) *перен.* ‘бросать то в жар, то в холод (от сильных чувств)’. *күсм.* Ҡапыл уянған көслө тойғонан бер өшөп, бер яныу. ■ *Фатиманы күреү менән Сөнәғәттең тәне тағы эҫеле-һыуыҡлы булып китте.* Ж. Кейекбаев.

**ЭТ-БЕСӘЙ** *и. йыйн.* ‘собаки и кошки’. Эт һәм бесәйҙең йыйылма атамаһы. *Эт-бесәй көнөнә ҡалыу.* ■ *Ҡышҡы һауаны яңғыратҡан күмәк йырҙы ишетеп, урамдағы тауыҡ-ҡаҙ, эт-бесәй ишек алдына кереп шылды.* Ғ. Хисамов. *Өс-дүрт йәшлек әсир башта ... эт-бесәй рәтендә генә йөрөнө.* Б. Рафиҡов.

**ЭТЕП-ТӨРТӨП** *ҡ.*

1) ‘толкать беспощадно, выталкивая’. Аяп, ҡарап тормай этеү, төртөү; этеләү, ҡыҫырыҡлау. *Этеп-төртөп сығарыу. Этеп-төртә башлау. Этеп-төртөп алғараҡ күсеү.* ■ *Кешеләрҙе этеп-төртөп, эргәлә генә бер нисә һалдат йөрөй ине.* Ғ. Ибраһимов. *Һандыҡ күтәргән кешеләр, бер-береһен этеп-төртөп, ҡысҡырышып, оло ҡапҡанан ағыла.* Б. Бикбай. *Хәләф ағай*

*кәрзинкәһен йәһәт кенә эләктереп алды ла, пассажирҙарҙы этеп-төртөп, артҡы ишеккә йүнәлде.* В. Исхаҡов.

2) *перен.* ʻобижать, притеснятьʼ. *күсм.* Рәнйетеү, ҡағыу, кәмһетеү, йәберләү. *Теле менән этеп-төртөп тора.* ■ *Еңгәһе лә бик уҫал нәмә, Хәлкәйҙе күрә алмай, һәр ваҡыт этеп-төртөп кенә тора.* Д. Юлтый. *Ағаһы уға [Люсяға] йоҙроҡ күрһәтте. ... Әллә ни эшләп һеңлеһен этеп-төртөп бара.* Р. Низамов.

3) *перен.* ʻделать с большим трудом, через силуʼ. *күсм.* Бик ауырлыҡ, көс-хәл менән башҡарыу. *Этеп-төртөп ризалатыу.* ■ *Тәкиә апай этеп-төртөп етенсене осланы ла мәктәп юлын бөтөнләйгә онотто.* Р. Ғабдрахманов. *Ул [Ныязгол] ҡыйынлыҡ менән, этеп-төртөп, тағы әллә ниҙәр уҡып китте.* Һ. Дәүләтшина.

4) *перен.* ʻделать что кое-как, как попалоʼ. *күсм.* Теләр-теләмәҫ, еңелсә генә берәй эште башҡарыу. *Этеп-төртөп эшләү. Этеп-төртөп уҡыу. Этеп-төртөп донъя көтөү.* ■ *[Зифа] иренә этеп-төртөп яуап бирҙе, күбеһенсә тымһайып ултырҙы.* М. Ҡаһарманова.

5) *диал.* ʻигриво разговаривать, шутитьʼ. *диал.* Шаяртыу, уйнап һөйләшеү. *Этеп-төртөп һөйләшеү.*

**ЭТЕШЕП-ТӨРТӨШӨП** *р. ҡар.* **этеп-төртөп**. *Этешеп-төртөшөп килеп инеү.* ■ *Нур, этешеп-төртөшөп булһа ла, түңәрәк эсенә инә, мөмкин саҡлы гармунсыға яҡыныраҡ торорға тырыша.* И. Абдуллин. *Зәғферәнә апай Вәсиләне ҡултыҡлап алып киткәс, бөтә бала-сага, этешеп-төртөшөп, уның артынан эйәрҙе.* Р. Ғабдрахманов.

**ЭТКЕ-ТИПКЕ** *и. йыйн.* ʻпренебрежительное отношение к кому-либо; притеснение кого-либоʼ. Кемдеңдер рәнйетеүе, ҡыйырһытыуы; кемдер тарафынан ҡыйырһытылған, рәнйетелгән хәл; этке-төрткө. *Этке-типке*

*ҡүрмәгән.* ■ *Төрлө ғазаптар, аслыҡтар, этке-типкеләр, мең төрлө ауырлыҡтарҙы ҡүрмәгән Этҡолдарға, йөрәкте тураҡлап ташлай торған моңло әсе ҡара тарихты төшөнөү ҡайҙа.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЭТКЕ-ТӨРТКӨ** *и. ҡар.* **этке-типке**. ■ *[Егет] йәштән үк кеше тупһаһында, этке-төрткө аҫтында батраклыҡта йөрөп, ауырлыҡта үҫте.* И. Көҫәпҡол.

**ЭТ-ҠОШ** *и. йыйн.* 'звери, хищники'. Төрлө йыртҡыс йәнлек. ■ *Ҡорбан ите тултырылған ҡула ҡаҙандарҙы тағараҡтарға аҫтылар, аҫтарында гөрләп ут янып китте, бала-саға, эт-ҡош тәмле еҫ һиҙеп, усаҡтар тирәһендә уралды.* З. Ураҡсин. *Яңғыҙ йөрөгәндә эт-ҡошҡа, бәлә-ҡазаға тарып ҡуймаһын тип, бисәһе Мәхмүзә, хәҙрәттән бетеү яҙҙыртып алып, иренә һиҙҙермәй генә, эс яҡтан бишмәт яғаһына теғеп ҡуйҙы.* Л. Яҡшыбаева.

**ЭТЛЕ-МАСЛЫ** *р. диал. ҡар.* **этле-мырлы**. *Этле-маслы тороу. Этле-мырлы йәшәү.*

**ЭТЛЕ-МЫРЛЫ** *р. диал.* 'скандально, ссорясь, ругаясь'. Үҙ-ара тынышмай, һүҙгә килешеп, талашып. *Күршеләр этле-мырлы йәшәне. Этле-мырлы эшләнгән эштең йүне булмай.*

**ЭШ-КӨШ** *и. йыйн.* 'разные мелкие дела, заботы'. Һәр төрлө ваҡ эш. ■ *Хужаны тышта эш-көшө көтә: мал-тыуарын, ҡош-ҡортон ҡарайһы, барын барлайһы бар.* Ғ. Хөсәйенов. *Ат егеп, дилбегә тота белгән Фәйрүзәгә эш-көш табылып торҙо.* Л. Яҡшыбаева.

**ЭШ-ХӘЛ** *и. йыйн.* ‘разные жизненные ситуации, дела’. Тормоштағы төрлө эш, хәл, ваҡиға һ.б. күренештәр. ■ *Һәр эш-хәлде кеше үҙенсә баһалай инде.* «Киске Өфө» гәзитенән.

## Ә

**ӘБДӘН-МӘҢГЕ** *р. диал.* ‘издавна, давным-давно’. Борон замандан; бик күптән. *Әбдән-мәңге килгән йола.*

**ӘБЕЙ-ҺӘБЕЙ** *и. йыйн.* ‘старушки, бабки’. Оло йәштәге күмәк ҡатын-ҡыҙ. ■ *Майҙандың ..: өсөнсө ягында ҡыҙ-ҡырҡын, бисә-сәсә, әбей-һәбей, бала-сага йыйылган, ти.* Әкиәттән. *Сәгүрә еңгәнең хәлен белергә, гаиләнең ҡайгыһын уртаҡлашырга күрше-күлән, әбей-һәбей һаман килгеләп торҙо.* З. Биишева. *Бисә-сәсә, әбей-һәбейҙәр үкһеп илаша, китеүселәр ҡысҡырып тәкбир әйтә, бер ситтәрәк, Кәзә урамындалыр инде, йыр, гармун тауышы ҡолаҡ яра.* Б. Бикбай. *Бөтәһе лә, хатта әбей-һәбейҙәре лә килгән.* Һ. Дәүләтшина.

**ӘБӘК-КӨБӘК** *и.* ‘игра в горелки (пятнашки)’. Балалар уйыны (бер-бер артлы теҙелешеп торалар; көтөүсе алда торған баланың усына һуғып: «Әбәк-көбәк, алтын табаҡ, етә алһаң, көмөш ҡалаҡ, етә алмаһаң, артыңа етмеш кәрәк көл!» – ти ҙә йүгереп ҡаса; тегенеһе уны баҫтыра, ҡасып барып, теҙелгән төркөмдөң ҡойроғона баҫа алһа, баҫтырған бала көтөүсе була, ҡаса алмай тотолһа, яңынан үҙе көтөүсе була, ә баҫтырып тотҡаны ҡойроҡҡа баҫа. *Әбәк-көбәк уйнау.* ■ *Безгәләккәй, безгәләк, килдем һиңә, күбәләк. Әйҙә, бергә уйнайыҡсы әбәк-көбәк, һәпәләк.* З. Исламова.

**ӘБӘК-ҺӘБӘК** *р.*

1) ‘кое-как, как попало’. Тырышмай, арлы-бирле. *Әбәк-һәбәк эшләү. Әбәк-һәбәк уҡыу.*

2) *диал.* ‘там-сям, кое-где’. *диал.* Ара-тирә, һирәк-һаяҡ. *Әбәк-һәбәк күренеп ҡала.* ■ *Балаҫтар түшәлгән юл аша бала-саға әбәк-һәбәк йүгереп сыҡҡылай.* Ж. Кейекбаев. *Юғарыла саҡта уны кешеләр күрмәй, ә бында, юл өҫтөндә, минут һайын әбәк-һәбәк үтеп торалар.* Т. Сәғитов.

**ӘГЕЛ-БӨГӨЛ** *и. диал. дет.* ‘одуванчик’. Ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған ҡыуыш һабаҡлы, һары суҡ сәскәле, туҙғаҡ орлоҡло ваҡ үлән үҫемлек. ■ *Әгел-бөгөл бәп-бәп, туғай ағай туҡ-туҡ.* Һамаҡтан.

**ӘҘМЕ-КҮПМЕ** *р. ҡар.* **аҙмы-күпме** ‘сколько-то, немного; некоторое количество’. Бер ни тиклем, күпмелер. ■ *Фәнде үҫтереүгә әҙме-күпме өлөш индерҙе Әхтәм, хеҙмәттәре баҫылып сыҡты.* Д. Бүләков. *Батырхандың шөғөлө – һунар итеп, хужаһына әҙме-күпме файҙа килтереү.* И. Ноғманов. *Сыңғыҙ Әхәтовичтың да күңеленә әҙме-күпме һиллек урынлашты.* Г. Яҡупова.

**ӘҘ-МӘҘ** *р. ҡар.* **аҙ-маҙ** ‘понемногу, мало-помалу, немного’. Әҙ генә, саҡ ҡына; бер аҙ. ■ *Ғафуан Алсынбаев, доктор кәңәшен тотоп, көн дә әҙ-мәҙ йүгерҙе.* Р. Камал.

**ӘҘӘП-ТӘРТИП** *и. йыйн.* ‘дисциплина, порядок; правила хорошего тона, поведения’. Әҙәп һәм тәртип. *Әҙәп-тәртип һаҡлау.* ■ *Ғаилә башлығы Йосопов Рәис, улы Тимур, ҡыҙы Гүзәл үҙҙәренең әҙәп-тәртибе менән мине хайран итте.* Л. Яҡшыбаева.

**ӘҘӘП-ӘРКӘН (әҙәп-әрҡан)** *и. иҫк. ҡар.* **әҙәп-тәртип**. *Һин гәзиз әсәң ҡанатынан яңы сыҡҡан бала, изге әсәңдән әҙәп-әркән ала сыҡҡан бала.* Ш. Бабич.

**ӘЖЕР-БӨЖӨР** *р. диал. ҡар.* **әбәк-һәбәк 1**. *Әжер-бөжөр генә эшләнгән әйбер оҙаҡҡа түҙмәй.*

**ӘЙБЕР-ҠУРА** *и. диал.* ʻдомашняя утварьʼ. Өй кәрәк-яраҡы. Әйбер-ҡура йыйыу. *Бүлмә кәрәкмәгән әйбер-ҡура менән тулы. Ағастан яһалған әйбер-ҡура.*

**ӘЙЛЕ-БАШЛЫ** *с. диал. ҡар.* **башлы-күҙле**. *Әйле-башлы итеү. Әйле-башлы булыу. Балалары әйле-башлы инде.*

**ӘЙЛЕ-ШӘЙЛЕ** *р. һөйл.*

1) ʻтрастерянно, недоумённоʼ. Ни эшләргә белмәй, аптырап. *Әйле-шәйле булыу.* ■ *Ошолай унда-бында һуғылып, әйле-шәйле йөрөй торғас, иркә малай егет ҡорона инә, һалдатҡа китер ваҡыты етә.* Ә. Хәкимов.

2) ʻнехотя, неохотно, так-сякʼ. Күңел һалмай, илке-һалҡы ғына; булыр-булмаç. *Әйле-шәйле эшләү. Әйле-шәйле яуап биреү. Әйле-шәйле уҡыу.*

3) ʻнеотчётливо, мелькомʼ. Әҙ-мәҙ, яҙа-йоҙа. *Әйле-шәйле күреп ҡалыу.* ■ *Был сәйер тауыш, ҡолаҡҡа әйле-шәйле салынырлыҡ ҡына булһа ла, тағы ҡабатланды.* Ғ. Ибраһимов.

**ӘЙЛӘН-БӘЙЛӘН** *и.* ʻхороводʼ. Ҡулға-ҡул тотоношоп, түңәрәк яһап, йырлап әйләнә торған балалар уйыны. *Әйлән-бәйлән уйнау.* ■ *Ағас тирәләй, ҡулға-ҡул тотоношоп, ваҡ балалар әйлән-бәйлән уйнай.* М. Кәрим. *Әхирәттәрем, түңәрәк яһап, әйлән-бәйлән уйнай.* М. Садиҡова. *Ер һелкетеп тыпырлатып алғас, күмәк йыр, әйлән-бәйлән башлана.* Ә. Хәкимов.

▲ **әйлән-бәйлән килеү** ‘кружиться, вертеться’. Өйөрөлөү. ■ *Вальс өйөрөлөшәләр, ҡунаҡтарға эйәреп бар донъя әйләнә, бар ҡор әйлән-бәйлән килә.* Р. Камал.

**ӘЙЛӘНДЕРЕП-ТУЛҒАНДЫРЫП** *ҡ.*

1) ‘вертя и поворачивая’. Төрлө яҡҡа, төрлөсә әйләндереү. *Көслө ел урамдағы сүп-сарҙы әйләндереп-тулғандырып ташланы* ■ *Бибисара абыстай Емештең ҡул эшен тартып-һуҙып, әйләндереп-тулғандырып ентекләп ҡараны.* З. Биишева.

2) ‘внимательно, тщательно’. Иғтибарлы, ентекле. ■ *Сөнәгәт янсыҡты әйләндереп-тулғандырып, уның күҙ яуын алып торған матурлығына һоҡланып байтаҡ ҡарап торҙо.* Ж. Кейекбаев.

**ӘЙЛӘНЕП-ТУЛҒАНЫП** *ҡ.* ‘вращаться, вертеться, крутиться’. Төрлө яҡҡа, төрлөсә әйләнеү. *Әйләнеп-тулғанып ятыу. Әйләнеп-тулғанып йоҡлау. Әйләнеп-тулғанып тороу.* ■ *Әйләнеп-тулғанып булһа ла, кәмә ярға яҡынлаша башланы.* М. Кәрим. *Әйләнеп-тулғанып ята торғас, Зәкиҙең күңелен ниндәйҙер шом биләп алды.* Р. Байбулатов.

**ӘЙЛӘНӘ-ТИРӘ** *и. йыйн.*

1) ‘окрестность’. Яҡын-тирә, тирә-яҡ. *Әйләнә-тирәнең матурлығы. Әйләнә-тирәгә күҙ һалыу. Әйләнә-тирә һаҙлыҡҡа әйләнгән. Әйләнә-тирә тып-тын.* ■ *Һөнәрсе тауҙар-урмандар гиҙгән. Әйләнә-тирәне, ағас-ташты ентекләп өйрәнгән* З. Биишева. *Әйләнә-тирәлә йылҡыларҙың тыныс ҡына мыртлатып көйшәүҙәренән башҡа бер нәмә лә ишетелмәне.* З. Биишева. *Әйләнә-тирә һәр төрлө ҡош тауыштарынан гөрләп тора.* И. Ноғманов. *Таңдыса быға, бәхетем юғалмағайы тип*

*ҡайғыра, борсола, әйләнә-тирә урмандарҙы, тауҙарҙы ҡыҙырып сыға.* «Ҡуңыр буға» эпосынан.

2) ‘окружающие, окружающая обстановка, среда’. Яҡын-тирәлә булған, аралашҡан кешеләр; мөхит. *Әйләнә-тирәне онотоу.* ■ *Емеш һаман баяғыса үҙенә лә, әйләнә-тирәгә лә тәрәнерәк төшөнөргә тырышып, уйлана-уйлана ары китте.* З. Биишева.

**ӘЙҮКӘ-ҠАЛМАҠ** *и. этн.* ‘название родового подразделения башкир племени Калмак’. Башҡорттарҙың ҡалмаҡ ҡәбиләһенә ҡараған ара исеме. *Әйүкә – ҡалмаҡтар аймағы.*

**ӘЙШӘ-ФАТИМА ҠУЛЫ** *и. миф.* ‘рука Фатимы (талисман в виде ладони; применяется знахарями от многих болезней)’ (баш хәреф менән). Ышаныуҙар буйынса, тылсымлы көскә эйә булған ус формаһындағы «Фатима ҡулы» тип йөрөтөлгән һәм дауалауҙа ҡулланылған амулет. *Әйшә-Фатима ҡулы тылсымлы көскә эйә. Минең ҡулым түгел, Әйшә-Фатима ҡулы.* Им-томдан.

**ӘЛӘМ-ҺӘЛӘМ** *с. ҡар.* **алам-һолам** ‘старьё, хлам; тряпьё; барахло’. Иҫкергән, туҙған кейем-һалым; сепрәк-сапраҡ. *Әләм-һәләм әйберҙе ташлау.* ■ *Ҡарттар: «Нисек кенә ҡыш сығып китербеҙ инде?» – тип һөйләнәләр ҙә әләм-һәләм кейемдәрен ҡымтып ҡуялар.* Һ. Дәүләтшина.

**ӘЛӘН-БОРХАН** *р. һөйл.*

1) ‘беспорядочно, безалаберно, как попало’. Тәртипһеҙ рәүештә. *Әлән-борхан һалыу. Әлән-борхан ырғытыу. Әлән-борхан өйөү.* ■ *Үҙе хәлһеҙләнеп ергә сүгәләне, Һибәтенә ябырылған*

*йыртҡыстар төркөмөн әлән-борхан килтергәндәй һиҙҙе ул үҙен.* Л. Яҡшыбаева.

2) ‘наспех, быстро, торопливо, суетливо, суматошно’. Ашыҡ-бошоҡ, унан-бынан ғына. *Әлән-борхан ашау. Әлән-борхан кейенеү. Әлән-борхан әҙерләү.*

**ӘЛӘН-БОРХАН БУЛЫУ** *ҡ. һөйл.* ‘торопиться, спешить’. Ашығыу, ығы-зығы килеп ҡабаланыу. ■ *Улар, шулай итеп әлән-борхан булып, йүгерешеп сығырға ҡаталарын кейеп өлгөрмәнеләр – Юлдыбай менән Ирмәт ҡарт килеп тә инделәр.* Һ. Дәүләтшина. *Анау беҙҙән дә ярлы Батый еңгәмдәр ҙә, үҙҙәренең ҡоҙалары менән кейәүҙәрен саҡырып алабыҙмы-ниме тип, унан да, бынан да йыйынып, әлән-борхан булып яталар, ти...* Ғ. Дәүләтшин.

**ӘЛӘН-ЕЛӘН** *р. һөйл.* ‘очень быстро, мельком’. Бик тиҙ, тирә-яҡҡа ҡаранып алғансы. *Әлән-елән үтеү. Әлән-елән кейенеү. Әлән-елән үтеп китеү.*

**ӘЛӘФ-ТӘЛӘФ БУЛЫУ** *ҡ.* ‘пропасть даром, зря, попусту, растратиться’. Файҙаһыҙға, бушҡа китеү; юҡҡа сығыу; юғалыу. *Аҙыҡ әләф-тәләф булды.* ■ *Хәҙер төрлө гәзит-журнал, реклама ҡағыҙҙары күп сығарыла, улары ла һуңынан әләф-тәләф булып, ерҙә, подъездарҙа туҙып ята.* «Йәшлек» гәзитенән.

**ӘЛӘФ-ТӘЛӘФ ИТЕҮ** *ҡ.* ‘транжирить, мотать, тратить впустую, растрачивать’. Файҙаһыҙға ебәреү, бушҡа сығарыу; юғалтыу. *Аҡсаны әләф-тәләф итеү. Мөлкәтте әләф-тәләф итеү. Игенде әләф-тәләф итеү.*

**ӘМӘЛ-САРА** *и. йыйн.* ‘всяческие способы, возможности, выходы, пути’. Төрлө сара. ■ *Әмәл-сара табып*

*Юшатыр аша Мораптал яғына сыҡҡас, Баязиттың әсәһен, ҡәрендәшен эҙләп табырға булдым.* С. Кулибай.

**ӘМӘЛ-ТАҠЫЛ** *и. йыйн.* 'заговор'. Им-том, дауа. *Борондан килгән әмәл-таҡыл. Әмәл-таҡыл белеү. Әмәл-таҡылды ҡулланыу.* ■ *Әйткәс әйтеп бөтәйем инде, ҡәйнәм кендексе булды, им-томға ла, өшкөрөм-төкөрөмгә лә, әмәл-таҡылға ла шәп ине, ҡайһы бер белгәндәрен миңә лә өйрәтте.* Т. Сәғитов.

**ӘМӘЛ-ТАҠЫЛ ИТЕҮ** *ҡ.* 'заговаривать, лечить народными средствами; колдовать'. Им менән кешегә дауалау маҡсатында тәьҫир итеү. *Имсе әмәл-таҡыл итте. Тоҙ менән әмәл-таҡыл итеү. Зәхмәттән әмәл-таҡыл итеү.* ■ *[Ғәрифә:] Юҡ инде, атаһы, әмәл-таҡыл итәйек, ныҡлап ауырып китеүең бар бит.* Н. Мусин.

**ӘМӘЛ-ТАҠЫЛ ҠЫЛЫУ** *ҡ.* 'заговаривать, лечить; колдовать'. Им менән кешегә дауалау маҡсатында тәьҫир итеү. ■ *[Әбей:] Минән йәшермә, әйт, әҫе мәлендә әмәл-таҡыл ҡылып ҡалайыҡ.* Т. Сәғитов.

**ӘМӘЛ-ТАҠЫМ** *и. һөйл. ҡар.* **әмәл-таҡыл**. *Әмәл-таҡым белеү. Әмәл-таҡым эшләү. Әмәл-таҡым менән дауалау.*

**ӘПЕН-СӨПӨН** *р. диал. ҡар.* **әҙ-мәҙ**. *Әпен-сөпөн генә ашау.*

**ӘПЕН-ТӨПӨН** *р.*

1) 'как попало, поверхностно'. Тейешенсә эшләмәй; арлы-бирле генә. *Әпен-төпөн эшләү.* ■ *[Егет – Дилбәргә:] Хәҙер бит ул эш менән шөғөлләнеүселәр быуа быуырлыҡ, – тип,*

*ышанмайынса баш сайҡаны. – Күберәге әпен-төпөн йөрөгән шабашниктар.* Г. Ғиззәтуллина.

2) ‘кое-как; поспешно, поверхностно’. Унан-бынан ғына, ашығып; ашыҡ-бошоҡ. ■ *Сейле-бешле ашты әпен-төпөн генә ашағандар ҙа былар [батырҙар] йоҡларға ятҡандар*. Әкиәттән.

**ӘПРӘКӘНДӘН-ӘПРӘКӘН** *р. диал.* ‘понапрасну, зря, необоснованно’. Сәбәпһеҙ, бушҡа. *Әпрәкәндән-әпрәкәнгә әрләү. Әпрәкәндән-әпрәкәнгә йөрөү.*

**ӘПСЕН-ӨПСӨН I** *и.* ‘прибаутки, заговор, шутливые слова (произносимые при ушибах детей для успокоения их боли).’ Бала-саға берәй ерен ауырттырғанда, уны имләгән булып, йыуатып әйтелә торған һүҙ. *Әпсен-өпсөн, бүрәнә ҡыçһын, ҡаны сыҡһын, унан яман ныгыраҡ.*

**ӘПСЕН-ӨПСӨН II** *и.* ‘заговор, заклинание, ворожба’. Им-том, ырым. *Әпсен-өпсөн әйтеү.*

**ӘПСЕН-ТӨПСӨН** *и. һөйл.* ‘ворожба, заговор, заклинание’. Им-том, ырым. ■ *Шул ерҙә был урман кешеһе әпсен-төпсөн уҡый ҙа тегеләргә ҡарап өрә.* Әкиәттән.

**ӘПТЕК-ҺӘПТЕК I** *и. йыйн. диал.* ‘мусор’. Кәрәкһеҙ йәки ташландыҡ ваҡ-төйәк нәмә. *Әптек-һәптекте ташлау. Әптек-һәптектән таҙартыу. Кәртә-ҡуранан әптек-һәптекте түгеү.*

**ӘПТЕК-ҺӘПТЕК II** *с. диал.* ‘всякий, ненужный, какой-то *(выражает пренебрежение, презрение к кому-либо).*’ Теләһә ниндәй. *Әптек-һәптек кеше өҙөлмәй. Әптек-һәптек әҙәмдәр.*

**ӘПӘК-СЕПӘК ИТЕҮ** *к. диал.* ‘защищать, ограждать’. Хәүеф-хәтәрҙән һаҡлау; ҡурсыу. *Һәр ваҡыт әпәк-сепәк итеү. Әпәк-сепәк итеп тороу. Һин бигерәк шул малайыңды әпәк-сепәк итәһең.*

**ӘПӘКӘЙ-СӨПӘКӘЙ** *р. һөйл.* ‘обращаться ласково, с нежностью, с любовью’. Үҙ-ара иркәләтеп, бер-береһен ныҡ ҡурсалап торған кешеләргә шаяртып әйтелә. *Әпәкәй-сөпәкәй йәшәү.*

**ӘРБӘК-ҺӘРБӘК I** *с.*

1) ‘еле заметный, чуть видимый’. Ҡараңғылы-яҡтылы булған, асыҡ күренмәгән, томанлы (иртәле-кисле, төн менән көн алмашынған, томан төшкән, ҡар яуған һ.б. ваҡытҡа ҡарата). *Әрбәк-һәрбәк ваҡыт. Әрбәк-һәрбәк таң яҡтыһы. Әрбәк-һәрбәк ут яҡтыһы.* ■ *Әрбәк-һәрбәк яҡтылыҡта Төлкөсураны танығас, ятырға әҙерләнеп йөрөгән кешеләрҙең йоҡоһо осто.* Н. Мусин.

2) ‘редкий.’ Әҙ-мәҙ, һирәк-һаяҡ ҡына булған. *Әрбәк-һәрбәк ҡар. Әрбәк-һәрбәк кенә болоттар йөҙә. Әрбәк-һәрбәк тамсы төшә.*

**ӘРБӘК-ҺӘРБӘК II** *р.*

1) ‘еле-еле, чуть-чуть’. Беленер-беленмәҫ, саҡ ҡына. ■ *Ҡараңғылыҡ мөйөштәргә, таҡта ярыҡтарына инеп юғалып, веранда эсе әрбәк-һәрбәк булды.* Т. Килмөхәмәтов. *Әрбәк-һәрбәк кенә яуған ҡар таң алдынан көслө буранға әйләнде.* Н. Мусин.

2) ‘немного, чуть-чуть (о зрении).’ Әҙ-мәҙ, саҡ-саҡ ҡына (күҙҙең күреү һәләтенә ҡарата). *Әрбәк-һәрбәк кенә күреү. Әрбәк-һәрбәк күрә башлау.* ■ *Төлкөсура, бүлмәнән сығып, өлкән ишеккә йүнәлгәйне, әрбәк-һәрбәк тар коридорҙа аңғармаҫтан кемгәләр бәрелде.* Н. Мусин.

**ӘРЕ-ҺӘРЕ** *с. диал.* ‘тусклый, еле заметный’. Беленер-беленмәҫ, тоноҡ (яҡтылыҡҡа ҡарата). ■ *Өйгә әре-һәре яҡтылыҡ тула башланы.* Т. Ғарипова. *Әре-һәре яҡтылыҡта өйҙәр, урам уртаһында йүкә ағастары, суйын рәшәткәләр айырым-асыҡ күренде.* Ш. Янбаев.

**ӘРБӘК-ҺӘРБӘК ТӨШӨҮ** *ҡ.* ‘темнеть, стемнеть’. Ҡараңғы төшөү, ҡараңғыланыу. *Күҙ бәйләнеп, әрбәк-һәрбәк төшкәс, уйынға йыйылдыҡ.*

**ӘРӘМ-ШӘРӘМ БУЛЫУ** *ҡ.* ‘пропасть даром, зря, попусту.’ Файҙаһыҙға, бушҡа китеү; юҡҡа сығыу; юғалыу. *Быяла әрәм-шәрәм булып бөттө. Аҡса әрәм-шәрәм булды.*

**ӘРӘМ-ШӘРӘМ ИТЕҮ** *ҡ.* ‘растрачивать, распылять, разбазаривать, транжирить (время, деньги); пропасть даром, зря, попусту.’ Файҙаһыҙға, бушҡа китеү; юҡҡа сығыу; юғалыу. *Аҡсаны әрәм-шәрәм итеү. Ваҡытты әрәм-шәрәм итеү. Хужаһыҙлыҡҡа һәм әрәм-шәрәм итеүҙәргә ҡаршы көрәш алып барыу.* ■ *Үҙ ваҡытында, бер бөртөгөн дә әрәм-шәрәм итмәй йыйып алырға тейешбеҙ.* Ә. Вәли. *Икенселәр: «Ундай алыҫ юлға сығып, аҡса әрәм-шәрәм иткәнсе, мин тағы бер һыйыр һатып алам, исмаһам!» - тип көлә ине.* Ә. Бикчәнтәев. *Юҡтың нимәһен әрәм-шәрәм итәһең дә, юҡты бар итеүгә өйрәтеүҙән ни файҙа?!* Д. Исламов.

**ӘРӘ-ҺӘРӘ I** *и.*

1) ‘сумерки, сумрак’. Ҡараңғылы-яҡтылы, күҙ күрер-күрмәҫ ваҡыт. *Әрә-һәрә булғас та юлға сыҡ.*

2) *диал.* ‘приближение зари’. *диал.* Таң беленгән ваҡыт. *Таң әрә-һәрәһе.* ■ *Таңдың әрә-һәрәһе, йүнләп аяҡ юлы ла күренмәй.*

Һ. Дәүләтшина. *Төн күптән ауышып, таң әрә-һәрәһе яҡыная.* С. Поварисов.

**ӘРӘ-ҺӘРӘ II** *р.* ʻизредка, иногдаʼ. Әҙ-мәҙ, һирәк-һаяҡ булып. ■ *Нәжметдин, гәҙәттәгенән айырмалы рәүештә, һыңар ишкәкле ағас кәмәгә баҫты: әрә-һәрә аҡҡан эре-яры ҡар, боҙ киҫәктәре ике ишкәкләп ишергә ҡамасаулай ине.* Т. Килмөхәмәтов.

**ӘСЕК-МӘСЕК** *р. һөйл.* ʻтак себеʼ. Улай-былай; әллә ни түгел, бер сама, уртаса. *Уның ире әсек-мәсек кенә.*

**ӘСЕ-СӨСӨ** *с. йыйн.*

1) ʻкисло-сладкоеʼ. Тәме әсе һәм сөсө нәмәләр. *Әсе-сөсө нәмәләр ашау. Әллә ҡайҙан әсе-сөсө еҫ килә.*

2) *перен.* ʻспиртные напиткиʼ. *күсм.* Иҫерткес эсемлектәр. *Магазинда әсе-сөсө нәмәләрҙең ниндәйе генә юҡ.* ■ *[Ғәләүетдин – Раузаға:] Теге ни, һин аш-һыуыңды, ... әсе-сөсөңдө генә хәстәрлә.* Т. Ғарипова.

3) *перен.* ʻгорести и неприятностиʼ. *күсм.* Тормоштағы яҡшы һәм күңелһеҙ хәлдәр. *Тормоштоң әсе-сөсөһөн татыу. Донъяның әсе-сөсөһө.* ■ *Уның, Гөлйемеште әйтәм, донъяһының бөтә әсе-сөсөһөнә бирешмәй, өнһөҙ-һүҙһеҙ ҡаршы тора торған кеше булаһы әле үк күренеп тора.* З. Биишева.

**ӘСКЕЛЛЕ-СӨСКӨЛЛӨ** *с. йыйн.*

1) ʻкислый и пресныйʼ. Төрлө-төрлө тәм ҡатнашҡан (ғәҙәттә, күңелгә оҡшамаған тәмгә ҡарата әйтелә). *Әскелле-сөскөллө тәм килгән бәлеш.*

2) ʻпрокисший, неприятныйʼ. Әсегән; тәмһеҙ (еҫкә ҡарата). ■ *Трактирҙың ишеген асыу менән әллә ниндәй әскелле-сөскөллө еҫтәр килеп һуҡлыға.* Ғ. Дәүләтшин.

**ӘСКЕЛТЕМ-СӨСКӨЛТӨМ I** *с.*

1) ‘кисловато-пресноватый, немного прокисший’. Әсегән, тәмһеҙ. *Әскелтем-сөскөлтөм еҫ.* ■ *Мәликә, гәҙәттә, урыҫ кухняһынан килә торған әскелтем-сөскөлтөм еҫле аш бүлмәһенә үтте.* Т. Ғарипова.

2) *перен.* ‘колкий, острый; непристойный’. *күсм.* Төртмәле, әҙәпһеҙ, ярамаған. ■ *Әсгәт кеүек йор һүҙлеләр әскелтем-сөскөлтөм төртмә йыр ҙа сығара.* М. Кәрим. *Был егет йораты [Айрат], шул ыңғайҙа ҡанундарға һыймаҫлыҡ әскелтем-сөскөлтөм таҡмаҡтары менән тултырасаҡ урамды.* Й. Солтанов.

3) *перен.* ‘различные по высоте (низкие, высокие), по тембру (мягкие, грубые, писклявые), приятные, неприятные (о звуках, голосах)’. *күсм.* Төрлө юғарылыҡтағы йә төрлө тембрлы, төрлө яңғырашлы (тауышҡа ҡарата). ■ *Әскелтем-сөскөлтөм тауыштар сығара торған моң.* С. Поварисов.

4) *перен.* ‘издевательский, оскорбительный’. *күсм. Көлкө ҡатыш, мыҫҡыллы.* ■ *Бынау кешенең әскелтем-сөскөлтөм йылмайыуы күңелемде төшөрҙө.*

**ӘСКЕЛТЕМ-СӨСКӨЛТӨМ II** *и. йыйн.* ‘всякие сладости, соленья’. Төрлө татлы аш-һыу. ■ *Баярҙың ашағаны май ҙа бал, эскәне әскелтем дә сөскөлтөм, кейгәне төлкө тун да ҡама тун булған.* М. Тажи.

**ӘСТЕК-БӨСТӨК** *р. һөйл.* ‘очень мало, на скорую руку, мельком *(делать что-либо)*’. Бик әҙ генә; унан-бынан ғына. *Әстек-бөстөк кенә ашау. Әстек-бөстөк кенә эшләнде.*

**ӘСӘК-ҺӘСӘК** *а. диал. йыйн.* ‘всякий’. Әллә ниндәй, үткән-һүткән. *Әсәк-һәсәктәр йыйылған шунда. Әсәк-һәсәк кешеләр йөрөй шунда.*

**ӘСӘЛЕ-ҠЫҘЛЫ** *р.* ‘мать с дочерью’. Әсәһе менән ҡыҙы икеһе бергә. *Әсәле-ҡыҙлы ғына торалар. Әсәһе-ҡыҙлы эшләү.* ■ *Миңлебанат ҡарсыҡ Фәрзәнә менән әсәле-ҡыҙлы кеүек, татыу ғына йәшәйҙәр ине.* Ф. Әсәнов. *Ғүмерҙә ҡыланмағанды, был юлы ҡартәсәйем менән апайым, әсәле-ҡыҙлы, һүҙ йәшергәндәй, шыбырлашып бер булдылар.* Г. Яҡупова. *Күрше вагондағы бер купела әсәле-ҡыҙлы икәү бара.* И. Нурғәлиев.

**ӘСӘЛЕ-УЛЛЫ** *р.* ‘мать с сыном’. Әсәһе менән улы икеһе бергә. *Әсәле-уллы татыу торалар. Әсәле-уллы бесән сабалар.* ■ *Мин немец минаһының ярсығы тишкән комсомол билетының эсенән алып, әсәле-уллы төшкән рәсем күрһәттем.* М. Кәрим.

**ӘТЕЙ-ҠАРА** *и. йыйн. диал.* ‘родители’. Ата-әсә. *Минең әтей-ҡара – башҡорттар.*

**ӘТЕР-АЛАМА** *с. диал.* ‘нищий, убогий’. Тышҡы күренеше алама, ярлы. *Әтер-алама малай.* ■ *[Байбисә:] Бынау әтер-аламаларҙы әйтәм, ҡорсаңғылар, бала-сүрәһе менән килеп һыйып тороуҙары етмәй, бай балаһын ҡағалар.* Һ. Дәүләтшина.

**ӘҮЕРЕҮ-СӘҮЕРЕҮ** *ҡ. диал.* ‘склоняться, поддаваться уговорам чьим, соглашаться с кем’. Билдәле бер тарафҡа йүнәлеш алыу; кеше яйына, кеше һүҙенә күнеү, ризалыҡ күрһәтеү. *Һүҙгә әүереү-сәүереү.*

**ӘҮЕШ-МӘҮЕШ** *р.* ‘вразвалку, вперевалку’. Ауа-түнә, алпан-толпан, аушанлап. *Әүеш-мәүеш атлау. Әүеш-мәүеш китеп бара ине.*

**ӘҮЕШ-ТЕҮЕШ** *р. диал. ҡар.* **әүеш-тәүеш**. *Әүеш-теүеш итеү. Әүеш-теүеш итеп йөрөйбөҙ әле.*

**ӘҮЕШ-ТӘҮЕШ** *р. ‘как попало, кое-как’*. Нисек етте шулай, арлы-бирле; өҫтән-мөҫтән генә. *Әүеш-тәүеш терәтелгән һарай. Әүеш-тәүеш итеп мейес сығарыу.* ■ *[Хәсән] әүеш-тәүеш терәтеп ҡуйған йорт-ҡаралты менән донъя көттө.* М. Хәйҙәров. *Әүеш-тәүеш кенә эшләнгән кәртә ҡапҡа.* Р. Шәкүр. *Улар, ҡарт менән ҡарсыҡ, килештерәләр инде, әүеш-тәүеш донъя көтөп яталарҙыр.* Р. Камал.

**ӘҮЕШ-ТӘҮЕШ ИТЕҮ** *ҡ.*

1) ‘переносить, перемещать, прибрать’. Нимәнелер бер урындан икенсе урынға һалыу, күсереү. *Нәмәләрҙе әүеш-тәүеш итеп өйҙө йыйыштырыу. Китап шкафын әүеш-тәүеш итеү. Өйҙө әүеш-тәүеш итеү.* ■ *Айсыуаҡ әүеш-тәүеш итеп, һәлмәк йомғаҡты бер ҡулынан икенсе ҡулына күсереп йомарлағансы, бер кем бер һүҙ өндәшмәне, хихылдаманы.* Ш. Янбаев.

2) ‘сводить концы с концами; заниматься перепродажей’. Бер нәмәне икенсеһенә алмаштырыу, алыш-биреш менән шөғөлләнеү. *Әүеш-тәүеш итеп донъя көтәбеҙ.* ■ *Башымда: «Нимә эшләп йөрөй ул [Һырғауыл] бында?» — тигән нәфрәтле һорау тыуҙы. Әллә билет менән әүеш-тәүеш итеп йөрөймө?* Ш. Бикҡол. *Ә быныһы, теге [Рәхмәй ҡараҡ] килтергәнде йыйып, әүеш-тәүеш килтерә ине.* В. Исхаҡов. *Баҙарҙан баҙарға йөрөп, күн һатып, әүеш-тәүеш итеп тапҡан аҡсаһына бармаҡ осонан һығып сығарып ҡына булһа ла, Әхмәди сепаратор һатып алырға булды.* Ж. Кейекбаев.

3) ‘соорудить, собирать кое-как что-либо’. Йүнен табып, унан-бынан ҡораштырыу. *Әүеш-тәүеш итеп мейес сығарыу.* ■ *Бына шулай тырышып-тырмашып, әүеш-тәүеш итеп, тереклеген көйгә һалып ебәрҙе Шәрғиә.* Ә. Хәкимов.

**ӘҮЕШ-ТӘҮЕШ КИЛЕҮ** *к.* ‘топтаться на месте, стоять (о делах)’. Бер урында тапаныу, бер урында тороу (эш тураһында). *Әүеш-тәүеш килеп тороу.*

**ӘҮЕШ-ТӘҮЕШ КИЛТЕРЕҮ** *к.*

1) ‘завершить кое-как, поставить как попало’. Нимәнелер урынынан күсереү, теләһә нисек ҡуйыу, тамамлау. *Китаптарҙы әүеш-тәүеш килтереп бутап бөткән.* ■ *Ойоштороу эштәрен бер аҙ әүеш-тәүеш килтереү менән, Зәки Вәлиди Беренсе башҡорт ҡоролтайын йыйыу айҡанлы халыҡҡа мөрәжәғәт яҙырға ултырҙы.* Р. Байымов.

2) *перен.* ‘сводить концы с концами’. *күсм.* Ауырлыҡ менән йәшәү, эшләү. *Әүеш-тәүеш итеп донъя көтәләр.*

3) ‘заниматься перепродажей’. Бер нәмәне икенсеһенә алмаштырып, алыш-биреш менән шөғөлләнеү. *Ауылдаштар менән әүеш-тәүеш килтереп йәшәйбеҙ.*

**ӘШТЕР-ӨШТӨР** *р.*

1) ‘кое-как, не в полную меру’. Көс-хәл менән, яй ғына, ипләп кенә. *Әштер-өштөр генә эшләп йөрөү.* ■ *[Мотиғулла – Зәйнигә:] Яланда саф һауала ғына колхоз эшендә әштер-өштөр ҡыбырлап йөрөү түгел шул.* Й. Солтанов.

2) ‘кое-как, второпях’. Арлы-бирле, ашыҡ-бошоҡ. *Әштер-өштөр ҡоролған ҡыуыш.*

**ӘШТЕР-ӨШТӨР ИТЕҮ** *ҡ.*

1) ʻпередвигаться с трудом, еле-елеʼ. Көс-хәл менән, яйлап ҡына ҡуҙғалыу. *Әштер-өштөр итеп йөрөү.* ■ *Поезд китергә сәғәттән аҙ ғына ваҡыт ҡалғас, ул [Зәки] кәрәкле әйберҙәрен сумаҙанға әштер-өштөр итеп кенә тултырҙы ла Гәүһәргә оҙон итеп хат яҙҙы.* И. Абдуллин.

2) ʻсделать кое-какʼ. Арлы-бирле эшләү. *Әштер-өштөр итеп ҡуйыу.* ■ *Сабылған бесәндең яртыһы болонда уҡ түгелеп-сәселеп әрәм була, йыйылғанын да әштер-өштөр итеп өйәләр йәки баҫыу ситенә ышырып ут төртәләр.* Ш. Янбаев. *Ә әҙәби сотрудник, көн һайын редакция тупһаһын тапаусы бераүҙең әштер-өштөр итеп кенә яҙған нәмәһен алып, башын баҫып, бик күп төҙәтеүҙәр индерә-индерә, уны матбуғатҡа әҙерләргә тотонdo.* В. Исхаҡов.

**ӘШТЕР-ӨШТӨР** *ҡ. ҡар.* **әштер-өштөр итеү**. ■ *Игендәрҙе, болонлоҡтарҙы тапатһындармы, шартлатҡан соҡорҙарҙы әштер-өштөр килеп кенә күмдерһендәрме, әйҙә, шунан һуң совхоз, колхоз, лесхоз етәкселәренән ялыу яуа башлай!* Ш. Янбаев.

## Ю

**ЮҠ-БАР** *и. йыйн.*

1) ʻразные ненужные вещи, барахло, пустяк, мелочьʼ. Ваҡ-төйәк әһәмиәтһеҙ нәмәләр. *Юҡ-бар менән булыу.* ■ *Гәрәй белә, үрелмәй юҡ-барға, иң кәрәк нәмәләрҙе ала.* Б. Бикбай. *Үмәрҙең, ҡыҙы алдында тауыш сығармаҫҡа булһа ла, йыуаш төҫ менән тырҫылдап, юҡ-барға мыжыуы уның кәйефенең насар икәнлеген белдерә ине. Гөлйөҙөм сығып киткәс, ул Муйылбикәгә кисәге һүҙҙәрен ныҡланы.* Һ. Дәүләтшина. *Йәғҙә тәүге минуттан*

*ук үҙен ябай һәм иркен тотто: юҡ-барға ҡыҙыҡманы, сабыр, кеселекле ине.* А. Абдуллин.

2) *перен.* ‘чушь, ложь, клевета, вздор’. *күсм.* Буш, ялған һүҙ, имеш-мимеш, ғәйбәт. *Юҡ-барҙы һөйләү.* ■ *[Мырҙабай – Ғәлиәхмәткә:] Аҡылың булһа, ауылға ҡайтҡас, юҡ-бар лығырлап йөрөмәҫһең, моғайын.* Р. Байымов.

3) *перен.* ‘всякая чертовщина, суеверия, суеверные образы и представления’. *күсм.* Хөрәфәттәр, ырым-ышаныуҙар. *Юҡ-бар менән былашма. Юҡ-барға ышаныу.*

**ЮҠ-БУШ** *с.* ‘неважный, незначительный, несущественный’. Әһәмиәтһеҙ, буш. *Юҡ-буш уй. Юҡ-буш һүҙ. Юҡ-буш хәбәр тыңлау. Юҡ-буш эш менән булыу.* ■ *[Рәхимә:] Берүк, ундай юҡ-буш уйҙарҙы аҡылыңдан сығар, Айбулат.* Һ. Дәүләтшина.

**ЮҠҠА-БУШҠА** *р.* ‘напрасно, зря’. Һис кәрәкһеҙгә; бушҡа. *Юҡҡа-бушҡа хафаланыу.*

**ЮҠЛЫ-БАРЛЫ** *с. йыйн.* ‘незначительный, ничтожно малый’. Барлы-юҡлы, әҙ-мәҙ. *Юҡлы-барлы игенде әрәм итмәгеҙ!*

**ЮЛ-АЯҠЛЫҠ** *и.* ‘подарок или гостинцы путника детям’. Юлсының балаларға бүләге йәки күстәнәсе. *Юлсының юл-аяҡлығына балалар шатланды.*

**ЮЛМАҠ-ҺАЛМАҠ** *с. диал.* ‘оставшийся; неиспользованная часть чего-л.’. Ҡалған-боҫҡан; ҡалған-ҡатҡан. *Юлмаҡ-һалмаҡ аҙыҡ. Юлмаҡ-һалмаҡ нәмә. Юлмаҡ-һалмаҡ туҡыма. Юлмаҡ-һалмаҡ мал-тыуар.*

# Я

**ЯБЫЛЫР-ЯБЫЛМАҪ I** *с.* ‘полузакрытый, неплотно закрытый’. Ябылып бөтмәгән, яртылаш ябылған. *Ябылыр-ябылмаҫ ишек.*

**ЯБЫЛЫР-ЯБЫЛМАҪ II** *р.* ‘полузакрыто, неплотно закрыто (о чём-либо)’. Ябылып бөтмәгән хәлдә, яртылаш ябылған рәүештә. *Ябылыр-ябылмаҫ тороу.*

**ЯҒАЛ-ЙОҒАЛ** *с. диал. ҡар.* **алаҡ-йолаҡ** ‘*полосатый, в полоску; пятнистый*’. Ала-сола таптары булған, яғыллы-йоғолло. *Яғал-йоғал сапан. Яғал-йоғал булып бысраныу.*

**ЯҒЫЛЛЫ-ЙОҒОЛЛО** *с. ҡар.* **яғал-йоғал**. *Яғыллы-йоғолло күлдәк.*

**ЯҘА-ЙОҘА** *р.*

1) ‘кое-как, как попало’. Бер тегеләй, бер былай. *Яҙа-йоҙа эшләү. Яҙа-йоҙа йөрөү.* ■ *Ул [Шәһиҙә әбей], калуштарын яҙа-йоҙа кейеп, урындыҡ ситенә ултырҙы.* Һ. Дәүләтшина. *Яҙа-йоҙа этмәләнгән ел ҡапҡалар алдына ҡуйылған эскәмйәләрҙә ҡарт-ҡоро йыйналып гәп һата.* И. Ноғманов.

2) ‘еле-еле, чуть-чуть, немножко’. Әҙ-әҙ генә, сала-сарпы. *Яҙа-йоҙа ғына күреп ҡалыу. Яҙа-йоҙа ишетеү. Яҙа-йоҙа хәтерләү.* ■ *Иштуған Никитаның бышылдап һөйләгән был һүҙҙәренән, яҙа-йоҙа ишетеп булһа ла, ҡайҙалыр кемдәрҙеңдер батшаны ҡолатыу, илгә тыныслыҡ, ирек, бәхет яулап алыу өсөн ҡаты көрәш алып барыуын аңланы.* З. Биишева.

**ЯҘҒЫ-КӨҘГӨ** *с.* ʻвесенне-осенний; демисезонныйʼ. Яҙ һәм көҙ көндәрендә була торған. *Яҙғы-көҙгө кейем. Яҙғы-көҙгө эштәр. Яҙғы-көҙгө юлһыҙлыҡ.*

**ЯҘЛЫ-КӨҘЛӨ** *р.* ʻвесной и осеньюʼ. Яҙғы һәм көҙгө ваҡытта. *Яҙлы-көҙлө көн йонсоу була.* ■ *Яҙлы-көҙлө лыпырлап ятҡан, әҙәм үтә алмаҫ ҡуйы, бейек ҡамышлы бихисап һаҙ-күләүектәр аша яҡшы ҡоралланған дошманды ауылдыҡыларҙың ярҙамынан тыш бәреп сығарыу еңелдән булмаҫ ине.* Р. Байымов. *Мәсет түбәһе лә ана шулай, яҙлы-көҙлө бер тамсыһыу тотмай.* Б. Бикбай.

**ЯҘЫУ-ҺЫҘЫУ** *и. йыйн.* ʻразные письменные работы; писанинаʼ. Төрлө яҙыу эше. *Яҙыу-һыҙыу эше менән булышыу. Яҙыу-һыҙыу кәрәк-яраҡтары.* ■ *Яҙыу-һыҙыу ҙа тыйылмаған.* Р. Байымов. *Бына Әсләм яҙыу-һыҙыуға әүәҫ, етәкселеккә тотонор, ҡарттың өмөтөн аҡлар.* Р. Камал.

**ЯҠШЫ-ЯМАН** *и. йыйн.* ʻдобро и злоʼ. Яҡшы һәм яман (эш-хәл һәм кешеләргә ҡарата). *Яҡшы-ямандан һаҡланыу.* ■ *Һиҙиәт бабай! Зиһенең һәр саҡ һиҙгер донъялағы яҡшы-яманға.* Р. Бикбаев. *Рәмзиә улы Айраттың теле асылған ваҡыттан алып ошо көнгәсә үҙе белгән яҡшы-яман ягын күҙ алдына килтерергә тырышып ҡараны.* Х. Зарипов.

**ЯҠЫН-ЙОРО** *и. йыйн. диал. ҡар.* **дуҫ-иш.** *Яҡын-йоро бар. Яҡын-йороң булыуы яҡшы.*

**ЯҠЫН-ТИРӘ** *и. йыйн.* ʻземли, лежащие поблизости, окрестность, округаʼ. Яҡында булған урын, ер; тирә-яҡ. *Яҡын-тирәлә ултырған ауылдарҙа газ үткәрелеп бөткән.*

**ЯҠЫН-ЯРЫ** *с.* ʻближний, находящийся рядом, поблизостиʼ. Яҡында булған урын. *Яҡын-яры урын.*

**ЯЛАНЫП-ЯҪҠАНЫП** *ҡ.*

1) ʻоблизываться, облизываясьʼ. Нимәгәлер ымһынып иренде ялау. ■ *Ит хаҡында һүҙ сыҡҡас, айыу ҙа телен сығарып, яланып-яҫҡаныып ҡуйған.* Ж. Кейекбаев.

2) *перен.* ʻпитаться кое-какʼ. *күсм.* Унан-бынан эләктереп, тамаҡ туйҙырыу; ымһыныу. ■ *Низамый ағай үҙе ғүмер баҡый байҙар тирәһендә яланып-яҫҡаныып ... йөрөй.* Ф. Исәнғолов.

**ЯЛАН-ҠЫРҘАР** *и.* ʻполе, степьʼ. Йәйрәп ятҡан тигеҙ ялан. *Ҡараңғы төндәрҙә йондоҙҙар киңлегендә эҙләгән, ялан-ҡырҙарҙа тапмаған, һунар ваҡытында атмаған мөғжизәнең ошо икәнен аңлаған.* Легенданан.

**ЯЛАН-ЯПАН** *и. диал.* ʻполе, степьʼ. Йәйрәп ятҡан тигеҙ ялан. *Ялан-япанға сығалар. Ялан-япанда йөрөһәм, ҡайғым тарала.*

**ЯЛБЫР-ЙОЛБОР** *с.* ʻрастрёпанныйʼ. Ялбырап һалынып торған, теткеләнеп туҙған. *Ялбыр-йолбор кейем.* ■ *Уңарсы әрәмәлек артынан ялбыр-йолбор иткән бер баш күренде.* Ғ. Хөсәйенов.

**ЯЛП-ЙОЛП** *оҡш.* ʻподражание частому мельканию чего-либоʼ. Ҡабат-ҡабат ялп иткәнде белдергән һүҙ. *Ялп-йолп килеү. Ялп-йолп итеү.* ■ *Ялп-йолп итеп, бер өкө лә күренеп ҡалды.* Р. Ғабдрахманов. *Ялп-йолп иткән йыртҡыс ҡолап китте, түбәнләскә табан тәгәрләп барып, баҫырау йыуанлығы ағасты һындырҙы.* Н. Мусин.

**ЯЛТ-ЙОЛТ** *оки.*

1) ‘подражание поблёскиванию, частым вспышкам света’. Ҡабат-ҡабат ялт итеп, балҡып киткәнде, йылтырағанды белдергән һүҙ. *Ялт-йолт йәшен йәшнәй.* ■ *Туктауһыҙ самолеттар оса; алда, ҡыҙғылт шаңдаҡ ялт-йолт итеп дерелдәп торған офоҡ артында, снарядтар шартлай.* Ә. Бикчәнтәев. *Йәшен уттарынан төн ялт-йолт итеп, бик ҡаты күк күкрәүҙән өй тетрәп торҙо.* Ә. Вәли. *Усаҡта ғына аҙыраҡ ут әкрен генә, ялт-йолт итеп кенә яныптора.* М. Ғафури.

2) ‘подражание быстрому движению’. Етеҙ хәрәкәтте, ҡапыл булған эш-хәлде белдергән һүҙ. ■ *Сыуаҡай әбей, әллә үҙенең ҡыҙып, артығыраҡ һөйләп ташлауын тойоп, ҡапыл туҡталып ҡалды, тирә-яғына ялт-йолт ҡаранып алды.* З. Биишева.

**ЯЛТЫР-ЙОЛТОР** *с.* ‘блестящий’. Ялт-йолт итеп ялтырап торған; ялтыр. *Ялтыр-йолтор кейем.* ■ *Ялт-йолт фотоаппарат уттары, камералар, ялтыр-йолтор журналдарҙан интервью алырға килгән ялбыр-йылғыр репортёрҙар.* Р. Сабитова.

**ЯМАН-АРТАҠ** *и. йыйн.* ‘всякая нечисть’. Төплө яман зат. ■ *Был ике быҙау һис һыу-һүлгә эләкмәй, ҡош-ҡортҡа осрамай, яман-артаҡҡа тотолмай, Уралға барып сыҡҡан.* “Ҡуңыр буға» эпосынан.

**ЯМАН-ҠАРА** *и. кар.* **яман-артаҡ**. *Яман-ҡаранан һаҡланыу. Яман-ҡаранан өшкөрөү.*

**ЯМАН-ХӘТӘР I.** *и. йыйн.* ‘опасность’. Бәлә, төрлө ҡайғы-хәсрәт, хәүеф-хәтәр. *Яман-хәтәрҙән һаҡланыу.*

**ЯМАН-ХӘТӘР II.** *с.* ‘опасный, страшный’. Ҡурҡыныс, хәүефле, хәүеф-хәтәрле, хәтәр. *Яман-хәтәр хәбәр.*

**ЯН-ЙӘЙӘ** *и. йыйн. ҡар.* **ян-һаҙаҡ.** ■ *Кеше, суҡмарҙан тыш, һөңгө, һалдау, уҡ, ян-йәйә уйлап тапҡан, һуңынан ҡылыс барлыҡҡа килгән.* С. Ильясов.

**ЯНСА-ЙӨРӘККӘЙ** *и. диал.* 'душенька, душечка, милый, милочка'. Яратып, иркәләп әйткәндә ҡулланыла. *Янса-йөрәккәй менән осрашыу. Янса-йөрәккәйемде һағындым.*

**ЯН-ТЕРӘК** *и. йыйн.* 'опора, поддержка'. Ярҙам итерлек, таяныс булырлыҡ кеше. *Ян-терәк булырҙай кеше.*

**ЯН-ТИРӘ** *и. йыйн. диал. ҡар.* **ян-яҡ.** *Ян-тирәне күҙәтеү. Ян-тирәгә бағыу. Ян-тирәне ҡараштырыу.*

**ЯН-ФАРМАН** *р. ҡар.* **йән-фарман.** *Ян-фарман йүгереү. Ян-фарман эшләү. Ян-фарман ҡысҡырыу.* ■ *Ҡаршылағы туғайҙа бер һыбай ян-фарман саба ине.* Ғ. Ибраһимов.

**ЯН-ҺАҘАҠ** *и. йыйн.* 'лук и стрелы'. Уҡтан, яндан торған ҡорал. *Ян-һаҙаҡты ҡулға алыу.* ■ *Урал шоңҡарындай һайлам егеттәр, командаһы-командаһы менән тупланып, Өфөгә йыйналды, һәр ҡайһыһы ат ҡушарлап, арҡаларына ян-һаҙаҡ аҫҡан, һөңгө тотҡан.* Ғ Ибраһимов. *[Башҡорт ғәскәренең] арҡаларында ян-һаҙаҡ, билдәрендә ҡылыс, эйәр ҡашында арҡан, һәлмәк һуйыл.* Ә. Хәкимов.

**ЯНЫП-БЕШЕП** *ҡ.* 'распариться, разогреться'. Эҫелектән бик ныҡ тирләү; бешегеү. ■ *Күп тә үтмәне, янып-бешеп Ҡәҙерғол ҡайтып инде.* Р. Ғабдрахманов. *Хәбировтар арыбире тәмәке тартҡылағансы, идараға янып-бешеп бөткән Сәхипьямал, уның артынан аяҡ остарына ғына баҫып Әҡлимә*

*килеп керҙе.* Х. Ғиләжев. *Йәш хужа менән йәш хужабикә Имәнлегүл тугайында янып-бешеп кәбән һала.* М. Кәрим.

**ЯНЫП-КӨЙӨП** *ҡ.*

1) ‘горевать, страдать, томиться’. Бик ныҡ борсолоп, ныҡ ҡайғырыу. *Янып-көйөп ултырыу.* ■ *Фәтих ағай сәпсәлән кеше түгел, юҡ-барға, белер-белмәҫ нәмә өсөн алдан уҡ янып-көйөп бармай.* И. Абдуллин. *Ғәли ағай янып-көйөп, борсолоп ҡайтып ингәндә, Ҡыҙырас өйҙә, аҡ булканы ҙур-ҙур тешләп, сәй эсеп ултыра ине.* З. Биишева.

2) *перен.* ‘любить, страдать, маяться от любви’. *күсм.* Мөхәббәттән ғазапланыу. ■ *Ул [Вәли] бәхетһеҙ тәүге мөхәббәте өсөн янып-көйөп бөткән.* М. Ғиләжев. *[Фәсхетдин – Рәшиҙә тураһында:] Донъяла шулай ҙа була бит: һин уны йылдар буйы янып-көйөп яратып йөрөйһөң, ә ул күҙенә лә элмәй.* Ғ. Аллаяров. *Вахит, ауыл малайы, мөхәббәттән янып-көйөп йөрөһә лә, шундай авторитетлы ҡыҙға [Зөләйхәгә] яҡынлашырға әмәл тапмаған, күрәһең.* М. Садиҡова.

3) *диал.* ‘болеть с высокой температурой, температурить’. *диал.* Юғары температура менән ауырыу. *Янып-көйөп ауырып ята.*

**ЯН-ЯҠ** *и.* ‘округа, сторона’. Яҡын-тирәләге, әйләнәләге ер; тирә-яҡ. *Ян-яҡҡа күҙ ташлау. Ян-яҡты байҡау.* ■ *Артта гөрһөлдәгән тауыштар көсәйгәндән-көсәйә барҙы, ян-яҡтан һауаға ут күбәләре күтәрелде.* Ғ. Аллаяров. *Һарыбай йәһәт кенә ян-яҡҡа ҡаранып алды.* Р. Байбулатов.

**ЯҢҒЫҘ-ЯЛПЫ** *и. йыйн.* ‘одинокие; одиночки’. Ярҙамсыһыҙ, терәкһеҙ яңғыҙлыҡта ҡыйырһытылған кешеләр. *Яңғыҙ-ялпылар йыйылған.*

**ЯҢҒЫҘ-ЯРАН** *р. ҡар.* **яңғыҙ-яры II.** ■ *Крәҫтиән әүәлгесә яңғыҙ-яран йәшәй, иген игә алмай.* Р. Камал.

**ЯҢҒЫҘ-ЯРПЫ** *р. ҡар.* **яңғыҙ-яры II.** ■ [*Сәлимә – Алтынбайға:] Башлы-күҙле булғанһыңдыр инде, ҡәйнеш, был йәшеңә саҡлы яңғыҙ-ярпы йөрөмәйһеңдер.* З. Ураҡсин.

**ЯҢҒЫҘ-ЯРТЫ** *р. ҡар.* **яңғыҙ-яры II.** ■ *[Еңгәләре – Әхмәтйәнгә:] Етер инде һәүерекләнеп йөрөүең, ошо йыйында, сосайып, кәләш һайлап ҡал, яңғыҙ-ярты ҡартаяһың бит, юғиһә.* И. Ноғманов.

**ЯҢҒЫҘ-ЯРЫ I** *с.* 'совсем одинокий'. Бөтөнләйгә бер үҙе; япа-яңғыҙ. *Яңғыҙ-яры ир.* ■ *Ул саҡта Оло Уралтау кейек-ҡырағай йыртҡыстарға иҫәпһеҙ бай, яңғыҙ-яры йөрөүселәргә ҡурҡыныс була.* «Ҡуңыр буға» эпосынан.

**ЯҢҒЫҘ-ЯРЫ II** *р.* 'одиноко, в одиночестве; в одиночку'. Бер кемһеҙ, яңғыҙ. *Яңғыҙ-яры йәшәү.* ■ *Аҡтар хәҙер ул юлдан яңғыҙ-яры түгел, бәләкәй отрядтар менән үтергә лә баҙнат итмәй башлағандар.* З. Биишева.

**ЯҢҒЫҘ-ЯРЫМ I** *с. ҡар.* **яңғыҙ-яры I.** ■ *[Нәсри – Сәлимә тураһында:] Шулай ҙа яҙмышҡа буйһоноуы шул булдымы, күпме генә көтһәң дә, үлгәндәр кире ҡайтмай, тип уйланымы, бәлки, яңғыҙ-ярым тормоштоң әсеһе лә үҙәгенә үткәндер инде, аҙаҡ килеп, тәкдимемде ҡабул итте, рәхмәт төшкөрө!* Ғ. Лоҡманов.

**ЯҢҒЫҘ-ЯРЫМ II** *р. ҡар.* **яңғыҙ-яры II**. ■ *Яңғыҙ-ярым, интегеп йәшәү, байҙарға бил бөгөү заманы үтте.* Р. Камал. *[Нәкиә:] Әллә ниңә, төнгө ябалаҡтай һерәйеп, яңғыҙ-ярым йәшәүҙән ҡурҡам.* Й. Солтанов. *Башҡа өйҙәрҙән ситтә, яңғыҙ-*

*ярым ултырғанлыҡтан, Ихсанбайҙар өйөндә сыҡҡан янғын башҡа йорттарға күсмәгән.* Т. Ғарипова.

**ЯҢЫ-ЮРЫ** *р. диал.* ‘только что, совсем недавно.’ Әле яңы, яңы ғына. ■ *Яңы-юры тыуып килгән хәҙерге әҙәби процестың ҡайһы бер моменттары хаҡында киҫеп кенә әйтеүе лә ҡыйын.* Ғ. Хөсәйенов.

**ЯҢЫ-ЮРЫҠ** *р. диал. ҡар.* **яңы-юры.** *Яңы-юрыҡ килеү. Яңы-юрыҡ барыу.*

**ЯҢҒЫҘ-ЯЛПЫ** *и. йыйн.* ‘одинокие люди’. Ярҙамсыһыҙ, терәкһеҙ яңғыҙлыҡта ҡыйырһытылған кешеләр. *Был донъяла яңғыҙ-ялпылар ҙа аҙ түгел.*

**ЯРБАН-ЙОРБАН** *р. диал. ҡар.* **ялп-йолп**. *Ярбан-йорбан килеү. Ярбан-йорбан ялтырау. Ярбан-йорбан күренеп ҡалыу.*

**ЯРЛЫ-ЮҠҺЫЛ** *и. йыйн.* ‘неимущие, бедные люди, нищие’. Ярлы һәм юҡһылдар. *Ярлы-юҡһыл булыуҙарына ҡарамаҫтан, бай яғына ауып, үҙҙәрен Сурагол яҡлыларға тере дошман күрһәтелгән.* Т. Хәйбуллин.

**ЯРЛЫ-ЯБАҒА** *и. йыйн.* ‘бедные люди, беднота, бедняки’. Ярлы халыҡ. ■ *Йомшаҡ иҫке ерҙәрҙе генә һөрөп сәскән ярлы-ябағаның баҫыуында ашлыҡ тамырынан уҡ көйөп, ерҙең ҡара саңы осоп ята.* З. Биишева.

**ЯРЛЫ-ЯБАҒАЙ** *с. диал. йыйн.* ‘бедняки’. *Ул [Шәһәрбаныу], элеккесә, ярлы-ябағай бисәләргә туйғансы ҡысҡырырмын да туктатырмын тип уйланы, шикелле. Эш улай булып сыҡманы.* Һ. Дәүләтшина.

**ЯРЛЫ-ЯБАҒЫ** *и. диал. йыйн.* *ҡар.* **ярлы-ябаға**. ■ *Тирә-яҡтағы ауылдарҙың ярлы-ябағыһы Хоҙайҙың бирмеш көнөндә уға [баярға] тамаҡ хаҡына эшләгән.* М. Тажи.

**ЯРЛЫ-ЯЛПЫ** *и. диал. йыйн.* *ҡар.* **ярлы-ябаға.** ■ *Ярлы-ялпының елеген һурғандан-һурҙылар.* Т. Хәйбуллин. *Сабирҙың нигеҙҙә ябайыраҡ кешеләр, ярлы-ялпы туҡтай торған ҡунаҡханаһына килергә мәжбүр булды старшина.* Н. Мусин. *Ыҙа-яфа күреп интеккән ярлы-ялпы, илдәге тәҡәт тотҡоһоҙ хәлгә түҙә алмайынса, яу yраҡтарын аҫып, ярау аттарға атланды.* Ғ. Ибраһимов.

**ЯРЛЫ-ЯПАН** *и. диал. йыйн.* *ҡар.* **ярлы-ябаға**. ■ *Көслө, форсатлыға ләззәт, хилүәт, ярлы-япан өсөн тормош тар.* С. Кулибай. *Түләүен түләй алмаған ярлы-япандың, күп балалы тол ҡатындарҙың аҙаҡҡы һыйырын тартып ала яһаҡсылар.* Ә. Хәкимов.

**ЯРТЫ-ЙОРТО I** *с.* ‘половинчатый, неполный; неполноценный, ущербный.’ Тейешле күләм-дәүмәле кәм, тулы булмаған. *Ярты-йорто яуап. Ярты-йорто эш.* ■ *Полктың ярты-йорто көсө менән генә Обливская станцияһын нисек һуғышып алырға?* Я. Хамматов.

**ЯРТЫ-ЙОРТО II** *р.* ‘наполовину, половинчато’. Тулы сифатлы түгел, кәмселекле. *Ярты-йорто булыу. Ярты-йорто эшләү.* ■ *Азамат ярты-йорто эшләй алмай, яңынан айҡашырға тура киләсәк.* Р. Солтангәрәев. *Йәнтүрәнең башҡортса һөйләгәндәрен ярты-йорто ғына аңлағанлыҡтан, Козиндың кәйефе ҡырылыбыраҡ ултыра ине.* Н. Мусин. *Иллә-мәгәр Алпаров ярты-йорто һөйләшә белмәй.* Яр. Вәлиев.

**ЯРЫҠ-ЙОРОҠ I** *с.* ‘треснувший в разных местах’. Төрлө ерҙәренән ярыҡ. *Ярыҡ-йороҡ таҡта.* ■ *Ағас табаҡ-сеүәтәләре ярыҡ-йороҡ, сынаяҡ өҫтө ҡоршаулы, аҫтары китек, камфаркаға ҡуйылған сәйгүн бер нисә урындан ялтырауыҡлы тимер сыбыҡ менән тарттырыулы.* Я. Хамматов.

**ЯРЫҠ-ЙОРОҠ II** *и. йыйн.* ‘всякого рода щели’. Һәр төрлө ярыҡтар. *Ярыҡ-йороҡтан ел өрә.* ■ *Бураның балсыҡ менән һыланған ярыҡ-йорогонан, тупраҡ һалынған лыпын түбәһенән аҡ быу күтәрелә.* Ш. Янбаев.

**ЯРЫМ-ЙОРТО I** *с.* ‘половинчатый, неполный’. Тейешле кимәл-дәрәжәнән кәм; ярты-йорто. *Ярым-йорто белем. Ярым-йорто уҡыу. Ярым-йорто эшләү.* ■ *Сәғиттең һәүетемсә генә аҡҡан тормошо әллә ниндәй серҙәр, асылыр-асылмаҫ, ярым-йорто һөйләшеүҙәр, ишаралар менән сорнала барҙы.* Ғ. Хисамов.

**ЯРЫМ-ЙОРТО II** *р.* ‘наполовину, кое-как’. Еренә еткермәйенсә; ялтылаш, ярты-йорто. *Ярым-йорто эшләү. Ярым-йорто йыуыу.*

**ЯРЫМ-ЯРТЫ** *с. ҡар.* **ярты-йорто**. ■ *Бына бер мәл болот туҡкындары араһынан ярым-ярты ай сумып сыҡты ла үҙенең тоноҡ нурҙары менән тау аръяғындағы туғайға йәйелгән быуа өҫтөн алаңғырт-бөләңгерт кенә яҡтыртҡандай итте.* Ғ. Ибраһимов. *Үҙе батыр ғына йылмайһа ла, Таңһылыуҙың тауышы ярым-ярты ғына сыға ине.* М. Садиҡова.

**ЯҪТЫҠ-ТҮШӘК** *и. йыйн.* ‘постельные принадлежности’. Урын-ер әйберҙәре. *Яҫтыҡ-түшәкте йыйып ҡуйыу. Яҫтыҡ-түшәкте өйөп ҡуйыу. Яҫтыҡ-түшәкте йәйеү.*

**ЯҪТЫҠ-ЮРҒАН** *и. йыйн. ҡар.* **яҫтыҡ-түшәк**. ■ *Түргә ҡуйылған һандыҡтар ҙа, улар өҫтөнә йәйелгән яҫтыҡ-юрғандар ҙа уңған ҡулдар менән йыйыштырылған.* Ғ. Ибраһимов. *Ришат, магазиндарға йөрөп, аҙыҡ-түлек ташыны, яҫтыҡ-юрған алып ҡайтты, Виләнең өҫтөнә япты, ашарға бешерҙе.* Ғ. Хисамов.

**ЯТА-ТОРА** *р.* ‘тихонько, потихоньку, осторожно, постепенно.’ Әкренләп, яйлап. ■ *Баш һау булһа, мал табыла. Ҡабаланырға ярамай, ята-тора бөтәһе лә табылыр.* М. Тажи. *[Заһиттың әсәһе Йомай әбей:] Заманалар ауырайып китте, ҡоҙалар ҡыҙҙың башын биргәс, аяғын тартмаһындар, ҡалымды ята-тора бирербеҙ, киленде барып оҙатып алайыҡ, донъялар үҙгәрҙе, тыныслыҡ бөттө.* Һ. Дәүләтшина.

**ЯТ-ЙОЛАМА** *и. йыйн.* ‘чужие, посторонние люди’. Төрлө ят кеше. *[Ғазиса:] Ят-йолама алдында нисек йөҙөн асмаҡ кәрәк?* В. Нафиков.

**ЯТ-ЯМАН** *и. йыйн.* ‘чужие, враги’. Сит, дошман кешеләр. *Тарих юлсыһы яҡшы дуҫҡа йәнен йәлләмәгән, ят-яманға булған аяуһыҙ.* С. Кулибай.

**ЯУ-ФЕТНӘ** *и.* ‘мятеж, бунт’. Хөкүмәткә ҡаршы күтәрелгән ҡоралды сығыш. ■ *Губернатор яу-фетнәнең еңел генә баҫылып ҡалыуына һис ышанмай.* Ғ. Хөсәйенов.

**ЯУЫМ-КҮҘ** *и. диал. ҡар.* **яуым-төшөм**. *Яуым-күҙ юҡ саҡта, йәһәтерәк сабылған бесәнде йыйып алайыҡ.*

**ЯУЫМ-ТӨШӨМ** *и. йыйн.* ‘осадки’. Ҡар, ямғыр һ. б. атмосфера күренештәре; яуым. *Яуым-төшөм күп. Яуым-төшөм юҡ.* ■ *Быйылғы йыл ҡырыҫ килде, яҙ көндәрендә арлы-бирле яуғыланы ла, июнь урталарына тиклем яуым-төшөмдөң әҫәре лә булманы.* Ғ. Аллаяров. *Яуым-төшөм йыш булғанлыҡтан, яҙғылығын нык ташҡан Һаҡмар йылғаһы июнь айы башында ла ярҙарына төшмәгәйне әле.* Я. Хамматов.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

## СОДЕРЖАНИЕ

БАШ ҺҮҘ ............ 5
ҺҮҘЛЕКТЕҢ ТӨҘӨЛӨШӨ ............ 9
ПРЕДИСЛОВИЕ ............ 11
СТРУКТУРА СЛОВАРНЫХ СТАТЕЙ ............ 16
ШАРТЛЫ ҠЫҪҠАРТМАЛАР ............ 18
ҠУЛЛАНЫЛҒАН ӘҘӘБИӘТ ............ 19
ИСПОЛЬЗОВАННАЯ ЛИТЕРАТУРА ............ 19
БАШҠОРТ АЛФАВИТЫ ............ 22
БАШКИРСКИЙ АЛФАВИТ ............ 22
ЙӨКМӘТКЕҺЕ ............ 308
СОДЕРЖАНИЕ ............ 308

При подготовке электронного издании использовались следующие программные средства:
- Adobe Acrobat − текстовый редактор;
- Microsoft Word – текстовый редактор

*Все права защищены. Книга или любая её часть не может быть скопирована, воспроизведена в электронной или механической форме, в виде фотокопии, записи в память ЭВМ, репродукции или каким-либо иным способом, а также использована в любой информационной системе без получения разрешения от издателя. Копирование, воспроизведение и иное использование книги или её части без согласия издателя является незаконным и влечёт уголовную, административную и гражданскую ответственность.*

*Справочное издание*

**РАХИМОВА ЭЛЬВИРА ФИДАИЛОВНА**

# БАШКИРСКО-РУССКИЙ СЛОВАРЬ ПАРНЫХ СЛОВ

*Электронное издание сетевого доступа*

*За достоверность информации, изложенной в словаре, ответственность несут составители*

Подписано к использованию 03.03.2026.
Гарнитура «Times New Roman». Объем 4,48 Мб. Изд. № 62.
*Институт истории, языка и литературы УФИЦ РАН*
*450054, РБ, г. Уфа, Пр. Октября, 71.Тел.: (347) 235-60-50*
*E-mail: rihll@anrb.ru*